# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

# 7







# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ 7

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1 : 811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

## Шартлы тамғалар

– һүҙлек эше
– әҙәби-теоретик төшөнсә
– тасуири уҡығыҙ
– ятлағыҙ
– парлашып йәки төркөмдә эшләгеҙ
– иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ
– өҫтәмә уҡыу өсөн
– проект эше
– ижади эш
– дөрөҫ уҡығыҙ
‖ – тел материалына аңлатма
– өйҙә ололар ярҙамында эш
– тәржемә итегеҙ

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте:** уҡытыу рус телендә алып
Б28 барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [төҙ.-авт.: В. И. Хажин, Ә. Х. Вилданов, Ф. Ә. Аҡҡужина, М. И. Ҡарабаев, З. Р. Әминева]. — Өфө : Китап, 2017. — 296 бит.

ISBN 978-5-295-06743-3

**УДК 373.167.1 : 811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП – 080/17**

**ISBN 978-5-295-06743-3**

© Хажин В. И., Вилданов Ә. Х., Аҡҡужина Ф. Ә., Ҡарабаев М. И., Әминева З. Р., 2017
© Кәримова З. И., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# БОРОНҒОНАН АМАНАТ

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Кеше үҙенең тормошон һәр саҡ матурыраҡ, күркәмерәк, күңеллерәк итергә тырышҡан — төрлө байрамдар уйлап сығарған, кейем-һалым, өй йыһаздарын биҙәкләгән, йырҙар, бейеүҙәр ижад иткән. Уларҙы беҙ бөгөн, дөйөмләштереп, **халыҡ ижады** тип йөрөтәбеҙ.

Халыҡ ижады әҫәрҙәренең конкрет авторы юҡ. Улар, әлбиттә, ҡасандыр һүҙгә, моңға, фантазияға бай бер оҫта тарафынан ижад ителгәндәр. Әммә, быуындан быуынға күсә килә, был оҫтаның исеме онотолған, ә ул ижад итеп ҡалдырған әҫәр артабан күмәк кеше ҡатнашлығында шымартылған, камиллаштырылған һәм дөйөм халыҡтыҡы булып киткән.

Ижад ителешенә, башҡарылыу һәм йәшәү рәүешенә ҡарап, халыҡ ижадын бейеү сәнғәтенә (халыҡ бейеүҙәре), музыка сәнғәтенә (йырҙар, көйҙәр), биҙәү сәнғәтенә (йорт-йыһазды, кейем-һалымды биҙәкләү), һүҙ сәнғәтенә бүлеп йөрөтәләр.

Белеүебеҙсә, башҡорт халҡының һүҙ сәнғәте үҫешендә өс йүнәлеш айырым-асыҡ күренә: ауыҙ-тел ижады (фольклор), ауыҙ-тел әҙәбиәте (сәсәндәр ижады) һәм яҙма әҙәбиәт. Улар араһында иң боронғоһо — ауыҙ-тел ижады.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады бик бай. Унда һеҙгә бәләкәйҙән билдәле булған әкиәттәрҙән, йомаҡтарҙан тыш бик күп эпостар, легендалар, риүәйәттәр, бәйеттәр, йырҙар, таҡмаҡтар, көләмәстәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр бар. Улар **ауыҙ-тел ижадының жанрҙары** тип атала.

Ауыҙ-тел ижадында халыҡтың көндәлек тормошо, йәшәү рәүеше, азатлыҡ өсөн, ғәҙеллек өсөн көрәше, хис-тойғолары, уй-хыялдары сағыла.

1. Нимә ул халыҡ ижады? Уның ниндәй төрҙәре бар? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Халыҡ ижадының һәр төрөнә характеристика бирегеҙ.
2. Дөйөм халыҡ ижады составында ауыҙ-тел ижадының урынын билдәләгеҙ. Ауыҙ-тел ижадына хас сифаттарҙы һанап күрһәтегеҙ.
3. Ауыҙ-тел ижадының жанрҙарын әйтегеҙ. Улар тураһында әңгәмә ойоштороп ҡарағыҙ.
4. Ауыҙ-тел ижады, ғөмүмән, ни өсөн кәрәк булған? Ул әле лә бармы? Ни өсөн? Уның артабанғы яҙмышын һеҙ нисек күҙаллайһығыҙ? Фекер алышығыҙ.

## Фонетика, һүҙьяһалыш һәм морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау

**1-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһына алфавит тәртибендә тейешле хәрефтәрҙе яҙығыҙ.

1. Ж, … Р.
2. Т, … Э.

**2-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр бер-береһенән нисек айырыла?

1. Һылтай — һелтәй.
2. Булманың — бүлмәнең.
3. Тураны — түрәне.

Башҡорт телендә һуҙынҡыларҙы ҡалынға һәм нәҙеккә айыралар. Ни өсөн? Яуапты дауам итегеҙ: *Сөнки һүҙҙә йә …*

**3-сө күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең һуҙынҡыларын ҡалын парҙары менән алмаштырығыҙ.

Кейек, йәй, үкһеҙ, йәнгә, әкрен, әсе, кәрәк.

Бөтә осраҡта ла яңы һүҙ яһалдымы? Тартынҡы өндәрҙә үҙгәреш булдымы?

# ӘКИӘТТӘР

**Әкиәт** — халыҡ ижадының бик боронғо һәм киң таралған жанры. Халыҡ араһында уны «ҡарһүҙ» тип тә йөрөтәләр. Ул ҡарттарҙан ҡалған «аҡыллы һүҙ» тигәнде аңлата, йәғни ҡара замандан, бик борондан, һөйләнеп килгән һүҙ.

Әкиәт, ғәҙәттә, «борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай» тип башлана һәм «әле лә йәшәп яталар, ти» тип тамамлана. Ошондай традицияла башланыу һәм тамамланыу әкиәткә хас алым: ул тыңлаусының иғтибарын тиҙ генә йәлеп итеү өсөн шулай бирелә.

Йөкмәткеһенә ҡарап, башҡорт халыҡ әкиәттәре дүрт төркөмгә бүленә: хайуандар тураһындағы, батырҙар тураһындағы, тылсымлы һәм тормош-көнкүреш әкиәттәре.

## Хайуандар тураһындағы әкиәттәр

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр иң боронғоларҙан һанала. Геройҙары – һәр төрлө йәнлек, ҡош-ҡорт. Әммә улар кешеләргә хас сифаттарға эйә, кешеләр тормошо менән йәшәй.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә айыу, бүре, ҡуян, бөркөт, терпе, әтәс, эт образдары йыш осрай. Әгәр төлкөнөң хәйләкәрлеге, зирәклеге, ә айыуҙың тупаҫлығы, аңралығы күҙгә ташланһа, бүренең яуызлығы, ҡомһоҙлоғо алға баҫтырыла.

Әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, айыу менән төлкө йә юмористик, йә сатирик планда һүрәтләнә, ә бүре образы тик сатирик планда ғына бирелә.

Хайуан образдарының кинәйәле мәғәнәһе лә бар. Уларҙың йөҙөндә билдәле социаль типтарҙың характерлы һыҙаттары сағыла. Айыу, бүре, арыҫлан, төлкө көсһөҙҙәрҙе йәберләү, һәләк итеү иҫәбенә йәшәйҙәр. Ә ҡуян, сысҡан, кәҙә, ҡаҙ, тауыҡ, әтәс әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, көсһөҙ итеп бирелә, улар йыш ҡына көслөләрҙең табышы булалар. Мәҫәлән, ҡуян бик тырыш, эшсән, ләкин ҡурҡаҡ һәм хәйләһеҙ. Әммә халыҡ ҡуян образында үҙенең ышанысы менән өмөттәрен дә сағылдырған. «Ҡуян менән арыҫлан» әкиәтендә, мәҫәлән, йәнлектәргә көн күрһәтмәҫ арыҫланды башҡа бер кем дә түгел, ә ҡуян юҡ итә.

## ЙӘТИМ ТӨЛКӨ

Бер заман, яҙ көнө, Айыу, Бүре, Эт, Ҡуян бергә осрашҡандар. Ҡыш көнө һалҡында аҙыҡ табыуы ҡыйын булды, тип зарланышҡандар, ти, былар. Шунан Айыу:

— Бергә торайыҡ, еңелерәк булыр, — тигән.

Бөтәһе лә шуға риза булып, урман эсендәге бер аҡланда бәләкәй генә өй һалғандар ҙа бергә тора башлағандар.

Шулай йәшәп ятҡанда, берҙән-бер көндә Айыу:

— Ҡышҡа әҙерләнергә ваҡыт, дуҫтар, — тигән. — Беҙгә һыйыр һатып алырға кәрәк. Эт уны көтөп ашатыр. Һөтөн һауып, ҡаймағын бешһәк, ҡышҡылыҡҡа берәр батман майыбыҙ булыр.

Бүре, Эт, Ҡуян Айыуҙың был кәңәшен хуп күргәндәр. Шул көндә үк баҙарға барып, үҙҙәре тотоп ашаған йәнлектәрҙең тиреләрен һатҡандар ҙа шунан килгән аҡсаға һыйыр һатып алғандар.

Эт көн һайын һыйырҙы аҡланға сығарып көткән. Бүре кис менән һөтөн һауып ала торған булған. Ҡуян һыйырға яҡшыраҡ үләнле ерҙе күрһәтеп йөрөгән. Айыу бөтә хужалыҡ эштәрен башҡарған.

Йәй шулай эш менән үткән. Көҙгә инде былар бер батман һары майлы булғандар.

— Был майҙы өй башына, ҡыйыҡ аҫтына ҡуйырға кәрәк, — тигән Айыу. — Хәҙергә майға берәү ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс, аҙлап-аҙлап ҡына алырбыҙ ҙа майға картуф ҡурырбыҙ.

Бер көндө кис менән былар сәй эсеп ултыралар икән, кемдер берәү тәҙрә сирткән. Ҡуянға тороп ишек асырға ҡушҡандар.

Өйгә ҡулына ҡомған тотҡан Төлкө килеп ингән дә эйелеп-бөгөлөп:

— Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтарым! Хәйерле кис! — тигән.

Хужалар Төлкөнө сәй янына саҡырғандар. Теге ултырған.

Бер-ике туҫтаҡ сәйҙе эсеп алғас, Төлкө ашыҡмай, бик әҙәпле ҡыланып ҡына, һүҙ башлаған:

— Мин яҡты донъяла япа-яңғыҙ ҡалған үкһеҙ йәтиммен. Мине лә үҙегеҙҙең араға алһағыҙсы! — тигән.

— Ярар, һине үҙебеҙҙең араға алыу-алмау тураһында бөгөн һөйләшербеҙ, — тигән Айыу. — Иртәгә яуабын алырға килерһең.

Айыу, Бүре, Эт, Ҡуян:

— Был Төлкө әҙәпле, баҫалҡы ғына күренә. Үҙебеҙҙең янға алайыҡ әйҙә, — тигән уйға килгәндәр.

Шулай итеп, Төлкө улар менән бергә йәшәй башлаған. Ул үҙен бик әҙәпле тотҡан, бөтәһенең дә һүҙен тыңлар, ни ҡушһалар, шуны эшләр булған. Айыуға, Бүрегә, Эткә генә түгел, хатта Ҡуянға ла ярарға тырышҡан.

Күп тә үтмәй, Төлкө ҡыйыҡ аҫтында бер батман май йәшерелгәнде белеп ҡалған. Төлкө, май тиһәң, үлеп бара бит инде. Ул, майҙы үҙе генә ашар өсөн, хәйлә эҙләй башлаған.

Күп баш вата торғас, ул хәйләһен дә тапҡан. (Шуның өсөн дә хәйләкәр төлкө тиҙәр уны!)

Кистәрҙән бер кисте Төлкө һылтау итеп, ҡапҡа ныҡ бикләнгәнме икән тип, тикшереп килергә булған. Шул ерҙә ул урамға сығып тәҙрә сирткән дә ят тауыш менән:

— Йәтим Төлкө өйҙәме? — тип һораған.

— Өйҙә, өйҙә, хәҙер тыштан инер, — тип яуап биргәндәр уға.

— Ингәс тә әйтегеҙ әле уға, хәҙер үк беҙгә яңы тыуған бурһыҡ балаһына исем ҡушырға барһын!

— Ярар, әйтербеҙ, — тип яуап ҡайтарғандар өйҙән.

Төлкө, белмәмешкә һалышып, өйгә ингән.

— Төлкөкәй, яңы ғына берәү килеп һине бурһыҡ балаһына исем ҡушырға саҡырҙы, — тигән Айыу.

— Улай булғас, барырға кәрәк, — тигән Төлкө.

Йылдам ғына йыйынған да ул өйҙән сыҡҡан. Өйҙө бер түңәрәтеп әйләнгәндән һуң, һаҡлыҡ менән генә өй башына һикереп менгән дә батман тулы майҙы ашай башлаған. Туйғансы ашаған. Шунда ятып бер аҙ ял иткән дә өйгә кире ингән.

— Йә, нимә менән һыйланылар үҙеңде? — тип һорағандар унан.

— Ҡурылған ҡаҙ, тауыҡ, һары май менән, — тип яуап ҡайтарған да Төлкө ирендәрен ялап ҡуйған.

— Ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған Эт.

— Башбала, — тип яуап ҡайтарған Төлкө.

Икенсе көндө Төлкө:

— Миңә тағы ла исем ҡушырға барырға кәрәк, — тигән, ә үҙе, тышҡа сығып, өй башына менгән дә майҙы батмандың яртыһына төшкәнсе ашаған.

Ул өйгә ингәс, Ҡуян:

— Яңы тыуған балаға ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған.

— Уртансы, — тип яуап биргән Төлкө.

Өсөнсө көндө лә Төлкө, хәйләһен табып, өй башына менгән. Был юлы инде майҙы бөтөргәнсе ашаған. Батманды таҙартҡансы ялаған да өйгә ингән.

— Йә, быныһына ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған, ти, унан Ҡуян.

— Кинйә, — тип яуап ҡайтарған Төлкө.

Ҡыш килеп еткән. Көндәрҙән бер көндө Айыу, иптәштәренә ҡарап:

— Йә, дуҫҡайҙарым! Бер аҙ май алып инеп, картуф ҡыҙҙырырға кәрәк, — тигән.

Иптәштәре, быға шатланып:

— Ҡана, ҡыҙҙырайыҡ, — тигәндәр.

— Бар, Төлкө, һин бер аҙ май алып ин, — тигән Айыу.

Бөтәһе лә тышҡа сыҡҡандар. Төлкө стена буйлап өй башына менә башлаған да кире ҡолап төшкән. Менә алмауына һылтау табырға тырышып:

— Бик бейек икән шул, мин унда менә алмайым, — тип зарланған.

Эт Төлкөгә ярҙам итергә булған. Елкәһенә баҫтырған да өй башына мендергән. Шул ваҡытта түбәндә ҡалыусылар Төлкөнөң: «Бында бер төрлө лә май юҡ. Буш батман ғына», — тип сыйылдап ҡысҡырғанын ишеткәндәр.

Тәүҙә уға берәү ҙә ышанмаған. Төлкө батманды түбәнгә тәгәрәтеп төшөргәс, ҡараһалар — батман, ысынлап та, буп-буш булып сыҡҡан.

— Был майҙы ҡайһы оятһыҙы ашаны икән?! — тип үкергән Айыу.

— Хәҙер үк ҡараҡты табырға!

Ҡараҡты нисек табырға, тип оҙаҡ ҡына уйланалар улар. Күп уйлай торғас, Айыу былай тигән:

— Ҡана, ҙур итеп ут яғайыҡ та, үҙебеҙ шуны түңәрәкләп ултырайыҡ. Майҙы кем ашаған булһа, ут ҡыҙыуынан уның эсендәге майы иреп тышҡа сығыр.

Шулай итеп, ут яғып ебәргәндәр былар.

Ут янында ултыра торғас, улар, йылыныуҙан ойоп, йоҡоға киткәндәр. Ҡыштың тәүге һалҡын көндәре булғанлыҡтан, Айыу бөтәһенән дә ҡатыраҡ йоҡлаған.

Тик бер Төлкө генә керпек тә ҡаҡмаған. Шул ерҙә ул үҙенең бөтә тәне буйлап май һарҡып сыҡҡанын күргән. Күреп ҡалһалар, миңә яҡшылыҡ булмаҫ, тип ҡурҡҡан. Оҙаҡ уйлап тормаҫтан, ул үҙенең бөтә ғәйебен Айыуға япһарырға булған: бөтә майҙы үҙенең өҫтөнән һыпырып алған да Айыуға һылаған.

Йоҡоларынан уянып китһәләр, барыһы ла ҡоп-ҡоро, ә Айыуҙың бөтә тәне майға буялған.

— Майҙы бына кем ашаған икән! — тип ҡысҡырып ебәргән Төлкө.

— Бында ниндәй ҙә булһа хәйлә бар! — тигән Айыу. — Утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғырға ла ҡайтанан һынап ҡарарға кәрәк.

Бөтәһе лә быға риза булғандар, тик бер Төлкө генә, ут яғырға кәрәкмәй, былай ҙа Айыу ағайға бик эҫе бит, тигән булып ҡаршы килгән.

Төлкөнөң һүҙен тыңламайынса, тағы ла ут яҡҡандар ҙа бөтәһе лә түңәрәкләп ултырғандар. Айыу үҙенең ҡышҡы ғәҙәте буйынса тағы ла хырылдап йоҡоға киткән. Бүре, Эт, Ҡуян юрамал йоҡлағанға һалышҡандар. Төлкөнөң тағы ла майы һарҡып сыға башлаған.

Төлкө, башҡа йәнлектәрҙең йоҡлағанын күргәс, тағы үҙенең өҫтөндәге майын һыпырып алып, Айыуға һыларға тотонмаһынмы! Бүре, Ҡуян, Эт быны күреп ҡалғандар ҙа, ҡысҡырышып, Төлкөгә ташланғандар.

— Бына ҡайҙа икән ул ҡараҡ! Етмәһә, йыуаш ҡына бер йәтим булып ҡыланды!..

Был шау-шыуға Айыу ҙа уянған. Уға тегеләр күргәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәндәр.

— Мин майҙы ашағаным юҡ! — тип аҡланырға тотонған Төлкө.

Шул ерҙә бөтәһе лә Төлкөнөң яғаһынан алып бәйләгәндәр ҙә, утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғып, уны ут өҫтөндә тотҡандар. Ә май ут өҫтөнә аға ла аға икән.

Шунан һуң былар Төлкөнө кәрәген биргәнсе туҡмағандар ҙа былай тигәндәр:

— Хәҙер үк үксәңде күтәр бынан! Эҙең дә булмаһын! Беҙҙең арала һиңә урын юҡ!

Төлкө ҡомғанын алған да башы һуҡҡан яҡҡа олаҡҡан.

1. Айыу, Бүре, Эт һәм Ҡуян ни өсөн бергә йәшәргә хәл итә?
2. Айыу ниндәй тәҡдим индерә?
3. Бергәләп эшләү ниндәй һөҙөмтә бирә?
4. Ни сәбәптән хайуандар йәтим Төлкөнө үҙҙәре менән йәшәргә ала?
5. Төлкө ни өсөн көн һайын ҡунаҡҡа йөрөй? Бурһыҡ балаларына ниндәй исемдәр ҡуша?
6. Хайуандар дөрөҫлөктө табыу өсөн нимә эшләйҙәр?
7. Төлкө үҙен аҡлау өсөн ниндәй хәйлә ҡора? Уның ҡылған эштәренә ҡарап ниндәй һыҙаттарын билдәләп була?
8. Төлкөнө кем һәм нисек фашлай?
9. Был әкиәттә кешеләргә хас ниндәй сифаттар сағыла һәм фаш ителә?
10. Бөгөнгө көндә Төлкөгә оҡшаған кешеләр осраймы?
11. Хайуандар тураһында ниндәй әкиәттәр беләһегеҙ? Уларҙы «Башҡорт халыҡ ижады» китабынан табып уҡығыҙ.
12. Батман нимәнән эшләнә? Батманды халыҡ ҡайһы осорҙа ҡулланған? Хәҙерге заманда уны ниндәй һауыт алмаштырған? Батман тураһында мәғлүмәт табып уҡығыҙ һәм һүрәтен төшөрөгөҙ.

## Аллегория тураһында төшөнсә

**Аллегория** (грекса *allegoria* — кинәйә менән ситләтеп әйтеү) – әйберҙәрҙе йәки хайуандарҙы һүрәтләү ярҙамында кешеләрҙе, уларҙың холоҡ-ҡылыҡтарын, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен кинәйәле һынландырыу сараһы. Мәҫәлән, бүре — яуызлыҡты, айыу — аңралыҡты, төлкө — хәйләкәрлекте, һайыҫҡан мутлыҡты кинәйәле сағылдырыуҙары менән халыҡ аңында борондан уҡ аллегорик образдар булып ҡабул ителә. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

**4-се күнегеү.** Башҡорт һәм рус телдәрендә исемдең ниндәй оҡшашлығы һәм айырмаһы бар? Яуап бирер өсөн, миҫалдарҙы тәржемә итеп, сағыштырып ҡарағыҙ.

I. 1. Атай, эшсе, артист — *кем?*
2. Һыйыр, кәзә, себен — *нимә?*
3. Өҫтәл, ултырғыс, урман — *нимә?*

II. 1. Сана, ҡайсы, ҡапҡа, күҙлек, саңғы.
2. Пальтоны, киноға, метронан.

**5-се күнегеү.** Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын иҫкә төшөрөгөҙ һәм дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

**6-сы күнегеү.** Йылҡы малының төҫтәрен белдереүсе сифаттар менән танышығыҙ.

Аҡбуҙ — күкһел төҫ.
Буҙ — көлһыу күгелйем төҫ.
Бурыл — буҙ менән ҡара ҡатнаш төҫ.
Ерән, ерәнсәй — ҡыҙыл менән һары ҡатнаш; ҡыҙғылт һары төҫ.
Кир — һарғылт туры.
Көрән — ҡыҙғылт ҡара төҫ.
Күк — аҡ төҫ.
Бүртә — аҡ менән туры ҡатнаш.
Ҡола — кәүҙәһе һары, ҡойроғо, ялы ҡара.
Саптар — кәүҙәһе ерән, ҡойроғо, ялы сал.
Туры — кәүҙәһе ҡараһыу ҡыҙыл, ҡойроғо, ялы ҡара.

Ҡасандыр башҡорттарҙың дала тулы йылҡы малы булған саҡтарҙа, ат төҫтәрен белдереүсе йөҙҙән артыҡ һүҙ булған. Бөгөн иһә шуларҙың дүрт тиҫтәнән артығыраҡы ғына билдәле. Аңлатмаларға ҡарап, йылҡы малының төҫтәрен буяуҙар менән буяп ҡарағыҙ.

## Тылсымлы әкиәттәр

Тылсымлы әкиәттәрҙең нигеҙендә фантастика ята. Уларҙа аждаһа, дейеү, мәскәй кеүек төрлө мифик заттар, көҙгө, тараҡ, ашъяулыҡ, бүрек, итек, таяҡ кеүек тылсымлы әйберҙәр, осҡос балаҫтар, кеше булып һөйләшер хайуандар һүрәтләнә.

Бындай әкиәттәрҙә изгелек менән яуызлыҡ көрәше күрһәтелә: яҡшылыҡ еңә, ә ҡара көстәр фашлана. Әкиәт геройы ҡаршылыҡтарҙы үҙенең физик көсө менән дә, тылсым йәки хәйлә ярҙамында ла еңеп сыға. Әйберҙәр кешегә ярҙам итә. Шул рәүешле халыҡ үҙенең хыялында ғәҙеллек һәм тигеҙлек хөкөм һөргән матур донъя төҙөй.

## АЛТЫН АЛМА

Борон бер батша йәшәгән. Уның өс улы булған. Был батшаның баҡсаһынан көн һайын алтын алмалары юғала икән. Бер көндө батша уландарын саҡырып алған да:

— Ҡараҡты белергә кәрәк, сиратлап ҡарауылға йөрөгөҙ, — тигән.

Беренсе төн оло улы киткән, белә алмай ҡайтҡан. Икенсе төндө уртансы улы ла бер нәмә лә белә алмаған. Өсөнсө төндө кесе улы киткән. Быныһы төн буйына керпек тә ҡаҡмаған, ыҙан буйында һағалап ултырған. Таң алдынан бер алтын ҡош, осоп килеп, бер алманы тибеп алып киткән. Егет ҡайтҡан да:

— Атай, мин белдем: алтын алманы бер алтын ҡош урлай икән. Мин шул ҡошто эҙләп киттем, — тигән.

Атаһы ҡаршы килмәгән. Егет атын менеп сығып киткән. Бара торғас, ул бер юл айырсаһына барып сыҡҡан. Унда: «Уңға киткән кеше үҙе үлә, һулға киткәндең аты үлә», — тип яҙылған була.

Егет һулға киткән. Бара торғас, аты шып туҡтаған. Шул арала бер бүре килеп сыҡҡан да:

— Бағаналағы яҙыуҙы күрҙеңме? — тигән.

— Күрҙем. «Уңға киткән кеше үҙе үлә, һулға киткәндең аты үлә» тип яҙылған, — тигән егет.

— Шулай булғас, төш атыңдан, — тигән бүре. Егеттең төшөүе булған, бүре атты ашап та ҡуйған. Егет йәйәү киткән. Бик күп ер барғас, бының алдына баяғы бүре килеп сыҡҡан.

— Ҡайҙа бараһың?

— Алтын алманы алтын ҡош урлаған. Шуны эҙләп китеп барам.

— Әйҙә, мин алып барам.

Егет бүрегә атланып ала. Китәләр. Бер батшалыҡҡа барып етәләр. Бүре егеткә:

— Ҡойма аша төш тә алтын һарайға ин. Унда алтын ҡош ситлектә ултырыр. Ситлеккә теймә, алтын ҡошто ал да кире сыҡ, — тигән.

Егет һарайға ингән, алтын ҡошто күргән. Алтын ҡоштоң ситлеге лә алтындан булған. Ҡыҙығып, егеттең ситлеккә ынтылыуы булған, ҡыңғырау шылтыраған. Һаҡсылар уянып егетте тотоп алғандар ҙа батшаға алып барғандар. Батша уға:

— Алтынғойроҡ-Көмөшьял атты табып алып килһәң, ҡошто ла, ситлекте лә биреп ҡайтарам, алып килмәһәң, башыңды ҡырҡам, — тигән.

Алтынғойроҡ-Көмөшьял икенсе бер батшалыҡта икән. Егет шунда киткән. Бара бирһә, әлеге бүре килеп сыҡҡан. Егет бүрегә барыһын да һөйләп биргән.

— Ҡайғырма, — тигән бүре, — әйҙә, киттек.

Батша һарайына барып еткәндәр. Бүре:

— Нуҡтаһын һалдырып, атты алып сыҡ та менеп сап, — тигән.

Егет ингән. Аттың нуҡтаһы шул тиклем матур, йымылдап, күҙҙең яуын алып тора, ти. Ҡыҙығып, егет атты нуҡтаһы менән алып сығып барған саҡта, ҡыңғырау шылтырап китеп, һаҡсылар егетте тотоп алғандар, батшаға алып киткәндәр. Батша уға:

— Бер батшалыҡта һылыу ҡыҙ бар, шуны алып килһәң, Алтынғойроҡ-Көмөшьялды алтын нуҡтаһы менән бирәм, алып килмәһәң, башыңды киҫәм, — тигән.

Егет, һылыу ҡыҙҙы эҙләп, юлға сыҡҡан. Эй бара, эй бара, ти. Китеп ултырһа, алдына әлеге бүре килеп сыға ла, үҙенә атландырып, егетте алып китә. Күп тә үтмәй, былар барып та етәләр.

— Һин тороп тор, ҡыҙҙы мин барып урлайым, йә тағы ла эште боҙорһоң, — тип бүре китеп барған.

Батша ҡыҙы баҡсала йөрөй икән. Бүре бик һылыу бер атҡа әйләнгән дә ҡыҙ тирәләй уйнаҡлап йөрөй башлаған. Ҡыҙ:

— Бынау атты менеп йөрөгөм килә, — ти икән. Ҡыҙҙың атҡа менеп ултырыуы булған, ат, ҡабат бүрегә әйләнеп, ҡыҙҙы алып та ҡасҡан. Ҡыҙ менән егет бер-береһенә күҙ һирпеп кенә алғандар икән, яратышҡандар ҙа ҡуйғандар. Хәҙер ни эшләргә? Егеттең ҡыҙҙы батшаға биргеһе килмәй. Ҡыҙ менән егет ҡайғырыша башлағандар. Туҡта әле, бүре ни әйтер, тип, бүре менән һөйләшергә булған егет.

— Ҡайғырма, барып еткәс, күҙ күрер, — тигән бүре.

Батшаға килеп еткәс, бүре ҡыҙҙың кейемдәрен кейеп алған.

Бүрене батшаға биреп, Алтынғойроҡ-Көмөшьялды алып, егет менән ҡыҙ юлын дауам иткән. Алтын ҡош батшалығына етер саҡта, быларҙы бүре ҡыуып еткән дә:

— Мин ат һынына инәйем дә, һин мине батшаға алып барып бир. Шунан һинең атың да, ҡатының да, алтын ҡошоң да булыр, — тигән. Егет бүре әйткәнсә эшләгән, батшаға атты биреп, алтын ҡошто ситлеге менән бергә алып ҡайтып киткән. Юл буйында бүре ҡыуып еткән:

— Хуш бул, атыңдың хаҡын ҡайтарҙым, — тип үҙ юлына киткән.

Килә торғас, егет менән ҡыҙ бер аҡланға ял итергә туҡтағандар. Арып-талып килгән кешеләр ни, йоҡлап киткәндәр. Шул ваҡыт егеттең ағалары ҡустыларын эҙләргә сыҡҡан ерҙәренән ҡайтып бара икән. Кинйәне күреп көнсөллөктәре килеп киткән. Ҡустыларының үҙәсен ҡылыс менән сабалар ҙа, ҡыҙҙы, атты, ҡошто алып, ҡайтып китәләр.

Бер-ике көн үткәс, бүре, мәйет еҫе тойоп, егет янына килеп сыға. Шунда уҡ бер ҡарғаны тотоп алып:

— Тиҙ генә тере һыу менән үле һыу алып кил, — ти. Ҡарға ике көршәк менән һыу алырға китә. Ул ике көндән һуң әйләнеп ҡайта. Бүре егеттең үҙәсен тәүҙә үле һыу менән йыуа, шунан тере һыу ҡойоп, башын үҙәсенә йәбештерә. Егет:

— Уф, ҡалай оҙаҡ йоҡлағанмын, — тип килеп тора. Бүре уға булған хәлде һөйләп бирә лә өйҙәренә тиклем алып барып ҡуя.

Егет ҡайтып инһә, атаһы ҡартайып, бәлтерәп бөткән, ти. Ишектән килеп инеү менән, ҡыҙ егетте таный. Кинйә улы атаһына башынан үткәндәрҙе энәһенән ебенәсә һөйләп бирә. Ағалары, ғәфү үтенеп, ҡустыларының аяғына йығылалар.

Егет ҡыҙҙы кәләш итеп ала, хәҙер гөж килеп йәшәп яталар, ти.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе текстан табығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙы ҡулланып, бер-берегеҙ менән диалог ойоштороғоҙ.
2. *Күҙ һирпеп алыу, эште боҙоу, хаҡын ҡайтарыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. *Китеп ултыра, китеп бара, килеп ултыра, килә ята* һүҙбәйләнештәрендә *ултыра, бара, ята* һүҙҙәре ниндәй мәғәнәгә эйә? Миҫалдар килтерегеҙ.
4. Йөрөүҙең ниндәй төрҙәре була? Һанап сығығыҙ: *йәйәү йөрөү, һыбай йөрөү, шыуышып йөрөү, имгәкләп йөрөү, арбаға (санаға) ултырып йөрөү, кәмәлә йөрөү, самолётта йөрөү* һ. б.

Был һүҙбәйләнештәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ, улар араһындағы айырманы асыҡлап ҡарағыҙ.

5. Әкиәттең йөкмәткеһен әкиәт стилендә тасуири һөйләү күнекмәләре үткәрегеҙ. Һеҙҙән ысын әкиәтсе сыға аламы?
6. Әкиәттә тылсымлы әкиәттәргә хас үҙенсәлектәрҙе табығыҙ.
7. Рус халыҡ әкиәттәренең береһендә әкиәт геройы бүрегә атланып йөрөй. Ниндәй әкиәт ул? Уның «Алтын алма» әкиәте менән оҡшашлығын һеҙ нимә менән аңлатаһығыҙ? Фекер алышығыҙ.

**7-се күнегеү.** «Сифат» темаһы буйынса һорауҙарға яуап бирегеҙ һәм дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

1. Сифат менән имя прилагательное араһында оҡшашлыҡ бармы?

2. Ниндәй айырмалар бар?

3. Сифаттың исемдән башҡа ҡулланылыуына ике миҫал яҙығыҙ.

**8-се күнегеү.** Һандарҙың ҡулланылышындағы хаталарҙы төҙәтегеҙ.

Егерме биш уҡыусылар, 2016-сы йыл, бишешәр китап, футбол командаһында уйынсылар ун берәү.

**9-сы күнегеү.** Миҫалдарҙы сағыштырып, рус һәм башҡорт телдәрендәге һандар араһындағы айырмаларҙы табығыҙ.

1. 243 + 372 = 615 — **К двумстам сорока трём** прибавить **триста семьдесят два** будет **шестьсот пятнадцать. Ике йөҙ ҡырҡ өскә өс йөҙ етмеш икене** ҡушһаң, **алты йөҙ ун биш** була.

2. Подходите **к одиннадцатому** вагону. **Ун беренсе** вагон янына килегеҙ.

3. **Седьмой** класс, **седьмая** парта, **седьмое** небо. **Етенсе** класс, **етенсе** парта, күктең **етенсе** ҡаты.

## Батырҙар тураһындағы әкиәттәр

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә, тылсымлы әкиәттәрҙән айырмалы рәүештә, төп герой үҙ маҡсатына ғәҙәттән тыш физик көсө, шәхси батырлығы ярҙамында өлгәшә. Ул, ай

үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бик тиҙ иҫ киткес көслө, ғәйрәтле батырға әйләнә. Төп герой, ғәҙәттә, ябай халыҡ араһынан сыға, төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, яуыз батшаларҙы ҡыйратып, батша булып китә. Ғәҙелһеҙгә хөкөм ителгән тотҡондарҙы ҡотҡара, ярлыларға байлыҡ өләшә, халыҡҡа иркен йәшәү мөмкинлеген бирә.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә халыҡтың үҙен яҡлаусы ғәҙел батша тураһындағы хыялы сағыла.

## АЛП БАТЫР

Борон-борон заманда Ағиҙел буйында бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бабай һунарға йөрөгән, әбей йөн иләп, киндер һуҡҡан. Шулай бергә ғүмер иткәндәр, оло йәшкә еткәндәр. Әйләнеп ҡараһалар: ғүмер үткән, бер балалары ла булмаған. Үҙҙәре үлгәс, иҫкә төшөрөрлөк кеше лә юҡ.

Шунан бабай бик ҡайғырған да, уҡ-һаҙағын алып, балтаһын билгә тағып, сығып киткән. Эй киткән был, эй киткән, бер тау битләсенә барып еткән. Шунда ял итергә ултырған. Ултыра торғас, был йоҡомһорап киткән. Бабай шул ерҙә бер төш күргән. Төшөндә уға ошо тауҙың хужаһы килеп сыҡҡан.

— Эй, бабай, — тигән был, — ни эшләп бик бойоғоп киттең?

Ҡарт яуап биргән:

— Донъяла нисәмә йыл йәшәнем, бер улым да булманы. Үлеп китһәм, атым да, затым да юҡҡа сыға. Шуның өсөн ҡайғырам, — тигән.

Теге тау хужаһы әйткән:

— Бер йән үлмәй, бер йән тыумай. Әгәр донъялыҡта ул алһаң, үҙең донъянан китергә тейеш булаһың.

Ҡарт риза булған. Шунан теге тау хужаһы таш артына инеп юғалған. Бабай ултырып уйға ҡалған. Шунан һуң күп тә үтмәй, бабай башын һөйәп ултырған таш ҡыбырлай башлаған. Бабай уянып киткән дә, билендәге балтаһын алып, ташҡа һуҡҡан. Таш ярылып киткән. Уның эсенән, бәһлеүән бер егет килеп сыҡҡан.

Бабай аптырап ҡалған. Егет, йылмая биреп, ҡарт янына килгән дә әйткән:

— Бына мин һиңә ул булып килдем, — тигән.

— Әйҙүк, улым, — тигән ҡарт, теге егетте ҡосаҡлап алған. — Мин һине ғүмерем буйы көткәйнем.

Егет бик килбәтле, үҙе бик мөһабәт, ҙур кәүҙәле икән. Бармаҡтары беләктәй, ти, уның. Беләктәре бүрәнәләй, аяҡтары кәмәләй, яурыны яландай киң, кәүҙәһе имәндәй ныҡ, ти.

— Мә, улым, әләйһәң, минең ҡоралдарымды ал, — тип әйткән, ти, шунда бабай. Малайына янында ятҡан уҡ-һаҙағын, билендәге балтаһын һалып биргән, ти.

Егет әйткән:

— Атай, был ҡоралдарың үҙеңдә торһон. Миңә икенсене — ҙурыраҡты яһап алайыҡ, — тигән.

Ҡарт әйткән:

— Юҡ, улым, был уҡ-һаҙаҡ менән балта миңә олатайыңдан ҡалған. Уларҙы мин һиңә тапшырам, — тигән. — Былар хәҙер һинеке булһын, мә ал, уғың менән ҡош ауларһың, балтаң менән урман ҡырҡырһың, — тигән.

Егет риза булып алған да ҡарттың һаҙағынан бер уҡ алып, йәйәһен киреп, керешен тарта башлаған. Әҙ генә тартайым тиһә, йәйәһе шартлап һынған да сыҡҡан. Йәйәһе шартлап һынған тауыштҡа тау һелкенеп киткән, таш емерелеп төшкән, бабай ҙа йығылып киткән.

— Алп!.. — тип ниҙер әйтмәк булған да бабай, шунда йән биргән.

Егет тәүҙә аптырап киткән. Шунан ни, ни эшләһен инде, атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә, балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, сәс бәкеһе кеүек кенә итеп усына һалып, урманға инеп киткән. Унда бер йыуан оҙон имән ағасы ҡырҡып, үҙенә йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышынан кереш яһап тарттырған. Имән ҡырҡып, уҡ яһаған, ул уҡтың башағына осло таш ҡуйған. Шунан донъя гиҙергә сығып киткән.

Уралтауҙың аръяғына сығып, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Тегенең аяғы төшкән урындар аҡлан-аҡлан тигеҙ ялан булып ҡалғандар. Егет шунда хәл йыйырға ултырған. Шул саҡ ҡаршы тауҙан быны бер ҡыҙ күреп ҡалған. Ул хан ҡыҙы икән. Шунда ҙур тирмә ҡороп ята икән. Тирмәһенең ҙурлығы ике өйөр йылҡы һыйырлыҡ булған. Ҡыҙ үҙе лә мөһабәт батыр булған. Егетте күргән дә үҙенә саҡырып алған.

Ҡыҙ әйткән:

— Исемең нисек, егет? — тигән.

Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән.

— Нимә һуң ул исем? — тип һораған.

Ҡыҙ йылмайып яуап биргән:

— Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң? — тигән.

Егет әйткән:

— Атайым үлер алдынан ғына миңә «Алп» тип өндәшкәйне, — тигән.

Ҡыҙ әйткән:

— Улай булғас, һин Алп батыр булаһың инде, — тигән. — Әгәр ҙә көрәштә мине еңә алһаң, мин һиңә ҡатынлыҡҡа барам, — тигән.

Егет, риза булып, көрәш тотҡан. Былар ете көн, ете төн көрәшкәндәр. Шунан килеп, Алп батыр ҡыҙҙы еңгән.

Алп батыр әйткән:

— Йә, һылыу ҡыҙ, үтә вәғәҙәңде, — тигән.

Ҡыҙ әйткән:

— Минең күңелем күптән һиндә, — тигән. — Мин һинеке, һин минеке, көс һынаштыҡ — хәҙер бергә булайыҡ, — тигән.

Егет әйткән:

— Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт, һылыу ҡыҙ, — тигән.

Ҡыҙ яуап биргән:

— Минең исемем Барһын булыр, — тигән.

Егет әйткән:

— Барһын һылыу, Барһын һылыу, йөрәгемде алһын һылыу, — тигән. Килеп ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған.

Шунда былар ҡауышҡандар, туй үткәргәндәр, бергә тора башлағандар.

Уларҙың ете улы булған. Ошо ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти. Ошо ете ырыу Урал буйын биләп йәшәгән. Алп батыр аяҡ баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.

1. Әкиәттең йөкмәткеһен әкиәт стилендә тасуири һөйләү күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. *Донъянан китеү, йән биреү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен бер һүҙ менән әйтегеҙ. Уның ошо уҡ мәғәнәне биреүсе тағы ниндәй синонимдары бар?

3. *Көс һынашыу* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен биргән башҡа һүҙбәйләнештәр эҙләгеҙ.
4. *Атым да, затым да юғала,* тип ҡайғыра бабай. Ул ниндәй ат тураһында һүҙ алып бара? Уның бит егеп, менеп йөрөгән аты булмаған. Ә нимә ул зат?
5. Алп батырға характеристика бирегеҙ.
6. Текста батырҙар тураһындағы әкиәттәргә хас үҙенсәлектәрҙе табығыҙ.
7. Һеҙ белгән әкиәттәр араһында батырҙар тураһындағылары бармы?

**10-сы күнегеү.** Һорау алмаштарынан, өлгөгә ҡарап, юҡлыҡ һәм билдәһеҙлек алмаштарын яһағыҙ.

| Һорау алмаштары | Юҡлыҡ алмаштары | Билдәһеҙлек алмаштары |
|---|---|---|
| *Кем?* | *бер кем дә, һис кем дә* | *кемдер, әллә кем* |
| *Нимә?* | | |
| *Ниндәй?* | | |
| *Ҡайҙа?* | | |
| *Ҡасан?* | | |
| *Нисек?* | | |

**11-се күнегеү.** Уҡығыҙ.

I. А. Һин мәктәпкә беҙҙең менән бараһыңмы?
Б. Мин мәктәпкә һеҙҙең менән барам.
А. Кисәге китабыңды алып килергә онотма әле.
Б. Кисәге китабымды алып килергә онотмам.

Кешеләр үҙ-ара, моғайын, үрҙәгесә һөйләшмәйҙәрҙер. Нисек үҙгәртер инегеҙ? Һөйләшеүҙе дауам итегеҙ.

II. А. ...
Б. ...

*Ҡапҡа, ҡапҡас, ҡабыҡ* һүҙҙәренең ниндәй уртаҡлығы бар? Ҡарайыҡ әле. *Ҡапҡа* кешенең йорт алдын *ҡаплай, ҡапҡас* берәй һауытты *ҡаплай, ҡабыҡ* ағасты *ҡаплай*. Йәғни, уларҙың өсөһө лә нимәнелер ҡаплай, уларҙың *ҡап* тигән уртаҡ өлөшө бар. Бындай һүҙҙәрҙе тамырҙаш һүҙҙәр тиҙәр.

*Ҡаплау* мәғәнәһен һаҡлаған тағы ла *ҡабырсаҡ, ҡапсыҡ, ҡаптырма, ҡабырға, ҡабым* тигән һүҙҙәр бар.

Тағы ла *ҡап* һүҙе менән *яп* һүҙе ҡасандыр бер һүҙ булған. Әле лә *яп* һүҙе *ҡаплау* мәғәнәһен һаҡлаған. Тик *ҡап* — исем, ә *яп* — ҡылым. *Яп* шулай ҡылым булып киткәне өсөн, *ҡап*тың тәүге өнө үҙгәргән. *Ҡапҡаны яп, ҡапҡасы ябыҡ, ҡабырсаҡ ябылды.* Ә башҡорт телендә мәғәнә үҙгәрһә, һүҙҙең өндәре лә үҙгәрә лә китә: *тары — дары, ырғыу — урғыу* һ. б.

## ДУТАН БАТЫР

*(Татар халыҡ әкиәте)*

Элекке заманда бер батыр йәшәгән. Төрлө яуҙарҙа һәр саҡ еңеп сыҡҡан көслө батыр икән ул. Батырҙың бик күп балалары булған, ә иң кесеһе Дутан исемле икән.

Бер көндө балалары, йыйылып кәңәш итеп, ил күрергә ниәт итәләр һәм уларҙың йылҡыһын көткән бер ҡартҡа кәңәш һорап киләләр. Бабай бынан ун көнлөк ерҙәге тирәкле урманға барырға кәңәш итә һәм аттарының дағаларын һалдырып, ҡорал алып сығырға ҡуша.

Дутанға айырып әйтә:

— Балам, — ти, — ысын һүҙемде һиңә әйтәм, күк айғырҙың өйөрөнән бер тайҙы тотоп мен, башҡаһы ярамаҫ һиңә, — ти. — Был йыйылып сығыуығыҙҙың бөтә яфаһы, мәшәҡәте һиңә генә төшөр.

Ҡарт әйткәнсә әҙерләнеп, ата-әсәһенән рөхсәт алып, ил күрергә сәфәргә сығып китәләр былар.

Оҙаҡ ҡына барғас, теге ҡарт әйткән урманға килеп етәләр. Урманда һәр төрлө емештәр бар икән. Аттарынан төшөп, шул емештәр менән тамаҡ туйҙыралар һәм һәр ҡайһыһы үҙҙәренең аты янында ятып йоҡлайҙар.

Был урманда Ялмауыҙ ҡарсыҡ бар икән. Ул, әҙәм еҫен һиҙеп, килеп сыға ла, ауыҙын ҙур асып, быларҙы йота. Дутанды йотам тигәндә генә, егеттең тайы тыпырсына башлай. Кешнәп, бышҡырып уны уята. Дутан уянып китеп ҡараһа, туғандары юҡ, аттары ғына ҡалған, ә ҡаршыһында маңлайында табаҡ ҙурлыҡ ҙур күҙле ҡарсыҡ тора, ти. Дутан мылтығын алып атайым тиһә, Ялмауыҙ ҡарсыҡ әйткән, ти:

— Балам, сабыр ит, атмай тор. Туғандарың миндә, улар барыһы ла иҫәндәр. Мин һине бер йомошҡа ҡушам, әгәр шуны үтәһәң, туғандарыңды ҡотҡарам. Ете айлыҡ юл алыҫлығында Мөхит диңгеҙе уртаһында бер батша бар, шуның ҡыҙын алып ҡайт. Ул ҡыҙҙың исеме – Көнөкәй. Көнөкәйҙең һылыулығын әйтеп бөтөргөһөҙ, ти. Ҡыҙҙы алып ҡайтып бирһәң, ҡотолорһоң. Алып ҡайтып бирмәһәң, туғандарың миндә ҡала.

Дутан Көнөкәй артынан барырға була. Ялмауыҙ ҡарсыҡҡа ҡыҙҙы алып ҡайтырға һүҙ биреп, ҡарсыҡтан юлдашҡа тип, туғандарын һорап ала.

— Йә, ағайҙар, был ҡарсыҡ миңә бер йомош ҡуша, ҡайһығыҙ миңә юлдаш булып бара? — ти.

Туғандары:

— Беҙ бара алмайбыҙ унда, — тип ҡырт киҫәләр. Дутан үҙе генә барырға ҡарар итә һәм Ялмауыҙҙан юлды һорай. Ҡарсыҡ уға барыр юлын өйрәтеп, ат башы ҙурлыҡ алтын бирә. Дутан юлға сығып китә.

Тай бик шәп бара. Көндән-көн Дутан атының йөрөшөнә хайран ҡала. «Атым беренсе буласаҡ икән», — тип уйлай.

Бер ай тулды тигәндә, ҙур бер үҙәнлеккә килеп етә. Шул ерҙә һыу буйлап барһа, йөҙ түбән ятҡан бер кешегә тап була. Килеп етеп, тегегә эйелеберәк сәләм бирә. Теге бабай баш ҡалҡытып сәләмен ала.

Дутан батыр, уның ерҙә яңғыҙы ни эшләп ятыуы тураһында һораша.

— Беҙҙең ауылдың урыны ошо ине, — ти ҡарт. — Мин ауҙа саҡта, ауылымды яу баҫҡан. Ҡайтып килһәм — илем юҡ. Ауылымдың урынын ташлап киткем килмәне, — тигән. — Ятыуымдың бер хикмәте бар: ер аҫтында бер хан, ҡыҙын кейәүгә биреп, туй эшләп ята, шуны тыңлап ята инем әле.

Дутан үҙенең сәфәре, йомошо тураһында һөйләп биргән икән, ҡарт уға:

— Бында яңғыҙ ятҡансы, мин дә һиңә юлдаш булам, — тигән. Береһе һыбай, береһе йәйәүле юлға сығып китәләр.

Бер ай барғас, бер кешегә юлығалар. Был кешенең ҡулында мылтығы бар, ә үҙе юғарыға ҡарап ултыра икән. Сәләм биреп, хәлдәрен һорашҡандар. Был кешенең дә, ауылын яу баҫып, яңғыҙ ҡалыуын беләләр. Ул кисә төш ваҡытында өйрәк атҡан икән, йәҙрә өйрәкте үҙе менән күккә, бейеккә алып киткән, ул шуны көтөп ултыра икән. Дутандан хәлдәрен һорашып, һөйләшеп ултырғанда, теге өйрәк һауанан килеп төшә. Өйрәкте бешереп ашайҙар ҙа, бергәләшеп, ике йәйәүле, бер һыбай, юлға сығып китәләр.

Бара торғас, ай самаһы юл үткәс, бер түбәлә йәйәү бүре ҡыуыусыны осраталар. Ике аяғына ҡаҙан хәтле таш бәйләгән икән. Шул килеш  ул бүрене тотоп ала. Был кешенең исеме Елаяҡ икән. Елаяҡ осҡан ҡоштан башҡаны уҙҙырмай икән. Юғалып китмәҫ өсөн, аяғына таш бәйләп йөрөй, ти.

Дутан йомошон һөйләп биргән. Ил күреп, ҡыҙыҡтар күреп килермен тип, Елаяҡ та ҡушылған быларға. Өс йәйәүле, бер һыбай юлға сыҡҡандар.

Тағы бер ай самаһы барғас, тау араһында бер кешене күрәләр. Уның баш осонда һәр төрлө ҡоштар осоп йөрөй икән. Был кешенең дә ауылын яу ҡырған һәм ул, яңғыҙлыҡтан ҡоштар менән һөйләшеп, тыуған ерен ташлап китә алмай йөрөй икән. Тағы юлға сығып китәләр дүрт йәйәүле, бер һыбай.

Китеп-китеп тағы бер ай тулғанда, урмандан сал һаҡаллы бер кеше килеп сыға. Ул Дейеү-сал икән. Бер оҙон имәнде елкәһенә һалып алған, икенсе ҡулында тирмән ташы икән. Хәл-әхүәлдәрҙе һорашҡас, Дейеү-сал да былар менән барырға хәл итә. Биш йәйәүле, бер һыбай юлға сығалар.

Бер ай үткәс, эҙләгән ҡалаға етәрәк, бер ауылда туҡтап, бер фәҡир генә өйгә инеп ҡунырға булалар. Ағалы-һеңлеле өй хужалары батша тураһында белгәндәрен һөйләп бирәләр. Дутанды уйынан кире ҡайтырға өгөтләйҙәр. Сөнки ул ҡаланы ун меңле яу ҡамап алған икән.

Батша ҡыҙы шул көндө төш күрә: биш йәйәүле, бер һыбай уны алып китеү өсөн, ҡалаға килеп инә, һәм дейеүҙәр, бәрейҙәр ҡурҡып ҡасалар, имеш. Был төшөн ағаһына һөйләй. Ағаһы, дошман яуы бар әле, килә ҡалһалар, алтыһын да эшкә ҡушырбыҙ, көстәрен һынап ҡарарбыҙ, тип һеңлеһен тынысландыра.

Яу батшаһының Көнөкәйгә күҙе төшә һәм Көнөкәйҙең атаһына, әгәр ҡыҙын уға бирһә, батшалыҡты ҡыйратмаҫҡа вәғәҙә итә. Батша халҡын ҡотҡарыу өсөн ризалаша һәм, уларға вәғәҙә биреп, ҡырҡ көндән һуң килеүҙәрен һорап, ҡайтарып ебәрә.

Дутан батыр иптәштәре менән ҡалаға килә. Көнөкәй уны күреп, күҙ һала. Кешеләр аша: «Яу батшаһы минән өмөтөн өҙһөн», — тип сәләм ебәрә.

Дутан батырҙы батша үҙенә саҡырта, һыйлай һәм ни өсөн килеүҙәрен һораша. Батыр, Көнөкәйҙе кәләшлеккә атайым — батша һоратты, тип хәйләләй. Батша булған хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп, Дутан батырға Тел-Ҡуңыҙ исемле атын бирә һәм яу батшаһын ҡыуып етеп, тар-мар итергә ҡуша. Дутан батыр батшаны еңеп, туғыҙ көнлөк юлды дүрт көндә үтеп, ҡайтып етә.

Батшаның бер боҙоҡ вәзире, ҡыҙҙы үҙенә алыу өсөн, батшаны ҡоторта. Майҙанға күп халыҡ йыйып, ярыш ойоштора. Көрәштә Дейеү-сал менән батшаның Барак тигән батыры көрәшә. Дейеү-сал еңә. Йәйәүлеләрҙең ярышында батшаның бер ҡарсығы менән Елаяҡ ярыша. Өс көнлөк ергә барып еткәс, ҡарсыҡ менән Елаяҡ ял итергә ултыралар. Ҡарсыҡ хәйлә ҡороп, Елаяҡты йоҡлатып ҡасып китә. Ҡояш ҡыҙҙырыуға, Елаяҡ уянып китә һәм ҡарсыҡты уҙып китеп, майҙанға беренсе килеп етә.

Батша уҡ атыусыларҙы ла ярыштырып ҡарарға була. Ҡырҡ аршынлы бағана ултырттырып, башына бер янсыҡ алтынды элеп ҡуялар. Янсыҡты кемдең уғы йолҡоп алып китә, шул яҡ еңеүсе була. Ярышта өйрәк атыусы ҡатнаша. Уның уғы янсыҡты өҙөп алып китә һәм икенсе көндө бағана төбөнә килеп төшә.

Батшаны вәзир тағы ҡоторта һәм, Көнөкәй йоҡлағанда, уны һандыҡҡа һалып алып китергә күндерә. Был хәлде ер аҫтынан йыр тыңлап ятҡан бабай ишетеп ҡала һәм Дутанға хәбәр итә. Дутан батыр бик асыуланып батшалыҡты ҡырырға уйлай, ләкин ҡоштар менән һөйләшкән бабай уны тынысландыра. Батша кешеләренең күҙен бәйләп, ҡыҙҙы алып китәләр. Батшаның кешеләре уянып китһә, аттарын арбаға һалып, арбаны һөйрәп киләләр икән.

Дутан батыр, Тел-Ҡуңыҙға атланып, ҡыҙҙы алып ҡайтыр яҡҡа юллана. Ялмауыҙ ҡарсыҡҡа килеп еткәс, ҡыҙға уның

ҡарсыҡта ҡалырға кәрәклеге тураһында әйтә. Көнөкәй күҙ йәштәре менән илай.

Дутан батыр менән Елаяҡ хәйлә ҡоралар. Елаяҡты Көнөкәй итеп кейендереп, Ялмауыҙ ҡарсыҡҡа бирәләр. Елаяҡ, ҡарсыҡты алдап тышҡа сыға һәм, ҡасып китеп, иптәштәренә барып ҡушыла. Ҡарсыҡ, ҡыуып етеп, инде йотам тигәндә генә, өйрәк атыусы ҡарсыҡтың күҙенә тоҫҡап атып ебәрә.

Дутан батыр дуҫтары менән ҡайтып етә. Үҙе Көнөкәйгә өйләнә, дуҫтарына биш апаһын кейәүгә бирә.

Атаһының үтенесе буйынса ҡалған апайҙарын да кейәүгә биреп һәм ағайҙарын да өйләндереп, бәхетле йәшәйҙәр, ти.

1. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендәге батырҙар менән Дутан батыр араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?
2. Дутан батыр әкиәтен Ҡамыр батыр әкиәте менән сағыштырығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Дутан батыр һәм уның дуҫтары араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында һөйләгеҙ.
4. Тайға (Дутан батырҙың аты), Тел-Ҡуңыҙға характеристика бирегеҙ.
5. Ялмауыҙ ҡарсыҡҡа характеристика бирегеҙ.
6. *Төш күреү, ете айлыҡ юл үтеү* кеүек әкиәттәге алымдар тураһында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

## Гипербола һәм литота тураһында төшөнсә

**Гипербола** (грекса *hyperbole* — арттырып һөйләү) — хәл-ваҡиғаны йә геройҙы саманан тыш күпертеп, шаштырып күрһәтеү. Ул әҫәрҙең тәьҫир итеү көсөн арттырыу өсөн ҡулланыла.

**Литота** (грекса *litotes* — ябайлыҡ) — ниҙеңдер ҙурлығын үтә кесерәйтеп күрһәтеү. Ул гиперболаның киреһе.

Әҙәби текстарҙа йыш ҡына литота менән гипербола ҡапма-ҡаршы ҡуйыла (иргәйел ҡарт, мәҫәлән, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш). *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

**12-се күнегеү.** *Ел* һүҙенә тамырҙаш һүҙҙәр табығыҙ. Күпмене таба алырһығыҙ?

## ҺҮҘҘӘРҘЕҢ ТӨРКӨМДӘРГӘ БҮЛЕНЕШЕ

Һүҙҙәр төркөмдәргә нисек бүленә? Ҡарайыҡ әле.

Һәр бер тел — ысынбарлыҡтың кеше белгән тиклем өлөшөнөң сағылышы. Ә ысынбарлыҡ әйберҙәрҙән тора: *һауа, ер, ағас, кеше, әнә...* Телдә лә предметтарҙы белдереүсе һүҙҙәр бар — улар **исем (имя существительное)** тип атала.

Предметтың йәшәү шарты — хәрәкәт, эш, процесс, хәл: *йөрөй, уҡый, үҫә...* Телдә лә хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр бар. Улар **ҡылым (глагол)** тип атала.

Предметтар бер-береһенән билдәләре буйынса айырылалар. Телдә лә билдә белдереүсе һүҙҙәр бар — уларҙы **сифат (имя прилагательное)** тип йөрөтәләр.

Предметтарҙы иҫәпләп була. Телдә лә иҫәпте белдереүсе **һан (имя числительное)** тип аталған һүҙҙәр бар.

Хәрәкәттең рәүеше, урыны, ваҡыты, сәбәбе була. Шуларҙы белдереүсе һүҙҙәрҙе **рәүеш (наречие)** тип атайҙар.

**Исем, ҡылым, сифат, һан, рәүеш** конкрет мәғәнә белдерә. Телдә ошо мәғәнәләргә күрһәтә генә торған һүҙҙәр ҙә бар. Быларын **алмаш (местоимение)** тип йөрөтәләр. Ысынлап та, алмаштар конкрет мәғәнә белдермәй, ә дөйөмләштереп, предметҡа, уның эшенә, билдәһенә, иҫәбенә һ. б. күрһәтәләр. Мәҫәлән, *нисек, шулай, былай* — эш рәүешенә күрһәтә.

Һүҙ төркөмдәренең бүленеше схемаһын ҡарайыҡ әле.



## Тормош-көнкүреш әкиәттәре

Тормош-көнкүреш әкиәттәре һуңғараҡ осорҙа барлыҡҡа килгән. Исеменән үк күренеүенсә, улар кешенең тормошона, көнкүрешенә, йәшәү рәүешенә һәм хеҙмәтенә бәйле тыуған.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең ыңғай геройҙары, ғәҙәттә, ябай кешеләр. Улар ҡаршылыҡтарҙы тылсым көсө менән түгел, ә аҡыл һәм ҡул көсө менән еңә. Зирәклек, тапҡырлыҡ, хәйлә ярҙамында халыҡты иҙеүсе һәм йәберләүсе яуыз әҙәмдәр фашлана.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренә ысынбарлыҡты реаль һүрәтләү хас, уларҙа сатира һәм юмор алымдары киң ҡулланыла. Былдай әкиәттәр кешеләрҙә аң-белем, оҫталыҡ, эшсәнлек, отҡорлоҡ кеүек яҡшы сифаттарҙы данлай, тупаҫлыҡ, ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ, ялҡаулыҡ һымаҡ һыҙаттарҙы кире ҡаға.

## АЛТЫН ТАМСЫ

Борон-борон заманда Янһары тигән бер кеше булған, ти. Ул мал аҫрап, ете ерҙә йәйләп, биш ерҙә ҡышлап йөрөгән. Бик тырыш булған Янһары — көн тимәгән, төн тимәгән, эшләгән дә эшләгән. Шуға күрә ул етеш көн иткән.

Берҙән-бер көн Янһары үлеп киткән. Унан Ялбыр исемле маҡтансыҡ бер малай тороп ҡалған. Күп ашаған, күп йоҡлаған, ҡулына эш тотмаған был малай. Донъя үҙенә ҡалғас, Ялбыр иркенләп йәшәй башлаған. Көн дә ҡунаҡ йыя: ҡурайсылар саҡыра, йырсылар килтертә, бейеүселәр алып килә, ти. Уйын-көлкөгә әүәҫ булғандар бының тирәһенән бер ҙә өҙөлмәй. Дуҫ-иш бик күбәйеп китте, ти, бының. Барыһы ла ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп маҡтайҙар, ти, уны. Эй ҡуҡырая, ти, Ялбыр, эй ҡуҡырая, ти. Маҡтап бер һүҙ әйткәнгә — бер ат, ҙурлап көй сығарғанға ике ат тоттора ла ебәрә, ти. Шулай тарата торғас, әкренләп бының бары бер аты, бер һыйыры ғына тороп ҡалған. Ә ул уйлап та бирмәй, һаман эшләмәй, ашай ҙа йоҡлай, ашай ҙа йоҡлай, ти.

Ырыуҙың олпатыраҡ ҡарттары килеп был егетте өгөтләп тә ҡарайҙар, ә теге һаман ҡолаҡ һалмай, ти. Ҡарттар әйтә:

— Ялбыр ҡустым, малыңды самалабыраҡ тот, бөлөрһөң бит.

Тинтәк Ялбыр күп уйлап тормай, яуап ҡайтара:

— Бөлһә, ни була?

— Бөлһәң, шул була, — тиҙәр ҡарттар, — бөлһәң, малың бөтөп китер. Мал табыуы бик ауыр ул.

Теге тинтәк тағы үҙенсә яуап ҡайтара:

— Һәй, мал бөтә тиме ни! Йыл һайын бейә ҡолонлап, яҙ етте иһә, һыйыр быҙаулап тора. Ни эшләп бөтһөн, ти, мал!

Ҡарттар ҡул һелтәп китәләр ҙә баралар. Ә Ялбыр һаман шулай йәшәй бирә. Шунан, күп тә үтмәй, тинтәк Ялбыр тамам бөлгән дә ҡуйған, ти. Инде хәҙер мал да юҡ, мал булмағас, тегенең янында дуҫ-иштәре лә юҡ. Ни эшләмәк кәрәк? Тора ла был, аҡтыҡ атын менә лә ил гиҙергә сығып китә.

Эй бара, ти, был, эй бара, ти, бара торғас, бер туплауға барып сыҡҡан, ти. Туплауҙа ятҡан малды күргәс, бының күҙе шарҙай булып киткән.

— Һай, һай, — тип ҡысҡырып ебәргән, ти, был, — мал табыуы ҡыйын, тигән булалар. Бына бит ҡайҙа ғына ятҡан ул мал!

Шунан тинтәк Ялбыр малды туплауҙан ҡуҙғатып алып китергә генә уйлап тора икән, сыбыртҡыһын шартлатып, аҡ һаҡаллы бер ҡарт килеп сыҡҡан.

— Һаумы, бабай, — тигән Ялбыр көтөүсегә. — Был кемдең малы була?

— Фәлән байҙыҡы.

— Ә һин үҙең кем?

— Тир түгеүсе.

Ялбыр аптырай.

— Тир үҙе нимә була һуң? — тип һорай.

Теге ҡарт:

— Тирме? Тир — ул донъяла иң ҡиммәтле байлыҡ, — ти, — уның бер тамсыһы мең алтын тора.

Ялбыр, ҡыҙыҡһына биреп, тағы һорай:

— Бөтәме һуң ул байлыҡ?

Ҡарт әйтә:

— Тирең кипмәһә, байлығың бөтмәҫ. Тир — ул байлыҡтың шишмәһе, — ти.

Егет, быны ишеткәс, бик шатланып ҡайтып китә. Ҡайта ла был, ҡат-ҡат тун кейеп, сәй эсергә ултыра. Шыбырлап тир

аға, ти, бының битенән, сәйҙе һаман эсә был, үҙе таҫтамал менән тирен һөртөп алып, сынаяҡ аҫтына һығып ултыра, ти. Бер самауыр сәй эсеп бөткәнсе, бер сынаяҡ тир һығып ала. Шунан был тирҙе тамсылап иҫәпләй ҙә алтынға әйләнеүен көтә башлай. Көнө буйы ҡарай, ятыр алдынан тағы ҡарай, алтын да юҡ, байлыҡ та юҡ, тир һаман, һыу кеүек, үҙгәрмәй тик тора ла тора икән. Аптырағас, егет, бармағын тиргә манып, тәмен татып ҡарай, ҡараһа — тоҙло һыу кеүек әсе.

— Һай, алйот ҡарт, алдаған икән! — тип, тир тулған сынаяҡты атып бәрә.

Шул көйө донъяға ҡулын һелтәп, теге аҡтыҡ атын да һуйып ашай. Хәҙер бының бер нәмәһе лә ҡалмай. Асыға башлай. Ни эшләһен инде, тағы ла китә урманға. «Ашарға берәй нәмә тапмаммы», — тип уйлай. Эй йөрөй был, эй йөрөй, бер нәмә лә тапмай. Хәлдән тайып, бер ағасҡа килеп һөйәлә. Инде ултырайым тиһә, ҡайҙалыр балта туҡылдаған тауыш ишетелеп ҡала. Яҡында кеше барлығын белгәс, эсенә йылы инеп китә егеттең, шул тауыш килгән яҡҡа табан ыңғайлап атлай башлай. Барып етһә, ни күҙе менән күрһен: туплауҙа осраған әлеге ҡарт, тирләп-бешеп, урман ҡырҡып йөрөй, ти.

— Эй, ҡарт, — ти уға Ялбыр, — алдағанһың һин мине, күпме тир йыйып ҡараным, бер тамсыһы ла алтынға әйләнмәне.

— Ни эшләттең һуң ул тирҙе? — тип һорай унан ҡарт.

— Сынаяғы менән атып бәрҙем, түктем! — ти Ялбыр.

— Их иҫәр, иҫәр! — ти ҡарт, көлөп. — Тирҙе тамсылап-тамсылап түгәләр уны, шунан ғына алтынға әйләнә ул. Мә, тот балтаны, ҡырҡып йыҡ ошо тирәкте.

Ялбыр, һуңғы көсөн йыйып, тирәкте ҡырҡырға тотона. Шунан бының маңлайынан бөрсөк-бөрсөк тирҙәр ҡойола башлай. Тирен еңе менән һыпырып ала ла тағы тотона был. Тырыша торғас, тирәкте ҡырҡып йыға ла ҡарт эргәһенә килеп ултыра.

Шунан теге ҡарт ҡуйынынан ҡатҡан икмәк киҫәге сығара ла егеткә бирә.

— Мә, тамағыңды ялғап ал.

Ялбыр, тирле ҡулы менән икмәкте тартып алып, шунда уҡ ашап бөтә.

— Тәмле булдымы? — тип һорай ҡарт.

— Бик тәмле!

— Тир түгеп алғанға ул, — ти ҡарт, — донъяла иң ҡиммәтле байлыҡ ана шул була. Белдеңме инде хәҙер?

— Белдем, олатай, белдем.

— Белһәң, бына шул: эш өҫтөндә тамған тирҙең бер тамсыһы — меҥ алтын. Тырышып эшләгән һайын, тир тамсыһы күп сығыр, тир тамсыларыңды күберәк түккән һайын, бәхетең дә, байлығың да артыр.

Ошонан һуң тинтәк Ялбыр тир түгеп эшләй башлаған. Түгелгән тир тамсылары байлыҡҡа әйләнеп, үҙенә кире ҡайтып торғандар. Шунан Ялбыр донъяла иң бәхетле, иң бай кеше булып киткән.

1. Янһары ҡарт менән Ялбырҙың көнитмешен сағыштырығыҙ. Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Көтөүсе ҡарт үҙен Ялбырға ни өсөн *тир түгеүсе* тип таныштыра?
3. *Тир — ул донъяла иң ҡиммәтле байлыҡ; Тир — ул байлыҡтың шишмәһе* һөйләмдәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Әкиәт ни өсөн «Алтын тамсы» тип атала? *Эш өҫтөндә тамған тирҙең бер тамсыһы — меҥ алтын* әйтеменең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
5. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе барлап сығығыҙ. Улар күпме? Кем нисә һүҙ тапты? Уларҙың күплеге йәки әҙлеге нимә тураһында һөйләй? Бер-берегеҙгә ярҙам итеп, һүҙлекте файҙаланып, был һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
6. Маҡтауға һеҙ, моғайын, ҡаршы түгелдер. Ә һеҙ *ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп* маҡтағандарын теләр инегеҙме? Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
7. Самалап тотоноу, йәки һаҡсыллыҡ, ниндәй сифат ул? Ул бөтә кешегә лә кәрәкме? Бәлки, ярлылар өсөн генә файҙалылыр, ә байлығы күп кешегә самаламай тотонһа ла ярайҙыр? «Йомартлыҡ — һаҡсыллыҡ — һаранлыҡ» темаһына фекер алышығыҙ.
8. *Етеш көн итеү, күҙ шарҙай булыу, эскә йылы инеп китеү, ҡул һелтәп китеү, тамаҡ ялғау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ. Һәр береһенә миҫалдар килтерегеҙ.
9. Башҡорт телендә *мал табыу* тигән төшөнсә бар. Һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ? Үҙегеҙҙе әкиәт геройы Ялбыр урынына ҡуйып фекер йөрөтөп ҡарағыҙ.
10. Әкиәттең йөкмәткеһен, яңы һүҙҙәрҙе, мәғәнәләрен асыҡлаған һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланып, һөйләргә өйрәнегеҙ.

## ҠЫЛЫМ

Хәрәкәтте, эште, процесты, хәлде белдереүсе һүҙҙәрҙе **ҡылым (глагол)** тип атайҙар. Ҡылымдың төп һорауы — *ни эшләй?*

**13-сө күнегеү.** Ҡылым мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ. Яңы ҡылымдар өҫтәп яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| Хәрәкәт | *йөрөү, сабыу, ...* |
| Эш | *бысыу, яҙыу, ...* |
| Процесс | *үҫеү, сереү, ...* |
| Хәл | *йоҡлау, арыу, ...* |

**14-се күнегеү.** Һүҙ төркөмдәренең бүленеше буйынса ижади эш эшләгеҙ (әкиәт, хикәйә, пьеса яҙығыҙ).

## ҺАРАНБАЙ МЕНӘН ЗИННӘТ АҒАЙ

Борон заманда яҡты донъяла, ҡараңғы күләгә кеүек, бер бай йәшәгән, ти. Бер кем дә уның исемен әйтмәгән. Ҡомһоҙлоғо, һаранлығы өсөн уны Һаранбай тип кенә йөрөтөр булғандар, ти.

Берҙән-бер көндө Һаранбай йәрминкәгә барырға йыйынған. Иртүк торған да: «Юл аҙығы итеп нимә алырға?» — тип баш вата икән был. Ә үҙенең юҡ нәмәһе юҡ икән, ти: һарыҡкәзә тиһеңме, тауыҡ-ҡаҙ тиһеңме — бөтәһе лә теүәл меңәр баш икән, ти, бының. Оно ла теүәл мең бот булған. «Юлға бер ҡаҙҙы һуйып алһам — туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ баш ҡына ҡала; бер тауыҡты һуйһам — шулай уҡ туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан туғыҙ ғына ҡаласаҡ; бер бот ондан икмәк бешерткән хәлдә — туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ бот ҡына ҡала; берәй һарыҡты һуйып, итен бешертеп ашар инем — бынныһы ла туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ баш ҡына ҡала. Бына бит, байлығымдың теүәл иҫәбе юғалырға ғына тора! Ни эшләргә һуң, былай булғас?» — тип баш вата икән, ти, Һаранбай.

Үҙенең генә башы етмәгәс, Һаранбай үҙе кеүек үк бай, эштән сыҡҡан һаран күршеһе Дәүләтбайға кәңәш һорап барған. Ул да йәрминкәгә китергә йыйына икән. Һаранбай унан:

— Ни эшләргә икән, күрше? Юл аҙығына нимә алырға икән? — тип һораған.

— Тапҡанһың икән баш ватыр нәмә. Тот та Зиннәткә үҙенең ҡаҙын һуйырға ҡуш. Ул минән, йәрминкәгә ултыртып алып бар әле, тип һорағайны, — тигән күршеһе.

Быға бик ҡыуанып, Һаранбай ярлы ғына күршеһе Зиннәткә ингән.

— Зиннәт күрше! — тигән ул, өйгә инер-инмәҫтән. — Һинең йәрминкәгә барғың килә икән. Юлға аҙыҡ итеп ҡаҙыңды һуй ҙа киттек, әйҙә, Дәүләтбай менән өсәүләп, — тигән.

Зиннәт ағай үҙенең берҙән-бер ҡаҙын һуйырға теләмәһә лә, йәрминкәгә барырға аты юҡлыҡтан, быға риза булған. Яңғыҙ ҡаҙҙы һуйҙырып алып, Һаранбай, күршеһе Дәүләтбай, ҡаҙ эйәһе Зиннәт ағай — өсәүләп сығып киткәндәр.

Бына улар, ҡунып китергә тип, бер ауылға туҡталғандар, Һаранбай ҙа, Дәүләтбай ҙа: «Ниндәй генә хәйлә табып, ҡаҙҙы бүлешмәй-нитмәй генә ашап ҡуйырға икән», — тип икеһе лә бер үк нәмә тураһында уйлай икән. Хәйлә эҙләп, күп баш ватҡандан һуң, Һаранбай:

— Кем дә кем иң һәйбәт төш күрә, шул кеше ҡаҙҙы бер үҙе ашаһын, — тигән.

Быға бөтәһе лә риза булып йоҡларға ятҡандар. Һаранбай ҙа, Дәүләтбай ҙа: «Нисек итеп был икәүҙе оҫтараҡ алдарға ла бөтә ҡаҙҙы бер үҙем генә ашарға икән», — тип төнө буйы баш ватып сыҡҡандар. Тик таң алдынан ғына йоҡлап киткәндәр, ти.

Иртәнсәк Һаранбай башлап үҙенең төшөн һөйләргә тотонған:

— Их, юлдаштарым, бына ниндәй һәйбәт төш күрҙем мин: өйөмдә, мамыҡ мендәр өҫтөндә ултырам, имеш, тим. Бер ваҡыт, мин һиңә әйтәйем, пар юртаҡ еккән бер кеше ҡапҡа алдыма килеп туҡтаны ла: «Хужа өйҙәме?» — тип һораны. Мин уға ҡаршы сыҡтым. Теге кеше: «Киттек, Һаранбай ағай, мин һине алырға килдем», — ти. Ултырҙым да, китеп тә барҙыҡ, имеш, тим. Ҡараһам, теге кеше мине туп-тура ожмахтың үҙенә алып килгән икән, тим. Ундағы донъяны, мин һиңә әйтәйем, әкиәт итеп һөйләп тә, алтын ҡәләм менән яҙып та бөтөрөрлөк түгел. Ҡайҙа ҡарама — хуш еҫ бөркөп торған төрлө-төрлө сәскәләр, ҡыҙарып бешкән алмалар, һырға һымаҡ, инде өҙөлөп төшәм, инде өҙөлөп төшәм, тип торған хөрмәләр, әллә ниндәй емеш ағастары. Ботаҡтарында, мин һиңә әйтәйем, аҫыл ҡоштар һайрашып ултыра... Теге

мине алып килгән кеше: «Һаранбай ағай, әгәр һиңә оҡшаһа, бөгөндән башлап ошонда торорһоң», — ти. Оҡшамаған ҡайҙа инде ул... Төштөң бына ниндәйен күрҙем мин.

Һаранбайҙан һуң үҙенең төшөн Дәүләтбай һөйләп бирҙе, ти:

— Ә мин төшөмдә буҙ толпарға атланып остом, — ти Дәүләтбай. — Толпар мине күккә алып менеп киткән икән, имеш, тим. Ҡараһам, бында донъяның иң бай, иң затлы кешеләре йыйылған икән, тим. Улар мине: «Дәүләтбай килгән дә Дәүләтбай килгән», — тип арҡамдан һөйөп кенә йөрөтәләр, өрмәгән ергә ултыртмайҙар. Шунан былар мине һыйларға тотондолар. Өҫтәлдә ниҙәр генә юҡ — йәнең ни теләй, барыһы ла бар! Бында күгәрсен һөтө генә юҡ икән, тип тора инем, уныһын да килтереп ҡуйҙылар... Бындай һәйбәт төштө донъяла берәүҙең дә күргәне булмағандыр.

Төш һөйләү сираты Зиннәт ағайға килеп туҡталған.

— Йә, Зиннәт, һин ниндәй төш күрҙең? — тип һораған ике һаран бай.

— Һорамағыҙ ҙа инде, — тигән Зиннәт ағай. — Һеҙ, әлбиттә, икегеҙ ҙә бик һәйбәт төш күргәнһегеҙ. Мине ошо арба янында бер үҙемде ҡалдырып, берегеҙ ожмахҡа китеп барған, икенсегеҙ күктә йөрөгән. Былар, мин әйтәм, бындай һыйлы ергә бер барып эләккәс, тиҙ генә әйләнеп ҡайтмаҫтар әле. Һеҙҙе көтөп ултырһаң, ҡаҙҙың да боҙолоуы бар. Өҫтәүенә, бик асыҡтырған да ине. Шуға күрә ҡаҙҙы үҙем генә ашаным да ҡуйҙым. Һеҙгә ана муйыны ғына ҡалды.

Быны ишеткәс, Һаранбай менән Дәүләтбай ауыҙҙарын асҡандар ҙа, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, бер-береһенә ҡарашып, ҡатып ҡалғандар, ти. Шулай итеп, ике һаран байға, ҡаҙҙың Зиннәт ағайҙан ҡалған муйын кимерсәген кимереп кенә, ас йөрөп ҡайтырға тура килгән, ти.

1. *Өрмәгән ергә ултыртмау* һүҙбәйләнешенең тура һәм ситләтелгән мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уға әкиәт тексынан һәм тормоштан миҫалдар килтереп ҡарағыҙ. Һеҙ үҙегеҙҙе өрмәгән ергә ултыртмауҙарын теләр инегеҙме?
2. Әкиәттә Һаранбай *эштән сыҡҡан һаран* тиелә. Кешенең тағы ниндәй сифаттарына ҡарата *эштән сыҡҡан* һүҙбәйләнеше ҡулланыла? Бындай осраҡтарҙа ыңғай сифаттар күҙ уңында тотоламы? Мәҫәлән, *эштән сыҡҡан йомарт?* Тапҡан һүҙҙәрегеҙҙе теҙеп яҙығыҙ.

3. *Баш ватыу, баш етмәү, ҡунып китеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Улар тура мәғәнәлә ҡулланыла аламы?
4. Әкиәт геройҙарына телдән характеристика бирегеҙ. Уларға ҡарата һеҙ ниндәйерәк эпитеттар ҡулланырһығыҙ?
5. Был әкиәттең ни өсөн тормош-көнкүреш әкиәттәре төркөмөнә ингәнлеген иҫбатлап ҡарағыҙ.

## ҠЫЛЫМДЫҢ ЗАТЛЫ ҺӘМ ЗАТҺЫҘ ФОРМАЛАРЫ

Башҡорт телендә ҡылымдың һүҙ формалары (словоформа) иҫ киткес күп. Ҡайһы бер ҡылым тамырҙарынан меңдәрсә һүҙ формаһы яһала ала. Был формаларҙың барыһын да өйрәнеп бөтөүе мөмкин түгел. Шулай ҙа беҙ ҡылымдың иң йыш ҡулланылған һүҙ формаларын асыҡлап, тикшереп китербеҙ.

Иң тәүҙә беҙ ҡылымдың затлы һәм затһыҙ формаларын айырырға өйрәнергә тейешбеҙ. Затлы һәм затһыҙ формаларҙы дөрөҫ билдәләүҙең шундай ябай ғына юлы бар. Әгәр ҡылым алдына төп килештәге зат алмашының *(мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар)* береһен генә ҡуйып булһа — был затлы форма. Әгәр ҡылым алдына зат алмаштарының барыһын да ҡуйып булһа, йә иһә зат алмашы төп килештә булмаһа — был затһыҙ форма.

Сағыштырығыҙ:

| **Затлы форма** | **Затһыҙ форма** |
|---|---|
| (мин) *барам* | (мин, һин, ул) *барғас* |
| (ул) *бара* | (уның) *барғаны юҡ* |
| (һин) *килһәң* | (мин, һин) *килеүгә* |

**15-се күнегеү.** Түбәндәге ҡылымдарҙан затлы һәм затһыҙ формалар яһағыҙ.

Бел, уйла, ҡайт, йыу.

**16-сы күнегеү.** «Һаранбай менән Зиннәт ағай» әкиәтенән затлы формалағы ҡылымдарҙы табығыҙ.

**17-се күнегеү.** «Алтын тамсы» әкиәтенең *Егет быны ишеткәс...* тип башланған абзацынан затһыҙ формалағы ҡылымдарҙы табығыҙ.

## ХАЛЫҠ ХИКӘЙӘЛӘРЕ

Халыҡ хикәйәләре ауыҙ-тел ижадында киң таралған. Уларҙы, ғәҙәттә, **риүәйәт** йәки **легенда** тип йөрөтәләр.

«Риүәйәт» һүҙе беҙгә ғәрәп теленән ингән, ул «хикәйә», «версия» мәғәнәһендә йөрөй, ә русса «предание», «сказание» төшөнсәләренә тап килә. Риүәйәттәрҙең күпселеге ниндәй ҙә булһа хәл-ваҡиғаның, күренештең һәм факттың тарихын асыҡлауға нигеҙләнә.

Риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә легендаларҙа фантастик уйҙырма, хыял, мөғжизә төп урынды ала. Легенда геройҙары, тәбиғәт, ҡош-ҡорт, йәнлектәр менән бик еңел аралашып, һәр төрлө ғәҙәти булмаған мөнәсәбәткә инә ала.

Йөкмәткеләренә ҡарап, халыҡ хикәйәләрен боронғо ырым-ышаныуҙар нигеҙендә тыуған хикәйәләргә, башҡорттарҙың килеп сығышына, ырыу-ҡәбиләләр тарихына бәйле (генеологик) хикәйәләргә, (ер-һыу атамаларының килеп сығышын аңлатҡан) топономик хикәйәләргә, ауыл тарихтарына бәйле хикәйәләргә, тарихи хикәйәләргә һәм тормош-көнкүреш хикәйәләренә бүлеп йөрөтәләр.

### Боронғо ырым-ышаныуҙар нигеҙендә тыуған хикәйәләр

Боронғо ырым-ышаныуҙар нигеҙендә тыуған хикәйәләрҙең йөкмәткеһе күк есемдәренең, тәбиғәт күренештәренең, үҫемлектәрҙең, тереклек донъяһының барлыҡҡа килеүен аңлатыуға, һәр төрлө хужалар (мәҫәлән, тау хужаһы), эйәләр (мәҫәлән, өй эйәһе) тураһында һөйләүгә ҡайтып ҡала. Уларҙа боронғо кешеләрҙең ысынбарлыҡты ниндәйҙер мөғжизә, серле көс рәүешендә күҙаллауы, тәбиғәт стихияһы алдында көсһөҙлөгө сағыла.

Бындай хикәйәләр сағыштырмаса күп түгел. Бик боронғо күренеш булараҡ уларҙың күбеһе беҙгә килеп етмәгән. Беҙгә билдәле булғандары халыҡтың боронғо замандарҙағы ҡараштарын, аң кимәлен сағылдырыуы менән мөһим әһәмиәткә эйә.

## ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ

Бик борон заманда ер ҡалаҡтай ғына, күк табаҡтай ғына булған. Әҙәм заты ишәйә, кейек-йәнлек заты күбәйә, ер әкренләп киңәйә барған; ер киңәйгәс, күк тә ҙурайған.

Ул саҡта бөтә халыҡ бер ҡаҙандан ашай икән. Бер Алып килеп сыҡҡан да ҡаҙанды күтәреп эскән. Ни эшләмәк кәрәк? Тотонғандар оло ҡаҙан яһарға. Ҡаҙаны булғас, сүмесе лә кәрәк. Ҡаҙанды ҡойғандар көмөштән, сүместе яһағандар алтындан.

Теге Алып килгән дә ҡаҙанды күтәреп ҡараған. «Яраған», — тип урынына ултыртҡан да сүместе ҡулына алған. «Быныһы бик еңел икән», — тип, һауаға сорғотоп, тотоп алайым тиһә, сүмес юҡ: әйләнеп-әйләнеп осҡан да йондоҙҙар араһына инеп боҫҡан.

Алып ырғытҡан сүмес әле лә бар. Ете йондоҙ булып ялтырай ул. Сүместең төбө — дүрт йондоҙ, тотҡаһы — өс йондоҙ, йәмғеһе — етәү. Үҙе һәр саҡ әйләнеп тора: кистән ауыҙы өҫтә була, иртәнгә һырт яғы өҫкә сыға.

## АЙ МЕНӘН ЗӨҺРӘ

Элек Зөһрә тигән бер ҡыҙ булған. Бик йәшләй уның әсәһе үлеп киткән. Атаһы үгәй әсәй алып ҡайтҡан. Үгәй әсәй ҡыҙға көн күрһәтмәгән: ҡаҡҡан-һуҡҡан, туҡмаған, көсө етмәҫтәй эшкә ҡушҡан.

Бер көн кис үгәй әсә Зөһрәгә һыу ташырға ҡушҡан.

— Иртәнгә саҡлы ошо сапсаҡты тултырып ҡуй, — тигән. — Әгәр тултырмаһаң, башыңды өҙөрмөн! — Үҙе сапсаҡтың төбөн тишеп ҡуйған, ти.

Зөһрә һыуҙы төнө буйы ташыған. Сапсаҡта һыу бер ҙә артмаған. Ауыр көйәнтә күтәреп ҡыҙҙың ҡулбаштары уйылған. Биле бөгөлөп төшкән. Тамам хәле бөтөп, йығылған.

Донъя тыныс булған ул төндә. Шылт иткән тауыш та ишетелмәгән. Күк йөҙөндә бары ай ғына йөҙөп йөрөй икән. Зөһрә шул саҡ айға ҡараған да:

— Эй, айғынам, исмаһам, һин белер инең хәлемде! — тигән. — Ҡотолдорор инең башымды!

Ай һаман тыныс ҡала биргән.

Зөһрә ҡыҙ илап тағы ялбарған:

— Ал мине үҙеңә! — тигән.

Шул саҡ ай яҡтырып киткән. Нурын һуҙған да Зөһрә ҡыҙҙы үҙенә тартып алған. Ана шунан бирле ай битендә көйәнтәле ҡыҙ баҫып тора, ти.

### СЫҢРАУ ТОРНА

Борон Урал арты башҡорттары илендә бик көслө батыр йәшәгән. Уның етәм тигән еренә еткерә ала торған күк толпары булған. Был ҡаһармандың көсөнә тиң булыр батыр, зирәклегенә, аҡыллылығына етер кеше булмаған, ти. Иленә килгән дошманды аяуһыҙ ҡырған, үҙ халҡын, ерен-һыуын сит-ятҡа бирмәгән. Тыуған иле өсөн йәнен ҡорбан итергә лә әҙер торған, ти, ул. Шундай бәһлеүән булыуы өҫтөнә, ул шәп ҡурайсы ла, йырсы ла булған, ти. Ирәндеккә менеп ҡурай уйнаһа, тауышы тау буйлап ултырған ауылдарға гөрләп ишетелеп торған.

Был батыр өйләнеп оҙаҡ ғүмер иткәс, ҡатыны ҡурғаш кеүек ауыр кәүҙәле ул таба. Бала ай үҫәһен көн үҫә, йыл үҫәһен ай үҫә. «Атаһынан да батыр булыр был», — тип һоҡланыр булғандар уға.

Егет ҡорона еткәндә ул, ысынлап та, атаһына ҡарағанда ла көслөрәк, мәргәнерәк була. Атанан күргән уҡ юна, тигәндәй, шәп ҡурайсы булып та даны тарала.

Һау сағымда башлы-күҙле итеп ҡалайым, тип, атаһы уға кәләш тә әйттерә. Күк толпарҙан тыуған күк дүнәнде бирә. Яҙҙың матур бер көнөндә йәш батыр ҡайны йортона китә. Ыҙмаға етер алдынан толпарын туғайға ебәрә был. Таң менән атын алырға тип барһа, ғәжәп моңло тауыш ишетеп, аптырап ҡала. Түҙмәй, йүгерә-атлай тауыш килгән яҡҡа китә. Яҡынлашып, күренмәй генә күҙәтә башлай. Ни күрһен, бер төркөм ваҡ ҡына күк торналар аҡлан уртаһына түңәрәкләнеп теҙел-

гәндәр ҙә уйнайҙар. Урталарында яңғыҙ торна баҫып тора. Ул, ҡанаттарын ҡағып, моңло тауыш сығарып ҡысҡырыу менән, ҡалғандары, уға ҡушылып ҡысҡырып, ҡанат ҡағып, түңәрәк буйлап әйләнәләр. Егет торналарҙың сыңлап сыҡҡан моңло тауыштарын йотлоғоп, йөрәгенә һеңгәнсе, отоп алғансы тыңлай. Шунан, онотолоп ҡуймаһын тип, ҡабатлай-ҡабатлай, тиҙ генә күк толпарын менә, уҡтай атылып, ҡайны йортона ҡайта. Аттан һикереп төшөү менән, ҡурайын алып, инде көй булып етешкән торна сыңрауын уйнап та ебәрә.

Халыҡ йыйыла. Олоһо ла, йәше лә, бала-сағаһы ла ҡалмай. Бер аҡ һаҡаллы ҡарт:

— Бындай ғәжәп моңло көйҙө ҡайҙан өйрәндең, әллә үҙең сығарҙыңмы? — тип һорай.

— Юҡ, олатай, — ти егет, ишеткән-күргәндәрен һөйләп бирә. Халыҡ үҙ-ара геүләшеп китә, күңелдәренә шик-шөбһә төшөп, йорт-илгә бәлә-ҡаза килмәһә ярар ине, тип борсола башлайҙар.

— Был бит сыңрау торналар тауышы. Улар уйнаған ерҙә яу булыр, халыҡ ҡырылыр, тигән атай-олатайҙар, — ти аҡ һаҡаллы ҡарт.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, батыр ашығыс рәүештә атаһы янына ҡайтып китә. Атаһына ҡайны йортонда күргән хәлдәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

— Дөрөҫ, улым, сыңрау торна уйнаған ерҙә яу булыр, илгә бөлгөнлөк килер, тигән боронғолар. Бындай яуҙарҙы атайың да күп күрҙе, — ти ҡарт батыр. — Хәҙер мин ҡартайҙым, көсөм дә ҡайтты, ҡоралдарымды һиңә тапшырам. Батыр бул, тоҡомға тап төшөрмә, илгә килгән дошманды аяуһыҙ ҡыр, илеңә, ырыуыңа тоғро бул, шунда ғына бәхетле булырһың. Васыят был. Хәҙер үк иң ышаныслы кешеләрҙән ғәскәр тупла…

Йәш батыр, тирә-яҡҡа оран һалып, ғәскәр туплаған, яуға әҙерләнгән, ти. Ысынлап та, күп тә үтмәй, илде яу баҫа. Батыр егет уҡсылары менән уға ҡаршы сыҡҡан, дошмандарын, күҙ күреме ерҙән уҡ менән атып, аяуһыҙ ҡырған.

Яуҙы баҫтырғас, бер нисә көн буйы байрам булған. Егетте ил батыры итеп данлағандар. Шунан бирле сыңрау торналарҙың моңо, ҡурайға һалынып, «Сыңрау торна» исеме менән йөрөтөлә.

1. Халыҡ хикәйәләренең ауыҙ-тел ижадындағы урынын билдәләгеҙ. Уларҙың жанр үҙенсәлектәрен барлағыҙ, үтәгән функцияларын (ни өсөн кәрәклеген) асыҡлағыҙ.
2. Халыҡ хикәйәләренең әкиәттәргә оҡшаш һәм уларҙан айырмалы яҡтарын билдәләгеҙ. Үҙегеҙ белгән хикәйәләрҙән, дәреслектә бирелгән текстарҙан миҫалдар килтерегеҙ.
3. Халыҡ хикәйәләре әлеге заманда ижад ителәме? Ни өсөн? Әңгәмә ҡороғоҙ. Фекерҙәрегеҙҙе бөгөнгө тормош менән бәйләп иҫбатлағыҙ.
4. Бирелгән халыҡ хикәйәләренең йөкмәткеләрен яҡшыраҡ үҙләштереү, мәғәнәләренә нығыраҡ төшөнөү өсөн бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
5. *Шик-шөбһә, бәлә-ҡаза, бала-саға, тирә-яҡ, йорт-ил* һүҙҙәренең яһалышына иғтибар итегеҙ. Уларҙың тәүҙә беренсе, шунан икенсе өлөштәрен алып ҡарағыҙ. Мәғәнә үҙгәрҙеме?
6. Ниндәй тауыш ул *моңло тауыш*? Ғөмүмән, тауыштың ниндәйҙәре була? Үҙегеҙ ишеткән тауыштарҙы теҙеп яҙығыҙ. Һеҙ уларҙың ниндәйҙәрен ишеткегеҙ килә? Ниндәйҙәрен — юҡ?
7. *Ауыҙ асып, йотлоғоп тыңлау* нисек була? Һеҙ дәрестә уҡытыусы һөйләгәндә нисек тыңлайһығыҙ?
8. *Йүгерә-атлап барыу, төкмәй-сәсмәй һөйләү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Был төшөнсәләр һеҙгә лә ҡағыламы? Мәҫәлән, *мәктәпкә йүгерә-атлап килеү, дәрестә белгәндәреңде төкмәй-сәсмәй һөйләп биреү*.
9. Ниндәй ара ул *күҙ күреме ер*? Ошолай сама менән әйтелгән үлсәмдәрҙе барлап ҡарағыҙ: а) оҙонлоҡ үлсәмдәре: *бер сирек, беләк буйы, бер аршын;* б) бейеклек үлсәмдәре: *тубыҡтан; муйындан, билдән;* в) ваҡыт үлсәмдәре: *күҙ асып йомғансы, оҙон көн буйы.*
10. *Егет ҡорона етеү, кәләш әйттереү, башлы-күҙле булыу* һүҙбәйләнештәренә айырым-айырым аңлатма бирегеҙ. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, бер-берегеҙ менән фекерләшеп, үҙегеҙ белгән-күргәндәргә таянып, кәләш әйттереү йолаһы тураһында яҙма белешмә төҙөгөҙ.
11. «Етегән йондоҙ» риүәйәтендә халыҡ ҡаҙанды көмөштән ҡоя. Был һөнәр нисек атала? Башҡорт халҡы был һөнәр менән нисәнсе быуатта шөғөлләнә? Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып, тарихи белешмә бирегеҙ.
12. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, оло быуын кешеләренән һорашып, халыҡ хикәйәләре яҙып алығыҙ. Хикәйәләрҙе ҡасан, кемдән яҙып алғанығыҙҙы күрһәтегеҙ. Тапҡан әҫәрҙәрегеҙҙән «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбом төҙөгөҙ.

13. Башҡорт сәнғәтендә сыңрау торналарға арналған «Сыңрау торна» исемле ниндәй сәнғәт әҫәрҙәрен ҡасан һәм кемдәр ижад иткән?
14. «Сыңрау торна» риүәйәтенән мәҡәл-әйтемдәрҙе, ырым-ышаныуҙарҙы күсереп яҙығыҙ һәм аңлатығыҙ.
15. «Сыңрау торна» балеты тураһында мәғлүмәтте уҡығыҙ һәм балетын ҡарап фекер алышығыҙ.

## «СЫҢРАУ ТОРНА» БАЛЕТЫ

«Сыңрау торна» — милли башҡорт балетының художество-эстетик принциптарын күп йылдарға билдәләгән һоҡландырғыс балет.

Беренсе милли сәхнә әҫәренә музыканы Лев Степанов ижад итә. Уның консультанты билдәле моң эйәһе Заһир Исмәғилев була. Ул Степановҡа башҡорт халыҡ музыкаһы серҙәрен аса. Башҡорт халыҡ көйҙәрен уйнай, йырҙарын башҡара. Либреттоны Фәйзи Ғәскәров ижад итә. Уны Зәйтүнә Насретдиноваға бағышлай.

Сюжет нигеҙендә халыҡ азатлығы һәм ғәҙеллек символы һаналған торналар тураһындағы боронғо легенда ята. Изге ҡоштар башҡорт халҡына дошмандарҙы еңергә һәм ғашиҡ йәрҙәргә бәхеттәрен табырға ярҙам итә.

1997 йылда Шамил Тереғолов «Сыңрау торна»ны яңынан тергеҙә. Яңыртылған спектакль Мәскәүҙә ҙур уңыш менән үтә.

Башҡорт балетының ҡаҙанышы «Сыңрау торна» балеты бөгөнгәсә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының балет афишаларын биҙәй.

**18-се күнегеү.** Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яттан яҙығыҙ.

**19-сы күнегеү.** Ҡылым кеше эшмәкәрлеге, тәбиғәт күренештәре нигеҙендә тыуған иҫәпһеҙ-хисапһыҙ эш-хәрәкәттәрҙе белдерә, тигәйнек. Түбәндә бирелгән мәғәнәләргә ярашлы ҡылымдар өҫтәп яҙығыҙ (кем күпме булдыра ала).

| | |
|---|---|
| Һөйләү, һөйләшеү ҡылымдары | *ҡысҡыра, ...* |
| Төҫ ҡылымдары | *ағара, ...* |
| Тәбиғәт тауыштары ҡылымдары | *күкрәй, ...* |

| | |
|---|---|
| Эш ҡылымдары | *быса, ...* |
| Ҡош-ҡорт* тауыштарын, эштәрен белдергән ҡылымдар | *һайрай, ...* |

**20-се күнегеү.** Йорт хайуандарының, ҡоштарының инә, ата, бала мал йәки ҡош икәнен белдереүсе һүҙҙәрҙе табығыҙ (А) һәм иғтибар итегеҙ (Б). Рус теленә тәржемә итегеҙ.

| | Инә | Ата | Бала |
|---|---|---|---|
| **А.** Һыйыр | һыйыр | үгеҙ | быҙау |
| Ат, йылҡы | ... | ... | ... |
| Тауыҡ | ... | ... | ... |
| Һарыҡ | ... | ... | ... |
| **Б.** Дөйә | дөйә | бура | бута |
| Ҡаҙ | инә ҡаҙ | ата ҡаҙ | ҡаҙ бәпкәһе |
| Үрҙәк (өйрәк) | инә үрҙәк | ата үрҙәк | үрҙәк бәпкәһе |
| Күркә | инә күркә | ата күркә | күркә себеше |

Ҡайһы йән эйәһенең төр исемдәрен белдереүсе һүҙҙәр беҙгә аңлашылмай? Дөйәнең. Ниңә? Хәҙер башҡорттар дөйә аҫрамайҙар, ә *бура* һүҙе сағыштырыуҙа ғына һаҡланып ҡалған. Әгәр берәйһенең һыйыры бик ҙур икәнде әйтергә теләһәләр, *уларҙың һыйыры буралай,* тиҙәр, йәғни һыйырҙары дөйә айғыры кеүек ҙур икән.

Ҡайһы йән эйәләренең бөтә төр исемдәре лә юҡ? Ҡаҙҙың, үрҙәктең, күркәнең. Ниңә? Сөнки башҡорттар был ҡоштарҙы һуңғы осорҙа ғына аҫрай башлағандар.

---

*** ҡорт** — борон йәнлектәрҙе ошо һүҙ менән атағандар. Шулай итеп ҡош-ҡорт һүҙе ҡоштарҙы, хайуандарҙы, йәнлектәрҙе белдергән.

## Башҡорттарҙың килеп сығышына, ырыу-ҡәбиләләр тарихына бәйле хикәйәләр

Кешеләр борон-борондан үҙҙәренең нәҫел-ырыуҙары, халыҡ булараҡ барлыҡҡа килеүҙәре менән ҡыҙыҡһынғандар, уны үҙҙәренсә аңлатырға тырышҡандар. Ырыу, ҡәбилә тарихында булып үткән ваҡиғалар, халыҡ хәтерендә быуындан быуынға күсә килеп, аҡрынлап уларҙың килеп сығышын күҙ алдына килтерерҙәй үҙенсәлекле хикәйәләр булып ойошҡандар. Был хикәйәләрҙең ҡайһы берҙәре әкиәткә тартым, уларҙа уйҙырма ваҡиғалар, фантастика өҫтөнлөк итә. Был бигерәк тә боронғо хәл-ваҡиғаларҙы аңлатыуға ҡоролған хикәйәләргә хас.

### ҮҪӘРГӘНДӘР

Минең атайым — Байрамғол исемле — боронғоно, ырыу тарихтарын, ауыл тарихтарын күп белә торғайны. Бала сағымда ла, үҫкәсерәк тә унның ололар менән һөйләшеп ултырғандарын гел тыңлай инем. Күбеһе хәҙер онотолған. Беҙҙең ырыу — үҫәргәндәр тураһындағыһы һаман иҫемдә.

Үҫәргәндәр борон бик ҙур ырыу булған, ти ине атайым. Көньяҡ Урал, Һаҡмар, Яйыҡ, Иҙел буйҙарында ғүмер иткәндәр. Көнкүрештәре малсылыҡ, йылҡысылыҡ булған.

Үҫәргәндәрҙең бабаһы — Муйтән бей. Шыма тәнле булғанға уны «Муйтән», тигәндәр. Муй — үҫәргәндәр һөйләүендә — «шыма» тигән һүҙ. Муйтән — шыма тәнле булып сыға инде. Әле лә беҙҙең яҡта, мәҫәлән, *һөйәкте муйын бөткәнсе кимерә* тиҙәр. (*Муйын бөткәнсе* — шымартып бөткәнсе.) Муйтән бейҙән таралған үҫәргәндәргә бер заман монголдар ябырыла. Үҫәргәндәрҙең Яйыҡ буйлап, Һаҡмар буйлап үҙҙәренсә нығытмалары, яу ҡайтарыр постары була.

Монголдарҙы шул крепость кеүек нығытмаларында йәшеренеп ҡаршылайҙар. Яман ҡаты һуғыш була. Ике яҡтан да күп халыҡ ҡырыла. Ышыҡта булғас, оборонала үҫәргәндәр әҙерәк ҡырыла.

Һаҡмар буйлап Һарыҡташ менән Ҡыуандыҡ араһында бер һырт һуҙыла. Шул һырт буйлап яу бик ҡаты булған. Был һыртты Яутүбә, ти халыҡ. Шул замандағы яуҙан ҡалған исем.

Шундай ҡаты нығытылған бер нисә посты көскә алғас, монголдар туҡтап ҡала. Нишләргә? Ары һуғышырғамы был халыҡ менән? Уйлайҙар: быларҙы тигеҙ ерҙә, далала, еңеп сығырлыҡ түгел, ҡыҫмаҡлап ары китһәң — урман, тау. Унда быларҙы ҡыйратыу, еңелдән булмаҫ.

Хәл ҡылалар — ары урман, тауға үтмәҫкә. Йайыҡ буйлап көньяҡлап быларҙы ситтә ҡалдырып, көнбайышҡа үтергә.

Шулай Йайыҡ буйында үҫәргәндәр ҡаты яу биргәндән һуң, монголдар Уралға үтмәй, Йайыҡ түбәнләп Болғар, Рус дәүләте яғына уҙалар яу менән. Болғарҙарҙы, рустарҙы еңгәс кенә, кире ҡайтып, башҡорттарҙы үҙҙәренә буйһондоралар. Үҫәргәндәр ҙә ҙур ырыу булһа ла, үҙҙәре генә еңерлек булмай, баш эйергә мәжбүр булалар.

Монголдар үҫәргәндәргә бик теймәй. Уларҙың ҡаты һуғышсы икәнен күреп, үҙ армияһына ылыҡтырырға тырыша. Бейҙәренә, ҙур түрәләренә дәрәжәләр, байлыҡ, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыу хоҡуғы ҡалдырып, үҫәргәндәрҙән ғәскәр йыйҙырталар.

Шул ғәскәр менән бергәләп төньяҡҡа табан яуға сығалар. Рязань кенәзлеген барып баҫалар. Ока буйҙарында ер-тәбиғәт матурлығын, туғайҙар тулы мал утлар үлән күплеген, урманын оҡшатып, үҫәргәндәр шунда төпләнмәк булалар.

Үҫәргәндәр борон алыҫ яу сапһалар, бөтә бала-сағаларын, бисәләрен, мал-мөлкәтен арбаларға тейәп, дөйәләргә артмаҡлап бергә алып йөрөр булғандар. Был яҡтарға ла улар шул бар донъялары менән бергә килгәндәр. Ока буйҙарында йорт-ҡура ҡораштырып, тирмәләр ҡороп йәшәп тә киткәндәр.

Үҫәргәндәрҙең ырыу ағасы — мышар. Шуға үҫәргәндәрҙең яусыллығынан, даусыллығынан уларға, былар мышар ҡанлылар, тип тә әйткән бүтән ырыу халҡы.

Шул үҫәргәндәрҙе аҙаҡ был тирәләге халыҡ «мышар ҡанлылар», «мышарҙар» тип исемләй башлаған. Мышар яйлап «мишәр» тигәнгә үҙгәргән. Хәҙерге Ҡасим мишәрҙәренең бер өлөшө — үҫәргән ырыуынан.

Үҫәргәндәрҙең хәҙерге һөйләшеүе менән мишәр теле бик яҡын. Күп боронғо һүҙҙәр, йолалар уртаҡ. Мишәрҙәр «ғ» хәрефен төшөрөп ҡалдырып, «Ғайса» тимәй, «Айса» ти, «Ғәйшә» тимәй, «Әйшә» ти. Хәҙерге үҫәргәндәр ҙә шулай һөйләшә. Рәүенкә — эсе серей башлаған ағас. Үҫәргән дә, мишәр ҙә шулай ти. Татар телендә ул һүҙ юҡ.

Һаҡмар, Яйыҡ, Илек буйында ҡалған үҫәргәндәр борон бик иркен йәшәгән, йәйләү, ҡышлау ерҙәре күп булған ишле мал-тыуар өсөн. Йәйгеһен йәйләүгә малдарҙы Яйыҡ, Һаҡмарҙан Илек аръяғына, Турғай далалары яғына ҡыуғандар. Уйыл, Тубыл яҡтары күп ваҡыт буш ятҡан. Ул ергә ҡаҙаҡтар ҙа, башҡорттар ҙа мал ҡыумаған. Быны элек «Дикое поле» тип йөрөткәндәр.

Бер заман ҡалмыҡтар Алатау, Балхаш яҡтарында ҡаҙаҡтарҙы ҡыйратҡас, күп ҡаҙаҡ ырыуҙары көнсығышҡа, төньяҡҡа ҡасҡан. Ҡаҙаҡтар ул ауыр заманды «ҡырғын заман» тиҙәр.

Шул ҡалмыҡтан ҡасҡандар башта «Дикое поле»ға килеп тулалар. Унан уҙып, Яйыҡ буйына килеп сығалар. Хатта башҡорттарҙы Уралға ҡыҫмаҡлай башлайҙар.

Был ҡаҙаҡтар ҡалмыҡ яуынан йортон-ерен ҡалдырып, күптәре ғаилә, мал-тыуарынан яҙып, ҡасып киткәс, башҡорттоң малын, ерен талауҙан, ҡатын-ҡыҙҙарын урлауҙан да буш ҡалмайҙар. Шулай ике арала барымта, ҡарымта китә.

Яйлап башҡорт-ҡаҙаҡ татыулашып, туғанлашып, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып та китә. Шуға беҙҙең яҡта үҫәргәндәр араһында ҡаҙаҡ аралары ла күп бит. Хәйбулла, Баймаҡ яғы ла шулай.

1. Хикәйәлә һеҙ белмәгән һүҙҙәр бармы? Уларҙы текстан табып, һүҙлек ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Үҙегеҙ белгән һүҙҙәр менән алмаштырып ҡарағыҙ.
2. Яңы һүҙҙәр араһында архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар бармы? Уларҙың ҡайһыһы күберәк? Ни өсөн? Сәбәптәрен асыҡларға тырышығыҙ.
3. *Хәл ҡылыу, баш эйеү, мәжбүр булыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙың ниндәй осраҡта ниндәй маҡсат менән һәм ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуын барлап ҡарағыҙ. Мәҫәлән, *баш эйеү:* дошманға бирелеү, ололарҙы сәләмләү, ил азатлығы өсөн ҡорбан булғандар иҫтәлегенә ихтирам күрһәтеү. Бындай миҫалдарҙы үҙегеҙ ҙә уйлап сығарып ҡарағыҙ.
4. Риүәйәттә ниндәй йылғалар, күлдәр, тауҙар һ. б. топонимик атамалар телгә алына? Уларҙы картанан табып, ваҡиғаларҙың ҡайһы тирәлә барғанлығын асыҡлағыҙ.

5. Текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөп, бер-берегеҙҙән интервью алығыҙ.
6. Ололарҙан һорашып һәр кем үҙ ырыуы тураһында белешмә төҙөһөн. Башҡорт булмаған балалар үҙенең туған халҡы тураһында белешмә төҙөһөн.
7. Риүәйәттең жанр булараҡ, йәғни халыҡ хикәйәһе булараҡ, үҙенсәлектәрен табығыҙ.

**21-се күнегеү.** Бирелгән ҡылым формаларын затлыларға һәм затһыҙҙарға бүлеп алығыҙ.

Уҡый, уҡыуы, уҡыныҡ, уҡығас, уҡығанға, уҡығандар, уҡып, уҡығанды, уҡыйым, уҡыһын, уҡырға, уҡығыҙ, уҡыһалар, уҡырһың, уҡыйыҡ.

**22-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Улар халыҡ тормошоноң ниндәй өлкәһенә ҡарай?

1. Аҡһаҡ булһа ла, үҙ атың булһын. 2. Андыҙ барҙа, ат үлмәҫ, атлы булһа, ир үлмәҫ. 3. Ҡолон аҫраһаң, ат менерһең. 4. Үгеҙҙе маҡта, атты ек. 5. Үҙ атыңды һынар өсөн, кеше атына ултыр. 6. Ябыҡ тайҙы хурлама, яҙҙы үтһә, ат булыр.

Мәҡәлдәрҙәге ҡылымдарҙы затһыҙ формаларға әйләндереп ҡарағыҙ.

Өлгө: *булһа — булып, булғас, ...*

**23-сө күнегеү.** Автобиографияғыҙҙы яҙығыҙ. Затлы ҡылымдарҙың аҫтына — ике, затһыҙҙарына бер һыҙыҡ һыҙығыҙ.

## Топонимик хикәйәләр

Уралдың гүзәл тәбиғәте борон-борондан үҙе бер сер донъяһы булған. Ул халыҡтың ижади фантазияһын уятҡан, күп һанлы поэтик әҫәрҙәр тыуҙырыу өсөн илһам биргән. Быindағы һәр тау, һәр йылға — тарих һөйләр ҡомартҡы.

Үҙ тарихында булған хәл-ваҡиғаларҙы халыҡ тыуған төйәгендәге ошо тауҙарға, йылғаларға бәйләп теркәп ҡалдырған.

Халыҡ хикәйәләре араһында ер-һыу, тау-таш атамаларына бәйле легендалар һәм риүәйәттәр ҙур бер төркөмдө тәшкил итә. Уларҙы топонимик хикәйәләр тип йөрөтәләр.

Халыҡ хикәйәләренең башҡа төрҙәре кеүек, топонимик хикәйәләрҙең күбеһе беҙгә килеп етмәй онотолған. Шулай ҙа хәтерендә байтаҡ хикәйәләр һаҡлаған аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр әле лә бар.

## ЫРҒЫҘ

Хәсән ауылында Яҡуп исемле кешенең бер генә ҡыҙы булған. Атаһы уны яратҡан, ҡыҙының малайҙар кеүек батыр йөрәкле булып үҫеүен теләгән.

Яҡуп үҙе бик яҡшы һунарсы, мәргән атыусы була. Ҡыҙын да ул үҙе кеүек ҡоралландыра, һунарға алып йөрөй, бәйгеләргә ат сабышына ебәрә.

Ул заманда күрше ҡәбиләләр араһында урман, мал йөрөтөү урыны, һыу өсөн ыҙғыш-талаш, һуғыштар булып торған. Был тирә башҡорттары күбеһенсә көтөүлек өсөн һуғышҡандар.

Ошондай һуғыштарҙың береһендә былар ҙа, аталы-ҡыҙлы икәү, ауылдаштары менән бергә яуға сыға. Ҡыҙ был яуҙа күп батырлыҡтар күрһәткән. Йән аямай һуғышып йөрөгәнендә, уның арҡаһына дошман уғы килеп ҡаҙала. Ҡыҙ һаман алға саба, һаман һуғыша, тамам хәле бөтә быныӊ, күҙ алды ҡараңғыланып китә. Әйләнеп ҡараһа, тирә-яғында бер кеше ҡалмаған. Батыр ҡыҙ эйәренә йығыла, ә һөйгән аты уны иленә алып ҡайта. Ҡыҙ үлә, аты хәлдән тая. Туҡтай. Ҡыҙ ҡолап төшә. Тоғро аты уны ташлап китмәй, шул тирәләге һаҙ үләндәрен ҡырып ашай-ашай ҙа, хужаһын торорға өндәп, уның янында ерҙе соҡой, сапсына икән. Шул саҡ тояҡ эҙенән һыу килеп сыҡҡан. Ат тояғы урынынан сыҡҡан һыу һалҡын шишмә булып, түбәнгә табан ер ярып ағып киткән.

Ҡыҙҙы сикһеҙ хөрмәтләп, шул урында ерләгәндәр. Уны: «Ир-ҡыҙ ине был!» — тип маҡтағандар. Ир-ҡыҙ атамаһы шунан ҡалған. Тора-бара шишмәне лә Ир-ҡыҙ һыуы тип йөрөтә башлағандар.

Йылдар үткән, был ҡыҙ тураһында иҫтәлек онотолмаған. Ир-ҡыҙ йылғаһы ла, исемен әҙерәк кенә үҙгәртеп, Ырғыҙға әүерелгән.

Халыҡ үҙенең батыр Ир-ҡыҙын да, тулы һыулы матур Ырғыҙын да күңелендә һаҡлай.

## ЙӨРӘКТАУ

Бынан бик күп йылдар элек ошо тауға яҡын ғына ауылдарҙың береһендә Айһылыу исемле бик сибәр бер ҡыҙ һәм батырлығы яғынан тирә-яҡта тиңе булмаған Ханбулат исемле бер егет йәшәгән, ти. Бала саҡтан уҡ бергә уйнап, бергә үҫкәндәр, бер-береһен яратышҡандар. Ҡыҙ үҫеп буйға еткәс, уны һоратып, бик күп яусылар килгән. Ә ҡыҙ иһә ныҡ торған, береһенә лә сығырға ризалыҡ бирмәгән. Ауылдың иң һаран, иң ҡанһыҙ, иң уҫал, иң ғәрсел байы Типтеғол яусы ебәргәс, ҡыҙҙың атаһы Айһылыуҙың ҡаршылығын еңгән, уны Типтеғол байға бишенсе бисәлеккә бирергә риза булған.

Иртәгә туй тигән көндө ҡыҙҙы Ханбулат урлап ҡасҡан.

Типтеғол бай шашынып әйткән:

— Миңә, ара-тирәне ҡулымда бейетеп тотҡан Типтеғол бай һынлы байға, ҡаршы сығырға йөрөгән егет донъяға тыумаған әле. Был мөртәтте донъяла йәшәтһәм, исемем Типтеғол булмаҫ. Йөрәген һурып алып эткә ашатам мин ул өтөктөң. Әйттем — бөттө. Минең һүҙем бер булыр!

Ҡыҙ менән егет йәй буйы тау-таш араһында, урманда ҡасып йәшәгән. Ҡаты һыуыҡтар башланғас, улар, йәшеренеп, төндә генә ауылға ҡайтҡандар. Быны һиҙеп ҡалғас, Типтеғол кешеләр яллаған. Ҡараңғы бер төндә байҙың ҡуштандары Ханбулатты тотоп, ошо тауға алып килтергәндәр. Типтеғол бай Ханбулаттың йөрәген һурып алып эттәргә ташлауы булған, көтмәгәндә бөркөт килеп сығып, йөрәкте үҙенең төйәгенә, бейектәге тауҙар ҡуйынына, күтәреп алып киткән.

Был енәйәтте бай тәрән сер итеп һаҡларға тырышҡан. Тик Айһылыуҙың йөрәген алдата алмаған. Айһылыу Ханбулатын эҙләп тапҡан. Уның өҫтөнә ятып, өс көн, өс төн илаған да:

— Һөйгән йәрем тере булмағас, йөрәгем ниңә кәрәк миңә? Был йөрәкте һиңә бирәйем, Ханбулатым: минең өсөн дә үс алырһың, — тип, йөрәген һурып алып, Ханбулаттың күкрәгенә һалған. Үҙе шунда уҡ үлгән. Ханбулат терелгән, һөйгәненең үле кәүҙәһен күреп, бөтәһен дә аңлаған. Ә йөрәк, ҡыҙҙың йөрәге, үҙҙәрен йәберләүселәргә ҡарата нәфрәт уты менән дөрләп янған. Шул көндән һуң, Ханбулат икеһе өсөн дә үс ала башлаған.

Бына шуға күрә Йөрәктау тип исем биргән халыҡ был тауға.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ. Уларҙы үҙегеҙҙең телмәрҙә ҡулланып, үҙ-ара һөйләшеп ҡарағыҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын асыҡлағыҙ.
3. Ҡасан була ул *үҫеп буйға етеү*? Һеҙ әле ул йәшкә еткәнһегеҙме? Үҫеп буйға еткән кеше ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?
4. *Хәлдән тайыу, йән аямай һуғышыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Текстарҙан улар ҡулланылған өлөштәрҙе табып уҡығыҙ.
5. *Бейетеп тотоу, дөрләп яныу* һүҙбәйләнештәрен нисек аңланығыҙ? Текста улар тура мәғәнәһендә ҡулланылғанмы? Һеҙ үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә ошоға оҡшаш һүҙбәйләнештәр ҡулланаһығыҙмы?
6. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: Ырғыҙ менән Йөрәктау атамаларының килеп сығышы, ысынлап та, ошо риүәйәттәрҙә әйтелгәнсә булдымы икән? Уларҙы икенсе төрлөрәк аңлатҡан риүәйәттәр юҡмы?
7. Килтерелгән текстарҙа әкиәттәргә хас үҙенсәлектәр бармы? Булһа, ни өсөн уларҙы әкиәт тимәйҙәр? Фекер алышығыҙ.
8. Ырғыҙ йылғаһының, Йөрәктау тауының ҡайҙалығын асыҡлағыҙ.
9. Үҙегеҙ йәшәгән ауыл (ҡасаба, ҡала) тирәһендәге йылғалар, күлдәр, тауҙар һ. б. тураһында риүәйәттәрҙең булыу-булмауын асыҡлағыҙ. Ололарҙан һорашып, яҙып алығыҙ, һәм «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбомығыҙға индерегеҙ.

**24-се күнегеү.** Тексты үҙ исемеңдән һөйләгән кеүек итеп үҙгәрт. Ниндәй үҙгәрештәр индерергә кәрәк булды?

— Ғәй-зул-ла-а-ау! Әйҙә сәй эсергә!

Ғәйзулла тертләне. Атаһы ҡысҡырған яҡҡа ҡараны. Төш етеүен дә һиҙмәй ҡалған. Таралышҡан быҙауҙарына иғтибар итмәйенсә, әләгә-йығыла төтөн сыҡҡан яҡҡа йүгерҙе. Күлдәге һәм ыштанының балаҡтары ағас ботаҡтарына эләгеп йыртылды. Яланғас аяҡтары түңгәктәргә төкөлдө. Ә ул, һаман хәл йыймайынса, йүгерҙе лә йүгерҙе. *(Я. Хамматовтан)*

**25-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дөрөҫләп яҙығыҙ.

Мин, мейестән күмер алып, стенаға үҙегеҙҙең адресыбыҙҙы яҙҙыҡ, шунан ҡыҙымды шинелгә төрөп күтәрҙең дә иптәштәрем артынан йүгерҙек.

Һуғыш тынып торған арала, ҡыҙымды мин яҡындағы ҡалалағы балалар йортона тапшырырға. «Оксананы килеп ал!» — тип әсәйегеҙгә шунда уҡ хат яҙғанһығыҙ. *(М.Кәримдән)*

**26-сы күнегеү.** Бирелгән ҡылымдарҙың һәр береһен айырым формаға ҡуйып, бөтәһен дә индереп, бер генә һөйләм төҙөгөҙ.

Ҡайт, кил, өшө, яу, юғалт.

## Ауыл тарихтарына бәйле хикәйәләр

Ауыл тарихтары топонимик хикәйәләрҙең ҙур бер өлөшөн тәшкил итә. Был төркөмгә ҡараған легендалар һәм риүәйәттәр йөкмәткеләре менән ырыу-ҡәбиләләрҙең, халыҡтың килеп сығышына бәйле легендаларға һәм риүәйәттәргә яҡын торалар. Уларҙа, ауыл исеменең килеп сығыуын аңлатыу менән бергә, йыш ҡына шул ауылда йәшәгән кешеләрҙең ниндәй ырыу-ҡәбиләнән икәнлеге, ниндәй аймаҡҡа, араға ҡарағанлығы тураһында ла мәғлүмәттәр бирелә.

## ЯМАШ МЕНӘН ЙОМАШ АУЫЛДАРЫ

Элек-элек заманда Һаҡмар буйында Бөрйән ырыуының Арыҫланғәле тигән ҡарты йәшәгән. Арыҫланғәле үҙенең бөтә ғүмерен айыу-бүре аулап, йәнлек ҡыуып үткәргән. Үҙе ҡартая башлағас, һөнәрен улдары Ямаш менән Йомашҡа өйрәтеп, суҡмар менән һыҙмаһын тоҙаҡ менән ҡапҡанға алмаштырып, ҡуян менән ҡама шикелле вағыраҡ йәнлектәргә генә йөрөй башлаған.

Ямаш менән Йомаш һунарға икешәр ат менеп йөрөр булғандар. Берәр атты менеп китәләр, икәүһе эйәрле көйө арттарынан эйәреп бара.

Көндәрҙең бер көнөндә, шулай бүре ҡыуып барғанда, улар бер аҡланда аттарын алмаштыралар. Тик алмашҡан аттар өйгә ҡайтмаған.

Иртәгеһен Ямаш менән Йомаш, таңдан уҡ тороп, эҙләргә сығып китәләр. Урманға инеүҙәре була, яңы ғына Урал тартып үткән бүре эҙе күренә. Ямаш менән Йомаш, аттарын онотоп, эҙҙе ҡыуа китәләр. Аттарға икенсе, өсөнсө, дүртенсе көндәрҙә лә барып булмай, оҙайлы бурандар башлана. Алтынсы көндә бер аҡланға килеп сығалар, аттар һаман юҡ.

Шулай ҡыш үтеп китә, йәй килә. Бесән ваҡытында Ямаш бер йылға буйына тейәк алырға төшә. Көтмәгәндә уға ат бышҡырған тауыш ишетелә. Барһа, әлеге ҡыш ҡалдырып киткән ике ат эйәрле көйө туғайҙа ашап йөрөйҙәр, ти. Аттарын алып ҡайтып, хәлде атаһына һөйләп бирә. Атаһы был хәлгә ғәжәпләнә. Күп кенә уйлап ултырғас, улына әйтә: «Улым, инде һинең йәшең еткән, өйлән дә шул аттар ҡышлаған йылға буйына күсеп ултыр, һинең бәхетең шул ҡотло йылға буйында булырға тейеш», — ти. Көҙгә Ямашты өйләндереп, әлеге аттар ҡышлаған йылға буйына күсереп тә ултыртҡандар. Шунан һуң был йылғаны Ҡышлау бар тип атағандар, һуңынан ул атама Ҡышлауар булып киткән. Аттар ҡыш буйы тибендә йөрөп сыҡҡан яланды Типкес яланы тип атағандар, ә төшөп һыу эскән урынды Типкес шишмәһе тип йөрөткәндәр. Аттары тәүҙә арып килеп еткән бәләкәй яланды Атйетәр яланы тип, шишмәһен Атйетәр шишмәһе тип йөрөткәндәр. Был ер, ысындан да, ҡотло булып сыҡҡан. Ямаштың малдары көтөү-көтөү булып үрсеп киткән. Ямаштың яҡындары Ҡышлауар йылғаһы буйына урынлашҡандар. Ҙур ауыл барлыҡҡа килгән. Атйетәр һәм Типкес һыуҙары Ҡышлауарға ҡоя. Ауылды иң беренсе булып килеп ултырыусыһы хөрмәтенә Ямаш тип атағандар.

Йомаш та өйләнгәс ошо уҡ йылға буйына күсергә теләгән икән. Ләкин атаһы рөхсәт итмәгән: «Кеше бәхете һиңә булмаҫ, улым, — тигән, — үҙ бәхетеңде үҙең эҙлә. Ҡышлауар йылғаһының Һаҡмарға ҡойған урынына бар ҙа түбәнгә, һыу ағышы буйлап кит. Һаҡмарға ҡойған һәр йылғаның һыуын эсеп ҡара, үҙең ҡайһыһын оҡшатһаң, шул йылға буйына күсеп ултырырһың», — тигән. Йомаш атаһы ҡушҡанса эшләй. Әйләнеп ҡайтҡас, атаһына һамаҡлап әйтә:

Һаҡмар буйлап түбәнгә
Утыҙ саҡрым ер үттем.
Аттан төшөп, тубыҡлап,
Өс йылғанан һыу эстем.

Дүртенсеһенә еткәс,
Атымдан һикереп төштөм,
Шул яланды иш иттем,
Шул туғайҙы хуш иттем.

Атаһы улын шунда күсерергә риза булған. Был йылға ла ҡотло булып сыҡҡан. Бер-ике йыл үтеүгә, малдары ишәйеп, көтөү-көтөү булып киткән, ти. Йылға буйында тағы ауыл барлыҡҡа килгән, ти. Йомаш ҡарт, үҙе иҫән саҡта, йылғаны Кеүәҫле тип йөрөткән, һуңынан уны Кеүәшле тип атағандар. Шул замандан алып ауылды Йомаш тип йөрөтәләр икән.

## МӘМБӘТ АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Боронғо замандарҙа башҡорт менән ҡаҙаҡ араһында, шулай уҡ башҡорттарҙың үҙ ырыуҙары араһында ла, барымта-ҡарымта сапҡындары була торған булған. Шундай бәрелештәрҙең береһендә башҡорт ырыуҙары ҙур бәләгә юлығалар. Бик күп мал-мөлкәттәрен юғалталар. Бер аҙ ваҡыт үткәс, башҡорт ырыуы, Йәнтүрә батыр етәкселегендә ҡаҙаҡ ырыуына ҡарымтаға бара. Был юлы ҡаҙаҡ ырыуы еңелә, башҡорттар ырыуы, бик күп мал-тыуар ҡыуып, байлыҡтарын алып ҡайталар. Мал менән бергә бер бәләкәс ҡаҙаҡ малайын да алып киләләр. Малайҙы Йәнтүрә батыр үҙенә ала. Йәнтүрәнең Һабыр исемле кешегә бурысы бар икән. Һабыр мал урынына ошо ҡаҙаҡ малайын һораған.

— Мин риза,— тигән Йәнтүрә батыр.

Иртәгеһен Һабыр ҡаҙаҡ малайы Мәмбәтте үҙе менән алып киткән. Шул көндән башлап, Мәмбәт Һабыр бабай ҡулында тәрбиәләнгән, егет булып үҫкән. Бер саҡ ауыл балалары тегенән: «Һин килмешәк»,— тип көлгәндәр. Мәмбәт ҡайтып Һабыр ҡартҡа һорау биргән:

— Мине ҡайҙан алдығыҙ?

Һабыр ҡарт дөрөҫөн әйтмәй булдыра алмаған.

— Һин ҡаҙаҡ балаһы, тыуған ерең — ҡаҙаҡ далаһы.

— Миңә эйәрләгән ат бир. Мин үҙ тыуған йортомдо ҡайтып күрәйем, — тип үтенгән Мәмбәт.

Бер нисә көндән һуң Мәмбәт үҙенең тыуған ерендә булған. Ҡаҙаҡтар уны йылы ҡаршы алғандар, һый-хөрмәт күрһәт-

кәндәр, үҙ кешеһе итергә тырышҡандар. Шулай ҙа Мәмбәт үҙенең тыуған еренә ерһенмәгән. Ул тиҙерәк үҫкән еренә ҡайтырға тырышҡан, тик ҡаҙаҡтар уны ебәрергә теләмәгәндәр. Ат-эйәрен йәшереп ҡуйғандар, һәр аҙымын күҙәткәндәр.

Шулай зарығып йөрөгән мәлендә уға бер еңгә тап килгән. Егеткә аҡыл өйрәткән.

— Беҙҙең тирмә янында эйәрле өс ат тора. Һин шуларҙың өсөһөн дә ысҡындыр, береһенә атланып сап, ҡалғандары үҙҙәре эйәрерҙәр, алмашлап атланып сабырһың, — тигән.

Мәмбәт теге аттарҙың береһенә атланып сапҡан. Йәйләүҙә саң-томан күтәрелгән. Ҡаҙаҡтар быны белеп ҡалып, ҡасҡын артынан төшкәндәр. Өс көн, өс төн Мәмбәт аттан атҡа атланып, үҫкән еренә, башҡорттар араһына, сапҡан. Ҡаҙаҡтар уның артынан етә алмағас, кире боролғандар. Мәмбәт иҫән-һау Һабыр бабай янына килеп ингән. «Рәхмәт рөхсәтеңә», — тигән ул, түбәнселек менән баш эйеп.

Мәмбәттең бөтөнләй үҙ янында ҡаласағын белгәс, Һабыр бабай уны өйләндерергә, мал-тыуар, ер бирергә булған. Икәүләп, ҡулайлы урын эҙләп киткәндәр. Эҙләй торғас, хәҙерге Мәмбәт ауылы тирәһенә килеп сыҡҡандар. Ошо ерҙәр уларҙың күңелен уятҡан. «Беҙҙең ырыу был ерҙә тиҙ үрсер, йылғаһы бар, урманы бар, малға бесәне бар»,— тигәндәр. Мәмбәт шунда оя ҡорған.

Мәмбәттең өс улы булған. Уларҙан нәҫел-ырыу таралып киткән.

Мәмбәт ауылынан ике утар бүленеп сыға. Хәҙерге көндә улар ҙур ауылдар (Сәғит, Таңатар ауылдары).

1. Ике хикәйәне лә иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Текстарҙың йөкмәткеләре буйынса һорауҙар төҙөп берберегеҙҙән интервью алығыҙ.
3. *Бәләгә юлығыу* һүҙбәйләнешенә иғтибар итегеҙ. *Юлығыу* һүҙе урынына уның синонимдарын ҡуйып ҡарағыҙ. Ҡайһыһы был осраҡта уңышлыраҡ? *Бәләгә* һүҙе урынына ниндәй һүҙҙәр ҡулланып була? Кеше тағы нимәләргә юлығырға мөмкин?
4. *Аҡыл өйрәтеү* һүҙбәйләнеше менән дә шундайыраҡ эш башҡарығыҙ. *Өйрәтеү* һүҙе урынына икенсе һүҙҙәр ҡуйып,

яңы һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. Мәғәнәләр үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ.

5. *Ошо ерҙәр уларҙың* ***күңелен уятҡан;*** *Мәмбәт шунда* ***оя ҡорган*** һөйләмдәрендә ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ.
6. Текстарҙың йөкмәткеләренән сығып, халыҡтың шул замандарҙағы тормош-көнкүрешен күҙ алдына килтерегеҙ. Кескәй белешмә төҙөгөҙ, һүрәттә сағылдырып ҡарағыҙ.
7. Риүәйәттәрҙә телгә алынған ауылдар әле бармы? Ҡайҙа урынлашҡан? Уларҙа ниндәй ырыу кешеләре йәшәй?
8. Үҙегеҙҙең ауылығыҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынығыҙ. Уның ҡасан, кемдәр тарафынан нигеҙләнеүен, унда ниндәй тарихи ваҡиғалар булыуын, элек һәм хәҙер кемдәр йәшәүен асыҡлағыҙ. Атай-әсәйегеҙҙән, ололарҙан һорашығыҙ.
9. Өлкәндәрҙән һорашып, үҙегеҙ йәшәгән төбәккә (ауыл, тау, йылға, күл һ. б.) бәйле берәй легенда яҙып алығыҙ һәм уны «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбомығыҙға индерегеҙ.
10. Ауыл тарихын белеү ни өсөн кәрәк? Шул темаға дискуссия ойошторoғоҙ.

**27-се күнегеү.** Алдағы текстың аҙаҡтан өсөнсө абзацындағы һөйләмдәрҙә затһыҙ формалағы ҡылымдарҙы затлыларға әйләндереп ҡарағыҙ. Уларҙың мәғәнәләрендә үҙгәреш бармы?

**28-се күнегеү.** Мәҡәлде уҡығыҙ. Уның мәғәнәһен раҫлап, хикәйә төҙөгөҙ.

Көйҙөргән дә тел, һөйҙөргән дә тел; бөлдөргән дә тел, көлдөргән дә тел.

**29-сы күнегеү.** Һүҙ төркөмдәрен иҫкә төшөрәйек.

1. Лексик составы иң бәләкәй, шул уҡ ваҡытта бөтмәҫ-төкәнмәҫ һүҙҙәр индерелгән һүҙ төркөмөн әйтегеҙ. Аңлатығыҙ.
2. Ни өсөн сифаттарҙың бер төрөн ш а р т л ы  с и ф а т тип атайҙар?
3. Зат алмаштарын яҙығыҙ. (6 һүҙ)
4. Сифат ҡасан әйәлек заты, килеш, һан менән үҙгәрә ала?
5. Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яҙығыҙ.
6. Һорау алмаштарынан ниндәй төркөмсәләр яһала ала?
7. 5, 6, 7, 10 һандарын һүҙ менән яҙып, бүлем һандары яһағыҙ.

## Тарихи хикәйәләр

Тарихилыҡ халыҡ хикәйәләренең, йәғни риүәйәттәрҙең һәм легендаларҙың, ниндәйҙер дәрәжәлә бөтәһендә лә бар. Тарихи хикәйәләр иһә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың конкрет тарихи ерлеге булыуы менән айырылып тора. Уларҙа тыуған илде һаҡлау, сит ил баҫҡынсыларына, милли һәм социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәш ваҡиғалары аша билдәлелек алған тарихи шәхестәр төп һүрәтләү объекты булып тора. Татар-монгол яуы, Алтын Урҙа хандары, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ барымталары, 1812 йылғы Ватан һуғышы, башҡорт ихтилалдары тураһындағы хикәйәләр, мәҫәлән, шундайҙар.

### БИКСУРА

Сарман ҡарт был урынға килеп ултырғансы, әле беҙҙең яҡтарға Сыңғыҙ, Батый сиреүҙәре килгәнсе, Ағиҙел тамағы, Ыҡ буйҙары, Мәллә менән Минзәлә йылғалары тәрән һыулы, балыҡлы булған, тирә-яғы ҡуйы урмандар менән ҡапланған. Ул ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Бына ошо урындарҙа бәйләр, бүләр тигән башҡорт ырыуҙары күсенеп йөрөгәндәр. Улар иркен йәшәгәндәр. Тапҡан аҙыҡ, мал-мөлкәт уртаҡ булған. Шулай тыныс ҡына йәшәгәндә, Болғар илен баҫып алырға барыусы Батый хан сиреүе был яҡтарға килеп сыға, халыҡты аҫа-киҫә, мал-мөлкәтен талай башлай. Минзәлә менән Ыҡ йылғалары араһында күсеп йөрөп тереклек итеүсе Ҡарағай-Атай ырыуы айырыуса ҙур ҡайғыға дусар була. Сиреү башлығы алдында бил бөкмәгән көмөш һаҡаллы Ҡарағай-Атайҙы бөтөн нәҫел-нәсәбе алдында һуҡтыралар. Ат тубығынан ҡалҡыуыраҡ булған барлыҡ ир затының башын ҡырҡалар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсир итәләр. Барлыҡ мал-мөлкәт, йылҡы көтөүҙәрен тартып алалар. Хәҙер Ҡаланса тауы тип йөрөтөлгән Әбей тауында Ҡарағай-Атайҙың ҡатыны Аҫылташ ҡына иңрәп тороп ҡала. Үҙенең килендәре, ейәндәре менән ул бер ҡарт имән төбөнә килеп туплана.

Шул ваҡыт һунарҙан Ҡарағай-Атайҙың оло улы Биксура ҡайта. Ул, башта яландағы ауыр хәлде күреп, тораташ булып ҡатып ҡала. Ҡарт әсәһенең илай-илай әйткән хәбәрен тыңлап тора ла, бөтә нәҫел-ырыуы менән, биләүҙәге улы менән

хушлашып, арғымағын менеп, бәйләр, ыласын, бүре ырыуҙарына саба. Батыр, ут-һыу кисергә әҙер торған егеттәрҙе туплап, Батый ханға ҡаршы сыға. Болғар ҡалаһына һөжүмгә барыусы Батый хан сиреүе яугирҙарын аңдып тороп, ҡырып ташлай. Батый хандың Болғарға беренсе һөжүме өҙөлә.

Ике-өс йылдан һуң Батый хан Болғар иленә тағы ҙур ғәскәр ташлай. Биксура үҙенең егеттәрен тағы туплап ала ла тағы ҡаршы сыға. Бер бәрелештә ул ҡаты яралана, Әхмәт исемле дуҫы менән Текәй тип йөрөтөлә торған тауҙар аша урман яғына ҡаса. Бер аҙ барғас, Биксураның хәле ауырая, ул хәҙерге Яңы Әхмәт ауылы зыяраты урынында үлә. Дуҫы Әхмәт уны ерләй ҙә, шул урында үҙе нигеҙ һалып, ултырып ҡала. Дошман сиреүе йыраҡлашҡас, ул Ҡарағай-Атайҙың ҡалған нәҫел-ырыуын үҙ ҡанат аҫтына ала, яңы ил ҡороп ебәрә.

## БОШМАН-ҠЫПСАҠ БАТЫР

Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Теләүле, Бөрйән, Юрматы — бер атанан таралған уландар, бер туғандар. Уларҙың тоҡомдары борон Ыҡ, Яйыҡ, Ағиҙел, Сулман иҙеле буйҙарында йәйелеп, йылҡысылыҡ менән көн күргән. Малдарының иҫәбе булмаған. Улар меңәрләгән баш көтөү-көтөү булып ерҙе ҡара ябып йөрөр булған. Шуға улар яҡшынан-яҡшы, үләнле йәйләүлектәргә гел күсенеп йөрөгәндәр.

Бер заман Алтай тауы яҡтарынан бик яман бер ҡара яу килгән. Аңғармаҫтан ҡалҡҡан был яу икһеҙ-сикһеҙ далаларға таралған. Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Бөрйән, Теләүле, Юрматы илдәрен берәм-берәм ҡыйратып үткән. Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Бөрйәндәр Яйыҡ буйында бер яу биреп ҡарағандар, әммә, һанһыҙ ғәскәрҙән еңелеп, урман-тауҙар араһына ҡасҡандар.

Ҡыпсаҡтар бик үрсемле ил булған. Ҡыпсаҡтан Гәрәй-Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, тағы әллә ни хәтле ырыуҙар таралған. Улар яусыл да, даусыл да, уҡымышлы ла, хәйләкәр ҙә булған. Яусыл, бик сая һуғышыусан батыр ырыу икәнен күреп, әлеге ҡара яуҙың ханы быларҙы бүләк, ер-мөлкәт менән дә үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шунан ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө шул ғәскәргә ҡушылып киткән, ти.

Ә Бошман-Ҡыпсаҡ батыр, ханға баш һалмай, шимал яҡҡа урман-тауҙарға ҡасҡан. Шунда ғәскәр йыйып, хан ғәскәренә

ҡаршы яу асҡан. Уны бик оҙаҡ яулашҡан, тиҙәр. Тик аҙаҡтан бер хыянатсы арҡаһында ғәскәре ҡамап алынған, һуңғы кешеһенә тиклем ҡыйратылған.

Ҡулға алғас, хан Бошман-Ҡыпсаҡ батырҙы үҙенә саҡыртып килтергән, ти. Уны ярлыҡап, үҙ яғына алырға, үҙенең бер ғәскәре башы итергә теләгән. Батыр күнмәгән. «Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй», — тигән ул. Хан уны яҙалатып үлтерткән.

Был яҡтарҙа, Ыҡ, Ағиҙел буйҙарында, хәҙер ҙә Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Юрматы, Теләүле тигән ауылдар бар. Улар ана шул ырыуҙарҙан ҡалған. Борон уларҙың ошо тирәләрҙә йыйылып кәңәшләшергә ҙур йыйын майҙаны ла булған, тиҙәр.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, күсереп алығыҙ. Мәғәнәләрен асыҡлап, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.
2. Ҡарағай-Атайҙың һаҡалы ни өсөн көмөш икән? Алтын, тимер, бронза һ. б. һаҡалдар ҙа буламы?
3. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: *ҡош-ҡорт, ут-һыу, нәҫел-ырыу, мал-мөлкәт, урман-тауҙар* кеүек һүҙҙәр нисек яһалған? Шуларға өҫтәп, үҙегеҙ ҙә миҫалдар килтерегеҙ. Һеҙҙең телмәрегеҙҙә лә ошондай һүҙҙәр осраймы? Уларҙың телмәрҙә булыуы йәки булмауы нимә тураһында һөйләй?
4. *Улар* (башҡорт ырыуҙары) *иркен йәшәгәндәр.* Һеҙ быны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?
5. *Бил бөгөү, ҡанат аҫтына алыу, көн күреү* һүҙбәйләнештәре (фразеологизмдары) нимә аңлата? Асыҡлағыҙ. Уларҙың төрлө мәғәнә төҫмөрҙәрен барлап ҡарағыҙ.
6. «Биксура» риүәйәтендә лә, «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр» риүәйәтендә лә бер осор ваҡиғалары һүрәтләнә. Ҡайһы осор ул? Һеҙ быны нимәгә ҡарап белдегеҙ?
7. Хикәйәләрҙә ниндәй башҡорт ырыуҙары телгә алына? Уларҙың исемдәрен яҙып алығыҙ. Был ырыуҙар ҡайҙа йәшәй? Асыҡлағыҙ.
8. Текстарҙа телгә алынған йылға, тау, тарихи шәхестәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ.
9. *Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй* мәҡәленең мәғәнәһен нисек аңланығыҙ? Фекер алышығыҙ.

10. Хикәйәләрҙең текстары өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
11. Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Юрматы, Теләүле ауылдарын Башҡортостан картаһынан табып, ниндәй район, өлкәләргә ҡарауын асыҡлап яҙығыҙ.

**30-сы күнегеү.** Аңлатмаларға ярашлы һүҙҙәрҙе табығыҙ.

Еңгәмдең ҡустыһы; әсәйемдең атаһы; әсәйемдең ағаһы; һеңлемдең ҡустыһы; өләсәйемдең ҡустыһы; атайыма ағай; еңгәмдең ире; еҙнәмдең балдыҙы (ҡәйнеше); өләсәйемдең берҙән-бер ҡыҙы.

## ҮҘ АЛЛЫ ҺӘМ ЯРҘАМСЫ ҠЫЛЫМДАР

Башҡорт телендә ҡылымдың һүҙ формалары иҫ киткес күп, тип әйткәйнек. Шул яғы менән ул башҡа һүҙ төркөмдәренән айырылып тора. Ҡылымдың тағы бер үҙенсәлеге — уның **үҙ аллы** һәм **ярҙамсы ҡылымдарға** бүленеүендә.

Ярҙамсы ҡылымдар күп түгел. Саф ярҙамсы ҡылымдар башҡорт телендә юҡ тип әйтерлек. Күпселек ярҙамсы ҡылымдар, үҙ аллы ҡылымға эйәреп килһә генә, ярҙамсыға әүерелә. Ә яңғыҙ ҡулланылһа, улар, ғәҙәттә, үҙ аллы булалар. Түбәндәге ҡылымдар ярҙамсы ҡылым була ала: *бул, башла, ин, кил, кит, ал, ултыр, ят, ҡуй, тор, һал, бөт, ҡал.* Сағыштырығыҙ: *концерт* ***булды****, өҫтәлгә* ***һал****, дәрес* ***башланды*** (үҙ аллы ҡылымдар); *әйткән* ***булды****, йүгерә* ***һал****, уйнай* ***башланы*** (ярҙамсы ҡылымдар).

**31-се күнегеү.** Түбәндәге йомаҡты уҡығыҙ. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы табығыҙ.

Бер кеше төшөндә йыйынып күлгә балыҡ тоторға китә. Ҡапыл көслө ел сығып китеп, уның кәмәһе бата башлай. Балыҡсы ҡысҡыра, ярҙам һорап ҡарай, ләкин уға һис кем ярҙам итә алмай. Уны нисек ҡотҡарырға була?

## Тормош-көнкүреш хикәйәләре

Халыҡ хикәйәләренең ҙур бер өлөшөн тормош-көнкүреш риүәйәттәре тәшкил итә. Уларҙың нигеҙендә көндәлек тормоштағы хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлау ята. Башҡорт ырыуҙарының хужалыҡ итеү формалары, ғаилә мөнәсәбәттәре, байрамдар, ырыу-ара мөнәсәбәттәр бында төп һүрәтләү объекты булып тора. Ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, ҡатын-ҡыҙ яҙмышы хаҡындағы риүәйәттәр күп. Улар араһында ошо йолаларға бәйле фажиғәле ваҡиғаларҙы тасуирлағандары ла байтаҡ.

## ҒИЛМИЯЗА

Бөрйәндең Иҫке бей менән Үҫәргәндең Бикбау бейҙең ырыу көсөн һынау өсөн йыйылған бәйгеһе була. Ат сабыштырыла, батырҙар көрәштерелә, йырсылар йырлатыла, сәсәндәр һөйләтелә. Был бәйгелә Бөрйәндең ҡара аты уҙа. Бөтә йырсылар араһында Бөрйән ырыуы йырсыһы Ғилмияза өҫтөнлөк ала.

Бикбау бей быға түҙә алмай. Бөтә ҡуштандарын, батырҙарын йыйып әйтә:

— Бөрйән атын уҙырлыҡ ат табығыҙ. Ғилмиязаны еңерлек йырсы табығыҙ, булмай икән, уларҙы Бөрйән ырыуынан юҡ итегеҙ! — ти. Шунан ат-хат еткән ергә кешеләрен ебәрә.

Саҡырыу буйынса күп ат килгән. Күп йырсылар йыйылған. Бер ат та, бер йырсы ла Бикбау бейҙең күңелен баҫмаған. Халыҡ араһында гел әлеге Бөрйәндең йүгерек ҡара атын маҡтайҙар икән. Ғилмиязаны данлап йырлайҙар икән. Бикбау бейҙең ҡуштандары ятып ҡалмаған. Ат эҙләп, ҡаҙаҡ сәхрәһенә сығып киткәндәр. Унан бер йүгерек ат табып, өс ҡаҙаҡ егетен эйәртеп, Бикбау бейгә алып ҡайтып биргәндәр. Ат Бикбау бейгә оҡшаған. Ҡаҙаҡ егетенең икеһенә мал биреп, кире оҙатҡандар. Береһенә ҡыҙ табып бирмәк булып, көттөргәндәр. Шул егетте эйәртеп, Бикбау түрә ҡуштандары яланға сығып киткәндәр.

Ирәндек тауының битендә еләктән ҡайтып килгән ҡыҙҙар, йыйылышып, ял итергә ултырғандар ҙа, көлөшөп, «биш таш» уйнайҙар икән. Былар араһында Ғилмияза ла булған.

Ғилмияза эш эшләгәндә лә, уйнағанда ла һәр саҡ йырлап, көйләп, йә булмаһа таҡмаҡ әйтеп ултырырға ярата икән. Ҡуштандар күренмәй генә ҡаҙаҡ егетенә быны күрһәткәндәр. Ҡаҙаҡ егете туп-тура ҡыҙҙар янына сабып барған да, Ғилмияҙаны бәйләп, ат өҫтөнә һалып, күҙҙән юғалған. Ҡыҙҙар ҡайта һалып ғауға һалған. Тирә-яҡҡа ат ебәргәндәр. Эҙенә төшә алмағандар. Урлаусының ҡаҙаҡ егете икәнен асыҡ белгәс, Бикбау ырыуына бәйләнә алмағандар. Ғилмияза ят илдә үҙенең йөрәк бауырынан һөйләшерлек кеше тапмаған. Тапһа ла, телдәрен аңлай алмай, ауырлыҡ өҫтөнә ауырлыҡ кисергән. Илен-һыуын һағынып йырлаған:

Һаҡмар ғына аға(лай) төшкә табан,
Урал тауы ята(лай) көн битләп;
Үҙ илкәйемә лә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа(лай), имгәкләп.
Был илкәйҙәрҙең дә, ай, аттары
Ҡырлас яллы, көм(ө)рө(ләй) билле икән;
Төньяғынан иҫкән епшек елдәр
Урал буйҡайынан да килә икән.
Йәштән генә менгән туры атымдай,
Ялбыр яллы аттар ҙа юҡ икән;
Ҡайғыларым таркап һөйләшерҙәй,
Телем аңлар берәү(ҙәй) юҡ икән.
Ирәндеккәй тауы, ай, ҡырлас тау,
Иҫке менән Бикбау төйәге;
Мине урлатып, инде Бикбау бейҙең
Мөрхәтһенде микән теләге?

Ғилмияза матур, асыҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле булған. Ниндәй генә ауыр саҡтар кисерһә лә, түҙергә тырышҡан. Уның был матурлығынан көнләшкәндәр. Аҙаҡ сиктә Ғилмиязаның ҡаҙаҡ сәхрәһендә икәнлеге Бөрйән ырыуына ишетелгән.

Бөрйән ырыуы батырҙары, был хәбәрҙе ишеткәс, ҡул ҡаушырып ҡалмаған. Төпсөп асылын белгәндәр ҙә, яу һалып, Ғилмиязаны ҡаҙаҡ иленән тартып алып ҡайтҡандар. Бикбау бейҙең усаллығы асылған, уларға «үс алған» (үс алыусы) ырыу тигән атама биргәндәр. Тора-бара был атама үҙгәреп «Үҫәргән» булып ҡалған.

Бикбау бей быны менән генә ҡуймаған. Ғилмиязаны икенсе берәүгә көсләп бирергә булған. Уны бығаса күрмәгән,

танымаған бер егеткә көсләп биргәндәр. Үҫәргән ырыуына — Бикбау тупрағына Ғилмияза килен итеп оҙатылған.

Ғилмияза үҙен оҙатҡан саҡта атаһына былай тип йырлай:

Ирәндеккәй буйы яландыр,
Яландары тәп-тәп ҡылғандыр;
Атаҡайым, инде мин китәмен,
Тәҡдирҙәрем шулай булғандыр.
Атаҡайым мине ситкә бирҙе,
Ҡарыу йырҙарымдан туйғандыр;
Яулы ғына илгә тотоп бирҙе —
Көн күрә алмаһын, ти торғандыр.
Ҡара ла сәсем минең, ай, билемдә,
Китмәҫ тә генә инем илемдән;
Нисек итеп китмәй тора алайым,
Атаҡайым ҡыуғас та өйөнән.
Иртәнсәккәй тороп йыр йырлаһам,
Таңғы йоҡоларҙан да уяттым,
Бикбау бейҙең, атай, хәтере өсөн,
Һөймәгәнгә биреп илаттың.

Әсәһенә былай тип йырлаған:

Күк йөҙөндә йөҙгән таңғы айҙың
Шәүләләре төшөр битеңә;
Ҡанлы йәштәр түгеп илағанда,
Ғилмиязаң төшөр иҫеңә.

Ғилмиязаға шул китеүҙән тыуған яҡтарын ҡабат ҡайтып күрергә яҙмаған. Уның моңло көйө, зарлы йырҙары, халыҡ күңелендә һаҡланып, мәңгелек ҡомартҡы булып ҡалған.

## ЗӨЛХИЗӘ

Ҡушмөхәмәт менән Ишмөхәмәт тигән ике һунарсы булған. Былар икеһе бик дуҫ булған. Халыҡ, уларҙың исемен боҙоп, Ишәй менән Ҡушай тип йөрөткән. Ана шулай бер ҡашыҡтан ашап, бер туҫтаҡтан эсеп йөрөгән кешеләргә, хатта бергә йөрөй торған өйөрһөк малдарға ла: «Ишәй менән Ҡушай кеүек бергә йөрөйҙәр», — тип әйтер булғандар. Былар, һунарға йөрөй

торғас, оһолдарын арттырғандан-арттыра барғандар. Бөтә тирә-яҡта данлы һунарсы булып киткәндәр. Халыҡ телендә маҡталып һөйләнгәс, быларҙың икәү-ара дуҫлығы артҡан-дан-артҡан. Шуға күрә былар, бер көн һунарҙан ҡайтып килгәндә, шундай һүҙ ҡуйышҡандар.

Ҡушай әйткән:

— Ишәй дуҫ, икебеҙҙең дә бисәләр бер мәлдә буйға ҡалды. Әгәр беребеҙҙең — ул, беребеҙҙең ҡыҙ бала тыуһа, ҡоҙа булышайыҡ, — тигән. Ишәй ҙә быны ҡеүәтләгән:

— Була ул, — тигән, — дуҫ та булырбыҙ, ҡоҙа ла булырбыҙ. Бутҡаны май боҙмай тигәндәй, уның менән дуҫлыҡ боҙолмаҫ, — тигән.

Ҡайтыуҙарына: «Ҡушай ағай, ҡыҙың бар! Ишәй ағай, улың бар!» — тип һөйөнсөләп торалар, ти, быларҙы.

Ишәй әйткән:

— Фәрештәнең амин тигәненә тура килде бит, — тигән.

Ҡушай әйткән:

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, ҡоҙа булабыҙ, — тигән.

Былар, ҡул тотошоп, балаларға бүләктәр әйткәндәр. «Бишек туйы» уҙғарырға, тип һүҙ ҡуйышҡандар.

Ишәй менән Ҡушай һаман һунарға йөрөгән. Балаларының ҡырҡы тулғас, «Бишек туйы» йыйып, Ҡушай ҡыҙына — Зөлхизә, Ишәй улына Вәли тип исем ҡушҡандар.

Ишәй менән Ҡушай һаман, боронғоса дуҫ булып, һунарға йөрөй. Вәли менән Зөлхизә, ай-йыл һанап, һаман үҫә. Вәли атҡа менерлек була. Зөлхизә көйәнтә күтәрерлек булып китә. Ике ҡоҙа «һырға туйы» уҙғарып ташлаған. Балаларҙың береһен — килен, икенсеһен кейәү, тип йөрөй башлағандар.

Берҙән-бер көн ер-һыуы таныш булмаған яҡҡа һунарға барған саҡта, Ишәй аңһыҙҙан шаршыға осҡан да, һыуыҡ тейҙереп ҡайтып, шунан мандый алмай үлеп киткән.

Ҡушай, яңғыҙ ҡалһа ла, бүтән һунарсыларға ҡушылмай икән. Яңғыҙ үҙе йөрөһә лә йәнлекһеҙ ҡайтмай, дуҫының данын юғалтмай йәшәгән.

Үҙҙәре менән бергә һунарға йөрөү өсөн, Ҡушайҙы тирә-яҡтағы байҙар саҡырта башлағандар. Ҡушай риза булған.

Берҙән-бер көн Йәнтүрә исемле данлыҡлы бай Ҡушайҙы бисәһе менән ҡунаҡҡа саҡырған. Бер нисә көн ҡунаҡ иткән. Был Йәнтүрә бай тирә-яҡта байлыҡ менән дә, һаранлыҡ менән

дә дан алған кеше булған. Уны халыҡ «Йәнтей ҡарун» тип йөрөткән. Ҡушайҙы саҡырып, ҙур бүләк биреп ҡайтарғанын ишеткәс, халыҡ араһында аптырап: «Таштан йүкә һуйылыр икән», — тип һөйләгәндәр, ти.

Күп тә тә үтмәй, Йәнтей бай Ҡушайға:

— Зөлхизәң бик һылыу булып үҫеп еткән икән, шуны анау Ишәйҙең улына биреп әрәм итмә. Үҙемә йәш кәләшлеккә бир ҙә ҡуй, ебәккә уратып ҡына йөрөтөрмөн, — тигән.

Ҡушай Зөлхизәне Йәнтейгә өсөнсө бисәлеккә бирергә риза булған. Шунан Вәлиҙе саҡырып алған да:

— Атайың үлде, уртаҡ айырылды. Һин инде минең ҡыҙыма ымһынып йөрөмә: ул ҡыҙ һиңә буласаҡ түгел, — тигән.

Вәли менән Зөлхизә хәҙер нисек тә ҡасыу яғын ҡайғыртҡандар.

Билдәләнгән көнгә Йәнтейҙең туйына ҡоҙалар килгән. Ашау-эсеү башланған. Уйын-көлкө дауам иткән. Шул бола осоронда Вәли менән Зөлхизә ҡасып киткәндәр. Зөлхизәне күҙәтеп йөрөгән егеттәр, һиҙеп ҡалып, Ҡушайға килеп әйткәндәр. Ҡушай атҡа менеп, бер нисә кеше эйәртеп ҡыуа сыҡҡан. Вәли менән Зөлхизә, атҡа менеп, күп тә китеп өлгөрмәгән — уларҙы ҡыуып етеп, ҡамап та алғандар. Вәли ҡасып ҡотолған. Зөлхизәне тотоп, ат ҡойроғона тағып, ҡамсы менән ярып, йәйәүләтеп алып ҡайтҡандар. Вәли шул китеүҙән юҡ булған. Ҡасҡылар араһында йөрөп, үҙенә иш йыйып, Зөлхизәне урларға уйлаһа ла, өлгөрә алмаған — Зөлхизәне Йәнтейҙең йортона оҙатҡандар. Зөлхизә Вәлиҙе онота алмаған, уны һағынып, көндән-көн кипкән, һарғайған. Вәли, күп ерҙәрҙә булып, йөрөй торғас, Йәнтейҙең йәйләүенә килеп сыҡҡан. Төн уртаһы еткәс, Йәнтейҙең тирмәһе ҡаршыһына килгән дә былай тип йырлаған:

Ялан ғына ерҙән дәй болан килә, Зөлхизә,
Уйһыу еркәйҙәрҙән дәй, ай, түтә, тип, Зөлхизә,
Төн уртаһы еткәс тәй, бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Йәш ғүмерем зая лай, ай, үтә, тип, Зөлхизә.
Кәкүк тә генә ҡоштоң, ай, балаһы, Зөлхизә,
Сит ояларҙа үҫә ләй, ай, ят булып, Зөлхизә.

Ҡанлы йәштәр түгеп тәй бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Көләс ғүмерем үтә ләй ут булып, тип, Зөлхизә…
Һыҙылып тай таңдар атҡан саҡта, Зөлхизә,
Һандуғасҡай һайрай ҙай сут-сут, тип, Зөлхизә.
Мендәрҙәр ҙәй ҡосаҡлап бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Һөйгән егеткәйем дәй юҡ-юҡ, тип, Зөлхизә…

Вәлиҙең йырын ишетеп, Зөлхизә һиҫкәнеп уянып киткән. Шунда уҡ сығып ҡасырға уйлаһа ла, ҡотола алмаған — Йәнтей ҙә уянып киткән. Вәли көткән-көткән дә, Зөлхизә сыҡмағас, кире китеп барған…

Ә Зөлхизәне йоҡо алмаған. Таң беленгәс, һыйыр һауырға сығыу һылтауы менән сыҡҡан да йыр тауышы килгән яҡҡа барып, ҡамыш, тал араларынан эҙләп таба алмағас, ултырып илаған-илаған да кире ҡайтҡан.

Вәлиҙе эҙләргә Йәнтей бай кешеләр ебәргән. Эҙләй торғас, улар бер һайыҫҡан шыҡырыҡлаған ергә барһалар, йоҡлап ятҡан Вәлиҙе күреп ҡалғандар. Уятып-нитеп тормағандар, шул урында йөрәгенә хәнйәр ҡаҙағандар. Береһе Йәнтей байға һөйөнсөгә сапҡан. Йәнтей бай Вәлиҙе үҙ күҙе менән күргәс кенә ышанған. Үлтереүселәргә мал биреп, ҙур туй яһаған. Зөлхизә, Йәнтейҙең ҡулында ҡалһа ла, Вәлиҙе онотмаған. Көндән-көн һарғайып кипкән. Ахыр сиктә диуана булып үлгән, ти.

1. «Ғилмияза», «Зөлхизә» риүәйәттәрендә осраған яңы һүҙҙәрҙе табып, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар араһында неологизмдар бармы? Ни өсөн?
2. Ике риүәйәтте лә иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеп, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
3. «Зөлхизә» риүәйәтендә Йәнтей бай кешеләре Вәлиҙе һайыҫҡан шыҡырыҡлаған тауышҡа килеп табалар.
   Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: ҡайһы ҡош ниндәй тауыш сығара:

   һайыҫҡан — шыҡырыҡлай;
   һандуғас — …
   кәкүк — …
   тауыҡ — …
   ҡаҙ — …
   торна — …
   …

Дауам итегеҙ. Кем күберәк тапты?

4. Ғилмиязаны Ирәндек тауының битендә ултырғанда урлап алып китәләр. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн халыҡ тауға ҡарата кешенең тән ағзаларының исемен ҡулланған икән? Мәҫәлән, *тауҙың башы, бите, һырты, арҡаһы* һ. б. Исемлекте дауам итегеҙ. Фекер алышығыҙ. Тапҡан һүҙҙәрегеҙҙе рус теленә тәржемә итеп яҙығыҙ.
5. *Ҡул ҡаушырып ҡалыу, ятып ҡалыу* һүҙбәйләнештәренең «Ғилмияза» риүәйәтендә нимә аңлатҡанын асыҡлағыҙ. Уларҙың тағы ла ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуы мөмкин? Миҫалдар килтерегеҙ.
6. Ниндәй ваҡыт ул *фәрештәләрҙең амин тигән сағы*? Мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
7. Риүәйәттәрҙә осраған мәҡәлдәрҙе күсереп алығыҙ. Уларҙың русса вариантын табығыҙ.
8. Атай-әсәйегеҙҙән, ололарҙан һорашып, халыҡ ижады китаптарынан ҡарап, һырға туйы тураһында белешмә төҙөгөҙ. Бөгөнгө көндә һырға туйы үткәреләме?
9. Риүәйәттәрҙә боронғо башҡорттарҙың тормош-көнкүреше нисек тасуирлана? Ул ваҡыттағы ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, мәҫәлән, бишек туйы, ҡарға туйы үткәреү, ата-әсәләрҙең, үҙ-ара килешеп, балаларын бәләкәстән үк йәрәштереп ҡуйыуы әле лә бармы? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
10. Ғилмияза менән Зөлхизә образдарына характеристика бирегеҙ. Улар яҙмышындағы уртаҡлыҡтарҙың нимә тураһында һөйләүен аңлатығыҙ.

Ярҙамсы ҡылымдарҙың лексик мәғәнәһе юҡ тип әйтерлек. Улар үҙ аллы ҡылымдарға өҫтәлмә мәғәнә генә (ваҡыт, күләм, тиҙлек һ. б.) бирәләр. Сағыштырығыҙ:

*эшләй башланы*
*эшләп ултыра (тора, йөрөй)*
*эшләп бөттө (ҡуйҙы, алды)*
*эшләп ҡалды (инде)*
*эшләй һалды*

Төрлө ерҙәрҙә бер үк мәғәнәлә төрлө ярҙамсы ҡылым ҡулланыла, йә иһә төрлө формалағы үҙ аллы ҡылымдарға эйәрә ала: *килә ята* (Баймаҡ районы), *килеп ултыра* (Белорет районы), *килеп ята* (Бөрйән районы), өсөһө лә *идёт в данный момент* тип тәржемә ителә.

**32-се күнегеү.** Бирелгән мәҡәлдәрҙең уртаҡ мәғәнәһен билдәләгеҙ. Бер мәҡәл буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

1. Уңған эшләшергә килер, ялҡау ашашырға килер.
2. Уңғандың яланын ҡар баҫыр, ялҡауҙың аранын ҡар баҫыр.
3. Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.
4. Ҡалған эшкә ҡар яуа.
5. Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.
6. Эшле килер — эш арттырыр, эшһеҙ килер — эш ҡалдырыр.
7. Эше юҡтың ашы юҡ.

**33-сө күнегеү.** Ҡоштарҙың исемен уларҙың тауышын белдергән һүҙҙәргә тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| һандуғас | саңҡылдай |
| ҡарға | саҡыра |
| торна | һайрай |
| һайыҫҡан | ухылдай |
| кәкүк | торҡолдай |
| бөркөт | ҡарҡылдай |
| өкө | шыҡырыҡлай |

Килеп сыҡҡан һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

## ЙЫРҘАР

**Йыр** — ауыҙ-тел ижадының бик үҙенсәлекле төрө. Ул шиғри әҫәрҙең көйгә һалыныуынан, йәғни һүҙ сәнғәте менән музыка сәнғәтенең ҡушылыуынан барлыҡҡа килә.

Йырҙарҙа халыҡ тарихында булып үткән хәл-ваҡиғалар, халыҡтың тормош-көнкүреше, йолалары, уй-хыялдары сағыла. Йыр менән халыҡ Тыуған илен, батырҙарын данлай, ҡыуанысын һәм шатлығын белдерә, ҡайғы-хәсрәтен уртаҡлаша, мөхәббәтен аңлата.

Хәҙерге заманда халыҡ йырҙары бик һирәк тыуа. Уларҙы күбеһенсә шағирҙар менән композиторҙар ижад итә.

Башҡорт халыҡ йырҙарын төрлөсә төркөмләйҙәр. Мәҫәлән, башҡарылыу рәүешенә, йәғни көйҙәренең характерына ҡарап, уларҙы **оҙон** һәм **ҡыҫҡа** йырҙарға, ә йөкмәткеләре буйынса **тарихи** һәм **тормош-көнкүреш** йырҙарына бүлеп йөрөтәләр.

### Тарихи йырҙар

Ил, халыҡ яҙмышына бәйле мөһим тарихи ваҡиғалар һәм унда ҡатнашҡан халыҡ батырҙары, күренекле шәхестәр тураһындағы йырҙарҙы **тарихи йырҙар** тип йөрөтәләр. Тарихи йырҙарға патриотик рух, героик пафос хас.

Уларҙы түбәндәге тематик төркөмдәргә бүлеп ҡарайҙар:

1. Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһындағы йырҙар.
2. 1773—1775 йылдарҙағы Пугачёв яуы тураһындағы йырҙар.
3. 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына бәйле йырҙар.
4. Кантон башлыҡтары тураһындағы йырҙар.
5. Ҡасҡындар тураһындағы йырҙар.
6. Әрме хеҙмәте һәм хәрби поход йырҙары.

### ***Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһындағы йырҙар***

#### УРАЛ

*(Вариант)*

Урал ғына буйы бигерәк йәмле
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә.
Ҡаяларға баҫып ҡурай юндым
Уралымды маҡтап та көйләргә.

Кейегең күп, Урал, ҡоштарың күп,
Буйың аңҡый һинең моң менән.
Ҡурайҙар уҡ яһап, көй уйнайым
Үҙем генә түгел — ил менән.

Атам да һин, Урал, әсәм дә һин,
Урал тиермен гүргә кергәндә.
Атҡайҙарға менеп, яу сабырмын,
Яулашырға дошман килгәндә.

Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,
Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Атҡайҙарға менеп тә һаҙаҡ алһам,
Дошмандарға унда ла юл булмаҫ.

**ЙӘЙЛӘҮЛЕК**

Ай, тау ғына яҡшы, тау яҡшы,
Тау яғалап үткән юл яҡшы.
Алтын менән көмөш сыҡҡан ерҙән
Тыуған ғына үҫкән ил яҡшы.
Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы.
Илкәйенә ингән яуға ҡаршы
Ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы.
Уҡа ғына осло ебәк билбау,
Сискеләрем килмәй билемдән.
Йәмле генә Урал буйын ташлап
Киткеләрем килмәй илемдән.
Ҡарағай ҙа үҫер, ай, йәм өсөн,
Бал ҡорттары осор бал өсөн.
Яман ирҙәр үлер, ай, мал өсөн,
Яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн.

1. «Урал» йырының варианттары күп. Һеҙ уның бер варианты менән 6-сы класта таныштығыҙ һәм һүҙҙәрен ятланығыҙ. Хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ: йырҙы яттан һөйләгеҙ, фоноәҙманан тыңлап, көйөн дә иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
2. Тексҭа аңлашылмаған һүҙҙәр бармы? Булһа, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. «Урал» йырының ике тексын сағыштырығыҙ. Уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын табығыҙ.
4. 6-сы класта өйрәнгән тәүге вариантта ҡанлы көрәш пафосы өҫтөнлөк итә. Текстан ошоно дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.

7-се кластағы вариантта Уралға халыҡ исеменән дан йырлау өҫтөнлөк итә. Миҫалдар килтерегеҙ.

5. «Урал» йырын башҡорт халҡының милли гимны тип йөрөтәләр. Гимн өсөн ике йырҙың ҡайһыһы нығыраҡ тап килә? Иҫбатлағыҙ.
6. Тыуған илгә һөйөү, ватансылыҡ тойғоһо, тыуған ерҙең ҡәҙерен белеү, йәшәү мәғәнәһе кеүек мотивтар — «Йәйләүлек» йырында ла төп мотивтарҙың береһе. Текстан ошоно раҫлаусы миҫалдар килтерегеҙ.
7. «Йәйләүлек» йырында *йәйләү* һүҙе юҡ, ни өсөн ул шулай аталды икән? Фекер алышығыҙ.
8. 6-сы класта башлаған традицияғыҙҙы дауам итегеҙ: өйрәнгән оҙон йырҙарығыҙҙың исемлеген тулыландырығыҙ һәм ваҡыт-ваҡыт йырлап ҡарағыҙ.

## ҠЫЛЫМ ҺӨЙКӘЛЕШТӘРЕ

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ формаларға бүленеүен беләбеҙ. Затлы формалар ҙа, затһыҙҙары ла тағы ла дүртәр төргә бүленә. Затлылары — **һөйкәлештәр** ә затһыҙҙары **ҡылым төркөмсәләре** тип атала.

| Һөйкәлештәр | Ҡылым төркөмсәләре |
|---|---|
| Хәбәр һөйкәлеше | Исем ҡылым |
| Бойороҡ һөйкәлеше | Сифат ҡылым |
| Шарт һөйкәлеше | Уртаҡ ҡылым |
| Ниәт һөйкәлеше | Хәл ҡылым |

**Һөйкәлеш** рус телендәге **наклонение** һүҙенә тап килә. Һәр һөйкәлештең исеме уның мәғәнәһен тулыһынса аса.

Хәбәр һөйкәлеше — повествовательное наклонение.

Бойороҡ һөйкәлеше — повелительное наклонение.

Шарт һөйкәлеше — условное наклонение.

Ниәт һөйкәлеше — наклонение намерения.

Һәр һөйкәлешкә ҡараған ҡылым формалары менән танышығыҙ:

1. Хәбәр һөйкәлеше: *барам, барҙым.*
2. Бойороҡ һөйкәлеше: *бар, барһын.*
3. Шарт һөйкәлеше: *барһам, барһағыҙ.*
4. Ниәт һөйкәлеше: *бармаҡсымын.*

## ХӘБӘР ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫ

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары һөйләмдә эш-хәрәкәттең эшләнеүе йәки эшләнмәүе, булыуы йәки булмауы тураһында хәбәр итеүҙе аңлата. Улар зат, һан һәм заман менән үҙгәрә.

*Мин дә алтын тураһында һөйләйем.* (Я. Хамматов)
*Беҙ балыҡҡа китеп барабыҙ.* (Ә. Вәли)
*Һин ҡыш көнө нимә уйнарға яратаһың?* (З. Биишева)
*Һеҙ бөтәгеҙ ҙә минең ҡарамаҡта булаһығыҙ.* (З. Биишева)
*Ул аҡрын ғына ҡайтырға табан йүнәлде.* (Ә. Вәли)
*Улар байтаҡ һөйләшеп ултырҙылар.* (И. Ғиззәтуллин)

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары өс төрлө заманда килә.

1. Үткән заман формалары: *ул барҙы, килде, уҡыны; барған, килгән, уҡыған; барғайны, килгәйне, уҡығайны; бара ине, килә ине, уҡый ине; барған булған, килгән булған, уҡыған булған; барған була, килгән була, уҡыған була; бара торған булған, килә торған булған, уҡый торған булған* һ. б.

2. Хәҙерге заман формалары: *ул бара, килә, уҡый.*

3. Киләсәк заман формалары: *ул барыр, барасаҡ, килер, киләсәк, уҡыр, уҡыясаҡ.*

Күренеүенсә, үткән замандың формалары башҡаларынан күберәк. Һәр бер форманың мәғәнәүи төҫмөрләнеше бар. Артабан беҙ уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталырбыҙ, асыҡларға тырышырбыҙ.

**34-се күнегеү.** Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, уларҙың заманын билдәләгеҙ.

— Һеҙ икегеҙ ҙә бик һәйбәт төш күргәнһегеҙ, — тигән Зиннәт ағай. — Берегеҙ ожмахҡа китеп барған, икенсегеҙ күктә йөрөгән. Былар, мин әйтәм, бик һыйлы ерҙә йөрөйҙәр, тиҙ генә әйләнеп ҡайтмаҫтар әле. Һеҙҙе көтөп ултырыр инем, ҡаҙ бөҙөлөп ҡуйыр, тим. Шуға күрә ҡаҙҙы үҙем генә ашаным да ҡуйҙым, һеҙгә ана муйыны ғына ҡалды. *(Башҡорт халыҡ әкиәтенән)*

## *1773 — 1775 йылдарҙағы Пугачёв яуы тураһындағы йырҙар*

### САЛАУАТ

*(Вариант)*

Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Салауаттың йәшен һораһағыҙ,
Егерме лә ике йәшендә.

Салауат менгән кир аттың
Күкрәк-түшкәйҙәре киң икән.
Яуҙарға әйҙәп сапҡан осҡор —
Салауат та тигән ир икән.

Салауаттың менгән кир аты
Батыр ғәскәрҙәргә юл башлай.
Кир ат өҫтөндәге Салауат
Яуға дәртләндереп йыр башлай.

Салауатҡай килә ғәскәр менән,
Ат уйнатып, үҙән буйлатып,
Ҡалҡанҡайы һәлмәк, уғы мәргән,
Дошман яуын ҡырҙы шаулатып.

Салауат та батыр ҡоралы —
Еҙ башаҡлы ғына уҡ икән.
Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек,
Салауаттай батыр юҡ икән.

### ОЛО ЮЛ

*(Вариант)*

Оло ғына, һай, ғәскәр юлдан уҙа,
Һауаларға оса шул туҙаны.
Бүгәс батша, һай, яуыз түрәләрҙе
Ҡуй-һарыҡтай итеп тә тураны.

Оло ғына, һай, юлдан ғәскәр килә,
Бүгәс батша икән шул хужаһы.
Яуыз түрәләрҙе ҡырып бөткәс,
Бөтмәҫ микән илдең нужаһы.

Оло ғына, һай, юлдан Бүгәс килә,
Ебәк билбауын быуып биленә.
Баяр, түрәләрҙән тартып алып,
Ер-һыу бирә икән иленә.

Оло ғына, һай, юлдан ғәскәр килә,
Арғымаҡҡайҙарын уҙҙырып.
Оло ғына, һай, юлдан Бүгәс үтте,
Дошман ғәскәрҙәрен туҙҙырып.

1. Йырҙарҙың текстары өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен контексҡа, йәғни әҫәрҙә нимә тураһына һүҙ барыуына ҡарап, асыҡлап ҡарағыҙ. Кәрәк булһа, һүҙлеккә мөрәжәғәт итегеҙ.
3. «Оло юл» йырында Пугачёв, башҡортсалаштырып, *Бүгәс* тип аталған. Һеҙҙеңсә, быны сәбәбе нимәлә – русса белмәүҙәме, әллә Пугачёвҡа насар ҡараш белдереүҙәме? Ғөмүмән, рус теленән килеп ингән һүҙҙәрҙең яҙмышын күҙәтегеҙ: ни өсөн ҡайһы бер һүҙҙәр танымаҫлыҡ булып үҙгәргән, ә ҡайһы берҙәре бер ниндәй үҙгәреш тә кисермәгән? Миҫалдар килтерегеҙ.
4. Ике йырҙың да тәүге куплеттарын ятлағыҙ. Фонояҙмаларын тыңлап, үҙегеҙ ҙә ҡушылып йырлағыҙ.
5. «Салауат» йырының йөкмәткеһе менән көйөнөң ауаздашлығына иғтибар итегеҙ. Был йырҙың көйө икенсе төрлө булырға мөмкинме?
6. Салауат менән Бүгәс образдарын нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Уларҙың портреттарын төшөрөп ҡарағыҙ.
7. 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тураһында ғилми әҙәбиәт уҡып, «Пугачёв яуында башҡорттар» тигән тема буйынса материал туплағыҙ. Фекер алышығыҙ.
8. Был осор ваҡиғаларына арналған ниндәй әҙәби әҫәрҙәр бар?

## ҠЫЛЫМДЫҢ ҮТКӘН ЗАМАН ФОРМАҺЫ

Ҡылымдың үткән заманы һөйләү мәленән алда булып үткән эш-хәрәкәтте белдерә. Уның **шаһитлы** (билдәле) һәм **шаһитһыҙ** (билдәһеҙ) төрҙәре була: *ул бар-ҙы, кил-де, уҡы-ны; ул бар-ған, кил-гән, уҡы-ған.*

Әгәр һөйләүсе эш-хәрәкәттең үтәлеүен үҙ күҙҙәре менән күрһә, шаһитлы үткән заман формаһы ҡулланыла: *Һуғыш бөтөүгә бер ай үтте. Ауылда берәм-берәм һалдаттар күренә башланы. Түшенә миҙал тағып, Сәләх ҡарт та ҡайтып төштө.* (Ә. Хәкимов)

Әгәр ҙә һөйләүсе эш-хәрәкәтте үҙе күрмәһә, шаһитһыҙ үткән заман формаһы ҡулланыла: *Сәләх ҡарттың йөҙө баҡыр төҫөнә ингән. Үҙе һаҡалын ҡырып ташлаған, мыйыҡ ҡына ҡалдырған.* (Ә. Хәкимов)

Рус теленә шаһитлы үткән заман да, шаһитһыҙ үткән заман да бер төрлө тәржемә ителә: *китте, киткән — ушёл.*

**35-се күнегеү.** Нөктәләр урынына тейешле формалағы ҡылымды ҡуйығыҙ. Аңлатығыҙ.

1. Мин 2003 йылда ... (тыуҙым, тыуғанмын). 2. Ағайым 2000 йылда ... (тыуҙы, тыуған). 3. Минең ҡарт олатайым Бөйөк Ватан һуғышында ... (ҡатнашты, ҡатнашҡан). 4. Кисә беҙ ветеран менән осрашыу кисәһе ... (үткәргәнбеҙ, үткәрҙек).

**36-сы күнегеү.** Алфавитты иҫкә төшөрәйек. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйығыҙ.

1. А, ... Н.
2. Ф, ... Я.

### *1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына бәйле йырҙар*

### ЭСКАДРОН

Ҡараһана, дуҫҡай, ҡараһана,
Урал тауы тора күгәреп.
Уралтауға ҡарап, бер йырлайыҡ,
Уйҙарҙы ла алыҫ ебәреп.

Йырҙар яҙҙым Урал ҡаяһына,
Иҫтәлектәр булып ҡалһын, тип.
Яуҙа йөрөп иҫән ҡайта алмаһам,
Урал тауы иҫкә алһын, тип.

Урал ғына ҡошо, ай, һандуғас,
Ат менгәндә, моңло һайраның.
Ҡындан алып алмас ҡылысымды
Урал ҡаяһына ҡайраным.

## ЛЮБИЗАР

Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда,
Алдан сыҡты данабыҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Французлар килеп ингән
Мәскәү тигән ҡалаға.
Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алғас,
Сығып ҡасты далаға.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙен һынаған.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Французлар танынылар
Эрәсәйҙә үҙҙәрен.
Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Табалмайҙар эҙҙәрен.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Мәскәүгә лә керҙек беҙ,
Парижды лә күрҙек беҙ.
Француздарҙы еңгәндә,
Ер емертеп йөрөнөк беҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

1. Йырҙарҙың текстарын тасуири уҡығыҙ. Уҡыу барышында уларҙың көйҙәре нисек булырға тейешлеген самалап әйтеп ҡарағыҙ. Тойомлауығыҙҙы үҙегеҙсә дәлилләгеҙ.
2. Йырҙарҙың фонояҙмаһын тыңлағыҙ. Көйҙәрҙең текст йөкмәткеһе менән ауаздашлығына иғтибар итегеҙ: оҙон йыр менән ҡыҫҡа йыр үҙенә ниндәйерәк шиғри текст талап итә? Фекер алышығыҙ.
3. «Эскадрон» йырында яуға әҙерләнгән башҡорт һуғышсыһының кәйефе нисек күрһәтелә? Был тематик төркөмсәгә ҡараған башҡа йырҙар менән дә танышығыҙ. Уларҙа башҡорт халҡының тыуған илгә, тыуған төйәккә мөнәсәбәте, ватансылыҡ тойғолары нисек сағылғанлығын күҙәтегеҙ.
4. *Любезники, любизар* һүҙҙәре Кутузовтың, башҡорттарға ҡарап: «Любезные вы мои башкиры, молодцы!» — тип өндәшеүенән яһалған. Ни өсөн полководецтың был һүҙҙәре йырҙа шулай итеп үҙгәртелде икән?
5. «Любизар» йырының бер нисә куплетын ятлағыҙ һәм йырлап өйрәнегеҙ.
6. Иҫкә төшөрөгөҙ: кемдәр ул төньяҡ амурҙары? «Төньяҡ амурҙары» тигән темаға һүрәт төшөрөгөҙ.

**37-се күнегеү.** Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

1. Шартлы сифат тип ниндәй сифаттарға әйтәләр?
2. Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яҙығыҙ.
3. Төп сифаттарҙың барыһынан да ниндәй дәрәжә формаһы яһала ала?

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заман формалары бик күп, тигәйнек. Шул формаларҙы һәм улар белдергән мәғәнәләрҙе ҡарағыҙ. Миҫалға *(ул) алды, алған* ҡылымдарының формаларын алайыҡ:

*Алды — алғайны, ала ине, ала торғайны, алыр ине, алғыланы, алғылай торғайны.*

*Алған — алған булған, алыр булған, алғылай торған булған, алғылаған.*

Русса бөтә ошо формалар *брал, взял* һүҙҙәре менән генә тәржемә ителә. Башҡорт телендәге һәр һүҙ формаһының төрлө мәғәнәүи төҫмөрләнеше бар. Сағыштырығыҙ:

*Алғайны* — был эштең дауамы бар: *Алғайны, кире бирмәне.*

*Ала ине* — һөйләүсе күргәндә, эш әле тамамланмаған булған: *Мин ҡайтҡанда, ул һыу ала ине.*

*Ала торғайны* — ҡабатланып торған эш, тик хәҙер ул эш башҡарылмай.

*Алыр ине, алыр булған* — шул уҡ мәғәнә, тик һөйләүсенең эште башҡарыусыны ихтирам менән иҫкә алыу мәғәнәһе өҫтәлә: *Өләсәйем кистәрен беҙгә әкиәт һөйләр ине.*

*Алғыланы, алғылаған* — һирәк ҡабатланып торған үткәндәге эш.

*Алған булған* — башҡарылған мәленән бер ни тиклем ваҡыт үткәс, һөйләүсегә беленгән эш: *Мин дә икмәк алдым, әсәйем дә алған булған.*

### *Кантон башлыҡтары тураһындағы йырҙар*

#### ҠОЛОЙ КАНТОН

Ҡолой кантон менгән туры юрға
Юрғалай ҙа башын борғолай.
Ҡолой кантон нахаҡ хөкөм итеп,
Бик күп ирҙәр зая булғылай.

Ҡолой кантон да бик үк ҡанһыҙ,
Бер ҙә юҡҡа ҡылыс ҡармалай.
Күп иркәйҙәрҙең дә башын юйҙы
Ҡолой кантон менән Ермолай.

#### АБДУЛЛА АХУН

Кисә генә ахун ине,
Ниңә ситкә ауышҡан?
Ырымбурға бара-бара,
Түрәләргә танышҡан.

Башындағы аҡ сәлләһен
Аҡ картузға алышҡан.
Абдулла ахун кантон булғас,
Ҡолаҡ тынмай тауыштан.

Абдулла ахун түрәләргә
Бик ярарға тырышҡан,
Пар ат егеп, кеше талап,
Мул-мул малдар йыйышҡан.

Абдулла ахун бара икән
Имәнғолға, башҡортҡа.
Абдулла ахун ил аралап,
Һалым һалған һәр йортҡа.

Көтөү-көтөү ҡыуалатҡан
Түләмәгәнде судҡа.
Тынғы бирмәҫ ахун инең,
Күстеңме ни тынысҡа.

Ҡарғалынан ник күстең дә,
Имәнғолға ник төштөң?
Имәнғолға төшөү менән
Әҙәм ҡанын ник эстең?

Йөҙ илле һум аҡса ала
Йылы тулған паспортҡа.
Абдулла ахун, халыҡ талап,
Илде ҡалдырҙы йотҡа.

Ил түҙә алмаҫ яуызлыҡҡа —
Бер тотоп һалыр утҡа.

1. Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, уларҙың хәҙерге телдә ҡулланылыу-ҡулланылмауын асыҡлағыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.
2. Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте менән һеҙ 6-сы класта танышҡайнығыҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалған мәғлүмәттәргә таянып, әңгәмә ойоштороғоҙ.
3. 1798 йылда батша хөкүмәте, башҡорттарҙы хәрби казак составына күсереү менән бергә, яңы тәртип системаһын

индерә. Башҡортостан административ яҡтан кантондарға бүленә. Кантон башлыҡтары итеп эре ер биләүсе феодалдар ҡуйыла. Ҡаты хәрби тәртип урынлаша. Сикләнмәгән власҡа эйә булған кантон башлыҡтары йыш ҡына ҙур башбаштаҡлыҡтар ҡылғандар. Был турала Ә. Әсфәндиәровтың «Олатайҙарҙың бар тарихы...» тигән китабында бай мәғлүмәт бирелгән. Шулар менән танышып, «Башҡортостан кантондар заманында» тигән темаға фекер алышыу ойоштороғоҙ.

4. Күп кенә кантон башлыҡтары халыҡты зар илатҡан яуыз түрә булып дан алған. Ҡолой кантон, мәҫәлән, халыҡ *башын юйған, нахаҡ хөкөмдәр сығарған* ҡанһыҙ түрә булараҡ һаҡлана. Йыр тексында Ҡолойға ҡағылышлы шундай сифаттарҙы ла табығыҙ.
5. Хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ. «Ҡолой кантон» йырын һеҙ 6-сы класта ла өйрәнгәйнегеҙ. Йыр тексын яңынан иғтибар менән уҡып сығығыҙ, варианттары менән танышығыҙ. Дөйөмләштереп, Ҡолой кантонға характеристика бирегеҙ.
6. Ике йырҙың да көйөн тыңлағыҙ. Текстарҙың тәүге строфаларын ятлап, фоноязмаға ҡушылып йырлап ҡарағыҙ.
7. Кантон башлыҡтарына арналған тағы ниндәй йырҙарҙы беләһегеҙ? Исемдәрен яҙығыҙ.

**38-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Һеҙҙең ғаиләлә нисә кеше бар? Һинең олатайың (өләсәйең) бармы? Улар кем менән һәм ҡайҙа йәшәй? Һинең апайың (ағайың) бармы? Уға нисә йәш? Һинең нисә һеңлең (ҡустың) бар? Һеҙҙең ғаиләлә нисә бала? Һеҙҙең тағы ниндәй туғандарығыҙ бар? Улар ҡайҙа йәшәй?

**39-сы күнегеү.** Йырҙан өҙөктө күсереп яҙығыҙ. Үткән заман ҡылымдарының формаһын билдәләгеҙ. Ятлағыҙ.

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын. *(«Урал»)*

**40-сы күнегеү.** Ҡылымдарҙы табығыҙ. Уларҙы үткән заман формаһына ҡуйығыҙ. Үткән замандың ниндәй (шаһитлы, шаһитһыҙ) формаһын һайларһығыҙ?

Австрия ерен үтеп, башҡорттар француз еренә килеп етәләр. Французлар башҡорттарҙан әжәл көтөп торалар икән, уларҙы күргәс, тырым-тырағай ҡаса башлайҙар. Башҡорттар дошмандың ҡасҡанын күрәләр һәм ҡыуа төшәләр.

Шулай итеп Парижға ла барып етәләр. *(«Ҡаһым түрә»)*

**41-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Башҡорт һәм рус телдәрендәге мәғәнәләре тап килгән йә оҡшаш мәҡәлдәрҙе парлап яҙығыҙ.

I. 1. Һуғыштан һуң йоҙроҡ төймәйҙәр. 2. Ашыҡҡан ашҡа бешкән. 3. Йәне теләгән йылан ите ашаған. 4. Тыуған илдең эте лә яҡын. 5. Сабыр иткән — мораҙына еткән. 6. Буштың атаһы үлгән.

II. 1. Всякому мила своя сторона. 2. После драки кулаками не машут. 3. Бесплатно только соловьи поют. 4. Поспешишь — людей насмешишь. 5. На вкус и цвет товарищей нет. 6. Терпение и труд всё перетрут.

## *Ҡасҡындар тураһындағы йырҙар*

### БУРАНБАЙ

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары.

Буранбайҙың аты, ай, кирме ине,
Серге аҫҡайҙары тирме ине?
Буранбай ҙа менән, ай, Ибраһим
Себерҙәргә китер ирме ине?

Алыҫ та ғына алыҫ, ай, күренгән
Юшатырҡай башы Аҡбейек.
Буранбай ҙа китте, иле ҡалды,
Илкәйенә булды ҙур көйөк.

Буранбайҙың ғына, ай, ҡылысын
Ҡомартҡыһы итеп тә ҙурлағыҙ.
Буранбайҙың ғына, ай, көйкәйен
Иҫтәлеге итеп һуҙығыҙ.

Буранбай ҙа Себер китеү менән,
Тынырмы икән баяр ерҙәре?
Буранбай ҙа һөргөн китеү менән,
Баҫылыр микән илдең ирҙәре?

**БЕЙЕШ**

Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем,
Тышҡынайынниҙән тышлайым?
Йәйгенәһен бында йәйләгәйнем,
Ҡышҡынаһын ҡайҙа ҡышлайым?

Аҡ уҫаҡҡайҙарҙың, ай, ҡабығы —
Аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы.
Башҡынайым минең күпте күрҙе,
Дошмандарға булһын яҙығы.

Аҡ атҡайҙарым ектем тәртәгә,
Ҡаралары ҡалды кәртәлә.
Уңлы ғына һуллы ҡашым тарта,
Ниҙәр генә булыр иртәгә?

Һор(о) юрғаҡай менеп, елеп үттем
Баяр ғына баҫҡан ерҙәрҙе.
Уғры ғына тиеп хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡаҫҡан ирҙәрҙе.

Ирәндеккәй тауы, ай, күк таштыр,
Кемгә төйәк түгел ул таштар,
Ҡыйыу ғына булдыҡ, ҡыйыу йөрөнөк,
Ни күрһә лә күрер был баштар.

1. Аңлашылмаған һүҙҙәр күпме? Уларҙың күплеге, әҙлеге йәки бөтөнләй булмауы нимә тураһында һөйләй?

2. Ике йырҙың да текстарын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. *та, ай, ҙа, ғына, тә* һүҙҙәре тексҭа ниндәй маҡсатта ҡулланылған? Уларҙы алып ташлап ҡарағыҙ. Нимә үҙгәрҙе?
3. «Бейеш» йырының тәүге куплетындағы *ҡуян, тыш, йәй, ҡыш* һүҙҙәренең ҡулланылышына иғтибар итегеҙ. Ике тексҭан да шундай һүҙҙәрҙе табып, ни өсөн нәҡ ошондай формала ҡулланылғанлыҡтарын аңлатып ҡарағыҙ.
4. *Зар илау, елеп үтеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. *Илау, үтеү* һүҙҙәренең тағы ниндәй формаларын беләһегеҙ?
5. *Башҡынайым минең күпте күрҙе...* тип йырлай Бейеш. «Азамат» йырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Унда ла *Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы* тиелә. Ни өсөн нәҡ баш күрә, ә, мәҫәлән, күҙ түгел? Фекерегеҙҙе башҡа миҫалдар менән иҫбатлағыҙ. Әңгәмә ойоштороғоҙ.
6. *Уңлы-һуллы ҡашым тарта,* ти Бейеш. Һеҙ тағы ниндәй ырымдар беләһегеҙ? *Күҙ тарта, ус ҡысый...* Дауам итегеҙ. Атай-әсәйегеҙҙән, ололарҙан һорашып, һәр ырымға аңлатма биреп ҡарағыҙ.
7. Кемдәр ул ҡасҡындар? Башҡортостан тарихы буйынса белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. «Буранбай» йырының һуңғы строфаһын, «Бейеш» йырының 4-се строфаһын ентекләп уҡығыҙ, был ҡасҡындарҙың кемлеген, нимә өсөн көрәшкәндәрен аңлатып ҡарағыҙ.
8. Йырҙарҙың тәүге куплеттарын ятлағыҙ, фонояҙмаларын тыңлағыҙ, үҙегеҙ ҙә эйәреп йырлап ҡарағыҙ. Оҙон йырҙарҙың башҡарылыу рәүешенә иғтибар итегеҙ.
9. Ҡасҡындар тураһында тағы ниндәй йырҙар бар? Башҡорт халыҡ ижадының йырҙарға арналған томын табып, танышығыҙ.

## ХӘБӘР ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫНЫҢ КИЛӘСӘК ЗАМАН ФОРМАЛАРЫ

Исеменән күренеүенсә, был формалар һөйләү ваҡытынан һуң була торған эш-хәлдәрҙе белдерәләр. Киләсәк замандың ике төрө бар: **билдәле киләсәк** һәм **билдәһеҙ киләсәк.**

Билдәһеҙ киләсәк заман ҡылым нигеҙенә *-р, -ыр, -ер, -ор, -өр* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала. I, II заттарҙа тағы ла зат ялғауҙары өҫтәлә. III заттың күплегендә күплек ялғауы ҡушыла.

I з а т : *бар-ыр-мын, йөрө-р-мөн — бар-ыр-быҙ, йөрө-р-бөҙ.*
II з а т : *бар-ыр-һың, йөрө-р-һөң — бар-ыр-һығыҙ, йөрө-р-һөгөҙ.*
III з а т : *бар-ыр, йөрө-р — бар-ыр-ҙар, йөрө-р-ҙәр.*

**42-се күнегеү.** Билдәһеҙ киләсәк заман формаһының мәғәнәһе бик киң. Сағыштырығыҙ.

I. 1. Улығыҙ өс-дүрт айҙан йән-фарман йүгереп йөрөр. *(Я. Хамматов)* 2. Шунан ҡалған-боҫҡанынан үҙемә лә өлөш сығарырмын. *(З. Биишева)*

Киләсәктә була торған эш-хәрәкәттәр.

II. 1. Ир-азамат менгән аттың
Бәкәлдәре уның аҡ булыр.
Аҫыл егет ҡайҙа йөрөһә лә,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр. *(«Салауат»)*

2. Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр.
*(Мәҡәл)*

Гел була торған эш-хәрәкәттәр, хәлдәр.

III. 1. — Һинең улың, һалҡын тип тормайынса, тағы һыуға ингән.
— Булыр унан, булыр.
2. — Иртәгә бер ҡайҙа ла бармайбыҙ.
— Һин шулай тип әйтерһең инде.

Үткәндә булған, ихтималлығы мөмкин эштәр.

**43-сө күнегеү.** Билдәһеҙ киләсәк замандың II зат күплек формаһының дөрөҫ яҙылышына һәм әйтелешенә иғтибар итегеҙ.

Һеҙ → барырһығыҙ
→ килерһегеҙ
→ көлөрһөгөҙ
→ етерһегеҙ
→ осорһоғоҙ
→ көтөрһөгөҙ

## Тормош-көнкүреш йырҙары

Башҡорт халыҡ йырҙарының ҙур ғына өлөшөн тормош-көнкүреш йырҙары тәшкил итә. Йөкмәткеһе, функцияһы менән улар тарихи йырҙарҙан ныҡ ҡына айырыла: улар халыҡ тормошонда була торған көндәлек ваҡиғаларға бәйле тыуа. Йәғни уларҙың тыуыуы өсөн ниндәй ҙә булһа тарихи ваҡиғаларҙың булыуы шарт түгел. Тәбиғәт матурлығы менән һоҡланыу, тыуған яҡты һағыныу, фани донъя, ир-егетлек даны, социаль тигеҙһеҙлек, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланыу йырҙарҙың төп йөкмәткеһен тәшкил итә.

Тормош-көнкүреш йырҙары түбәндәге тематик төркөмдәргә бүленә:

1. Ер-һыу һәм мал-тыуар тураһындағы йырҙар.
2. Мәжлес йырҙары.
3. Мөхәббәт йырҙары.
4. Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар.
5. Шаян йырҙар.

### ЗӨЛХИЗӘ

Ялан ғына ерҙән дә болан килә,
Зөлхизә,
Уйһыу ҙа ғына ерҙән дә, ай, түтә тип,
Зөлхизә,
Төн уртаһы еткәс тә, бер ҡыҙ илай,
Зөлхизә,
Йәш ғүмерем заяға, ай, үтә, тип, Зөлхизә.
Кәкүк кенә ҡоштоң да, ай, балаһы,
Зөлхизә,
Сит ояла үҫә лә ят булып, Зөлхизә.
Ҡанлы йәштәр түгеп тә бер ҡыҙ илай,
Зөлхизә,
Көләс ғүмерем үтә, тип, ут булып, Зөлхизә,
Һыу буйына барып та битен йыуа, Зөлхизә,
Йөҙөндәге йәшле лә таптарын, Зөлхизә.
Күҙкәйҙәрен һирпеп тә берҙәр уйлай,
Зөлхизә,
Рәхәт үткән иркә лә саҡтарын, Зөлхизә.

## ҒИЛМИЯЗА

Этҡара ла тигән тау башында
Ҡалды минең уйнаған таштарым.
Һигеҙ менән туғыҙ араһында
Юғалды ла ғәзиз баштарым.

Был илдәрҙең менер атҡайҙары
Ҡырас яллы, көмрө билле икән.
Үҙ илемдәй түгел илкәйҙәре,
Ҡом бураны уйнай, елле икән.

Алыҫ ерҙән балҡып, ай, күренгән
Урал микән әллә көн микән?
Сит илдәрҙә уҙған ғүмеремдең
Бер көндәре әллә йыл микән?

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Илкәйемә лә, шул, ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп.

1. *Ҡанлы йәштәр түгеп илай* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Күҙ йәшенең тағы ла ниндәй булыуы мөмкин?
2. Йырҙарҙың текстарын иғтибар менән уҡығыҙ. Уларҙың йөкмәткеһендә ниндәй уртаҡлыҡ бар?
3. Йырҙарҙа боронғо башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышы нисек һүрәтләнгән?
4. «Ғилмияза» йырындағы:
*Һигеҙ менән туғыҙ араһында*
*Юғалды ла ғәзиз баштарым,* тигән юлдарҙы нисек аңлайығыҙ?
5. Ике йырҙың да риүәйәтен ҡабатлап уҡып сығығыҙ. Ундағы мәғлүмәттәрҙе йырҙарҙағы үҙенсәлектәрҙе асыҡлағанда файҙаланығыҙ.
6. Ике йырҙың да һүҙҙәрен ятлағыҙ. Көйөн тыңлағыҙ, йырларға өйрәнегеҙ.
7. Нимә ул йыр? Дөрөҫ яуапты табығыҙ.
1. Тормошта булғанды, хатта булмаған хәл-ваҡиғаларҙы ла булған тип һүрәтләгән тарихи әҫәр.
2. Фантастикаға ҡоролған әҫәр.

3. Тыуған илде, батырҙарҙы данлаған, бәхет-шатлыҡ, ҡайғы-хәсрәтте сағылдырған көй менән башҡарыла торған шиғри әҫәр.

**8.** Халыҡ йырҙарын башҡарыусы күренекле артистар тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәттәр туплап, слайд-шоу эшләгеҙ.

Билдәле киләсәк заман формаһы ҡылым нигеҙенә *-ясаҡ, -йәсәк, -асаҡ, -әсәк* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала. Уларға зат, күплек ялғауы өҫтәлә.

I зат: *һора-ясаҡ-мын, эшлә-йәсәк-мен, бар-асаҡ-мын, кил-әсәк-мен — һора-ясаҡ-быҙ, эшлә-йәсәк-беҙ, бар-асаҡ-быҙ, кил-әсәк-беҙ.*

II зат: *һора-ясаҡ-һың, эшлә-йәсәк-һең, бар-асаҡ-һың, кил-әсәк-һең — һора-ясаҡ-һығыҙ, эшлә-йәсәк-һегеҙ, бар-асаҡ-һығыҙ, кил-әсәк-һегеҙ.*

III зат: *һора-ясаҡ, эшлә-йәсәк, бар-асаҡ, кил-әсәк — һора-ясаҡ-тар, эшлә-йәсәк-тәр, бар-асаҡ-тар, кил-әсәк-тәр.*

Ҡылымдың был формаһы һөйләү телендә бик һирәк ҡулланыла. Ул күберәк фәнни эштәр, мәҡәләләр, рәсми документтар теленә хас.

**44-се күнегеү.** *Яҙ, уҡы, һөйлә, йөрө* ҡылымдарын киләсәк замандың ике формаһына ла ҡуйып яҙығыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.

Өлгө: *яҙырһың, яҙасаҡһың — напишешь.*

**45-се күнегеү.** Билдәһеҙ киләсәк заман формаларын ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**46-сы күнегеү.** Билдәле киләсәк заман формаларын ҡулланып, «Беҙ яңы йылға әҙерләнәбеҙ» темаһына хикәйә яҙығыҙ.

## ТАҠМАҠТАР

**Таҡмаҡ** — йырҙың еңел көйгә әйтелеп, бейеү хәрәкәтен оҙатыусы бер төрө.

Улар ҡыҫҡа йырҙарға бик яҡын тора. Тик йырҙарҙың һәр береһенең үҙенә генә хас көйө бар, ә таҡмаҡтар, нигеҙҙә,

бөтәһе лә бер төрлө көйгә һалып башҡарыла. Шуға ла йырҙы йырлайҙар, ә таҡмаҡты әйтәләр.

Таҡмаҡтар һәр ваҡыт уйын, бейеү менән бергә йәшәй. Уның төп функцияһы — бейеүҙе, уйынды оҙатыу, төрлө уйын ваҡытында ҡурай, ҡумыҙ, гармун кеүек музыка ҡоралдары башҡарған вазифаны үтәү. Таҡмаҡтарға төртмә теллелек хас, улар һәр ваҡыт берәй кешенән, күренештән шаяртып көлөүгә ҡорола.

Таҡмаҡтарҙы бер нисә төркөмгә айырып ҡарайҙар: уйын таҡмаҡтары, бейеү таҡмаҡтары, уйҙырма таҡмаҡтар, йола (туй) таҡмаҡтары, әйтеш таҡмаҡтары, йәдкәр (иҫтәлек) таҡмаҡтары, сәхнә таҡмаҡтары.

### *Уйын таҡмаҡтары*

## КОСИЛКА, МОЛОТИЛКА

Уйнап алайыҡ әле,
Йырлап алайыҡ әле.
Уйнаныҡ та, йырланыҡ та,
Бейеп алайыҡ әле.

Косилка, молотилка,
Сортировка, веялка.

Уйнап алайыҡ әле,
Йырлап алайыҡ әле.
Бейешәйек, көлөшәйек,
Күңел асайыҡ әле.

Косилка, молотилка,
Сортировка, веялка.

Уйнайбыҙ бергә-бергә,
Бейейбеҙ бергә-бергә.
Уйнап-көлөп, шау гөрләшеп,
Йәшәйбеҙ бергә-бергә.

Косилка, молотилка,
Сортировка, веялка.

1. Таҡмаҡтың йөкмәткеһенән сығып, уның ҡайһы осорҙа барлыҡҡа килеүен асыҡлағыҙ.

**2.** Таҡмаҡтың яҙмаһын тыңлағыҙ һәм әйтергә өйрәнегеҙ.

***Бейеү таҡмаҡтары***

Баҫ баҫа белгәнсе,
Баҫ аяғың талғансы,
Баҫ аяғың талғансы ла,
Бейе хәлдән тайғансы.

Баҫ, баҫ, баҫыр ул,
Баҫыр өсөн килгән ул,
Уйнап-көлөп күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул.

Баҫ, баҫ, баҫ әле,
Беҙ ҙә баҫырбыҙ әле,
Өҫтәлдәргә ҡыҙыл йәйеп,
Туйҙар яһарбыҙ әле.

Беҙҙең ҡыҙҙар оҫта баҫа
Мандолина көйөнә.
Үсекһәләр, ҡайтып китә
Әсәһенең өйөнә.

Бейе, егет, бейе, егет,
Итектәрең туҙмаһын.
Эшлә, егет, тырыш, егет,
Ғүмерең бушҡа уҙмаһын.

***Уйҙырма таҡмаҡтар***

Ағиҙелдең аръяғында
Бесән саба бер ҡарға,
Ағиҙелдән һыу тейәнем
Өйөп-өйөп бер арба.

Ағиҙелгә ут тоҡанған,
Шатыр-шотор һыу яна.
Мин дә һүндерергә барҙым,
Бесән тейәп бер сана.

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Үгеҙ тансауайт итә.
Өлкән һарыҡ таҡмаҡ әйтә,
Кәзә сәпәкәй итә.

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Һарыҡтар ҡар көрәйҙәр.
Ике кәзә, мылтыҡ тотоп,
Ҡуян атып йөрөйҙәр.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Хәҙисә.
Һинең өсөн тараҡандан
Тапала яҙҙым кисә.

*Әйтеш таҡмаҡтары*

Ағиҙелдең аръяғында
Түтәл-түтәл ҡыярҙар.
Танауыңды күп күтәрмә,
Күнәк элеп ҡуйырҙар.

Аҡлы ситса күлдәгеңдең
Ең остары ҡаралы.
Ауыҙыңда һүҙең тормай —
Тешең бигерәк аралы.

Анау тауҙың баштарына
Төлкө килә лә килә.
Иркәм, һине күргән һайын,
Көлкө килә лә килә.

Ана килә автомобиль
Тейәгәндәр ойоҡбаш.
Беҙҙең ауыл егеттәре
Кәкре муйын, ҡыйыш баш.

Бейек тауҙың баштарында
Бәрәңге бешерәләр.
Күтәрелгән танауҙарҙы
Бәреп тә төшөрәләр.

Бейек тауҙың баштарында
Трактор дырылдаталар.
Һинең кеүек маҡтансыҡты
Шулай ырылдаталар.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Фәриҙә.
Һинең кеүек булмаҫ ине
Мунсалағы бәрей ҙә.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Хатмулла.
Хатмуллаға ҡойроҡ ҡуйһаң,
Бына тигән ат була.

1. Текстарҙы иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Таҡмаҡтарҙың жанр тәбиғәтенә төшөнөргә тырышығыҙ.
2. Килтерелгән дүрт төрлө таҡмаҡ бер-береһенән нимә менән айырыла? Был айырма нимәнән килә? Сәбәбен асыҡларға тырышығыҙ.
3. Таҡмаҡтарҙың төп вазифаһы — төрлө уйын, тамаша ваҡытында музыка ҡоралдары ролен башҡарыу, тинек. Ошонан сығып, таҡмаҡтарҙың ҡасан, ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа активлашыуын, хәҙерге яҙмышын, киләсәккә перспективаһын төҫмөрләргә тырышығыҙ.
4. Үҙегеҙҙең класс тормошона бәйле, бер-берегеҙгә арнап, таҡмаҡтар сығарып ҡарағыҙ.
5. Атай-әсәйегеҙҙән, ололарҙан һорашып, таҡмаҡтар яҙып алығыҙ һәм «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбомығыҙға индерегеҙ.

## ХӘБӘР ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫНЫҢ ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН ФОРМАҺЫ

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы *-а, -ә* (тартынҡыға бөткән нигеҙҙәрҙә), *-й* (һуҙынҡыға бөткән нигеҙҙәрҙә) ҡушылып яһала. Уларға зат һәм күплек ялғауҙары өҫтәлә: *бар-а, кил-ә, йөрө-й, килә-беҙ, йөрөй-ҙәр.*

Хәҙерге заман ҡылымдары күп осраҡта эш-хәрәкәттең әле үтәлеүен йә һәр ваҡыт булып тороуын белдерә: *мәктәптән ҡайта, мәктәпкә йөрөй.*

Башҡорт телендә хәҙерге заман ҡылымдары элек булған эш-хәлде лә, алда буласаҡ эш-хәрәкәтте лә белдерә ала: *беҙ иртәгә ҡайтабыҙ* (киләсәктә була торған эш-хәрәкәт). *М. Ғафуриға иң тәүге булып Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелә* (үткән заманда булған эш-хәрәкәт).

**47-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Хәҙерге заман ҡылымының ҡулланылышын ҡарағыҙ. Уларҙы үткән заман формаһындағы ҡылымдар менән алмаштырып буламы?

Сафуан Яҡшығолов хәҙерге Миәкә районының Илсеғол ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Атаһы зирәк улын уҡытыу тураһында хәстәрлек күрә. Сафуан ауыл мәҙрәсәһен тамамлай, шунан уҡыуын ҙурыраҡ мәҙрәсәләрҙә дауам итә. Улар менән генә ҡәнәғәтләнмәй, рус телен өйрәнә, шәреҡ һәм рус әҙәбиәте менән таныша. *(Календарҙан)*

**48-се күнегеү.** Хәҙерге заман ҡылымының III заттағы күплек формаһының баҫымына иғтибар итегеҙ.

Барала́р, эшләйҙә́р, ҡысҡыралала́р, йөрөйҙә́р, йоҡлайҙа́р, яратала́р.

Күренеүенсә, башҡорт телендә был форма ҡылымдарында баҫым күплек ялғауына төшә (*бара́лар, йөрө́йҙәр* тип һөйләү хата).

**49-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған бер мәҡәлдең мәғәнәһенә тап килтереп, бәләкәй генә хикәйә яҙығыҙ.

1. Иләктә һыу торма́ҫ, тинтәктә һүҙ торма́ҫ.
2. Иҫәр менән иҫәр бу́лма.
3. Алйот үҙен маҡта́р.
4. Йүләр бармаҡ күрһәтһәң дә көлә.
5. Тиленең уйында ни, телендә шул.

# АЛТЫН КӨҘ

*Мөхөтдин Тажи*

## АЛТЫН КӨҘ

Тыуған ерем!
Ҡырҙар, биҙәк-биҙәк
Келәм төҫлө, ята түшәлеп.
Алһыу, зәңгәр буяу йоҡҡан һымаҡ
Уйһыулыҡтар, тауҙар итәге.
Һағым уйнай. Күкһел сағыл таштар,
Йәш уҫаҡтар, сауҡа, имәндәр
Һәм ҡыуаҡтар, һары алтын кеүек,
Әбей сыуағынан биҙәлгән.
О тыуған ер!
Күркәм, киң, мөһабәт,
Алтын көҙлө, йомарт ҡояшлы!
Һәр бер аҙым һайын тоям һиндә
Киләсәк таңының һыҙатын.
Һәм мин күрәм ерҙе кешеләрҙең
Хеҙмәт даны менән биҙәүен,
Һәм теләйҙәр улар бик-бик тыныс
Булыуҙарын алтын көҙҙәрҙең.

*Фәүзиә Рәхимғолова*

## КӨҘ

Көҙ биҙәгән еркәйемде
Мең биҙәккә;
Әллә япраҡ оса, әллә
Елбәҙәктәр?!
Эй килешә һары күлдәк
Ҡайындарға!
Ә миләштәр ялҡын яулыҡ
Ябынғандар.
Баландарым таҡҡан ҡыҙыл
Муйынсаҡтар;
Ал яулығын болғап ҡала
Йәш уҫаҡтар.
Йондоҙ төҫлө балҡый, ана,
Көҙ гөлдәре…
Бигерәк аҫыл тыуған ерем
Миҙгелдәре!

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын асыҡлағыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.
2. Шағир *әбейҙәр сыуағын* иҫкә ала. Ҡайһы ваҡыт ул? Рустар уны нисек атай? Шағир уны нисек тасуирлай? Текстан миҫалдар килтерегеҙ. Үҙ-ара фекер алышып, атай-әсәй-ҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, «Әбейҙәр сыуағы» тигән темаға белешмә төҙөгөҙ.
3. Әбейҙәр сыуағы көҙ мәленә тура килә. Ә ҡыҙҙар сыуағы йәки малайҙар сыуағы булһа, ул, һеҙҙеңсә, ҡайһы ваҡытта булыр ине икән? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
4. Ике шиғырҙа ла шағирҙар һүрәтләү сараларын бик мул ҡуллана. Улар ниндәйҙәр? Һеҙ көҙҙө нисек һүрәтләр инегеҙ?
5. Көҙ һәр ваҡыт *алтын төҫлө* сағыу биҙәкле, *әбейҙәр сыуағы кеүек* йылы буламы? Көҙҙөң үҙегеҙгә оҡшамаған яҡтарын тасуирлап күрһәтегеҙ.
6. Башҡорт, рус һәм башҡа милләт шағирҙарының көҙ тураһында ниндәй шиғырҙарын уҡығанығыҙ бар?

7. Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
8. Рәссам булһағыҙ, көҙҙө нисек, ниндәй төҫтәрҙә һүрәтләр инегеҙ?
9. М. Тажиҙың «Алтын көҙ», Ф. Рәхимғолованың «Көҙ» шиғырҙарын И. Левитандың «Алтын көҙ» картинаһы менән сағыштырып, уртаҡ яҡтарын билдәләгеҙ.
10. «Алтын көҙ» темаһына шиғыр йәки инша яҙығыҙ.
11. Интернет селтәренән көҙҙөң һәр мәленә һүрәт, картина, иллюстрациялар табып, «Башҡортостанда көҙ» темаһына картиналар күргәҙмәһе йәки фоторепортаж эшләгеҙ.

**50-се күнегеү.** Татар шағиры Хәсән Туфан яҙған шиғырҙы уҡығыҙ. Әҫәрҙең исеме бирелмәне. Һеҙ уны нисек атар инегеҙ?

* * *

Япраҡ оса урамда,
Ел-дауыл ҡупҡан һайын.
Сайҡала көҙгө дауылда
Япрағын ҡойған ҡайын.

Дауылдар сабыр ҡайынды
Япраҡтан айырҙылар, —
Япраҡтар ләкин ҡайында,
Үҙҙәрен дауам итергә,
Бөрөләр ҡалдырҙылар.

Тибрәтә ҡайын дауылда
Япраҡһыҙ сыбыҡтарын.
Яланғас үҙе, шулай ҙа
Йөрәге тыныс уның.

Дауылға күнгән ҡайындың
Күңеле тыныс уның:
Яҙ етер! Сая бөрөләр
Яланғас сыбыҡтарын
Япраҡҡа күмер тағын.

Шиғыр тексынан хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ.

## ҠЫЛЫМДАРҘЫҢ ЮҠЛЫҠ ФОРМАЛАРЫ

Ҡылымдарҙың юҡлыҡ формалары -*ма*, -*мә* ялғауҙары менән бирелә. Улар ҡылым нигеҙенә ҡушыла. Ҡайһы бер формаларҙа юҡлыҡ -*маç*, -*мәç*, -*мам*, -*мәм* ялғауҙары менән белдерелә.

Баçым -*ма*, -*мә* ялғауҙарына төшмәй, ошо ялғауҙар алдындағы ижектә ҡала: *йөрө́-мә-йем, ба́р-ма-ясаҡ-мын*. Ә -*маç*, -*мәç* баçымлы була: *ҡайтма́çһығыҙ*. Баçым артабанғы ялғауҙарға күсә ала: *килмәçтә́р*.

**51-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе баçымдарҙы дөрөç ҡуйып уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Бер мәҡәлгә ярашлы инша яҙығыҙ.

1. Ҡабыҡ һуғып, ҡарға ҡурҡыта алмаçһың. 2. Алмас ерҙә ҡалмаç. 3. Иркә бала ир булмаç. 4. Ҡамсыға ат сыҙамаç, тамсыға таш сыҙамаç. 5. Ҡарғанан һандуғас тыумаç. 6. Сыбыҡты сей сағында бөгәләр. 7. Һуғып, тимерҙе генә йомшарталар. 8. Ир-егетте юлдашына ҡарап беләләр. 9.Кейемде кешеһенә ҡарап тегәләр.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө, алымһыҙ булырһың көҙ көнө.

* * *

Яҙҙың йәме сәскә менән, көҙҙөң йәме көлтә менән.

## УҠЫУ — БЕЛЕМ ШИШМӘҺЕ



### РАИЛ БАЙБУЛАТОВ (1937 — 2002)

Раил Фәтхелислам улы Байбулатов 1937 йылдың 2 июнендә Башҡортостандың Күмертау районы Яманғол ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған.

Раил Байбулатов — элекке педагог булараҡ, мәктәп, уҡыусы балалар тормошона арналған йәш быуынды уйландырырлыҡ, тулҡынландырырлыҡ хикәйәләр ижад иткән яҙыусы.

Раил Байбулатовтың «Әсәйемдең алсаҡ йөҙө», «Зәңгәр болоттар», «Иң ауыр фән», «Һоро шинель», «Оҙайлы имтихандар» кеүек хикәйә йыйынтыҡтары донъя күрҙе.

### КҮҢЕЛ КҮҘҘӘРЕ

Бынан күп йылдар элек яу ҡырында күҙе һуҡырайып ҡайтҡан Уғатар ағайҙы ауылдаштары ихлас йәлләйҙәр. «Бисара, шул көйө эшләп йөрөгән була бит әле», — тип уның хәлен уртаҡлашалар.

Ысынлап та, яҡтылыҡты саҡ ҡына шәйләп, таяҡ менән урамда һәрмәнеп йөрөгән Уғатар ағай эргәһенән вайымһыҙ ғына үтеп булмай. Яҫы ҡаштары аҫтынан ҡараған төҫһөҙ күҙ алмалары күңелгә әрнеү һала.

Уғатар ағай был бәхетһеҙлеккә Сталинградты дошмандан азат итеү өсөн барған һуғышта тарыған. Сер итеп кенә һөйләүенә ҡарағанда, атака ваҡытында ҡаты яраланып, күреү нервылары өҙөлә. Уны төрлө госпиталдәрҙә дауалайҙар, хатта донъяға танылған күҙ докторы Филатовҡа ла күрһәтәләр. Ләкин ҡаты йәрәхәтләнгән һуғышсыға бер кем дә ярҙам итә алмай. Уғатар ағай ҡыҙарып ҡояш сығыуын, йәйғор нурҙары уйнауын, үҙ туғандарының йылмайыуын күреү бәхетенән мәхрүм ҡала.

«Артабан нисек йәшәргә? Нимә эшләргә?» — тигән һорауҙар батыр һуғышсыға тынғылыҡ бирмәй. Ул үҙ-үҙенә ант итә: «Көрәшергә!.. Меҫкен булып йәшәмәҫкә!.. Һуңғы һулышына саҡлы халыҡ бәхете өсөн көрәшкән Николай Островский, уның әҫәрендәге Павел Корчагин кеүек көрәшергә!»

Бына шунан инде Уғатар ағай яңынан элекке эшенә ҡайта. Балаларға тарих фәнен уҡыта башлай. Дәрестәрҙе мәктәптә лаборант булып эшләгән Нәфисә апай менән икәүләп уҙғаралар. Үҙ фәнен һыу кеүек эскән Уғатар ағай һөйләй бирә, ярҙамсыһы — ҡатыны Нәфисә апай картала күрһәтеп бара. Уларҙың дәресендә хатта себен осҡан тауыш ишетелә.

Нәфисә апай ҡапыл ауырып киткәс, Уғатар ағай дәрестәрҙе яңғыҙы уҙғара башланы.

Ҡыңғырау шылтырау менән, Уғатар ағай, ашыҡмайынса ғына, үҙенең тарих бүлмәһенә йүнәлә. Ул, һап-һау кеше һымаҡ, туп-тура атлап, класҡа килеп инә лә теплоходтарҙағы капитан күперсеген хәтерләткән ҡалҡыу өҫтәл артына күтәрелә. Ләкин ул бер кемде лә күрмәй. Уның тимерҙәй ҡоршау эсендәге күҙ нервылары менән көллө класс араһында бына нисәмә йылдар ҡараңғы упҡын йәшәй. Элегерәк Уғатар ағай шунда аҙаша яҙғанда, хатта күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндә, Нәфисә апай, сағыу маяҡ һымаҡ, уны үҙе менән яҡтылыҡҡа алып китә ине. Бына хәҙер, Нәфисә апай булмағас, Уғатар ағай, тәүге тапҡыр дәрес уҙғарған студент һымаҡ, класҡа ниңәлер һағайып, хатта шомланып инә башланы. Сөнки ҡайһы бер шуҡ малайҙар хатта күҙҙәре күргән уҡытыусылар алдында ла бороп ебәрелгән уйынсыҡ һымаҡ ҡыланалар

бит. «Минең дәресемдә шундайҙар булмаҫмы?» — тигән һорау Уғатар ағайҙың күңеленә өйгә ҡайтҡас та тынғылыҡ бирмәй, һәм ул Нәфисә апайҙың тиҙерәк һауығыуын түҙемһеҙлек менән көтә.

Юғары класс уҡыусылары, Уғатар ағайҙың ауыр яҙмышын аңлағанға күрәлер инде, был уҡытыусыны үҙҙәре өйрәнгән Павел Корчагин һымаҡ илаһи геройға тиңләп, дәрестәрендә ихлас бирелеп тыңлайҙар. Уғатар ағайҙың тормошо хаҡында улар пионер сборҙарында, комсомол йыйылыштарында ишеткәндәре бар. Бәлки, был хаҡта Уғатар ағай ғына белмәйҙер. Сөнки яратмай ул үҙен тегендә-бында ҡыҫтырыуҙы, ниңәлер йәлләү һымағыраҡ ҡабул итә. Ҡайһы саҡта, асыуы килгәндә: «Яу ҡырында ҡорбан булған геройҙар хаҡында күберәк һөйләгеҙ», — тип хатта ысрашыуҙан, кешеләр алдында сығыш яһауҙан да баш тарта. Ә бит, уйлап ҡараһаң, ул да геройға тиң. Түшендә әллә күпме орден-миҙалдар балҡый. Хәйер, уларҙы, Нәфисә апайҙың ҡушыуы буйынса, һирәк-һаяҡ, Еңеү көндәрендә генә, мәктәпкә тағып килә. Бына шул саҡ Уғатар ағай тағы ла ыҫпайланып, хәрби офицерҙарға оҡшап китә. Уның ҡыҫҡа ғына сал сәстәре, йыйырсыҡтар менән артыҡ һырмаланмаған шыма йөҙө, йылмайып, кинәйәле һөйләшеүгә бына-бына әҙер торған һәм «М» хәрефен хәтерләткән ҡалынырaҡ ирене түшендәге хәрби наградалар яҡтыһында нурланып, балҡып китә. Ә ағай үҙе шул саҡ йәшәреп ҡалғандай була.

Мин, Уғатар ағайҙың уҡыусыһы, уның хаҡында уйланып ултыра торғас, өләсәйемдең йыш ҡына ҡабатлай торған: «Бер әҙәм бар — Алланан яҡшы, бер әҙәм бар — хайуандан шаҡшы» тигән мәҡәлен ҡапыл ғына хәтерләнем. «Алланан яҡшы» тигәне Уғатар ағай ише кешелер ул. Ә шаҡшыһы кем? Ундай кешене ниңәлер үҙебеҙҙең аранан эҙләй башланым... Әһ-һә... Шул саҡ күптән түгел етенсе класта Хәмзә Яҡупов исемле малайҙың Уғатар ағайҙы нисек һемәйтергә маташыуын хәтерләнем дә: «Бына кем ул шаҡшы!» — тип бөтә донъяға ҡысҡырып ебәрә яҙҙым.

Уғатар ағай тарихтан ҡабатлау дәресе уҙғара ине. Бер нисә уҡыусы яуап биргәндән һуң, ул таҡта эргәһенә Хәмзәне саҡырҙы ла рус-төрөк һуғышы хаҡында һөйләргә ҡушты.

Хәмзә, урынынан теләр-теләмәҫ кенә тороп, эленеп торған карталар янына йүнәлде. Класҡа ҡарап алғас, һүҙҙәрҙе

тештәре араһынан көскә һығып сығарған кеүек, һөйләргә кереште. Ләкин ул шунда уҡ полководец Суворовтың Измаил крепосы янындағы һөжүменә төштө лә китте. Румянцевтың төрөктәрҙе тәүге еңеүе хаҡында бөтөнләй онотҡан. Шуға күрә лә Уғатар ағай:

— Рус-төрөк һуғышы ҡасан башланған әле? — тип һораны.

Хәмзә, кәмәһе ҡомға терәлгән кеүек, аптырап ҡалды, хатта сандыр иңбаштарын ололар кеүек һелкетеп ҡуйҙы.

Ҡыҫыҡ күҙҙәрен картаға секрәйтеберәк бағып торғандан һуң, ҡапыл класҡа боролдо ла алғы рәттә ултырған малайҙарға: «Ярҙам итегеҙ әле!» — тигән һымаҡ, ишара яһаны. Тегеләр йылдарҙы йәһәт кенә ҡағыҙға яҙып күрһәттеләр.

— 1768 йылда төрөк ғәскәрҙәре Рәсәйгә һөжүм иткәндәр.. — Шул саҡ тәүге партала ултырған Харрас, китапты асып, Хәмзәгә һондо. Малайҙың теле ҡапыл асылды. — Ул саҡта рус армияһына Пётр Александрович Румянцев етәкселек иткән... 1770 йылда Дунай йылғаһының тамағынан алыҫ түгел Ларга йылғаһы буйында һикһән меңлек төрөк армияһы Румянцевтың ҡырҡ меңлек армияһы менән осраша... — Әле генә ауыҙына һыу уртлаған кеүек торған малай апаруҡ һөйләп китмәһенме! Ә уҡыусылар быны нимә менән барып бөтөрөн ғәжәпләнеп көттөләр. Шуға күрә күбеһе, күрмәмешкә һалышҡан кеүек, баштарын түбән эйгәйне. Ғәжәп, Уғатар ағай тәҙрә яңағына һөйәлгән дә йоҡоға талған кеүек тора. Артҡы рәттә кемдер түҙмәне: «Китапҡа ҡарамайынсараҡ һөйлә!» — тип ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Улай ҙа булмай, Хәмзә үҙенә тейешле һорауҙы ослап та ҡуйҙы. Класс тәрән тынлыҡҡа сумды. Хәҙер инде бөтәһе лә уҡытыусының бер аҙ ағарған йөҙөнә төбәлгән дә уның ни әйтерен көтә.

Үҙенең уңайһыҙ хәлдә ҡалыуын һиҙеп, Хәмзә тиҙерәк ҡотолоу яғын ҡараны. Шуға ла ул беренсе булып өндәште:

— Ағай, һөйләп бөттөм. Ултырырға мөмкинме?

Уғатар ағай вайымһыҙ ғына яуапланы:

— Мөмкин.

Шул саҡ ул, ҡапыл ғына көслө ел иҫкән һымаҡ, класта ниндәйҙер тауыш таралыуын һиҙҙе. Күрәһең, ҡайһы берәүҙәр Хәмзәнең һыуҙан ҡоро сығыуына аптырайҙарҙыр. Уғатар ағай, бер нәмәгә лә иғтибар итмәгән төҫлө, һаман баяғыса тора бирҙе. Костюм кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡулъяулығын ашыҡмай

ғына сығарып, селт-селт йомолған күҙ ҡабаҡтарын һөрткөләп алды. Унан, ауыр һулап, һалмаҡ ҡына өҫтәл эргәһенә килде. «Тимәк, был Яҡупов дәрес һайын тиерлек хикмәттәр уйлап сығара башланы. Үҙе бәләкәй генә тиҙәр, ә бөтә класс алдында ниндәй ҙур мутлыҡҡа ҡыйыулығы етә». Шул саҡ Яҡуповтың элегерәк бер дәрестәге ҡылығы ла Уғатар ағайҙың иҫенә келт итеп килеп төштө.

Яңы теманы аңлатып бөтөп кенә килгәндә, Хәмзәнең эргәһендә ултырған Гүзәл исемле ҡыҙ ҡапыл: «Ағай, Яҡуповты ҡарағыҙ әле, маркаларымды алды ла тыңларға ирек бирмәй», — тип ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе. Тегеләрҙең ығы-зығыһы менән дәрес ҡапыл өҙөлдө: «Бына бит китабың араһында ята», — тигән тауышҡа: «Нимә юҡты һөйләйһең, бында яртыһы ғына», — тигәне өҫтәлде. Гүзәлде эргәһендәге башҡа ҡыҙҙар ҙа ҡеүәтләп алды. «Ағай, Яҡупов, ысынлап та, баянан бирле юҡ-бар менән маташып ултыра», — тинеләр. Шул саҡ класты йәнә Хәмзәнең әсе тауышы яңғыратты: «Ниңә бушты һөйләйһең, ошаҡсы!..» Уғатар ағай, нимә эшләргә белмәйенсә, аптырап торҙо ла, өҫтәлдәге күрһәткес таяҡты алып, Хәмзәгә ҡарай йүнәлде. Боласы уҡыусы ҡымшанмай баҫып торһон өсөн, Уғатар ағай уны беләгенән тотоп сығармаҡсы ине. Ә ул, уҡытыусы хәҙер таяҡ менән тондора, тип уйланы, ахыры. Уғатар ағай килеп еткәнсе, йәшенмәк уйнаған һымаҡ, парта аҫтына туп шикелле төштө лә китте. Малайҙар шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Шул саҡ уҡытыусының әрнеүле йөҙө ҡапыл күкһелләнеп китте, асыуҙан ағарған ирендәре һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡалтыраны. Ул, ярһыуын көскә тыйып: «Яҡупов, хәҙер үк сығып баҫ!» — тине. Улай ҙа булмай, тәнәфескә ҡыңғырау ҙа шылтыраны. «Инде һине нимә эшләтергә, Яҡупов?..» Уғатар ағай дәрестән һуң ҡалырға ҡушты, һөйләшеү бик тә ҡәтғи булды. «Был мәктәптә уҡыу һиңә оҡшаймы?» — тип һораны ул. «Оҡшай», — тине Яҡупов. «Оҡшаһа, икенсе мәртәбә бөгөнгө кеүек шаярып ултырма, — тип ҡаты иҫкәртте Уғатар ағай. — Юғиһә насар тәртибең хаҡында атайың менән әсәйеңә хат яҙам... Шунан Африка сүллегенә киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалырһың...» Уҡытыусының шулай тип ҡәтғи белдереүенең үҙ сере бар ине.

Хәмзә — ҡала малайы ул. Атаһы менән әсәһе, Эфиопияға ике йылға командировкаға китергә булғас, малайҙы ауылға,

олатаһы менән өләсәһе ҡарамағына ҡалдыралар. Бында килгәс, шаярыуға әүәҫ икәнен һиҙҙереп ҡуя.

Шулай ҙа теге ваҡыт дәрестән һуң хәтһеҙ генә өйөнә ҡайта алмай ултырғас, Яҡупов, ысынлап та, баҫыла төшкәйне, бына уйламағанда йәнә әҙәм көлкөһөнә ҡалды.

Харрастың асыҡ китабы буйынса һәләк еңел генә яуап биреп, урынына килеп ултырғас, Хәмзә үҙенең ҙур насарлыҡ ҡылғанын һиҙеп алды. Сөнки Уғатар ағайҙың борсоулы йөҙөнә йәнә теге көндәге һымаҡ күгелйем таптар ҡалҡҡайны. Апаруҡ өнһөҙ торғас, ул өҫтәлдә асылмай ятҡан класс журналын алды ла, һаҡлыҡ менән аҫҡа төшөп, артҡы рәткә йүнәлде. Уғатар ағай һәр саҡ мәктәп эсендә күҙҙәре яҡшы күргән кеше кеүек йөрөй. Уның был һәләте күптәрҙе ғәжәпләндерә. Хәтере лә яҡшы. Кәрәк мәғлүмәтте һә тигәнсе әйтер ҙә һалыр. Шуға күрә лә ул бармаҡтары менән ҡапшап уҡый торған ҡалын китаптарын мәктәпкә бик һирәк йөрөтә. Тарих фәнен яттан беләләр ул, моғайын...

Ҡулы менән парталарҙы һанаған кеүек килә торғас, ул Хәмзә эргәһендә туҡтаны.

— Яҡупов, — тине ул ҡапыл ғына, журналды һоноп. — Тарих дәресе битен ас әле!.. Астыңмы? Хәҙер үҙеңдең фамилияңды эҙләп тап!.. Таптыңмы? Инде ручкаңды ал да үҙеңә «бишле» билдәһе ҡуй!

Ручкаһы менән журналға эйелгән Хәмзә ҡапыл һиҫкәнеп ҡуйҙы. Иптәштәре уны: «Был ни эшләр икән хәҙер?» — тигән кеүек, һынаулы ҡараш менән күҙәтәләр ине.

Хәмзә, башын ҡалҡытып, уҡытыусыға ҡараны. Уғатар ағайҙың әллә ысын, әллә шаяртып әйткәнен белгеһе килә ине уның.

— Ну, «бишле» билдәһен һуҡтыңмы? — тип йәнә ҡабатланы уҡытыусы.

Шул саҡ Уғатар ағайҙың бит остары ағарып китте. Төтөн кеүек төҫһөҙ шекәрә менән ҡапланған күҙ алмалары шар асылды ла Хәмзәгә текәлде. «Һеҙҙең яҡты киләсәгегеҙ өсөн изге һуғышта иң ҡәҙерле нәмәһен — күҙен юғалтҡан кешенән көлөргә, мыҫҡыл итергә уйланыңмы, шаян малай?» — тигән кеүек, тишерҙәй итеп ҡарай ине Уғатар ағай. Хәҙер малайҙың таҡта янындағы ҡыйыулығының әҫәре лә ҡалмағайны. Сөнки Яҡупов был юлы Уғатар ағайҙың асыулы ҡиәфәтенән дерелдәү

хәленә еткәйне. Шуғалыр ҙа унын бая ағарған йөҙө алһыулана төштө, ҡарпыш ҡолағы әтәстең кикреге кеүек һалынды.

— Ниңә өндәшмәйһең, Яҡупов?.. Ҡуйҙымы үҙенә билдә? — Уғатар ағай класҡа өндәште. Күрәһең, бәхәсте бергәләп хәл итергә уйланы.

— Юҡ, ағай, — тине Гүзәл. Артта ултырған бер уҡыусы уға ҡушылды:

— Ағай, уның ҡулы ҡалтырай, «бишле» билдәһе ҡуям тип, үҙенә «икеле» сәпәүе бар.

Класс шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

— Ҡурҡаҡтарҙың ҡулы һәр саҡ ҡалтырай инде ул, — тине йылмайып Уғатар ағай.

Хәмзә үҙен усында ҡайнар ҡуҙ тотҡан кеүек хис итте. Әйтерһең дә, иҙән таҡтаһы бына-бына емерелер ҙә, ул упҡынға төшөп китер. Шунан, ҡурҡҡан кеүек, Яҡупов ҡапыл журналға үҙенең фамилияһы тапҡырына бер таяҡты — «иң насар» билдәһен һыҡты ла аяҡ өҫтө баҫты:

— Ғәфү итегеҙ мине! Һеҙҙең алда ғәйеплемен…

— Быныһы инде икенсе эш. — Уҡытыусының борсоулы йөҙө, ҡара болотто тишеп йылмайған ҡояш кеүек, ҡапыл яҡтырып китте. Уғатар ағайҙың көсөргәнеп талған күҙ алмаларында элекке кеүек яғымлы йылмайыу сатҡылары хасил булғайны. Сөнки ул кешенең әйткән һүҙҙәренең ихласлығын күңеле менән күреп һиҙә ине.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ. Уларҙы тексты уҡыу барышында яҙа барығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.
2. Уғатар ағайҙың дәресендә ни өсөн себен осҡан тауыш ишетелә?
3. Уғатар ағай *уҙ фәнен һыу кеүек эсә.* Һеҙҙең шундай уҡытыусығыҙ бармы? Уға характеристика төҙөп яҙығыҙ.
4. *Кәмә ҡомға терәлеү, күрмәмешкә һалышыу, һыуҙан ҡоро сығыу, әҙәм көлкөһөнә ҡалыу, тишерҙәй итеп ҡарау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Рус телендә был мәғәнәне ниндәй һүҙҙәр менән бирәләр?
5. Текста класс *шарҡылдап* көлә. Көлөүҙең тағы ниндәй төрҙәре бар? Һанап сығығыҙ, һәр береһенең ниндәй осраҡта булыуын аңлатығыҙ.
6. Хәмзә Яҡуповҡа характеристика бирегеҙ.

7. Уғатар ағай образына характеристика бирегеҙ. Һеҙ уның ниндәй сифаттарының үҙегеҙҙә булыуын теләр инегеҙ?
8. Текстан мәҡәл-әйтемдәрҙе яҙып алығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
9. Һеҙҙеңсә, хикәйәнең исеме дөрөҫ бирелгәнме? Фекер алышығыҙ.
10. Туғандарығыҙ, таныштарығыҙ, ауылдаштарығыҙ араһында Уғатар ағай кеүек һуғыш ветерандары булһа, улар тураһында мөмкин тиклем тулыраҡ мәғлүмәт туплап, һөйләргә әҙерләнеп килегеҙ.
11. Бөйөк Ватан һуғышы һеҙҙең ата-бабаларығыҙға нисек ҡағылған?

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары һөйләмдә һәр саҡ хәбәр булалар һәм күберәк һөйләмдең аҙағында киләләр.

**52-се күнегеү.** Йомаҡтарҙы уҡығыҙ. Яуаптарын табығыҙ. Ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ.

1. Ҡулы юҡ, аяғы юҡ, тәҙрәмде ҡаҡҡылай,
   Тартҡылай, һуҡҡылай, өйгә инергә һорай.
2. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡапҡа аса.
3. Ыжғыра, һыҙғыра, үҙе көйләй,
   Ағастарҙы әйә, үҙе күренмәй.

**53-сө күнегеү.** Яуаптарына ярашлы һорауҙарҙы дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.

I. 1. Һин киноға барырға йыйынаһыңмы? (Эйе, киноға.)
   2. Һин киноға барырға йыйынаһыңмы? (Эйе, мин.)
   3. Һин киноға барырға йыйынаһыңмы? (Эйе, йыйынам.)
II. 1. Һеҙ «Өс таған» повесын уҡynығыҙмы? (Эйе, беҙ.)
   2. Һеҙ «Өс таған» повесын уҡынығыҙмы? (Эйе, «Өс таған».)
   3. Һеҙ «Өс таған» повесын уҡынығыҙмы? (Эйе, уҡыныҡ.)

**54-се күнегеү.** Баҫымды дөрөҫ ҡуйып уҡығыҙ.

1. Уҡымайһығыҙмы?
2. Уҡымаҫһығыҙмы?
3. Уҡымаҫтармы?
4. Уҡымаҫлыҡтармы?



## НОҒМАН МУСИН

## (1931)

Ноғман Сөләймән улы Мусин 1931 йылдың 17 июлендә Башҡортостандың Ишембай районы Ҡолғона ауылында тыуған.

Ноғман Мусин — урманды, уның матурлығын, байлығын данлаған талантлы яҙыусы. Ул «Өҙәрем юл кешеләре», «Һайлап алған яҙмыш», ике китаптан торған «Мәңгелек урман», «Зәңгәртауҙа — аҡ болан», «Яралы кеше тауышы» романдарын, «Зөһрә», «Ер биҙәге», «Ауыл юлы», «Төпкөлдән төшкән килен», «Тауҙар тыны», «Шайтан ҡуласаһы», «Күңел нуры» кеүек бик күп повестар, хикәйәләр, очерктар ижад итте. Уның байтаҡ ҡына китаптары рус теленә тәржемә ителеп баҫылып сыҡты.

### ТАЙҒАҠ БАҪМА

### I

Иртәгә уҡыуҙар башлана. Мәктәп, класташтар бик һағындырған. Таң һарыһы менән тороп, шунда йүгерергә кәрәк. Үҙебеҙ торған ауылдан өс саҡрымдағы Ташморон һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә йөрөп уҡыйбыҙ. Ошо араның юлын бер йыл тапаныҡ инде. Быйыл алтынсы класҡа уҡырға барабыҙ.

Кистән үҙ-үҙемә: «Иртүк торайым да Рәхмәтте барып уятайым. Күҙе дүрт булһын», — тип һүҙ биреп ятҡайным. Ошо уй тынғы бирмәне. Уянғанда өй эсе әрбәк-һәрбәк яҡтыра башлағайны. Әсәйем, һыйыр һауып инеп:

— Хәҙер сәй ҡайнар, өтәләнмә, — тиһә лә, түҙмәнем. Ҡатыҡ эстем дә, сумкамды алып, кеҫәгә бер телем икмәкте ҡағыҙға төрөп тығып, Рәхмәттәргә йүгерҙем. Ҡәһәрең, йоҡлап яталыр тиһәм, юлға сығырға әҙерләнеп бөтөп кенә тора.

— Әйҙә, — ти был, — Садиҡ менән Гөлсөм быйыл бишенсе класҡа бара бит, уларҙы ла алып китәйек. — Әллә Рәхмәтте

йоҡоһонан уятырға өлгөрмәгәнгә инде, кәйефем ҡырылыбыраҡ тора ине. Шуға, күп уйлап тормаҫтан:

— Юлды беләләр бит, аҙашмаҫтар әле, — тигәйнем, Рәхмәт миңә шелтәле ҡарашын төбәне:

— Белһәләр ни әллә: дүртәүҙән-дүртәү генә булып, бүленеп-ярылып йөрөйөкмө?

Уның шулай ҡырыҫ итеп өндәшкән сағында ниңәлер ҡаршы һүҙ әйтеп булмай. Әле лә һүҙһеҙ ризалаштым.

Юл ыңғайында дүртебеҙ ҙә берәр ҡосаҡ тиерлек сәскә йыйып алдыҡ. Ташморон ауылына килеп еткәндә, мәктәптең ишек алдында бер нисә бала ғына уйнап йөрөй ине. Сәскәләребеҙҙе һыулы банкаларға ҡуйып, уҡытыусыбыҙ өҫтәленә, тәҙрә төптәренә ултыртҡас, класс тағы ла йәмләнеп, хуш еҫ менән тулып китте. Класс етәксебеҙҙән дә быйылғы тәүге маҡтау һүҙҙәрен ошо сәскәләр өсөн ишеттек. Ни булһа ла, ошо типарай кәүҙәле Рәхмәт арҡаһында инде. Ғәжәп һәйбәт дуҫ шул ул. Ошо ауылдашым булмаһа, яҙ көнө миңә, бәлки, Маҡтау грамотаһы ла тәтемәҫ ине. Башҡа фәндәрҙән бирешеүен бирешмәйем дә, тик математика бәкәлгә һуғыныҡырай. «Йыллыҡты «дүрт»кә тырыштырып булһа», — тип шыртлабыраҡ йөрөй инем, ошо Рәхмәт арҡаһында «бишле» эләгеп ҡуйҙы. Яҙға табан бер генә өйгә эшен дә минән башҡа эшләмәҫ булып китте ул. Ҡайтҡас, тамағын туйҙырып, арлы-бирле итә лә, математика китабы менән дәфтәрен күтәреп, беҙгә килеп тә етә. Ниндәй ҡатмарлы мәсьәләләрҙе лә уйнаған шикелле генә итеп сығара ла ҡуя ул. Дөрөҫ түгелдер тип, китап аҙағындағы яуаптарға ҡараһаң, тап ундағы һандар була ла тора. Тик Рәхмәт ҡабаланмай. Мине тәүҙә байтаҡ этләндерә.

— Йә, мин ҡарап торайым, һин эшлә, — ти, хисап сығарғанымды һүҙһеҙ генә ҡарап ултыра. Яңылышып китһәм, тура ғына әйтмәйенсә:

— Тегеләй итеп ҡара... Былай итһәң, нисек булыр икән? — тип, мине әллә ни тиклем уйланырға мәжбүр итә. Хисап дөрөҫ килеп сыҡһа:

— Бына булды, эй баш та инде үҙеңдә, Әсҡәт! — тип шатланып, мине маҡтай. Шунан уны икәүләп таҙа дәфтәребеҙгә күсерәбеҙ.

Әгәр, аҙапланып-аҙапланып та, миҫалды йә мәсьәләне сығара алмаһам, үҙе тотона. Унда ла мине ҡаратып ҡына ултыртмай, һандарҙы ҡушырға, алырға, ҡабатларға, бүлергә ҡуша. Инде эш бөттө, тип еңел генә тын алдыңмы, шул әле генә

эшләгән мәсьәләне яңы баштан үҙ алдыма сығарып ҡарарға ҡуша. Оҙаҡ ултырып, ялҡау килеберәк киткән саҡта:

— Ярар, аңлайым бит инде, — тиһәм, һаман үҙенекен ныҡый:

— Аңлағас, уйлап-нитеп тораһы юҡ, йә әле, һәйбәт кенә эшләп ташла, — ти.

Ни эшләйһең, ҡаршылашып еңеп булмай уны. Өр-яңынан тотонорға тура килә. Уҡыу йылы бөтөр саҡта инде, көндәлегемдә башҡа фәндәрҙән генә түгел, математиканан да «бишле» күренә башланы. Йыллыҡҡа ла «бишле» сыҡты, һәм, йәйге каникулға таралыр алдынан, бөтә класс балалары алдында директор ағай Рәхмәткә лә, миңә лә Маҡтау грамотаһы тапшырҙы. Ауылыбыҙға шатланышып ҡайтып барғанда:

— Рәхмәт, был грамотаны миңә һин алып бирештең инде, — тигәйнем, дуҫым, миңә асыуланғандай итеп:

— Юҡты һөйләмә, маҡтау менән хөрмәтте кешегә кеше алып бирмәй. Үҙең тырышмаһаң... — тине.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ. Мәғәнәләрен асыҡлап, улар менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнегеҙ.
2. *Күҙе дүрт булһын, математика бәкәлгә һуғыңҡырай* һөйләмдәренең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Уларҙы рус теленә тәүҙә тура мәғәнәһендә (һүҙмә-һүҙ) тәржемә итегеҙ, шунан ошо мәғәнәне биреүсе эквивалентын табығыҙ.
3. Рәхмәттең *маҡтау менән хөрмәтте кешегә кеше алып бирмәй* тигән һүҙҙәрен һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Фекерегеҙҙе дәлилләп, миҫалдар килтерегеҙ.
4. Нимә була ул *кәйеф ҡырылыу*? Һеҙҙең кәйефегеҙ ҡырылғаны бармы? Булһа, шул мәлдә нимә кисергәнегеҙҙе һөйләгеҙ.
5 Ниндәй ваҡыт ул *таң һарыһы*? Таңдың ҡыҙылы ла, ҡараһы ла, зәңгәре лә, йәшеле лә буламы? Фекер алышығыҙ.
6. Әсҡәт математиканан *йомшағыраҡ,* шуға *шыртлаңҡырап йөрөй.* Һеҙҙең дә берәй фәндән шулай шыртлаңҡырап йөрөгәнегеҙ бармы? Шыртламаҫ өсөн, нимә эшләргә кәрәк?

**55-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙә һүҙҙәр үҙ урынындамы? Дөрөҫләп яҙығыҙ.

Үтте ҡыш оҙон, күңелһеҙ. Ирене ҡарҙар, башланы аға һыуҙар. Мансылды ер йөҙө ҡояш нурына. Ҡайта башланы

ҡоштар йылы яҡтан. Килгән сыйырсыҡ, тигән ишеттем һүҙҙе. Ҡараным тәҙрәгә. Сыбыҡҡа сыйырсыҡ ояһы өҫтөндәге ҡунған сыйырсыҡ бер пар. Һағынып килгәндәр улар бик беҙҙе. *(М. Ғафуриҙан)*

**56-сы күнегеү.** 54-се күнегеүҙәге һүҙҙәрҙең дөрөҫ баҫымдарын ҡарағыҙ.

Уҡы́майһығыҙмы?
Уҡыма́ҫһығыҙмы?
Уҡымаҫта́рмы?
Уҡымаҫлыҡта́рмы?

## БОЙОРОҠ ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫ

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары ҡушыуҙы, бойороуҙы, үтенеүҙе, һорауҙы аңлата.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының һүҙ формалары күп түгел. Улар II, III затта, берлектә, күплектә генә була ала: *һин ал, ул алһын, һеҙ алығыҙ, улар алһындар.*

II зат формаһында баҫым беренсе ижектә була: *йө́рө, ҡа́йтығыҙ.*

Бойороҡ һөйкәлешенең II зат берлек формаһы ҡылым нигеҙе менән тап килә.

**57-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ.

## ҠАҘ ИТЕНӘН БӘЛЕШ

Таҙа итеп йыуып әҙерләнгән ҡаҙ итен ваҡ итеп турағыҙ.

Ярманы (дөгө, тары йәки ҡарабойҙайҙы) әҙерәк йомшарғансы ҡайнатып алығыҙ һәм һыуын һарҡытығыҙ. Ҡамырҙан йәймә йәйегеҙ, уны табаға һалығыҙ. Ҡамырҙың өҫтөнә бер ҡат ҡаҙ ите, унан тағы ярма, тағы ҡаҙ ите, иң өҫтән тағы бер ҡат ярма һалығыҙ. Бәләкәйерәк йәймә менән бөрөп тоташтырып сығығыҙ. Бер бәлеш өсөн түбәндәге аҙыҡтар алына:

1,5 кг ҡаҙ ите, 500 г ярма, 2 — 3 баш һуған, тоҙ, борос, лавр япрағы. *(Н. Сафиндан)*

## II

Бына, шулай итеп, яңы уҡыу йылы бик шәп башланды. Тик уйламағанда килеп сыҡҡан күңелһеҙ хәл бөтә эште бер юлы боҙҙо ла ҡуйҙы. Берҙән-бер көндө, әсәйемә картуф ҡаҙышайым тип, уҡырға бармаҫҡа булдым. Иртәнсәк эргәмә ингән Рәхмәткә, алдан хәйлә-фәлән ҡороп ҡуймаһам да, әллә ниңә:

— Башым ауырта, бөгөн барып булмаҫ, — тип әйтә һалдым.

Ул нимә тиһен, Садиҡ менән Гөлсөмдө эйәртеп, китеп барҙы.

Әсәйем, башҡа ярҙам итер кешеһе булмағас ни, өндәшмәне. Көн буйы икәүләп картуф ҡаҙыныҡ. Кискә табанараҡ Рәхмәт килде.

— Бәй, шәбәйҙеңме ни? — тине ул алыҫтан. Алдашҡаным өсөн уңайһыҙланып, ишетмәмешкә һалыштым да картуф сүпләүемде дауам иттем. Ә башымды ҡалҡытып ҡарағанда, Рәхмәт күренмәй ине инде.

Иртәгеһенә иртүк, тамағыма ашап ултырғанда, ул, ишегебеҙҙән башын тығып:

— Бараһыңмы? — тип бер генә һүҙ ташланы. Мин, сынаяғымдағы сәйҙе лә эсеп бөтмәйенсә, сумкамды алып, уның эргәһенә сыҡтым. Ҡарайым, дуҫымдың төйөрөм ҡара ҡаштары емерелгән, тупысыраҡ танауы тағы ла нығыраҡ йәмшәйгән кеүек. Белеп торам, минең алдашҡаныма һөмһөрө ҡойолған уның. Башҡа саҡта һөйләшеп һүҙе бөтмәй торғайны, бөгөн, Ташморонға еткәнсе, ләм-мим өндәшмәне. Рәхмәт өндәшһә, уның күңелен күтәреү өсөн, әллә ниҙәр эшләрҙәй булам да бит, юҡ, шымтайып китеп тик бара. Тик Ташморон урамына килеп ингәс кенә:

— Кисә математиканан бөтә үткәндәрҙе ҡабатланыҡ. Бөгөн — яҙма эш, — тине, башҡа кешегә һөйләгән шикелле, ситкә ҡарап. Уның теле асылыуға шатланып:

— Булһа ни, бирешмәбеҙ, дуҫ, — тим.

Ә ул:

— Әллә шул, ярай ҙа... — тип һүҙен әйтеп бөтөрмәй.

Яҙма эш икенсе сәғәттә булды. Мәсьәләне, Рәхмәт менән бергә тигәндәй, еңел үк сығарҙым. Ә бына миҫалда буталдым да киттем. Аҙағында күңелгә ятмаған әллә ниндәй һандар килә лә сыға. Дөрөҫ түгеллеген һиҙәм дә яңынан эшләргә

керешәм. Рәхмәткә күҙ һалам: ул, миҫалды ла эшләп бөтөп, таҙа ҡағыҙға күсерергә керешкән. Эх, бер генә ерен әйтеп ебәрһен ине! Ләкин, сер бирмәҫкә тырышып, уға өндәшмәйем. Бер аҙҙан уҡытыусы, эргәмә килеп:

— Әсҡәт, уйлабыраҡ эшлә миҫалыңды, — тигәс, тағы ла яңылыш эшләй башлағанымды төшөндөм. Ҡайһы бер уҡыусылар эштәрен уҡытыусыға тапшыра башланы. Шулай уҡ сығарып булмаҫмы, «насар» билдәһе алырмынмы икән ни, тип борсолам, иптәштәр көлмәҫтәрме? Ошондай уйҙарҙан башым нығыраҡ сатнай, ни эшләргә белмәй Рәхмәткә ҡарайым.

— Ҡара әле... әй... бынау ерен нисек...

— Шаулама, үҙең уйла, — тип һүҙемде бүлде ул. Иң аҙаҡҡа ҡалып, звонок булғансы ултырһам да, миҫалды эшләй алманым. Ғәрләндем дә, Рәхмәткә асыуым да килде. «Саҡ ҡына әйтеп ебәрһә була бит инде. Мин бер ни белмәгән малаймы ни? — Шунан һығымта яһаным: — Ул, моғайын, минең яҡшы уҡый башлағанға көнләшәлер».

Дәрестәр бөткәс, ауылға Рәхмәт менән бергә ҡайтҡым килмәне. Ул, мәктәп ҡапҡаһы ауыҙында туҡтап ҡалғанымды күреп:

— Әйҙә, ниңә йылайһың? — тигәйне, йәнем көйөп:

— Бар, һин шәп кеше бит, үҙең ҡайт! — тип ысҡындырҙым.

Рәхмәт миңә аптырап ҡараны.

— Һуң, Әсҡәт, мин ғәйеплеме ни? Кисә ҡабатлау дәресендә булһаң... — тип ул ҡапыл асыуланды ла китте: — Үсеккән булаһың, ауырыным, тип кисә ниңә алданың, бөгөн, күҙеңде лә йоммайынса, уҡытыусыға шул һүҙеңде ҡабатлап тораһың. Миңә рәхәт тип уйлайһыңмы әллә?

Өндәшмәнем. Ташморонда йәшәгән олатайымдар яғына атланым. Рәхмәт яңғыҙы ҡайтыу яғына ыңғайланы.

Ошо хәлдән һуң Рәхмәт менән аралар көндән-көн нығыраҡ һыуына барҙы. Иртәнсәк: «Әйҙә, киттек», — тип, ул миңә, мин уға кермәҫ булдыҡ. Ҡайһы саҡта ғына юлыбыҙ тура килгәндә лә, өндәшмәй-нитмәй йөрөйбөҙ. Дәрес бөткәс, мәктәптән һәр саҡ тиерлек мин алдан сығып һыҙам, Рәхмәтте артта ҡалдырып, яңғыҙым ҡайтам...

...Көҙгө бысраҡтар башланды. Көн дә тиерлек ямғыр яуа, ҡар күҙҙәре лә төшкөләй. Шулай булһа ла, беҙ һаман көнөнә йөрөп уҡыйбыҙ. Садиҡ менән Гөлсөм генә ҡуна яталар. Ә бына

бөгөн, иртәнсәк тороп, тышҡа сыҡһам, аптырап ҡалдым: ер өҫтө ап-аҡ. Тәүге ҡарҙан бәрелгән һалҡынлыҡ күңелемде ҡытыҡланы, тәнемә ниндәйҙер еңеллек өҫтәлгәндәй булды. Ташморонға оҙаҡламай саңғы менән һә тигәнсе барып етәсәгебеҙҙе уйлап ҡыуандым.

Мәктәпкә барырға сыҡтым. Ауыл осона еткәс, тирә-яғыма күҙ һалам: аяҡ эҙҙәре күренмәй. Тимәк, Рәхмәт артта. Уның менән һүҙебеҙ һаман берекмәй шул. Бер тапҡыр миңә:

— Эсҡәт, күп үсегешеп йөрөмәйек, — тип ҡарағайны, мин сер бирмәнем. Шулай итмәй, теге саҡта Рәхмәт минең дәрескә килмәйенсә картуф ҡаҙып йөрөгәнемде, шул арҡала математиканан «икеле» алыуымды класс йыйылышында ла һөйләне бит, бөтә иптәштәрем алдында йөҙөмдө ҡыҙартты. Харап, берәү староста, имеш.

Рәхмәт ҡыуып етмәһен тип, артыма ҡарай-ҡарай, шәпләп атлайым. Епшек ҡарҙа резина итегем тайып, бер-ике йығылып та алдым. Бына хәҙер Ҡамышлы йылғаһы аша бер генә бүрәнәнән һалынған баҫманы үттемме, ат менән урауҙан йөрөй торған юлға сығам. Унан Ташморонға бер саҡрым самаһы ғына ҡала. Баҫманан, башҡа ваҡыттағы шикелле, йүгерәатлай сығып килә инем, ҡапыл, аяғым тайып, көҙгө ямғырҙарҙан һуң ташып буръякланған һалҡын һыуға ҡайһылай төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ҡайһы еремдер үҙәгемә үтеп ауыртты. Ләкин ҡыҙыулыҡ менән уны онотоп, тиҙерәк аяҡ үрә баҫтым да, баҫмаға йәбешә-йәбешә, ярға атланым. Артыҡ текә булмаған ярға тырышып-тырмашып менгәс, тороп йүгереү өсөн баҫырға булғайным, һул аяғымдың яман ауыртыуына түҙә алмайынса сүгәләнем, унан, аяғымды һоноп, еүеш ергә ултырҙым. Бына әй, ни булды икән, бәкәлемдең өҫ яғынан аяғым йәнемде өҙөп һыҙлай. Итекте сисеп ҡарамаҡсы булып, аяғымды ҡуҙғатҡайным, яман ауыртыуҙан артыма саҡ ауып төшмәнем. Кейемем һыуланған, өшөттөрә лә башланы. Ни эшләргә? Урынымдан тормаҡсы булып, тағы ла бер ынтылып ҡарағайным, бәкәлсәйемә күҫәк менән килтереп һуҡҡандай булды, ҡар өҫтөнә йығылып, иҫемде юғалтҡанмын...

...Аңыма килгәндә, күҙемә тәү бәрелгәне Рәхмәт булды. Туҡта әле, ни эшләп мин былай епшек ҡар өҫтөндә ятам? Ә Рәхмәт ҡасан ҡыуып еткән тағы? Ләкин миңә оҙаҡ икеләнергә тура килмәне. Аяғымдың һыҙлауы миңә булып үткәнде тиҙ хәтерләтте.

— Ни эшләнең һуң, Әсҡәт? — ти Рәхмәт, миңә эйелеп. Ул тир бөрсөктәре тәгәрәгән маңлайын, битен ҡулъяулығы менән эленән-эле һөртөп ала.

— Баҫманан йығылып, аяғымды ауырттырҙым, — тим, көсәнеп.

— Бик һыҙлаймы?

Өндәшмәйем. Әле генә үҙемдең унан ҡасып тигәндәй килеп, хәҙер йәлләп тороуы ниңәлер ғәрләндерә. Эх, ниңә өтәләндем икән? Яйлап ҡына сыҡҡанда бит…

— Хәҙер ауыл осона тиклем күп булһа йөҙ метр ҡалғандыр, Әсҡәт, — тип Рәхмәт миңә эйелә.

— Нисек инде йөҙ метр?

— Мин бит һине Ҡамышлы ярынан бирле күтәреп алып килдем. Әле хәл йыйырға туҡтаным. Шуны ла белмәйһеңме ни?

Бына нисек икән! Бөтәһен дә аңланым, ләкин, Рәхмәттең күҙ ҡарашы менән осрашырға уңайһыҙланып, ситкә боролам, ә ул мине яурыны аша күтәреп һалды ла, бысраҡ кисеп, тағы алға йүнәлде…

Ауыл осондағы өйҙән мине ат менән дауаханаға алып барҙылар. Ҡунысын телеп, итегемде систергәс, врач, көптәй шешеп киткән аяғымды ҡарап:

— Һынған, һис кисекмәҫтән гипсҡа һалырға кәрәк, — тине. Төштән һуң эргәмә, атайым менән әсәйемә эйәреп, Рәхмәт тә килде.

— Тиҙ төҙәлерме икән? — тип атайым врачҡа һораулы ҡараны. Әсәйемдең күҙҙәрендә йәш күренә.

— Баламды, ғәрип кенә ҡалмаһа ярар ине.

Врач ағай уларҙы йыуатты:

— Борсолмағыҙ, ун биш-егерме көндән шап-шаҡтай булыр. — Шулай ти ҙә Рәхмәткә әйләнеп ҡарай. — Бына был егеткә рәхмәт әйтегеҙ. Әгәр ул булмайынса, һыулы кейеме менән ҡар өҫтөндә ятып, һыуыҡ тейҙерһә, эш хөртәйер ине.

Рәхмәткә ҡарайым. Ул, үҙен маҡтағанға уңайһыҙланған шикелле, башын түбән эйеп, һүҙһеҙ баҫып тора.

**1.** Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын, нимә аңлатҡанлығын асыҡлағыҙ.

2. *Һөмһөрө ҡойолған, йәнем көйә, ҡуна яталар, йөҙөмдө ҡыҙартты* һөйләмдәренең мәғәнәләрен асыҡлап, рус теленә тәржемә итегеҙ.
3. *Дуҫымдың ҡаштары емерелгән.* Һеҙҙең ҡаштарығыҙҙың емерелгәне бармы? Был һөйләмдең тура һәм күсмә мәғәнәһен асыҡлағыҙ, һәр икеһенең рус телендә нисек әйтелеүен асыҡлағыҙ.
4. Нисек була ул *аралар һыуыныу*? Араларҙың йылыныуы ла буламы? Аңлатығыҙ. Рус телендә был төшөнсәләр нисек белдерелә?
5. Хикәйә ни өсөн «Тайғаҡ баҫма» тип аталған? Әсҡәт баҫманан тайып йығылған өсөн генәме? Фекер алышығыҙ.
6. Әсҡәттең ҡылығына баһа бирегеҙ. Бындай ҡылыҡ тураһында ниндәй халыҡ мәҡәлдәрен беләһегеҙ? Уларҙы яҙып ҡуйығыҙ. Рус телендә ошо мәғәнәне биреүсе мәҡәлдәрҙе эҙләгеҙ.
7. Рәхмәткә хас сифаттарҙы һанап, яҙып сығығыҙ. Унан ниндәй өлгө алырға була? Һеҙҙең өлгө алырлыҡ шундай дуҫығыҙ бармы? «Минең дуҫым» тигән темаға кескәй хикәйә яҙығыҙ.
8. Әгәр һеҙ рәссам булһағыҙ, был хикәйәгә ниндәй иллюстрациялар эшләр инегеҙ? Төшөрөп күрһәтегеҙ.
9. Әсҡәттең яҙма эштә ултырған мәлен һүрәтләгән урынды изложение итеп яҙығыҙ. Бындай ситуация һеҙгә танышмы?

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәләре байтаҡ:

1. Ябай бойороу, ҡушыу: *бар, кил, ҡа́йтмағыҙ.*

2. Ҡаты бойороу, талап итеү. Был осраҡта интонация юғарылана: *йөрө́мәгеҙ бында!*

3. Үтенеү, һорау. Был осраҡта *әле, инде* һүҙҙәре, *-сы, -се* киҫәксәләре өҫтәлә. Ҡайһы ваҡыт баҫым һуңғы ижеккә төшә, һәм ул ижек һуҙыбыраҡ әйтелә. Миҫалдар: *бар әле-е, бар инде-е, килегеҙсе-е, ҡайтма́-а.*

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары күберәк диалогтарҙа, лозунгыларҙа, стеналарға эленгән яҙыуҙарҙа ҡулланыла. Улар шулай уҡ мәҡәлдәрҙә лә йыш осрай.

**58-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған бер мәҡәлдең мәғәнәһен асырлыҡ ижади эш эшләгеҙ.

1. Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан серең һаҡла.
2. Ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тыҡма.

3. Ауыл һайын берәр туғаның булһын.
4. Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.
5. Йорт һатып алма, күрше һатып ал.
6. Ятҡа ялынма, әҙәмгә табынма.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары кеүек, һөйләмдә һәр ваҡыт хәбәр булалар һәм күпселек осраҡта һөйләмдең аҙағында киләләр.

**59-сы күнегеү.** Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше һәм бойороҡ һөйкәлеше буйынса мөмкин тиклем күберәк һорауҙар төҙөгөҙ. Һорауҙарығыҙҙың төҙөлөшөнә иғтибар итегеҙ.

**60-сы күнегеү.** Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше, бойороҡ һөйкәлеше буйынса һеҙ танышҡан белемдәрҙең ҡайһыһын белеү башҡорт кешеләренә һәр саҡ кәрәк булып тора?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү — ғәйеп.

* * *

Батша — үҙ илендә генә батша, ғалим — һәр ерҙә лә ғалим.

* * *

Уҡыным, тимә, белдем, тиң.

# ДУҪЛЫҠТА — БЕРҘӘМЛЕК

*Баязит Бикбай*

## РУС ТЕЛЕ

Толя, Анатолий...
Балалыҡ дуҫым ҡайҙа?
Ул өйрәткән ине дүрт һүҙ:
Ер. Ут. Һыу. Һауа.
Толя — тимерсе ҡарт улы,
Ә мин — игенсе,
Уға тиң һигеҙ йәш булыр,
Миңә етенсе.
Юшатыр буйында уйнап,
Йөрөнөк һыу инеп,
Ул минеңсә, мин уныңса
Аңламай инек.
Ләкин беҙгә уртаҡ ине
Балалыҡ хисе:
Бер төрлө тойҙоҡ һауаны,
Үләндәр еҫен.
Ғорурлыҡ уянды миндә,
Шатланам, көләм:
— Ер! Ут! Һыу! Һауа!
Их, Толя, һинеңсә беләм!
Ошо тәү өйрәнгән һүҙҙәр
Асты киң юлдар,

Мине сикһеҙ ҙур тормошҡа
Алып барҙылар.
Толя, Анатолий...
Балалыҡ дуҫым ҡайҙа?
Ниндәй ҙә гүзәл беҙҙең ер
Һәм зәңгәр һауа!

*Рафаэль Сафин*

## ҺАБАҠТАШТАРЫМА

...Мәскәү арты. Урман. Дөйөм ятаҡ.
Ҡалған икмәк менән сәй эсеп,
Төндәр буйы сәнғәт тураһында
Бәхәсләшә инек беҙ нисек!

Шифалыраҡ ине сәй ҙә ул саҡ,
Икмәге лә ине татлыраҡ,
Ихласыраҡ инек үҙебеҙ ҙә,
Йөҙөбөҙ ҙә ине яҡтыраҡ.

Ул дәрт! Ул сәм! Илдә бер һылыуҙы
Ҡаратыр ҙа кәләш итерлек,
Кәрәк икән, теләһә ниндәй илдең
Президенты булып китерлек.

Бәйләгәндән бирле яҙмыш беҙҙе,
Үҙгәрҙеләр нисек донъялар!
Янып, һүнде күпме яҡты уттар,
Ташып, ҡайтты күпме йылғалар!

Айға менде әҙәм. Падишаһтар
Ҡоланылар алтын тәхеттән.
Аһ, үҙгәрҙек беҙ ҙә. Ярҙан ашып,
Урғылып та ағыр мәл үткән.

Үткән, үткән! Күптән ваҡыт еткән
Үҙебеҙгә боролоп ҡарарға:
Кемдәр инек, инде кемдәр булып
Килеп баҫтыҡ көҙгө ярҙарға?

Бишектәге бишкә төрләнә, тип
Әйтмәгәндәр бит ул тиктәҫкә.
Бишкә генә түгел, йөҙ ҙә бишкә
Төрләнгән дә булды, иптәштәр.

Берәүҙәрҙең йөҙөн дан биҙәһә,
Берәүҙәргә өттө көнсөллөк.
Данына ла, көнсөллөгөнә лә
Ҡарай алдыҡ, шөкөр, беҙ көлөп.

Атланһаҡ та сабыр аҡыл менән
Ижадтың беҙ сабыр атына,
Күңелдәрҙә әле, күңелдәрҙә
Йондоҙ уйнай, йондоҙ атыла.

Иҫермәнек уңыш шарабынан,
Иҫермәнек иҫке алдында,
Ҡурҡманыҡ «иҫке» булыуҙан да
«Долой иҫке!» тигән табында.

Вәғәҙәләргә тоғро булалмаһаҡ,
Һөйгән йәрҙәр, бәлки, ярлыҡар.
Тоғро ҡалдыҡ әммә дуҫлыҡ менән
Күңел падишаһы — намыҫҡа.

Торһон, әйҙә, һүнмәҫ йондоҙ булып,
Намыҫ торһон дуҫлыҡ һағында.
Бер ултырып һөйләшәйексәле
Бергә үткән ғүмер хаҡында.

1. Шиғырҙарҙы тасуири уҡығыҙ. Шағирҙарҙың нимә әйтергә теләгәнен төшөнөргә тырышығыҙ.
2. Баязит Бикбай шиғырын ни өсөн «Рус теле» тип атаны икән, ул турала әҫәрҙә бер һүҙ ҙә юҡ бит? Фекер алышығыҙ.
3. Баязит Бикбай балалыҡ дуҫы Толяны һағына, унан өйрәнгән һүҙҙәр *мине сикһеҙ ҙур тормошҡа алып барҙылар,* ти. Шағир нимәне күҙ уңында тота, нимә әйтергә теләй?
4. Бер-береһенең телен белмәгән рус һәм башҡорт балаһын нимә берләштерә? Шиғырҙа халыҡтар дуҫлығының сағылышын күҙәтегеҙ.

5. «Һабаҡташтарыма» шиғырында Рафаэль Сафин йәшлек йылдарындағы дуҫтарына мөрәжәғәт итә. Бында ниндәй дуҫлыҡ тураһында һүҙ бара? Ғөмүмән, дуҫлыҡтың ниндәй төрҙәре була?
6. *Ярҙан ашып, урғылып ағыр мәл үткән, килеп баҫтыҡ көҙгө ярҙарға,* тип шағир нимә әйтмәксе булды икән? Фекер алышығыҙ.
7. *Тоғро ҡалдыҡ әммә дуҫлыҡ менән күңел падишаһы — намыҫҡа,* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
8. Һеҙҙең дә әле, шағир әйтмешләй, *сәйегеҙ ҙә шифалыраҡ, икмәгегеҙ ҙә татлыраҡ, үҙегеҙ ҙә ихласыраҡ* сағығыҙ. Киләсәккә күҙ ташлап ҡарағыҙ: донъя менән бергә кешеләр ҙә үҙгәрә. Ә һеҙ нимәгә ғүмерегеҙ буйы тоғро ҡалырға теләр инегеҙ? Әңгәмә ойоштороғоҙ.

**61-се күнегеү.** Түбәндәге ҡылым формалары ике бағанаға төркөмләп бирелгән. Ниндәй фонетик билдә буйынса төркөмләнгәндәр икән? Телдән яуап бирегеҙ.

| | |
|---|---|
| Бармағыҙ | Әйтмәҫтәр |
| Килерһегеҙ | Киләләр |
| Йөрөмәнек | Йөрөмәм |
| Барырбыҙмы | Баралар |
| Әйтмәнеләр | Әйтмә-ә-ә-ә |

**62-се күнегеү.** Был һүҙҙәр нимәне аңлата?

Бөгөл, шаршы, типһән, ятыу, башы, тамағы, ҡултыҡ, сөмгөл.

**63-сө күнегеү.** Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

1. Башҡорт телендәге һуҙынҡыларҙы ни өсөн ҡалын һәм нәҙектәргә бүләләр?

2. Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яттан яҙығыҙ.

*Мостай Кәрим*

## МИЛӘШ

Кремль эсендә, һул яғында ҙур ҡапҡаның
Миләш үҫә, иркен йәйеп ботаҡтарын.
Яңғыҙ түгел бында ул, бар дуҫ-иштәре,
Һалҡын төньяҡ шыршылары — серҙәштәре.
Тирәһендә талғын ғына бәүеләләр
Ҡайнар көньяҡ сәскәләре — аҡ ләләләр.
Көҙ сыуағы. Ҡыҙыл булып бешкән миләш,
Таш ҡоймаға һығылып төшкән тәлгәш-тәлгәш.
Тоҙаҡ оса, алтын сынйыр булып күктә,
Бөйөк Иван манараһын аша үтә.
Ҡараным да бында үҫкән шул миләшкә,
Уйым менән кире ҡайттым мин Келәшкә.
Ул яҡта ла күктәр зәңгәр, көндәр сыуаҡ,
Баш өҫтөнән тоҙаҡ оса, сынйыр һымаҡ.
Тыуған өйҙөң эргәһендә тап шул миләш
Кәртә аша һығылып төшкән тәлгәш-тәлгәш.
Ике яҡта иркен үҫә ике миләш —
Бер үк тупраҡ балалары — ике ҡәрҙәш.

1. М. Кәримдең «Миләш» шиғырҙарындағы һүрәтләү сараларын (метафора, ҡабатлау, сағыштырыу) яҙып алып, шиғырҙағы функцияларын аңлатығыҙ.
2. Башҡа халыҡ яҙыусыларының туған телен, дуҫтарын данлап яҙған шиғырҙарын уҡығыҙ. Башҡорт яҙыусыларыныҡы менән сағыштырып, уртаҡ яҡтарын һәм үҙенсәлектәрен яҙығыҙ.
3. Бөгөнгө замандағы дуҫлыҡтың ҡиммәтен баһалағыҙ.
4. Миләш (мышар) тураһында уҡығыҙ. Интернет селтәренән тағы ла мәғлүмәттәр табып, йыр һәм һүрәттәр өҫтәп, презентация эшләгеҙ.

## МИЛӘШ

Миләш (күпселек башҡорт һөйләштәрендә — *мышар*) — ағас йәки ҡыуаҡ. Европаның бөтә урынында ла тиерлек үҫә. Башҡортостандың бөтә райондарында ла миләш (мышар) ҙур территорияларҙы биләй: ул айырым да үҫә, шырлыҡтар

ҙа яһай. Төрлө урман араһында ла миләште осратырға була. Декоратив маҡсаттарҙа был ағас ҡала урамдарында емештәре менән күҙ яуын алып, янып ултыра.

Миләш ҡышҡы һыуыҡтарға бирешмәй, ҡараңғы, күләгәле урындарҙан да ҡурҡмай.

Миләштең емеше дауа өсөн ҡулланыла. Унда витаминдар, башҡа файҙалы элементтар бик күп.

Кеше ябыҡҡанда, ҡаны аҙайғанда, ашҡаҙан ауырыуҙары борсоғанда, бөйөр, үт ҡыуығы сырхаулағанда, уның емешенең һутын, төнәтмәһен эсә.

**64-се күнегеү.** Бер мәҡәлде ҡулланып, бәләкәй хикәйә яҙығыҙ.

I. Ике телдәге мәҡәлдәрҙе мәғәнәләре буйынса тап килтерегеҙ.

1. Ере барҙың еме бар, еме барҙың име бар.
2. Ашаған табағыңа төкөрмә.
3. Атым юҡ аранда, ҡайғым юҡ буранда.

1. Чья земля, того и хлеб.
2. Не плюй в колодец — пригодится воды напиться.
3. Ни дров, ни лучины, живу без кручины.

II. Рус телендә тап килгән мәҡәлдәрҙе үҙегеҙ табығыҙ.

1. Силәгенә күрә ҡапҡасы.
2. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.
3. Тимерсе бысаҡҡа йәлсемәҫ.
4. Күҙ – күңелдең шишмәһе.

*Раил Байбулатов*

## ҺАРЫБАЙ

### I

Һарыбай исемле овчарканы Иншар ҡалаға алып ҡайтырға күпме генә ныҡышмаһын, әсәһе:

— Ҡуй, юҡты һөйләмә, улым. Фатирҙа әллә эт тотор инеңме? — тип ҡаршы килде.

Иншар ҡалала бәғзе эттәрҙең күргәҙмәләрҙә ҡатнашыуы, хатта миҙал алыуҙары менән әсәһенең күҙен ҡыҙҙырып ҡараны. Юҡ, ул тыңларға ла теләмәне. Ахыр сиктә, станцияға барырға ат килгәс, Иншар үҙен ҡабаландырған әсәһенә һуңғы мәртәбә сат йәбеште:

— Алып ҡайтайыҡ инде, әсәй. Ул бит шундай аҡыллы эт, цирктағы һымаҡ. Бына, ҡара әле. — Иншар башындағы фуражкаһын һалды ла кәйелтеп ебәрҙе. Унан этенә өндәште: — Бар әле, Һарыбай, килтер минең фуражканы.

Әҙәмдәрҙең ығы-зығыһын аптырап күҙәткән Һарыбай, исемен ишеткәс, һалмаҡ ҡына аласыҡ яғына китте. Ерҙәге фуражканы теше менән йәһәт кенә эләктереп, Иншарҙың аяҡ аҫтына килтереп тә һалды. Шуны ғына көткән малай, шатлығынан дуҫын ҡосаҡлап, яратып ҡуйҙы. Эт менән кеше бер-береһенән һаман айырылыша алмай хитланды. Шул саҡ Иншарҙың өләсәһе Шәмсекамал инәй тегеләрҙең янына килде:

— Улым, әсәйең алып ҡайтырға ҡушмағас, ҡаршылашма инде. Ҡалала эттең хәжәте — бер тин. Ә бында ул миңә кәрәгер, мал-тыуарҙы һаҡлар, һин юҡта миңә дуҫ булып йөрөр, — тип ейәненең арҡаһынан һыйпаштырғас, Иншар ыңғайлай яҙып ҡуйҙы. Әсәһе:

— Оҙаҡламай, улым, өс бүлмәле фатирға күскәс, алып ҡайтырбыҙ Һарыбайыңды. Әйҙә, поезға һуңлайбыҙ бит, — тип ашыҡтырғас, Иншар ахырҙа арбаға йүнәлде. Дуҫының китеүен һиҙгән Һарыбай шул саҡ әйләнә-тулғана башланы. Бик тә эйәрергә теләһә лә, уны Шәмсекамал инәй: «Сергеевка ауылын үткәндә, эттәр менән талашырһың», — тип ояһы янына бәйләп ҡуйҙы...

...Һиҙеүенсә, ул был фани донъяла бәхетле көсөк булып күрше йортта көн итә башлағайны, шикелле. Эйе, эйе, анау ҙур тирәк төбөндә уның таҡтанан яһалған ояһы ла бар ине. Ҡайҙа китте икән баҫыу кеүек киң ишек алдында хужа булып йөрөгән саҡтары? Һарыбай нисәнсе мәртәбә инде, үткән-һүткәндә алдына һөйәк ташлап, башҡа ризыҡ ҡуйып китә торған йорт хужаһын — шәфҡәтле бабайҙы хәтерләй. Сөнки бөтә михнәттәре, ул ғәйеп булғандан һуң, башланы бит. Эйе, хәрәкәтһеҙ ятҡан бабайҙы кешеләр күмәкләшеп тау буйында ҡалдырып ҡайтҡанын ул да үҙ күҙҙәре менән күргәйне. Бабай юғалғас, элек шат йөрөгән әбейгә әллә нимә булды. Ул бер аҙ юғалып торҙо ла ниндәйҙер ят кешене эйәртеп ҡайтып төштө. Өйҙәге әйберҙәрҙе машинаға тейәп оҙатҡас, кешеләр: «Һарыбай», — тип, уға ҡарап, ниҙер хаҡында гәпләште. Шул саҡ ул әбейҙең, яулыҡ менән күҙ төптәрен һөрткөләп алыуын шәйләне, Һарыбай, әҙәмдәрҙе оҙатып, йортта яңғыҙы ғына ҡалды.

Бер-ике көндән һуң ул ҡапҡа төбөнә аҡ машина килеп туҡтағанын күрҙе. Әбейҙе алыҫҡа күсереп алып киткән ят кеше яңынан килгән бит. Һарыбай уға берсә ҡыҙыҡһынып, берсә һағайып ҡараны. Ят кешенең ҡулында колбаса киҫәге күргәс, ул, ҡойроғон болғай-болғай, хатта ҡаршы атланы.

— Асыҡтыңмы, Һарыбай, мә, аша. Ә унан мин һине үҙем менән алып китермен. — Ят кеше, тырпайған бармаҡтары менән Һарыбайҙың йылтыр йөнөн тарап, телен шартлатып ҡуйҙы ла муйынындағы ҡайышҡа үрелде. Шул саҡ эттең ҡолаҡтары ҡапыл ҡайсылай үрә торҙо, төлкөнөкө һымаҡ ялпылдап торған ҡойроғо һалынып төштө. Теге машинаһына һөйрәй башлағас, Һарыбай, шомланып, көслө аяҡтары менән ергә ҡырталашып ятты. Ышан һин ҡайһы бер әҙәмдәргә!

— Ә-ә-ә, һин шулай, ҡаршылашаһыңмы әле?! — Ят кеше машиналағы иптәшен саҡырҙы: — Килә һал тиҙерәк!

Заманында бүреләр менән боғаҙлашҡан этте һеҙ шулай еңел генә машинаға йомарлап тығырға уйлайһығыҙмы әле?! Һарыбай, ярҙамға килеүсе кешенең ҡулында оҙон бауҙы күргәс, ҡапыл ситкә тартылды ла, ысҡына алмағас, эргәһендәгеһенең бармағына «ам» тип, осло тешен батырҙы. Теге ҡурҡышынан уның муйынындағы ҡайышты ысҡындырҙы. Һарыбай йән-фарманға был тирәнән һыҙҙы. Шул саҡ, былтыр ауылда күп кенә эттәрҙе утлы күҫәк менән шаңҡытып йөрөгәндәрен иҫләгәс, хатта әлеге ҡылығына үкенеп ҡуйҙы. Шуға күрә лә ул, көнө буйы кире ауылға ҡайтырға шөрләп, ҡасандыр хужаһы балыҡ ҡармаҡлаған ҡуйы таллыҡ араһында ятты һәм теге кешеләрҙең китеүен көттө. Бер аҙҙан ялҡа башланы.

Шул саҡ Һарыбай таныш тауыш ишетте, ҡолағын ҡайсыландырып, һағайып ҡалды. Уның хужаһына йомош менән ингеләгән Нуретдин бит был. Һарыбай ҡыйыуланып шул яҡҡа китте лә, элекке күршеһенең эргәһендә ниндәйҙер ят малайҙы күргәс, ҡапыл туҡтап ҡалды. Тегеләр, Һарыбайҙы осратҡас, өтәләнеп киттеләр. Хатта Нуретдин, еләкле тырызын ташлап, йүгереп килеп етте:

— Һарыбай, ҡастыҡ бынан тиҙерәк туғайға! Теге яуыздар һине үлтерергә йөрөйҙәр бит, — тип ул эттең муйынындағы ҡайышынан һөйрәне. Һарыбай ҡаршылашманы, улар менән йәһәт кенә шырлыҡҡа йүнәлде. Күп тә үтмәй, туғайҙың үр яғында, ҙур аҡланда, буш мискәлә яңғыраған төҫлө, ҡалын тауыштар һөрәнләне.

— Һарыбай, маһ-маһ-маһ!..

— Тегеләр эҙләп йөрөйҙәр, — тип бышылданы Нуретдин.

— Ә эттең ниндәй ғәйебе бар һуң? — тине шул саҡ аптырап Иншар.

— Тиреһен кәпәс тегергә һыҙыртып алып китергә уйлағайнылар ҙа, килеп сыҡманы, Һарыбай береһенең ҡулын тешләп ҡасҡан, — тине үсәнгән һымаҡ Нуретдин һәм эттең йөнөн һыпырып ҡуйҙы. — Күрмәйһеңме ни, йөнө кәзә дебете һымаҡ бит.

— Бына һин яуыздарҙы, — тине Иншар, һуҙып ҡына. — Ә уларҙың Һарыбайға тейергә ни хаҡтары бар?

— Этте йорт менән бергә һатып алдыҡ, тигән булалар бит. Юҡты һөйләйҙәр. Күрше инәй эт һатып йөрөй торған кешеме ни? Уны тәүҙә һинең өләсәйеңә ҡалдырырға иткәйне лә, Шәмсекамал инәйҙең әллә ниңә алғыһы килмәне. Йәнәһе, эйәһеҙ эт бәлә-ҡаза килтерә. Ололарҙың юҡ-барға ышанып барыуын беләһең бит.

Шул саҡ Иншар, Һарыбайҙы йәлләп, тегеләргә оторо нәфрәтләнеп китте. Һыны ҡойоп ҡуйған һымаҡ матур, йөнө бәрхәт төҫлө күпереп торған аҡыллы этте нисек ҡыҙғанмайынса кәпәс өсөн харап итмәк кәрәк.

— Өләсәйем теләмәгән икән, мин уны үҙем аҫрарға алам, — тине ул, Һарыбайҙың башынан һыйпап.

— Ә һин уны ҡайҙа аҫрайһың?

— Ҡалаға алып ҡайтам. Ҡайһы бер малайҙар фатирҙарында йолҡош ҡына эттәр аҫрайҙар әле. Ә быны күрһәләр, иҫтәре китер, һин нисек, ризамы?

— Әлбиттә. Минең этем булғас, ал әйҙә. Әйтеп торам бит, өләсәйеңә һинең өсөн алырға кәрәк ине, тип.

Иншар, бик затлы әйберҙе ҡулына төшөргән һымаҡ шатланып, дуҫына рәхмәт әйтте лә күңелһеҙ генә ултырған Һарыбайға өндәште:

— Һин асыҡтыңмы, Һарыбай? Ошонда ултырып тор, бер ҡайҙа ла китмә. Теге юлбаҫарҙарға тап булыуың бар. Ә мин һиңә хәҙер икмәк килтерермен. — Ул Нуретдингә бында ҡалып торорға ҡушты. Ләкин уға һыу буйынан үҙҙәренең ҡаҙ-өйрәктәрен табып алып ҡайтырға кәрәк ине. Этте хәҙергә берәүгә лә күрһәтергә ярамай. Уны йәшерәм тип, төнгөлөккә туғайҙа ла ҡунып булмай. Иншар нимә эшләргә белмәй торғанда, Нуретдин:

— Күберәк аҙыҡ килтерһәң, бер ҡайҙа ла бармаç, — тине. — Бик тә булмаһа, тегеләр олаҡҡансы, ошонда еп менән бәйләп тор.

Нуретдин үҙ юлы менән киткәс, Иншар баҡса артынан ауылға ҡарай йүгерҙе.

Иртә менән ят кешеләрҙең Һарыбайҙы эләктерергә самалауын һәм, мылтыҡ тотоп, уны эҙләп йөрөүҙәрен күргән өләсәһе ейәненең ниәтенә хәҙер инде бер һүҙ ҙә әйтмәне. Хатта ул:

— Һинең теләгеңде белмәнем шул, улым, — тип үкенеп ҡуйҙы. Унан йәһәт кенә ҡаты-ҡото ашамлыҡтар йыйыштырып бирҙе.

Һарыбай, бая малайҙарҙан айырылып туғай буйында тороп ҡалғас, шул тирәлә ураланды ла яр буйҙарын еҫкәштереп китеп барҙы. Ул балыҡсыларҙан ҡалған икмәк киҫәктәрен ҡараштырҙы. Ләкин эсен алдаштырырлыҡ бер нәмә лә таба алманы. Шулай эҙләнеп йөрөй торғас, хәтһеҙ ара үтелгән: Һарыбайҙың ҡолағына Петровка ауылы эттәренең лауылдауы ишетелде. Күҙ алдары томалана башлағас, ул, ары барыуҙың мәғәнәһеҙлеген аңлаған төҫлө, кирегә боролдо. Йылғаның үрге яғында Иншарҙың, ризыҡ тотоп, уны эҙләп йөрөүе иҫенә лә килмәне.

Ә Иншар, шул тирәләге бөтә туғайҙы ҡыҙырып сыҡҡас, хатта, киске һиллекте боҙоп, дуҫын саҡырып ҡараны:

— Һарыбай! Һарыбай!

Бына бер мәлде тал араһы ҡыштырлап ҡалды. Иншар шатланып шул яҡҡа ташланды һәм ҡапыл артына ҡолап китә яҙҙы. Уның алдында әрселгән ҡарбуз кеүек ҡыҙарған йөҙлө, аҡайған күҙле ят кеше тора. Ул, атырға йыйынған төҫлө, мылтығын алға тоҫҡаған.

— Ҡайҙа Һарыбай? Һин саҡырҙыңмы уны? — тине ул, аһылдай-аһылдай.

Иншар, ҡурҡыбыраҡ китһә лә, йәһәт кенә ҡыйыулана төштө һәм:

— Белмәйем, — тип ҡырт киҫте.

— Белмәгәс, ниңә һөрәнләйһең?

Шул саҡ, үҙе лә абайламаҫтан, Иншарҙың башына хәйлә килде. Төп башына ултыртырға кәрәк быларҙы. Теге: «Һарыбайҙы ҡайҙа күрҙең?» — тип ныҡыша башлағас, Иншар ыҡ-мыҡ итте лә:

— Һеҙ эйәһеҙ Һарыбайҙы эҙләйһегеҙме? — тине. — Уны бит ҙур малайҙар көндөҙ бер балыҡсыға һатып ебәрҙеләр.

— Кем һатты? — Тегенең тамағына һөйәк тығылды кеүек.

— Мин быныдағы түгел, уларҙы танымайым. Үҙемдең ҡаланан килтергән Һарыбай көсөгөмдө эҙләйем мин. Өйрәктәр эҙләп йөрөгәндә, әллә ҡайҙа торҙо ла ҡалды, — тип мығырлай торғас, ят кеше оторо асыуланып китте:

— Һин, малай, минең башты ҡаңғыртма! Дөрөҫөн әйтә һал!

— Ә ни эшләп мин һеҙҙе алдайым, ти.

— Ысын әйтәһеңме?

— Билләһи.

— Ярар, ҡарап-ҡарарбыҙ. Әгәр алдаһаң, үҙеңә үпкәлә. — Ят кеше машина тауышы ишетелгән яҡҡа енләнеп китеп барҙы…

1. Өҙөктө иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәр осраһа, күмәкләп, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар менән телдән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп сығығыҙ. Телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе лә ҡулланырға тырышығыҙ.
3. Йөкмәткеһенән сығып, өҙөккә исем ҡушығыҙ.
4. *Һиҙеүенсә* һүҙе менән башланған абзацты диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эштәрен тикшереп, баһалар ҡуйығыҙ. Хаталарығыҙҙы анализлағыҙ.

## НИӘТ ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫ

Ниәт һөйкәлеше ҡылымдары берәй эш-хәрәкәтте эшләргә ниәт итеүҙе, планға ҡуйыуҙы белдерә. Был форма ҡылым нигеҙенә *-маҡсы, -мәксе* ялғауҙары ҡушыу юлы менән яһала, артабан зат ялғауҙары өҫтәлә:

I зат: *мин бармаҡсымын, килмәксемен — беҙ бармаҡсыбыҙ, килмәксебеҙ.*

II зат: *һин бармаҡсыһың, килмәксеһең — һеҙ бармаҡсыһығыҙ, килмәксеһегеҙ.*

III зат: *ул бармаҡсы, килмәксе — улар бармаҡсы, килмәксе.*

Ниәт һөйкәлеше формаһындағы ҡылымдар үҙҙәре генә бөгөн телмәрҙә һирәк ҡулланыла. Улар янында, ғәҙәттә,

*бул* ярҙамсы ҡылымы килә, һәм бөтә ялғауҙар уға ҡушыла, ҡайһы ваҡытта *-сы, -се* ялғауҙары төшөп тә ҡала: *бармаҡсы була, килмәксе булдыҡ, бармаҡ булды.* Үткән замандағы ниәтте белдерергә кәрәк булһа, был ҡылым янына *ине* ярҙамсы ҡылымы ҡушыла: *бармаҡсы инегеҙ.*

**65-се күнегеү.** Ниәт һөйкәлеше формаһындағы ҡылымдарға бирелгән миҫалдар менән танышығыҙ.

1. Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды. 2. Урал саптырып китмәксе генә булғайны, Аҡбуҙат уны сөйҙө лә ебәрҙе. 3. Дейеү малайы туғанынан үсен алмаҡ булды. 4. Ҡарағаш егетте ерләмәксе булып, тауға күтәрелде. *(«Урал батыр» экиәтенән)*

## II

...Һарыбай, йылға буйында бер ҡабымлыҡ та ризыҡ таба алмағас, күҙ бәйләнгән арала үҙ йортона ҡайтырға булды. Ҡасандыр хужаһы менән йөрөй торған һуҡмаҡтан Һарыбай һағайып ҡына атланы. Бына ул, яр буйлап бара торғас, үҙҙәренең кәртә аҫтына килеп сыҡты. Таныш ыҙан буйында ул шып туҡтаны. Йорт эсендә ниндәйҙер ҡыштырлау ҡолағына салынып ҡалды. Һарыбай бейек картуф һабаҡтары араһынан үҙенең һарғылт башын һоноп йәнә ҡуҙғалды. Урамдағы аяҡ тауышынан башҡа яҡын-тирәлә әҙәм заты еҫе һиҙелмәй төҫлө. Ул, ҡыйыуланып, һарай янына килде һәм яртылаш асыҡ торған ҡапҡа аша ишек алдына үтте. Һарыбай, йомшаҡ ҡаҙ үләненә томшоғон төртә-төртә, ҡасандыр тәмле һөйәктәр кимергән ояһына килә ине, артҡы ишек келт итеп ябылды. Күрә: унда һуйыл тотҡан ят әҙәм тора. Әллә тоҙаҡҡа ҡапты инде? Һарыбай йәһәт кенә ян-яҡҡа ҡаранып алды. Шул саҡ ул, ҡапыл һиҫкәнеп, ҡалтырап китте кеүек. Сөнки урам яҡтағы рәшәткәле ҡапҡа аша уға шөкәтһеҙ ҡара көпшә — мылтыҡ тоҫҡалған. Һунарға йөрөгән эт бының ниндәй ҡот осҡос нәмә икәнен бик яҡшы белә. Шуға күрә Һарыбай бөтөнләй ҡойолоп төштө. Күсәк тотҡан кешенең:

— Ат инде! — тип ҡысҡырыуы булды, уның күҙ алдында көлтәләй ут балҡыны. Һарыбай ҡапыл ситкә һикерҙе. Уның артҡы аяғын ниҙер көйҙөрөп үтте. Өҫтәүенә, һуйыллы кеше

ҡаршыһына йүгереп килә. Әһә, былар һине бөтөрөргә самалайҙар икән. Һарыбай ситән буйынан сабып барғанда, күрше ҡойма аша таныш йөҙҙәр күрҙе. Мылтыҡ тауышын ишеткән Иншар менән Нуретдин бында йүгереп килеп еткәйне. Тегеләр әллә ни арала пәйҙә булғас, мылтыҡлы кеше, уларға тейҙерермен тип, атыуын туҡтатты һәм аҡырып ебәрҙе:

— Китегеҙ унан, малайҙар!

Иншар менән Нуретдин, иҫтәре лә китмәйенсә, ишек алдында ҡапҡанға эләккән һымаҡ үрһәләнгән Һарыбайға ҡысҡырҙылар:

— Һарыбай! Һарыбай!.. Кил бында!

— Һикер бында!

Шул саҡ Һарыбай ҡапыл малайҙар яғына ташланды һәм, тәпәшәгерәк ҡоймаға теше-тырнағы менән шатыр-шотор үрмәләп, асыҡ ҡапҡа аша Ямантау буйына сығып һыҙҙы. Иншар эттең уттай йылтыраған, ҡурҡыныс күҙҙәрен генә шәйләп ҡалды.

Шунан инде Һарыбай үҙ йортона аяҡ баҫмаҫ булды. Сөнки уны теге кешеләр һаман һағалап торалар кеүек ине. Ул ике-өс көн, аяғынан һарҡыған ҡанды ялай-ялай, туғай буйында, кеше йөрөмәҫ төпкөлдә, ятты. Үҙенең бәхетле үткән көндәрен һағынып, нимәлер тилмереп көттө. Ә тәпәйенең ауыртыуы уның һайын көсәйҙе, һуңғы төндә хатта серем итеүҙән мәхрүм ҡалды. Юҡ, былай йәшәүҙән файҙа юҡ. Нимәлер эшләргә, тамаҡҡа ризыҡ табырға кәрәк!

Ахыр сиктә, Һарыбай, өс аяғында һикерә-һикерә, яр буйлап, бала-саға һыу инә торған яҡҡа ыңғайланы. Шул саҡ ул теге яҡ ярҙа ҡармаҡ һалып ултырған малайҙарҙы күрҙе. Улар араһында түңәрәк йөҙлө, ҡупшы ғына кейенгән теге ҡала малайы ла бар ине. Иншар ҙа уны шәйләп алды. Ҡапыл ҡармаҡтарын ташланы ла:

— Һарыбай! Һарыбай! — тип шаптор-шоптор һыуға сумды. Эт унан өркмәне, ҡойроғон болғай-болғай, янына килеүен көттө.

— Һарыбай, һин иҫән бит! Мин һине күпме эҙләнем. — Иншар Һарыбайҙы ҡосаҡлап алды һәм кеҫәһенән балыҡ емләргә алып килгән икмәген уға һоғондорорға тотондо.

— Һин ҡурҡма, ул яуыздар күптән киттеләр инде. Һине дөмөктөрҙөк, тип ҡул һелтәнеләр. Хәҙер һинең хужаң мин булырмын. Оҙаҡламай үҙеңде ҡалаға алып ҡайтырмын. —

Теге һөйкөмлө иркәләгәс, һары йөнөнә йәбешкән дегәнәктәрҙе сүпләп, боғаҙынан, тамағынан һыпырғас, Һарыбай, ҡойроғон һелтәй-һелтәй, уның артынан эйәрҙе.

Бына шунан һуң ул ҡала малайының яҡын дуҫына әүерелде. Иншар был эттең аҡыллылығына, әйткәнде аңлауына, ысынлап та, хайран ҡалды, хатта уны үҙенсә өйрәтергә булды. Улар шулай бер-береһенә ылығып ҡына бөткәйнеләр, бына хәҙер тағы айырылыштылар...

— Киттеме дуҫың?.. Йә, улайһа, бар, ишек алдында ғына йөрө. — Әбей, тегене йыуатҡан һымаҡ, бауҙы ысҡындырыуы булды, Һарыбай ҡапыл баҡса артынан сабып сығып та китте.

Ул үр ҡуянын ҡыуған төҫлө, ҡаршы тауға күтәрелгәнен һиҙмәй ҡалды. Әйтерһең дә, уны урман артынан Иншар дуҫы саҡырып тора. Ашҡынып-ашҡынып елгәнгә күрә, хәҙер аяғының ауыртыуы ла һиҙелмәй. Электр бағаналары буйлап һуҙылған туҙанлы юлдан йән-фарманға бара торғас, ул ахырҙа үҙенең арыуын һиҙҙе һәм аҙымын аҡрынайтты. Ә ҡарашы һаман станция яғында. Ана-а-а, уның хужалары тимер юл буйына еткәндәр бит. Һарыбай, тиҙерәк етергә теләп, йәнә сабырға керешке. Шулай ҡош һымаҡ осоп бара торғас, алыҫта поезд тауышы ла ишетелде. Һарыбай станцияға саҡ-саҡ өлгөрөп ҡалды. Әйберҙәр, сумаҙандар тотҡан кешеләр араһынан таныш кешеләрен ҡараштырғансы, поезд һелкенеп тә ҡуйҙы. Шул саҡ Һарыбай ҡолаҡ тондорғос ышылдау араһында ҡапыл таныш тауыш ишетте:

— Һарыбай! Һарыбай!

Ул күрә: дуҫы Иншар вагондан атлығып ҡул болғай. Ә әсәһе тегене төшөрмәҫкә самалай. Улар үҙ-ара ығы-зығы килгәнсе, Һарыбай юртаңлап эргәләренә барып та етте. «Һин мине ҡалдырып китәһеңме инде?» — тигән һымаҡ, ул, ҡойроғон болғай-болғай, дуҫына мөлдөрәп ҡараны.

Иншарға эт хәҙер бигерәк яҡын булып китте. Уның өсөн әллә ҡайҙан, йәнен атып, килеп еткән бит. Малай, иларҙай булып, әсәһенең ҡулын һелкте:

— Әсәй, Һарыбайҙы алып ҡайтайыҡ инде. Рөхсәт итмәһәң, мин хәҙер төшәм дә ҡалам, — тине ул, ашыға-ашыға. Әсәһе шөрләп китте, ахыры. Йәһәт кенә проводниктан рөхсәт һораны ла улына:

— Әйҙә, ал тиҙерәк этеңде, юғиһә тороп ҡалаһың, — тине.

— Киттек беҙҙең менән, Һарыбай! — Иншар, салбарынан ҡайышын һурып алып, этенең муйынына эләктерҙе лә уны вагонға индерҙе...

## III

...Ауылдан ҡайтҡас, байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Ләкин Һарыбай һаман ҡала тормошона күнегә алмай.

Һуңғы ваҡытта, яңғыҙ ҡалған һайын, яманһыулай башланы кеүек. Ашау яғы рәнйерлек түгел, хатта дуҫы Иншар тәмле-томлоларҙы ла ҡыҙғанмай. Кәнфиттәрҙе бер-бер артлы һауаға ырғыта. Һарыбай, артҡы аяҡтарына баҫып, уларҙы «ҡап та ҡоп» эләктереп кенә ала. Шунан дуҫы уны был сослоғо өсөн яратып та ҡуя. Хәҙер инде ундай мәҙәктәр ҙә бөттө. Сөнки берҙән-бер көндө дуҫы Иншар әллә ҡайҙа сығып китте.

Шунан һуң башланды ла инде Һарыбай өсөн был фани донъяла яңынан-яңы көтөлмәгән хәлдәр.

Хужабикә апай башта Һарыбайға ипле генә ине: ваҡытында ашатты, кис көндәре үҙе менән урамға йөрөргә лә алып сыҡҡыланы. Ләкин уның әҙәмсә ҡыланышы оҙаҡҡа барманы. Бәлки, быға берҙән-бер көндө Һарыбайҙың абайламаҫтан гонаһ ҡылыуы сәбәпсе булғандыр. Ҡаршыһына әллә ҡайҙан буйға бейек, биле нәҙек кенә ала эт килеп баҫты. Теге: «Бында йөрөргә һинең ни хаҡың бар?» — тигән һымаҡ ыр-мыр килә. Ҡасандыр ауылда үҙенең иң уҫал эт булыуын иҫләп, Һарыбай ҡапыл ғына тегене яҫы түше менән этәреп ебәрҙе. Эргәлә хужаһы торған сәмсел эт өсөн был хурлыҡ һымаҡ һиҙелде, ахыры. Ул үрелеп Һарыбайҙың ҡолаҡ эргәһенән тешләп алды. Әле һин шулаймы! Һарыбай, тегенең өҫтөнә һикереп, аяғы менән башын баҫты, муйынына аҙау тештәрен инде батырам ғына тигәндә, арҡаһына кирбес килеп төшкәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Шул ыңғайы теге эт уның ҡойроғоноң осон өҙөп алды.

Һарыбай, ҙур ғына ороно ялай-ялай, оҙаҡ ҡына гараждар араһында ултырҙы. Кешеләрҙең эттәр араһына инеүенә нисек йөнөң ҡабармаһын? Етмәһә, мәкерле һөжүм итеп, өҫтөнә таш менән ырғыталар. Хужабикә апаһы уны, көскә эҙләп табып, өйөнә алып ҡайтты. Бына шунан һуң ул Һарыбайҙы, нимәнәндер шөрләгән төҫлө, урамға сығармаҫ булды. Әйтерһең дә, теге хәсистең яуызлығына ул ғәйепле ине.

Тыштағы яҡты донъяға күнеккән Һарыбай өсөн ҡара төндәр башланды. Исмаһам, уға өрөргә лә ҡушмайҙар. Хужабикә юҡта, бик тә йәне көйөп киткәс, бер көндө асыу менән лауылдарға керешкәйне, күршеләр: «Туҡта!» — тип шунда уҡ ишекте дөпөлдәтә башланы. Их, ҡайҙа ҡалды икән сәхрәләй киң ишек алдында ҡаҙ үләне өҫтөндә аунап йөрөгән мәлдәр! Йөрәген шундай һағыштар көйҙөрөп үткән һайын, Һарыбайҙың күңеле ҡайҙалыр ынтыла, был ситлектән ысҡынып, алыҫҡа-алыҫҡа киткеһе килә уның.

Шулай бер ваҡыт, хужабикә эштән ҡайтҡас, инде нисәмә көн урамды күрмәгән Һарыбай, сығырға теләп, ишек янында борғоланды. Ләкин апайҙың иҫе китмәне. Залды асты ла бүлмәһенә йүнәлде. Һарыбай ахырҙа асыуынан томшоғо менән ишектең мөйөшөн ҡайыра башланы. Йәнәһе, хужабикә күрһен уның ниәтен. Әммә ул һаман үҙ эше менән мәшғүл. Һарыбай, нығыраҡ тауышланам тип, көпләнгән күнде шатырлатып йыртты ла ебәрҙе. Шул саҡ хужабикә йүгереп килеп сыҡмаһынмы!

— Аһ, ҡәбәхәт, һин нимә эшләйһең?! — тип, ул оҙон һаплы иҙән йыуғысты эләктереп алды.

Бындай хәлде һис тә көтмәгән Һарыбай, ҡойроғон ҡыҫып, ғәфү үтенгән төҫлө, мөйөшкә һыйынды. Ул, ҡабырғаһына таяҡ эләккән һайын, шыңшырға кереште. Ә оторо ярһыған хужабикә асыуын тамам шулай сығарҙы ла, ишекте шар асып:

— Бар, урамға сыҡ! — тип ҡысҡырҙы һәм кирбес эләккән ергә йәнә берҙе ойотоп ебәрҙе.

Һарыбай, ҡоторған эт һымаҡ, урамға атылып килеп сыҡты һәм, бер-береһенә һыйынып ултырған гараждар араһына инеп, аһылдай-аһылдай һуҙылып ятты.

Шулай ята торғас, Һарыбайҙың зиһенен ҡапыл яҡты уй ҡыйып үтте. Ҡырмыҫҡа иләүе төҫлө мыжғып торған был ҡаланан олағырға кәрәк бөтөнләйгә. Тыумыштан һиҙгер булған Һарыбай тыуған төйәген эҙләп китергә ҡарар итте. Ул үҙе йәшәгән һоро йортҡа бер аҙ күңелһеҙ генә текләп ултырҙы ла вокзал яғына һалмаҡ ҡына юртаңлап төшөп китте.

**1.** Өҙөктәрҙе иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

2. Бүлектәрҙең йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе ҡулланырға тырышығыҙ.
3. Йөкмәткеләренән сығып, бүлектәргә исем бирегеҙ.
4. Һарыбай менән уға осраған кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә күҙәтеү яһағыҙ.
5. Рус әҙәбиәтендә эттәр тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар?

## ШАРТ ҺӨЙКӘЛЕШЕ ҠЫЛЫМДАРЫ

Шарт һөйкәлеше ҡылымдары ниндәйҙер бер эштең үтәлеүе, хәлдең булыуы өсөн шарт булған эш-хәрәкәтте белдерә. Шуға күрә шарт һөйкәлеше ҡылымдары һөйләмдә (текста) һәр саҡ икенсе ҡылым янында ғына була ала. Уның ялғауы *-һа, -һә,* уларға иһә зат ялғауҙары өҫтәлә:

I зат: *мин ҡайт-һа-м — беҙ ҡайт-һа-ҡ.*
II зат: *һин ҡайт-һа-ң — һеҙ ҡайт-һа-ғыҙ.*
III зат: *ул ҡайт-һа — улар ҡайт-һа-лар.*

**66-сы күнегеү.** Хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә тултырығыҙ.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| А | Б | | | | |
| | | | | | И |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Һ | | | | | |
| | | | | | Я |

**67-се күнегеү.** Шарт һөйкәлеше һәм ниәт һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ. Уларҙың затын, һанын билдәләгеҙ.

1. Кеше, кеше!
Ҡайҙа ҡараһам да,
Мин күрәмен данлы эшеңде.
2. Яҙҙар килһә, сығам ҡырҙарыма…
3. Бер күҙ ҡыҫһам, ҡалҡыр ҡояш,
Таң атыр.
4. Тетрәй ер, һәр өндән һиҫкәнә,
Ул тоя, утлы ел иҫһә лә,
Тәүге гөл түтәлде тишһә лә…

5. Килер таңды ҡаршыламаҡ булып,
Иртә һайын сығам тауҙарға.
6. Ошо утты яңы ҡандар менән
Һүндермәксе булып,
Тегендә
Йыртҡыс олой упҡын сигендә.

*(Р. Назаровтан)*

## IV

Һарыбай теге ваҡыт ҡалаға килгән юлды онотмағайны. Шуға күрә ул поездан төшкән ергә йәһәт кенә барып етте. Ә бына артабан ҡайһы яҡҡа китергә? Һарыбай көндөҙ үткән-һүткәнселәр самалы ғына күренгән бейек йорт алдында, ҡуйы аҡ тирәктәр араһында, әле тегеләй, әле былай ҡаранып ултырҙы. Әҙәмдәрҙән һорарға һинең телең юҡ, ни хәл итәһең, китергә ваҡыт. Ул тимер юл буйына төштө лә, телен һалындырып, ваҡ-ваҡ аҙымдар менән юрғалап, һүрән генә йылмайған ҡояшҡа ҡарай йүнәлде.

Тау-таш араһын киҫеп ятҡан тар ғына тимер юл бер мәл Һарыбайҙы йәм-йәшел тигеҙлеккә сығарҙы. Ул ҡалҡыулыҡтан сиҙәмгә төштө һәм, бына-бына ҡайтып етерен һиҙгән һымаҡ йәнә ашыҡты. Үткән бәхетле көндәрен һағынып килә торғас, Һарыбай тимер юлдың икегә тармаҡланыуын һиҙмәй ҙә ҡалған. Ул, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп, ҡайһы йүнәлешкә барырын белмәй торҙо. Һарыбай, юл тирәһен еҫкәй-еҫкәй, уң яҡҡа ҡайырылды. Моғайын, уның ауылы шул йүнәлештәлер. Бара торғас, ул яңыраҡ ҡына ташланған икмәк табып алып, уны тәпәйҙәре менән әйләндергеләп ашыҡмай ғына ашаны. Һарыбай йәнә бер ҡағыҙ төргәккә юлыҡты. Уны томшоғо менән төрткөләп асты. Эсендә һөйәк, колбаса киҫәктәре ята ине. Улар менән дә һыйланып, ниндәйҙер йылға буйында һыу эскәс, ҡасандыр һунарға йөрөгән саҡтағылай, дәрте ташып китте Һарыбайҙың. Ул, һерәйеп торған тау өҫтөнә бына-бына ҡолап төшөр төҫлө торған сағыу ҡыҙғылт ҡояшҡа ҡаранып, күҙҙәрен селт-селт йомғолап алды ла йәнә сабырға кереште. Шул саҡ Һарыбайҙың һиҙгер ҡолағына яҡында ғына әҙәм тауыштары салынды. Күрә: ҡаршылағы тау итәгенән салғы күтәргән ике ир ҡаршы йүгереп килә. Тимәк, һине, йәнә

төлкө менән бутап, ауларға уйлайҙар. Элегерәк тә бер заман шундай мәҙәккә тарыған Һарыбай тимер юл өҫтөнә күтәрелде. Унан, тегеләрҙең күҙҙәрен ҡыҙҙырған, шәфәҡ нурҙары төҫөнә мансылған һары йөнөн йымылдатып, эргәләге урманға килеп инде. Тирең матур булғас, ҡайҙа ла хәтәр икән. Һарыбай ҡуйы ағастар араһында байтаҡ уралып, еҫкәнеп йөрөнө лә төнгөлөккә ошонда ҡалды. Йыуан имән төбөндәге ҡоро-һары япраҡтар өҫтөнә бөгәрләнеп ятып, йоҡоға талды.

Һарыбай таң һарыһынан йәнә тороп китте. Кисәге эҙе буйлап тимер юлға күтәрелгәс, ул, тирә-йүнде ҡараштыра-ҡараштыра, ашыҡмай ғына атланы. Күп тә үтмәй, туҙанлы оло юл буйына килеп сыҡты. Һарыбай аптырабыраҡ ҡалды, сөнки тегеләй ҙә, былай ҙа машиналар елә. Ашлыҡ тейәлгән йөктәрҙе күргәс, ул йәнә үҙенең ауылын иҫләне. Таныш кешеләрҙе осратырға өмөт иткән төҫлө, Һарыбай иген ағылған яҡҡа йүнәлде. Төшкә табан ул тау буйында ултырған ҙур ғына ауылға барып етте. Һарыбай тыуған төйәгенә тимер юл буйлап ҡына ҡайтыр һымаҡ ине. Ә хәҙер иһә бейек кәртәләр, ҡоймалар араһынан үтә торғас, уның күңелен шом биләп алды. Баҡһаң, шөрләүе тиккә булмаған, ул әлеге тимер юл менән машиналар ағылып торған бейек ҡоймалы элеваторға килде лә инде.

Һарыбай, аҙашҡан һымаҡ, бер аҙ нишләргә белмәй ҡапҡа тирәһендә уралды. Уны күреүсе лә, саҡырыусы ла юҡ. Кешеләр мәж килә. Ахыр siктә ул һағайып ҡына аш еҫе аңҡып торған йорт янына килеп сүкте. Шул саҡ Һарыбай үҙенең ҡорһағына иғтибар итте. Ул буш тоҡсай һымаҡ һалынып төшкәйне. Ләкин берәүҙең дә унда эше юҡ. Шуға күрә бында һерәйеп ултырыуҙан ни файҙа?

Һарыбай, башын түбән эйеп, тимер юл буйлап ирегә боролдо. Оло юл киҫешкән ергә еткәс, ул һуңғы мәртәбә бәхетен һынап ҡарамаҡсы ине. Бәлки, бынау машиналар ыңғайына ул да үҙ төйәгенә юлығыр. Ул хәҙер оло юлдан ирегә китте. Ике-өс көн туҡтауһыҙ барҙы. Ә юлдың осо-ҡырыйы күренмәй. Әленән-әле ваҡ-төйәк ауылдар ғына осрап, эт тауыштары ишетелеп ҡуя. Эт үҙ ояһында көслө икәнен һиҙгән Һарыбай, ғәҙәттә, уларҙы урап үтә, сөнки тегеләрҙең тешенә барып эләгеүең ихтимал. Уның хәҙер туҡ эттәр менән алышырға хәле самалы. Бындай саҡта һине япа-яңғыҙ тип ҡарап тормаҫтар, өйөрө менән ябырылырҙар ҙа йөнөңдө туҙҙырып ташларҙар.

Инде асығыуҙан Һарыбайҙың түҙемлеге бөтә башланы. Ул, тәүәккәлләп, бәләкәй генә ауыл аша үтергә булды. Һирәкһаяҡ ултырған өйҙәр янынан һаҡ ҡына килә торғас, ашамлыҡ еҫе таралған һәм ҡапҡаһы шар асыҡ булған ҙур йорт тапҡырында Һарыбайҙың һеләгәйҙәре ағып китте. Ул түҙмәне, ишек алдына үтте лә болдор янында ултырған ашлы биҙрәгә төртөлдө. Моғайын, мал-тыуарға әҙерләп ҡуйғандарҙыр, хатта һыуынып та өлгөрмәгән, Һарыбай шыпырт ҡына килеп, көрәк һымаҡ теле менән уны ашыға-ашыға һоҫорға кереште. Ул шапор-шопор итеп ала ла тирә-йүнгә баға һала. Инде тайырға ғына ваҡыт еткәс, көтмәгәндә эргәһендә ғыжылдаған тауыш ишетте. Абайлап ҡараһа, бүкән кеүек бер ҡара эт, тештәрен ыржайтып, ташланырға килә. Һарыбай, тауыш сығармаҫ өсөн, ҡойроғон ҡыҫып, ишек янынан ситкә тайпылырға самаланы. Шул саҡ теге уның осаһын тешләп тә алды. Былай булғас, имен генә шылыу юҡ. Һарыбай, ырылдай-ырылдай, киң түше менән тегенең өҫтөнә атылып барып менде лә, уны аяғы менән ергә тәкмәстереп, ишек алдынан йән-фарманға сығып һыҙҙы. Шул саҡ уның артында эт баҙары башланды. Әле унан, әле бынан төрлө-төрлө сәүектәр ләүкелдәп килеп сығалар.

Һарыбай, урам буйлап саба торғас, ҡапыл уң яҡҡа киткән юлға боролдо. Уның артынан унға яҡын эт туҙан туҙҙыра-туҙҙыра килә ине. Һарыбай ҙур йылға аша һалынған оҙон күперҙе йән-фарманға үткәс, тегеләр яһилланып өрә-өрә тороп ҡалды.

Һарыбай инде тамам юлдан яҙҙы. Уның матур кәүҙәһе күҙгә күренеп йоҡарҙы, күпереп торған һары йөндәре ямғырҙа еүешләнгән һымаҡ, тәненә һылашты, хатта төҫө туҙанға батып, уңып китте. Инде тыуған төйәккә ҡайтыу өмөтөн башланған көслө ҡойон осорҙо. Һарыбай, ямғыр үткәнен көтөп, урман буйында байтаҡ ҡына ятты. Кисәнән бирле бөтә тәне әллә ниңә ҡороша, аяҡтары ут кеүек яна. Һарыбай юл буйында бойҙай башағын ашап ҡараны. Шулай ары-бире һуғылып килә торғас, ул тағын тимер юл буйына килеп сыҡты. Һарыбай ҡайһы яҡҡа барырға белмәй торҙо ла, ысыҡлы үлән өҫтөндә үҙенең эҙҙәрен шәйләгән төҫлө, тураға китте...

...Ысынлап та дуҫын һағынған Иншар, лагерҙан ҡайтыу менән, әсәһенән һораны:

— Әсәй, Һарыбай ҡайҙа?

Әсәһе, ни әйтергә белмәгән һымаҡ, ыҡ-мыҡ итте:

— Беләһеңме, улым… Ул беҙҙән ҡасып сығып китте, һин ҡайғырма, донъяла эттәр бөтмәгән.

— Ысын әйтәһеңме, әсәй, — тине Иншар ышанмайынса.

— Әлбиттә. Ниңә шул тиклем уҫал ҡарайһың, улым?

— Сөнки һин баштан уҡ Һарыбайҙы алып ҡайтыуға ҡаршы булдың. Һин уны үҙең ҡыуып сығарғанһыңдыр әле!

— Ҡуй, улым, мине улай ғәйепләмә. Бына ишекте ҡара, — тип әсәһе Иншарҙы коридорға алып сыҡты. — Бик тә түҙмәгәс, урамға сығарғайным, ҡайтманы ла ҡуйҙы.

Иншар иртәгеһен яҡын-тирәләге бөтә урамдарҙы, ишек алдарын ҡыҙырып сыҡты. Ләкин бер ҡайҙа ла Һарыбайҙың эҙе юҡ. Иншар дуҫын көттө, йыш ҡына тәҙрә эргәһенә килеп урамды күҙәтер булды. Шулай бер көндө ул ауылдан уларға килеп ултырған өләсәһен күреп ҡалды. Иншар, өйҙән атылып сығып, уға ҡаршы йүгерҙе лә, һөйөнсө һораған кеүек, һораны:

— Өләсәй, мин лагерҙа саҡта, Һарыбай сығып киткән. Ауылға ҡайтманымы?

— Юҡ, улым, күренмәне. Ҡайҙа булды икән? — тип, өләсәһе төйөнсөгөн ейәненә тотторҙо.

Ул көндө өсәүләп Һарыбай хаҡында баш ваттылар.

— Йөнө ебәк һымаҡ ине. Бер әҙәм аҡтығы кәпәс өсөн башына еткәндер инде меҫкендең, — тине өләсәһе һәм килененә һуҡранып ҡуйҙы: — Иншар ҡайтмаҫ борон, ниңә уны сығарырға һуң?!

— Һуңғы көндәре ашамай-эсмәй, төндә шыңшый башланы, ҡәйнәм. Әллә өйҙә тороу оҡшамай, әллә Иншарҙы һағынды. Тәки аңламаным. Шунан ғәйеп булды ла ҡуйҙы.

— Ярар, иҫән булһа, ҡайтыр әле, улым. Ҡайғырмай тор. Эт үҙ ояһын таба ул. — Өләсәһе шулай тигәс, Иншар бер аҙ тынысланды, ләкин дуҫы барыбер уның күҙ алдынан китмәне.

Берҙән-бер көндө Иншар, өләсәһе менән дауахананан ҡайтып килһә, аптырап китте, үҙ күҙҙәренә ышанманы. Ҡойма буйында, тәҙрәләренә текләп, таныш һын ултыра.

— Өләсәй, әллә Һарыбай ҡайтҡан инде. — Малай тулҡынланып ҡысҡырып ебәрҙе: — Һарыбай!.. Һарыбай!..

Шул саҡ эт менән кеше бер-берeһенә атлығып килеп ташландылар. Һарыбай, дуҫын ҡосаҡларға теләгән һымаҡ,

артҡы аяҡтарына баҫып һикергеләне, хатта яҫы теле менән малайҙың битен ялап алды. Ә Иншар, ҡулындағы әйберен өләсәһенә тоттороп, эттең ойошҡан йөндәрен һыпырғыланы, унда йәбешкән дегәнәктәрҙе сүпләне. Көтөлмәгән осрашыуға күңеле йомшарып киткән өләсәһе:

— Әйттем бит, улым. Эт үҙ ояһын таба ул, — тине шатлана-шатлана.

Әгәр Һарыбай Иншар ыңғайына ҡалала йәшәп китһә, уның мажараһы шуның менән тамам да булыр ине. Ләкин бер нисә көн үткәс, ул, ситлектәге һымаҡ, яңынан тынысһыҙлана башланы.

Һарыбайҙың был сәйер ҡыланышын күҙәткән өләсәһе ахырҙа бер көндө Иншарҙан шулай тип һораны:

— Һарыбайҙың ҡайҙа йөрөгәнен хәҙер белдеңме, улым?

— Юҡ, өләсәй. Ә ҡайҙа?

— Мин белдем. Тыуған төйәген эҙләп йөрөгән ул. Беләһеңме, улым, эт менән бесәйҙәр ят ергә килеүҙе ифрат ауыр кисерәләр. Һин Һарыбайҙы, улым, был таш йорт эсендә интектермә. Мин кире ауылға ғына алып ҡайтып китәйем. Унда ул донъяға күҙ-колаҡ булыр. Йәй көндәрендә ауылға ҡайтҡаныңды көтөп торор. Ризаһыңмы, улым?

Өләсәһенең яғымлы ғына һорауына Иншарҙың күңеле тулып китте һәм:

— Ярар, өләсәй, һинеңсә булһын, — тине. — Юғиһә, йәнә ҡасып китеп, бөтөнләй юғалып ҡуйыуы бар.

Иртәгеһен Иншар өләсәһе менән Һарыбайҙы вокзалға оҙатырға төштө. Шәмсекамал инәй эте менән вагонға килеп ингәс, көллө халыҡ тегеләргә иғтибар итте. Хатта бер телсәнерәк егет:

— Әбей, ҡайһы яҡҡа һунарға китеп бараһың? — тип шаяртып маташты.

Шәмсекамал инәй уның һүҙен ысынға алды шикелле:

— Һунарға түгел, ауылға ҡайтып барабыҙ беҙ, балаҡайым.

Теге һаман бәйләнеүен белде:

— Этең бигерәк тә аҡыллы икән. Кеше һымаҡ ултыра. Һат һин миңә уны. Күпме һорайһың, әбей?

— Һиңә һатҡансы, улыма бушлай ҡалдырыр инем әле, — Шәмсекамал инәй, поезд китеүен көтөп ултырған Иншарға ымланы.

— Ә ниңә бирмәйһең һуң?

— Хикмәт шунда: эт ҡалырға теләмәй. Ауылға ҡайтам, ти. Тыуған ерен онотҡан әҙәмдәрҙән йүнлерәк эт ул!.. Шуға күрә, һатһаң да, ҡасып китәсәк.

Шәмсекамал инәйҙең Һарыбайҙы шаштырып маҡтау өсөн әйткән һүҙҙәре кешеләргә тәьҫир итте шикелле. Быға саҡлы битараф ҡына ултырған оло бер ағай:

— Эйе, бик раҫ әйттең, әбей, — тине ул һуҙып. — Бәғзе әҙәмдәрҙең Тыуған ил, тыуған ер хаҡындағы төшөнсәһе ошондай эттәр хисенән дә фәҡирерәк була ул. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бына шунан һуң инде төрлө мөртәттәр, Тыуған илде ташлап китеүселәр, хыянатсылар ярала...

Оҙатыусыларҙы вагондан сығырға саҡырҙылар. Иншар, өләсәһе менән йәһәт кенә хушлашып, Һарыбайҙың башынан һыйпаны ла вагондан сыҡты. Ул, өләсәһе менән Һарыбай күренгән вагондан ҡалырға теләмәгән һымаҡ, ҡулын болғай-болғай, бер аҙ эйәреп барҙы ла баҡса буйында тороп ҡалды. Иншар бит остарына тәгәрәп төшкән күҙ йәштәрен ең осо менән һөрттө лә автобустар туҡталышына йүнәлде.

1. IV бүлектәге таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ. Уларҙы күсереп алып, күмәкләп мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Был һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?
2. Хикәйәлә осраған мәҡәлдәрҙең, әйтемдәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. Иншар образына характеристика бирегеҙ.
4. Оло йәштәге ағайҙың әйткән һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ. Уларҙан ниндәй фәһем алып була?
5. Һеҙҙең этегеҙ бармы? Булһа, исеме нисек? Уның менән үҙ-ара мөнәсәбәтегеҙ нисек? «Минең яраткан этем» тигән кескәй хикәйә яҙығыҙ.
6. Өйөгөҙҙә эт, бесәй йәки бүтән төрлө берәй хайуан аҫрауға мөнәсәбәтегеҙ нисек? Фекер алышығыҙ.
7. Хайуандарҙың тоғролоғо, кешеләрҙең хыянаты тураһында элек уҡыған әҫәрҙәрегеҙҙе, ҡараған фильмдарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөп, «Һарыбай» хикәйәһе менән сағыштырығыҙ.
8. Бөгөнгө көндә хужаһыҙ ҡалған эт, бесәйҙәр өсөн ярҙам хеҙмәте бармы? Улар тураһында мәғлүмәт йыйығыҙ.

**68-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Шарт һөйкәлеше ҡылымдарын табып, затын, һанын билдәләгеҙ.

1. Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын.
2. Бер көнгә артта ҡалһаң, биш көн ҡыуырһың.
3. Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө, алымһыҙ булырһың көҙ көнө.
4. Ҡулың эшләһә, ауыҙың тешләр.
5. Ялҡау ҡоторһа, байрамда эшкә барыр.
6. Ҡурай тартһаң, көй булыр, бүрәнә тартһаң, өй булыр.
7. Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.
8. Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың.

Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен тикшерегеҙ. Бер мәҡәл буйынса ижади эш эшләгеҙ.

## ҠЫЛЫМ ТӨРКӨМСӘЛӘРЕ

Затһыҙ ҡылым формаларын ҡылым төркөмсәләре тип йөрөтәләр. Улар дүртәү:

1. Исем ҡылым (имя действия) — *уҡыу, барыу, йөрөү, осоу.*
2. Сифат ҡылым (причастие) — *барыусы, барған (юл), барасаҡ (ауыл), барыр (ер).*
3. Уртаҡ ҡылым (инфинитив) — *уҡырға, барырға, йөрөргә, осорға.*
4. Хәл ҡылым (деепричастие) — *барып, барғас, барғансы, бара-бара.*

**69-сы күнегеү.** «Һарыбай» хикәйәһенән алынған өҙөктәге ҡалын хәреф менән бирелгән ҡылымдарҙың төркөмсәләрен билдәләгеҙ.

**Асығыуҙан** Һарыбайҙың түҙемлеге бөтә башланы. Ул, **тәүәккәлләп,** бәләкәй генә ауыл аша **үтергә** булды. Һирәк-һаяҡ **ултырған** өйҙәр янынан һаҡ ҡына **килә торғас,** ашамлыҡ еҫе **таралған** һәм ҡапҡаһы шар **асыҡ булған** ҙур йорт тапҡырында Һарыбайҙың һеләгәйе ағып китте. Ул түҙмәне, ишек алдына үтте лә болдор янында **ултырған** ашлы биҙрәгә төртөлдө.



# ӘНҮӘР БИКЧӘНТӘЕВ

## (1913 —1989)

Әнүәр Һаҙый улы Бикчәнтәев 1913 йылдың 4 октябрендә Өфө ҡалаһында тыуа.

Әҙәби ижад юлында Әнүәр Бикчәнтәев бик күп хикәйәләр, повестар, романдар ижад итте. Уның «Бөркөт һауала үлә», «Ҙур оркестр» повестары, «Ҡарасәй юлы», «Ожмах вәғәҙә итмәйем» романдары киң билдәле.

Әнүәр Бикчәнтәев Ғ. Сәләм, С. Юлаев исемендәге премияларға лайыҡ булды.

### БАКЕНЩИКТАР ИЛАҠ БУЛМАЙ

Малайҙар аталарынан уңдылар. Сәмиҙең атаһы — умартасы, улын эшкә ҡушып йөҙәтмәй. Үҙ эшен үҙе башҡарып өлгөрә. Ғәлиҙең дә атаһы улына ирек ҡуя, — үҙе менән бергә бер ҙә тракторға ултыртмай. Вәли, нисек кенә әйтһәң дә, бригадир малайы. Ул атаһын да, әсәһен дә һанға һуҡмай. Ни теләһә, шуны эшләй... Һүҙ ҙә юҡ, минең дуҫтар рәхәтләнеп йәшәйҙәр. Йоҡоларын туйҙырып алғас, теләһәләр балыҡҡа китәләр, көн буйына туйғансы уйнап йөрөйҙәр.

Тик мин генә атайҙан уңманым. Бына яңы ғына таң атып килә, ә атайым мине йоҡонан уятты ла инде. Минең торғо килмәй, иң тәмле йоҡо ваҡыты!

— Тор! — ти ул.

«Улым» да, тимәй, «етер инде, йоҡоң туйғандыр» ҙа, тимәй. Әйтһә, бер һүҙ әйтә, уны ла ҡабатламай.

Иркәләнеп тороу юҡ инде. «Тор!» тигәс тә, һикереп тороп ултыраһың.

— Битеңде кәмәлә йыуырһың! — ти ул.

Йылға буйында беҙ атайым менән икәү генә йәшәйбеҙ. Әсәйем юҡ. Ул беҙҙе ташлап киткән. Бәлки, ул булһа, мин дә, кеше төҫлө рәхәтләнеп, йоҡо туйҙырыр инем.

Тик башты төрлө уйҙар менән ҡаңғыртырға ваҡыт юҡ.

— Ишкәккә ултыр! — ти атайым.

Ул бакенщик булып эшләй. Беҙҙең участка бик яуаплы, бөтә капитандар унан ҡурҡалар. Ошо тәңгәлдә генә йылға ҡапыл боролош яһай, әгәр һиҙгер булмаһаң, пароходты таш ярға бәрергә генә тора. Ағым да бик көслө.

Шуға күрә беҙ төн буйы бакендар яндырабыҙ. Алты фонарҙың өсөһө — ҡыҙыл, өсөһө — аҡ. Капитандар тап шулар араһынан уҙырға тейеш, әгәр яңылышһалар — эш харап.

Бына әле лә, таң атып килгәндә, беҙ ул лампаларҙы һүндереп йөрөйбөҙ. Мин ишәм, атайым фонарь менән булыша. Бер юлы кәрәсин дә өҫтәй. Инде кис менән уларҙы яндыраһы ғына ҡала.

Ағым көслө. Мин көскә-көскә генә ишәм. Ләкин атайым ишкәкте үҙ ҡулына алмай.

— Мин иҫән саҡта, эшкә өйрәнеп ҡал, — ти ул. — Был донъяла минән дә оҫтараҡ өйрәтеүсе булмаҫ.

Фонарҙарҙы һүндереп ҡайтҡас, беҙ яр буйында икәүләп балыҡ тотабыҙ, һуңынан баҡсала эшләп алабыҙ. Сәсмәгән нәмәбеҙ юҡ... Көн аяҙ була ҡалһа, ишкәктәрҙе йә фонарҙарҙы буяйбыҙ. Ике кәмәбеҙ бар, уларҙы ыҫмалалап торабыҙ. Быйыл ыҫмала еткереп булмай.

Ашағансы-эскәнсе, көн үтә лә китә. Туҡтауһыҙ аяҡ өҫтө йөрөлә, эштән бушаған минут юҡ. Шуныһын әйтергә онотҡанмын, табаҡ-һауыт йыуыу ҙа минең елкәлә бит.

Ҡояш байыр алдынан, мин тағы ла ишкәк ишә башлайым. Төн буйы лампалар йымылдап янып ултырырға тейештәр. Ғәҙәттә, август айында йылғала хәрәкәт күп була: пароходтар иген ташыйҙар, бер-бер артлы һалдар аға... Әйҙә, юлдары уңышлы булһын!

Бер көндө атайым, кәмәгә ултырып, пристангә төшөп китте. Аҡса алаһы көн ине.

— Кискә ҡайтып етермен, — тине ул. — Бер ыңғайҙан кибеткә лә инеп сығырмын.

Кибеткә инәм тигәс, мин шатландым. Уның пристандән яңы китап һатып алып ҡайта торған ғәҙәте бар ине. Унан да ҙур бүләк булыуы мөмкинме ни!

Минең бик йыш үҙем генә тороп ҡалғаным бар. Көндөҙ ҡурҡыныс түгел, берәй һал бакенды бәреп китә ҡалһа, уны

кире нығытып ҡуйыуы бер ни түгел. Бакенщик ундайға ғына өйрәнгән була инде. Башҡа ни булыуы бар?

Ләкин ул көндө, атайым китеп, ике-өс сәғәт ваҡыт үтмәне, ел ҡуҙғалды. Көнбайыштан ҡара болоттар килеп сыҡтылар. Ҡайҙалыр күк күкрәне.

Ел көсәйгәндән-көсәйә бара. Тулҡындар сайҡала, йылға өҫтө күгәреп китте, ҡырсынташтар аҡ күбек менән ҡапланды. Бына ҡарағусҡыл күктә йәшен йәшнәне.

Ошондай көндәрҙә төрлө авариялар булғылай. Тик бөгөн генә, исмаһам, беҙҙә генә ундай бәлә булмаһа ярар ине!

Ямғыр мине өйгә ҡыуып индерҙе. Йәшен йәшнәһә лә, тәҙрә эргәһенән китмәйем. Беҙҙең бакендар, аҡкоштар кеүек, уҫал тулҡындар өҫтөндә тирбәләләр. Шуларҙы күҙәтәм.

Берәйһе ысҡынып китмәһә генә ярар ине!

Һуҙып-һуҙып ҡысҡырған пароход күренде. «Мәжит Ғафури»ҙың тауышын мин әллә ҡайҙан танийым. Ул беҙҙең ауылдағы кирбес заводы һымаҡ геүләй.

Ҡапыл пароход өҫтөндә генә күк ярылған һымаҡ булды, ләкин йәшен уға теймәне. Яр буйындағы ҙур имәнде ауҙарҙы, уның өсөн инде бакенщик яуап бирмәй.

Атайым һаман ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Уның менән ундай-былдай хәл була күрмәһен! Әгәр йомшаҡ күңелле кеше булһам, ошо ҡайғынан илап ебәрер инем. Бакенщик ҡаты бәғерле була ул. Уға йәш түгергә ярамай.

Күҙҙе йылғанан алмай, картуф таҙартам. Әлдә ярай иртән тотҡан өс суртан бар ине. Атайым ҡайтһа, аш бешеп торһон. Дауыл ваҡыты, тип ашамай тороп булмай бит! Кискә табан тағы ла бер пароход геүләй-геүләй уҙҙы. Быныһы әллә «Салауат», әллә «Матросов» булды инде, тауышын таныманым. Ул күләгә кеүек шәүләһен генә күрһәтеп үтте.

«Инде атайым ҡайтмай, күрәһең, — тип мин тышҡа сыҡтым. — Ни булһа булыр, фонарҙарҙы үҙемә яндырырға тура килер».

Ошо минутта атайымды иҫемә төшөрҙөм. Ул йәшенгә лә, ямғырға ла, дауылға ла иғтибар итмәй, аҡрын ғына атлап төшөр ине... Мин дә шулай эшләнем.

Ул ҡаҙыҡҡа бәйләнеп ҡуйылған сынйырҙы ашыҡмай ғына ысҡындырыр ине... Мин дә шулай эшләнем.

Тик кәмә генә мине тыңламай. Тулҡын өҫтөндә бейегәнгә: «Сеү, үрле-ҡырлы һикермә! — тип өгөтләй башланым. — Ниңә шул тиклем шөрләйһең? Йәшендәнме? Уны юҡ, тип хис ит!»

Беренсе фонарҙы тоҡандырғас, шатландым. Был төндә йөҙөүселәр һуҡыр ҡалмаясаҡтар.

Тулҡындар шундай һикерәләр, кәмәне әйләндереп ташларға торалар. Уны еңер хәл юҡ.

Йәшенгә иғтибар итмәйем инде. Унан ҡурҡһаң, һуштан яҙырға кәрәк. Күк күкрәгәндә, тулҡындар өҫтөнән ҡаҡ тауҙар йүгергән һымаҡ тойола.

Мине берәй ҡатын тәрбиәләгән булһа, бәлки, илаған да булыр инем, атайым иларға өйрәтмәне шул. Шуға күрә ишкәкте ишә бирәм.

Минең кәмәм дә, бакен һымаҡ, тулҡын өҫтөндә бейей. Ситтән ҡарағанда, бәлки, ул да аҡҡошҡа оҡшайҙыр.

Арғы яҡтағы өсөнсө фонарь ҙа артта ҡалды. Дүртенсе фонарҙы тоҡандырғанда, бер ҡап шырпы бөтөрҙөм.

Бына бишенсеһе... Һис көтмәгәндә генә, ҙур тулҡын килтереп бәреп ебәреүе булды, шул минутта минең ҡулымдан ишкәк ысҡынып та китте. Һә тигәнсе кәмә, башын юғары күтәреп, әйләнеп тә төштө. Тулҡын упҡанда, мин бер нәмә тураһында ғына уйлап өлгөрҙөм: «Әле алтынсы фонарь янмай ҡалды бит», — тинем. Уны кем яндырыр икән?..

...Һушыма килгәндә, атайым башым осонда тора ине. Ул эйелде лә мине ҡапыл үпте. Беренсе тапҡыр.

Миңә уның был йомшаҡлығы оҡшаманы. Шулай ҙа мин уны ғәфү иттем. Бәлки, ҡайһы ваҡыт, рәхмәт әйтеү урынына, үбергә лә ярайҙыр. Ун йылға бер тапҡыр!

1. Хикәйәнән яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Уларҙы ҡулланып, һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙығыҙ.
2. Хикәйәнең йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп сығығыҙ. Һөйләгәндә яңы һүҙҙәрҙе лә ҡулланырға тырышығыҙ.
3. Хикәйәнең геройына характеристика бирегеҙ. Уның яҙмышына һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Малай дуҫтарынан ни өсөн көнләшә? Уның атаһына үпкәләргә урыны бармы? Уның урынында һеҙ нимә эшләр инегеҙ? Ошо турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

4. Атай менән улдың яр буйындағы тормошо тураһында һөйләгеҙ.
5. Атаһы ҡайтмағас, бакендарҙы тоҡандырырға малай яңғыҙы китә. Ҡоторонған дауылдан ҡурҡмаҫҡа уға нимә ярҙам итә?
6. Хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ: Нимә ул хикәйә? Яуабығыҙҙы «Бакенщиктар илаҡ булмай» хикәйәһе миҫалында дәлилләгеҙ.
7. Дуҫлыҡ, тоғролоҡ, хыянат тураһында мәҡәл һәм әйтемдәр табып яҙығыҙ һәм уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
8. Бакен тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып, белешмә төҙөгөҙ.

## ИСЕМ ҠЫЛЫМ

Эштең, хәрәкәттең атамаһын белдергән ҡылымдар **исем ҡылым (имя действия)** тип атала.

Башҡорт телендәге исем ҡылымдар рус теленә исем булып тәржемә ителәләр: *көтөү — ожидание, ашау — кушание, йөрөү — хождение, шыуыу — катание, һикереү — прыгание* һ. б.

Исем ҡылым нигеҙгә *(-ы, -е, -о, -ө) -у, -ү* ялғауҙары ҡушылып яһала: *эшлә-ү, аша-у, бар-ыу, кил-еү, ос-оу, төш-өү.*

Әгәр ҙә ҡылым ҡушма булһа, был ялғауҙар һуңғы һүҙгә өҫтәлә: *барып етеү, осоп килеү, һөйләй башлау.*

**70-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙән исем ҡылымдарҙы табығыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. Ашау татлы — эшләү ҡаты.
2. Уҡыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу.
3. Егетлек бүрек кейеүҙә түгел.
4. Асыу йотоу — тау йотоу.
5. Ир-егеттең оялыуы — имән ағастың бөгөлөүе.

Исем ҡылымдарға ҡылым ялғауҙары ла *(-маҫ, -мәҫ, -ма, -мә),* исем ялғауҙары ла ҡушыла ала. Сағыштырығыҙ: *китеү — китмә* (ҡылым ялғауы); *китеүең, китеүгә, китеүенең, китеүҙәре* — эйәлек заты, килеш, күплек (исем ялғауҙары).

**71-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙә исем ҡылымдарҙы табығыҙ. Уларҙың ялғауҙарын билдәләгеҙ.

1. Ҡырпаҡ ҡарҙа һуҫарҙы юллатыуы бик анһат була. 2. Егеттәр араһында ағаһы менән энеһенең булыуы Фатиманы тынысландырҙы. 3. Ташбатҡан ауылы йәштәренең һабан туйы бөтөүгә яҡынлашты. 4. Ат саптырыу ғына ҡалғайны хәҙер. 5. Йәштәр аттарҙың килеүен түҙемһеҙлек менән көтә башланы. 6. Йүгеректәргә, килеү тәртибенә ҡарап, бүләктәр әҙерләнеләр. 7. Йүгеректе һыуындырыу өсөн, йөрөтөргә алып киттеләр. *(Ж. Кейекбаевтан)*

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Батыр — көсө менән, егет — эше менән.

* * *

Батырҙың көсө көрәштә беленер.

* * *

Егет майҙанда сынығa.

* * *

Йөрәгендә барҙың беләгендә бар.

* * *

Арғымаҡ һыйпау һөймәҫ.

## ХЕҘМӘТЕ БАРҘЫҢ — ХӨРМӘТЕ БАР

*Мәжит Ғафури*

### ГӨЛДӘР БАҠСАҺЫНДА

Бер көн шулай гөлдәр баҡсаһында
Сәскәләрҙе ҡылдым тамаша.
Хуш еҫтәре менән йән шатлана,
Нурҙарынан күҙҙәр ҡамаша.

Нәфис төҫтәренә, буйҙарына
Хайран ҡалып, ҡыҙығып ҡараным,
«Әй, сәскәләр, һеҙгә кемдәр дуҫтар?
Кемдәр дошмандар?» — тип һораным.

Гүйә, улар шунда йәнләнделәр,
Нурҙар сәсеп ем-ем иттеләр.
Әкрен генә иҫкән ел арҡылы
Миңә былай яуап бирҙеләр:

«Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙа,
Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,
Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле —
Шулар беҙгә дуҫтар!» — тинеләр.

«Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,
Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәй,
Кемдәр килеп беҙҙе хаҡһыҙ өҙә —
Шулар беҙгә дошман!» — тинеләр.

Сәскәләрҙең ошо яуаптарын
Алғас: «Дөрөҫ! — тинем уларға, —
Эшһеҙ кешеләрҙең хаҡтары юҡ
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарға...

Күңелле эш, матур тормош менән
Йыл артынан йылдар ағырҙар...
Эшсән егет менән эшсән ҡыҙҙар
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарҙар».

1. Кемдәр ул *ҡара эсле* кешеләр? *Аҡ, ҡыҙыл, һары, йәшел* һ. б эсле кешеләр ҙә буламы? Ни өсөн?
2. Сәскәләр лирик герой менән кеше һымаҡ һөйләшәләр. Әҙәбиәт ғилемендә был нимә тип атала?
3. Сәскәләргә лирик геройҙың мөнәсәбәте нисек? Был образ аша шағир ниндәй фекер үткәрә?
4. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. *Кемдәр* һүҙенең ҡабатланып ҡулланылыуының маҡсатын аңлатып ҡарағыҙ.

Исем ҡылымдарҙың ҡайһы берҙәре исемгә күскән һәм исем ҡылым менән омоним булып йөрөй. Сағыштырығыҙ: *Китап уҡыу. — Уҡыу башланды. Автобус көтөү урыны. — Көтөү ҡайтты. Эште һайлауы еңел түгел. — Һайлауға барығыҙ.*

**72-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

## ҺАБА ТУЙЫ. ҺАБАНТУЙ

Элегерәк һабантуйҙы башҡорттар һаба туйы тип атап йөрөткәндәр. Был исем, бейәләр ҡолонлап, ҡымыҙ әҙерләр ваҡыт етеп, йәйләүгә сығыр алдынан үткәрелгән йола байрамы менән бәйле. Ҡымыҙҙы ат тиреһенән эшләнгән һаба тип аталған һауыттарҙа әсеткәндәр. (Ул һүҙ әле һауыт-һаба тигән ҡушма һүҙ эсендә һаҡланып ҡалған.) Ҡымыҙ әҙерләй башлар алдынан, һабалар йыуылып, таҙартылып, ыҫланып алырға тейеш. Был эште бөтә өйҙәрҙә лә башҡаралар, шул уҡ ваҡытта йәйләүгә күсеү әҙерлеге лә бара. Бына ошо ваҡытта уҙғарыла ла инде һаба туйы. Уның ваҡыты апрель аҙаҡтарына, май баштарына, йәғни яҙға, тура килә.

«Гөлнәзирә» исемле башҡорт халыҡ йырындағы «Яҙғы һаба туйҙарында ос(о)рашып булманы» тигән юлдар ҙа был байрамдың яҙ үткәрелеүен раҫлай. Ғөрөф-ғәҙәттәре беҙҙекенә оҡшаған бүрәт, монгол халыҡтарындағы айран байрамдары, себерҙәге ҡайһы бер төрки халыҡтарындағы буҙа байрамдары беҙҙең һаба туйы тип аталған ҡымыҙ байрамдарыбыҙға ауаздаш. Һуңынан йәйләүҙәргә күсеү туҡталғас, ер эшкәртеү эше өҫтөнлөк итә башлағас, беҙҙең «һаба туйы»быҙ «һабантуй» тигән икенсе исем менән йәй айҙарында үткәрелә башлай. Быға «һаба» һүҙенең «һабан» менән оҡшаш булыуы ла булышлыҡ иткәндер инде.

*Мәүлит Ямалетдинов*

**УРАҠ ӨҪТӨ**

Ураҡ өҫтө.
Уттай ҡыҙыу эштән
Монар бөркә иген ҡырҙары.
Ергә барып етмәй, парға оса
Игенсенең маңлай тирҙәре.

Икмәк артмаҡлаған каруан төҫлө,
Комбайндар килә теҙелеп.
Улар үткән ерҙә күк томралап,
Ашлыҡ саңы ҡала һибелеп.

Алғы комбайндың бункерында
Ете йондоҙ балҡый.
Быйыл да
Ете меңдең һыҙығынан үтте
Оҫта комбайнсы Уйылдан.

Йондоҙ итеп уны күккә сөйҙө
Халҡы өсөн тырыш хеҙмәте.
Бункерында янған йондоҙсоҡтар —
Тыуған илдең оло хөрмәте.

Ураҡ өҫтө.
Уттай эш мәлендә
Тура килмәй сама самаға:
Күктең йондоҙҙары ергә төшә,
Ер йондоҙо аша һауаға!

1. Ниндәй мәл ул *ураҡ өҫтө*? Ураҡтың аҫты ла, эргәһе лә, алды ла, арты ла буламы? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
2. *Уттай ҡыҙыу эш мәле* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. Ни өсөн Уйылдандың комбайнының бункерына йондоҙҙар төшөрөлгән? Техникаға ошондай йондоҙҙар төшөрөү ғәҙәте тағы ҡайҙа бар?
4. Шиғырҙың аҙаҡҡы ике юлы ниндәй мәғәнәгә эйә?
5. *Ер йондоҙо аша һауаға!* Шиғри юлдағы *аша* һүҙен аңлатығыҙ.
6. Шиғырҙағы *ете* һанының мәғәнәһен нимә менән бәйләп аңлатып була?

## СИФАТ ҠЫЛЫМ

**Сифат ҡылымдар (причастия)** предметтың эше буйынса билдәһен белдерә, шуға күрә улар, ғәҙәттә, исем алдында килә һәм *ниндәй?* һорауына яуап бирә. Миҫалдар: *уҡыған китап, килеүсе кеше, барыр юл, әйтәһе һүҙ.*

Әгәр сифат ҡылым исемдән башҡа ҡулланылһа, уға төрлө ялғауҙар (һан, эйәлек заты, килеш) ҡушыла ала. Был яғы менән ул сифатҡа һәм һанға оҡшаған.

**73-сө күнегеү.** Сифаттың, сифат ҡылымдың, һандың оҡшаш яҡтарын ҡарағыҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Тәмле икмәк | тәмле икмәкте | тәмлеһен |
| Киҫелгән икмәк | киҫелгән икмәкте | киҫелгәнен |
| Ике икмәк | ике икмәкте | икеһен |

Миҫалдарҙы рус теленә тәржемә итегеҙ (телдән) һәм һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**74-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән сифат ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. **Абынған һөрөнгәндән** көлгән.
2. **Айырылған** ҡаҙ **тупланған** ҡарғаға ем булыр.
3. **Инереңдән** алда **сығырыңды** уйла.
4. Кисеү **бирмәҫ** йылға булмаҫ.
5. Ҡайҙа **йығылырымды** белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем.
6. **Һөймәҫ** кеше һыймаҫ.

Береһенең мәғәнәһенә тап килгән хәл-ваҡиғалар тураһында ҡыҫҡа хикәйә яҙығыҙ.

**75-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Сифат ҡылымдарҙы табығыҙ. Улар ниндәй һүҙҙәргә ҡарай? Сифат ҡылымдарҙы үҙҙәре бәйләнгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ.

1. Ваҡ һибелгән йондоҙҙарҙан
   Балҡып торған ай артыҡ.
   Буш һимергән айғырҙан
   Ярһып торған тай артыҡ.
   Тауыш тыуған туйыңдан
   Тыныс торған өй артыҡ.
2. Булыр бала биләүҙән.
3. Кеше ышанмаҫ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә.
4. Ауыҙың әйткәнде ҡолағың ишетһен.
5. Алйотҡа әйткән кәңәшең ағып киткән һыуға тиң.
6. Һөрөнмәҫ аяҡ булмаҫ, ярылмаҫ таяҡ булмаҫ.

* * *

Миндә көс бар, мин һиҙәм бик —
Миндә көстәр аллаһы.
Ҡурҡа минән түлке сысҡан,
Үрмәкселәр — һәммәһе.
Янмаған бер шырпыны мин
Бер һыҙыуҙа ут итәм,
Ысынлаһам, мин бер һуғыуҙа
Бер себенде юҡ итәм... *(Ш. Бабич)*



## ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВ
## (1911 —1968)

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев 1911 йылдың 25 октябрендә Башҡортостандың хәҙерге Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында тыуған.

Жәлил Кейекбаев, ғилми эштәр алып барыу менән бергә, балалар әҙәбиәтендә лә даими эшләй. Уның халыҡ әкиәттәре ерлегендә яҙған әҫәрҙәре айырым йыйынтыҡтар булып та сыға.

Яҙыусының иң популяр әҫәре — «Туғандар һәм таныштар» романы.

### ОМОРҘАҠ БАБАЙ

Оморҙаҡ бабай — күпте күргән кеше. Ул үҙ ғүмерендә ниндәй генә тауҙарға артылмаған, ниндәй генә урмандарҙы ҡыҙырмаған, ниндәй генә ерҙәрҙе айҡамаған!.. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул һис тә бирешмәй әле. Оморҙаҡ бабай бер ваҡытта ла таяҡҡа таянып йөрөмәҫ. Атлағанда кәүҙәһен дә бик төҙ тота, еңел һәм ышаныслы баҫа.

Бабай ҡартайған көнөнә тиклем яҡын-тирәлә бик данлы һунарсы булған. Ул үҙ ғүмерендә етмешләп кенә айыу алған, йөҙҙән ашыу бүре һуҡҡан. Төлкө, һуҫар, бурһыҡтарҙың һанын Оморҙаҡ бабай иҫәпләй ҙә алмай.

Әйткәндәй, Ташбатҡан ауылы һунарсылыҡ өсөн бик яйлы урынлашҡан. Ауыл үркәсле-үркәсле бейек тауҙар ҡуйынында һыйынып ҡына ултырған. Көнсығыш яҡлап Урал башлана, артабан, береһенең өҫтөнә икенсеһе аша ҡарап, ҡайҡайышып ятҡан осһоҙ-ҡырыйһыҙ тауҙар китә. Унда әле лә әҙәм аяғы баҫмаған урындар бар. Оморҙаҡ бабай үҙ ғүмерендә ул тауҙарҙы, һырттарҙы һәм уяларҙы — барыһын да арҡыры ла, буй ҙа йөрөп күреп сыҡҡан.

Ауылдың ҡояш байышы яғы типһән. Унда ҡыйылып ятҡан матур арҡалар, уйым-уйым урмандар, оҙон туғайҙар

һәм сейәле түбәләр китә. Ауылдан түбән, йылға буйында, ҙур һаҙлыҡ бар. Һаҙ упҡынлы, күтерле; ситенәрәк барып, аяҡ менән баҫһаң, һелкенеп тора. Шул һаҙҙың уртаһында элгәре ҙур бер таш булған. Берҙән-бер көндө был таш, һаҙға батып, ғәйеп булған. Шуға күрә уны Ташбатҡан һаҙы тип йөрөтәләр. Ауылдың исеме лә шунан ҡалған. Унда әле лә быҙау, башмаҡ-фәлән батып үлгеләй. Бата ла бөтөнләй юҡ була.

Ташбатҡан — ҙур ауыл. Хәҙер колхозы ла бик ишле, сөнки унда элекке дүрт колхоз ҡушылған.

Оморҙаҡ бабайҙы колхоз эшенә ҡушмайҙар хәҙер. Ләкин ул ҡул ҡаушырып тик ултырмай: йә һәнәк, тырма яһай, йә арҡан, дилбегә, мисәү ебе ишә, йә ҡамыт йүнәтә.

— Бынау уттай эш ваҡытында нисек, ҡыл да ҡыбырлатмайынса, тик ятмаҡ кәрәк? — ти ул.

Ташбатҡан ауылында ете йыллыҡ мәктәп бар хәҙер. Оморҙаҡ бабайҙың ейәне Хөрмәт шул мәктәптә бишенсе класта уҡый. Хөрмәттең атаһы леспромхоздың урман участкаһында эшләй. Ул өйгә аҙна араһында бер генә ҡайтып китә. Хөрмәт йәй көнө атаһы янына ике-өс тапҡыр барып ҡайтты. Унда еләк, муйыл бик күп була. Ул атаһы яһап биргән туҙаяҡҡа күп итеп еләк йыйҙы, бер ҡосаҡ итеп көпшә, ҡымыҙлыҡ алып ҡайтты. Ҡайтҡас, олатаһы менән өләсәһенә бер туҫтаҡ еләк килтереп бирҙе. Өйгә инер-инмәҫтән, Хөрмәт ҡысҡырып ебәрҙе:

— Олатай, беҙ атайым менән айыу күрҙек! — Хөрмәт, күҙен шарҙай итеп, яуап көткән төҫлө, олатаһына ҡараны, сөнки уның тере айыуҙы күргәне юҡ ине әле. Ул арала өләсәһе Хөрмәтте еләк килтергәне өсөн маҡтаны һәм бер генә бөртөк еләк алып ҡапты. Оморҙаҡ бабай менән Хөрмәт айыу тураһында һөйләштеләр. Олатаһы Хөрмәттән шунда уҡ:

— Күргәс, ниңә тотоп алып ҡайтманығыҙ һуң ул айыуҙы? — тип һораны.

— Эйе! Тоторһоң уны! Нисек тотаһың?!

— Баҫтырып тотаһың. Элек беҙ шулай тота торғайныҡ. — Оморҙаҡ бабай Хөрмәтте шаярта, әлбиттә, сөнки айыуҙы, ҡыш сумма ҡарҙа ҡыуалап, бүре һуҡҡан кеүек, ат менән ҡыумайҙар. Быны Оморҙаҡ бабай бик яҡшы белә. Ҡыш көнө айыуҙы өңө алдына ут яғып ыҫлайҙар. Айыу шул ваҡытта, төтөнгә сыҙамайынса, өңөнән килеп сыға. Өңөнән сыҡҡан сағында, уға йәҙрә менән аталар. Йәй көнө булһа, емтеге янына

эре-эре бүрәнәләрҙән тәпе ҡоралар, йә ҡапҡан һалалар, йә емтеге эргәһендәге ағас башына таҙғаҡ яһап, шунда мылтыҡ менән төнө буйы көтөп ултыралар. Айыу емтек янына төндә килгән саҡта, ике-өс мылтыҡтан бер юлы аталар: йәҙрә тейһә, айыу үлә, әлбиттә, йә яралана, теймәһә, китә һәм ҡабаттан ул емтеге янына килмәй.

Оморҙаҡ бабайҙың Хөрмәткә үҙенең һунарға йөрөгән саҡтарын бик күп һөйләгәне бар. Хөрмәт һунар тураһында олатаһының һөйләгән һүҙҙәрен тыңларға бик һәүәҫ. Ул, ауыҙын асып, тын да алмайынса, йотлоғоп тыңлап ултыра, ара-тирә олатаһына һорауҙар бирә — үҙенсә деталдәрҙе асыҡлаған була.

Хөрмәт был юлы ла шулай эшләне һәм айыу тураһында һораша башланы:

— Олатай, айыу, кешене баҫтырғанда, ситкә янтайып ҡалһаң, уҙып китә лә ғәрлегенән кире әйләнеп килмәй, имеш, ти. Шул ысынмы икән?

— Кире әйләнеп килмәүе ысын. Ә ғәрләнеүе ысын түгел. Кеше генә ғәрләнә ул. Хайуан ғәрләнеүҙе белмәй.

— Ә ниңә кире әйләнеп килмәй һуң ул?

— Айыу, кешене баҫтырғанда, эт шикелле башын юғары күтәреп йүгермәй, башын түбән баҫып саба. Шуға күрә ситкә янтайып ҡалған кешене ул күрмәй. Башын ҡалҡытып ҡарамайынса, арығансы саба ла саба.

— Ә ниңә ул башын күтәреп ҡарамай һуң?

— Башын күтәрер ине, елкә бик ҡалын, һимеҙ. Шуға ла ул аяҡ аҫтына ҡарап ҡына йүгерә.

Хөрмәт олатаһының һөйләүенә бик ҡәнәғәт. Уның ҡыҙыҡ хәбәрҙәрен тағы ишеткеһе килә, сөнки олатаһы уға һәр ваҡыт ябай итеп төшөндөрә, ҡыҙыҡ итеп һөйләй, ҡайһы бер саҡта шаярта.

Ә Хөрмәтте ҡыҙыҡһындырған әйберҙәр бик күп әле.

Мәҫәлән, өләсәһе йыш ҡына убыр әбейе, аждаһалар, ендәр тураһында ҡурҡыныс итеп һөйләй.

Ә Хөрмәттең олатаһы аждаһалар, ен-бәрейҙәр тураһында, ниңәлер, бер ни ҙә һөйләгәне юҡ. «Әллә олатайым күргәне юҡмы икән?» — тип уйлай Хөрмәт. Шуға күрә ул олатаһынан был турала һорарға булды.

— Олатай, һинең аждаһа күргәнең бармы?

Оморҙаҡ бабай ишкән арҡанын бөрсөкләп ултыра ине. Ул эшен туҡтатманы һәм, Хөрмәтте көттөрмәйенсә, яуап бирҙе:

— Бар, бар. Һинең кеүек бәләкәй саҡта бер күрҙем.

Хөрмәт, күҙҙәрен шарҙай асып, олатаһына ҡарап ҡатып ҡалды. «Улай булғас, өләсәйемдең һөйләүе ысын икән», — тип уйланы ул.

— Йә, һөйлә әле, олатай, һөйлә! Ҡайҙа күрҙең?

Оморҙаҡ бабай һөйләп алып китте:

— Һаҙлыҡта күрҙек, һинең кеүек бәләкәй саҡта беҙ күмәкләп һаҙлыҡтың түбән яғына муйыл йыйырға барҙыҡ. Шунда муйыл бик күп була торғайны. Йөрөй торғас, ел-дауыл сығып китте, күкте ҡара болот баҫып, йәшен йәшнәп, күк күкрәп, ямғыр яуа башланы. Беҙ, ямғырҙан ҡасып, ағас төбөнә һырыҡтыҡ. Ямғыр шул тиклем шәп яуҙы, һыуланмаған еребеҙ ҡалманы. Үҙебеҙ ҡурҡабыҙ: ел-дауыл сығып, ямғыр яуғанда, аждаһа ҡалҡа, тип һөйләйҙәр. Ҡурҡыштан бер-беребеҙгә ҡарашабыҙ, ләкин аждаһа тураһында бер нәмә лә өндәшмәйбеҙ. Аждаһа ҡалҡҡандырмы, юҡтырмы, уныһын күрмәнек. Шулай ҙа Ташбатҡан һаҙлығы өҫтөндә ҡуйы ҡара болоттар өйөрөлөп йөрөнө. Шунда беҙҙән алыҫ түгел йәшен атты. Ҡотобоҙ осто. Ямғыр бер аҙ баҫылғас, беҙ ҡайтырға сыҡтыҡ. Һаҙлыҡтың түбән осона килеп еттек. Түбәнге осо ул тиклем үк упҡынлы түгел, уны йәйәү үтерлек. Күрән араһынан киләбеҙ. Көн бер аҙ асыла башланы. Әрәмәнән инде сыҡтыҡ тигәндә генә, беҙҙән бер ер буйы булыр, күрәнде ярып, һаҙҙан һуҙылып, аждаһа сығып килә. Буйы ике бүрәнә оҙонлоғо булыр. Бынау бүкән йыуанлыҡ. — Оморҙаҡ бабай ишек төбөндә ултырған бүкәнгә күрһәтте. — Төҫө ҡап-ҡара. Күрән араһынан һырты ғына күренә. Беҙҙең ҡот осто. Ни эшләргә? Беҙ дүрт-биш малай инек. Барыбыҙ ҙа, кире әйләнеп, артҡа ҡастыҡ, әрәмәгә кереп киттек. Аяҡ аҫты бысраҡ, тайғаҡ. Мин тайып йығылып киттем, тәгәрмәс өңгән ергә йыйылған батҡаҡҡа тәкмәсеп барып яттым. Янтау тәгәрәп китте, муйыл түгелде. Муйыл ҡайғыһымы унда! Тора һалып, иптәштәр артынан йәнә йүгерҙем. Бер аҙ барғас, шулай ҙа туҡтап, тыңлап торҙоҡ. Тауыш-тын ишетелмәй. Тора биргәс, һарыҡ баҡырған тауыштар ишетелде. Шунан һарыҡ ҡыуалаған тауыштар сыға башланы, ҡатын-ҡыҙ тауышына оҡшай. Беҙгә йән керҙе хәҙер, ҡурҡмай башланыҡ. Беҙ кире киттек, тағы аждаһа күргән урынға барып сыҡтыҡ. Барһаҡ, теге

аждаһа туп-тура беҙгә табан килә. Уның артынан ҡулына оҙон һуйыл тотҡан бер ҡатын килә. Теге ҡатын, беҙҙе күреү менән, ҡысҡыра башланы:

— Ҡыуалағыҙ шул һарыҡтарҙы, ебәрмәгеҙ! Ни ҡарап тораһығыҙ унда, ҡаҡҡан бағана шикелле, ә?! Бәй-бәй, — ти ҡатын беҙгә, үҙе һарыҡтарын ҡарғай. — Эсе ярылғырҙар, бүре ашағырҙар, ҡара кискә тиклем ошо һаҙҙан ҡайта белмәйҙәр. Дөррә! Ебәрмәгеҙ! — тип ҡысҡыра һаман беҙгә.

Һарыҡтар, беҙҙе күргәс, кире боролдолар. Беҙҙең аждаһа тигәнебеҙ унлап ҡара һарыҡ булып сыҡты. Улар ямғырҙан һуң, бер-береһенә эйәрешеп, һаҙлыҡтан сығып барғандар икән. Беҙгә оҙон үлән араһынан теҙелешеп китеп барған ҡара һарыҡтарҙың һырты оҙон йылан булып күренгән. Шуны беҙ аждаһа тип уйлағанбыҙ. Ул һәр ваҡыт шулай була: ниҙән ҡурҡһаң, шул күҙгә күренә, ҡурҡмаһаң, бер нәмә лә күренмәй. Шуға күрә боронғоларҙан ҡалған бер һүҙ бар: «Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, таҡыр ерҙә аты һөрөнә». Шул бик дөрөҫ ана. Бер нәмәнән дә ҡурҡырға ярамай.

Хөрмәт башта, олатаһының һөйләгән хәбәренә бөтөнләй ышанып, бик ихлас тыңлап ултырҙы. Ләкин аҙаҡҡа табан ул шатланып көлөп ҡуйҙы. Шунан һуң ул олатаһынан йәнә һорарға булды:

— Олатай, ен бар, тип һөйләйҙәр, һинең ен күргәнең бармы?

Оморҙаҡ бабай Хөрмәттең үҙенән һораны:

— Ә һинең күргәнең бармы һуң?

— Юҡсы.

— Минең күргәнем бар, — тине уға олатаһы ысынлап, ышандырырлыҡ тауыш менән тағы һөйләргә кереште: —Был бынан ҡырҡ йылдар элек булды. Ҡара көҙ үтеп, ҡырпаҡ ҡар яуғас, мин, һусар атырға тип, тауға һунарға киттем. Ҡырпаҡ ҡарҙа һуҫарҙы юллатыуы бик анһат була.

— Ҡарҙа уның юлы ҡуян юлы кеүек буламы? — тип һораны Хөрмәт.

— Юҡ, һуҫар бер ваҡытта ла ерҙән йөрөмәй ул, ағастан ағасҡа ырғып, гел ағас башынан ғына китә. Ырғыған сағында, ағас ботағындағы ҡар ергә ҡойола бара. Һуҫар аулағанда, ағас төбөн ҡарарға кәрәк. Ағас төбөнә ҡар ҡойолған булһа, унда йә

һуҫар, йә тейен йөрөгән була. Ҡайһы бер саҡта ел сығып китә. Ел дә ағас ботағын һелкетә, тағы ҡар ҡойола. Шуның өсөн һуҫар юллатҡанда бик тыныс, елһеҙ көн кәрәк.

Мин һунарға киткән көндө иртә менән ел-фәлән юҡ ине. Йәнлекте юллатып, эй барам, эй барам. Бер тауҙы аша сығып, икенсеһенә барып мендем, һаман киткән бының әҙе.

Кискә табан бик шәп ел сығып китте, һуҫарҙың эҙен, бара торғас, юғалттым бит. Кис булды, ҡараңғы төштө. Ҡараһам, йәнлеккә мауығып китеп, Тимерарҡа тауының һыртына барып сыҡҡанмын. Ҡайтырға йыраҡ. Ни эшләмәк кәрәк хәҙер? Күҙәмәгә самалап беләм: шунан алыҫ түгел, тауҙан төшкәс тә, бер аҡланда иҫке ташландыҡ утар булырға тейеш. Ахырыһы, утарға инеп ҡунырға булдым. Көн буйына йөрөп бик арылған, билбау аҫты ла бик ныҡ бушаған. Утар эсе ҡараңғы, шырпы һыҙҙым. Ишектән кергәс тә, бер мөйөштә усағы бар икән. Балта менән юнып яһаған таҡтанан эшләнгән тәпәшәк кенә һикеһе бар. Иҙәне — ер. Тышҡа кире сығып, бер ҡосаҡ сытыр йыйып индерҙем дә ут яғып ебәрҙем. Өҫтәге сәкмәнде һалдым, аяҡты сисеп, силғауҙы киптерҙем. Өйҙән ярты әсе икмәк алып килгәйнем, уны ашап алдым. Утарҙың мунса төнлөгө ҙурлыҡ ҡына төнлөгө бар икән. Йылы сыҡмаһын өсөн, уны тыңҡыслап тығып ҡуйҙым. Көн буйы йөрөп арыған кеше ни, шунда уҡ йоҡлап киткәнмен.

Бер ваҡыт баҫлығып уянып китеп, йоҡо аралаш күҙемде асып ҡараһам, ни күҙем менән күрәйем: ишек төбөндә бер ен баҫып тора! Енден ике күҙе шәм кеүек яна. Бер күҙе бәләкәйерәк, икенсеһе ҙурыраҡ. Ен ут кеүек күҙҙәрен алмаш-тилмәш йомоп-йомоп ала. Минең ҡот осто. Ни эшләргә белмәйем. Мылтыҡты һәрмәп ҡараным, мылтыҡ эргәлә. «Туҡта! Ни булһа ла булыр, атайым быға», — тип уйлайым эстән генә. Мылтыҡ яһаулы ине. Мин ятҡан ерҙән, енгә тоҫҡап, ат та ебәр. Мылтыҡ тауышына утар зыр һелкенде. Ҡолаҡ зыңлап китте. Утарҙың эсе төтөн менән тулды. Дарыны саманан тыш һалғанмын, күрәһең.

Ен шунда уҡ ғәйеп булды. Ырғып торҙом да барып ишекте асып ебәрҙем. Ҡараһам, әллә ҡасан таң атҡан. Ут шары кеүек ҡыҙарып, ҡояш сығып килә. Мин, көнө буйы йәйәү тауҙан тауға йөрөп арыған кеше ни, ҡояш сыҡҡансы, бер уянмай

йоҡлағанмын да ҡуйғанмын. Утар тирәһен ҡараштырҙым, бер нәмә лә юҡ. Миңә йән керҙе.

Утарға кире индем, тағы ут яҡтым да кейенә башланым. Аяҡҡа кейеп бөтөп, башты ҡалҡытып, ишеккә ҡараһам, күрә ҡалдым: утарҙың ишеге тотҡа ҡуйыу өсөн ике урындан тишелгән булған. Ишектең тотҡаһы төшкәндерме, һурып алғандарҙырмы, уныһын кем белһен. Әммә унда йәнәшә ике тишек ҡалған. Шул тишектәр үтә иртәнге ҡояштың нуры утар эсенә төшә. Ҡояш нуры төшкәнгә, ҡапыл ҡарағанда йәнәш торған ике тишек ут һымаҡ баҙлаған ике күҙгә оҡшап тора. Ҡояш нуры ағас араһынан күренгәнгә һәм елгә ағастарҙың ботағы ҡуҙғалғанға, тишектәр аша төшкән нур ем-ем итә лә күҙ йомғанға оҡшап ҡала.

Мин ҡарап торҙом да эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалдым. Минең ҡотто осорған нәмә ен күҙе булмаған, ә ишектең йәнәшә торған ике тишеге үтә төшкән ҡояш нуры булған. Әлеге лә баяғы, һаман бер һүҙ инде: ҡурҡҡанға ҡуш күренә...

Аҙаҡ, йәнлеккә йөрөгән саҡтарҙа, шул утарҙа бер үҙем әллә нисә тапҡыр ҡунып киткәнем булды. Бер ниндәй ен дә, убыр ҙа, бәрей ҙә осраманы.

1. Ни өсөн Оморҙаҡ бабай аждаһа тураһындағы хәлде *Ҡурҡканға ҡуш күренә* тигән мәҡәл менән тамамлай? Ен менән булған хәл-ваҡиғаға мәҡәл тап киләме? Миҫалға тағы ниндәй мәҡәлдәр йәки әйтемдәр килтереп була?
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, күсереп алығыҙ. Мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, дөрөҫ әйтергә өйрәнегеҙ. Уларҙы ҡулланып, бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
3. Текстан ҡырағай йәнлектәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ. Башҡортостан урмандарында тағы ниндәй йәнлектәр йәшәй? Һеҙ уларҙың ҡайһыларын күргәнегеҙ бар? Шуларҙың берәйһе тураһында белешмә төҙөгөҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.
4. Текста *убыр әбейе, аждаһа, ен, бәрей* кеүек мифик заттар телгә алына. Һеҙҙең улар тураһында нимә ишеткәнегеҙ бар? Рус мифологияһында уларға оҡшаш ниндәй заттар бар? Ололарҙан һорашып, үҙегеҙ уҡып йәки ишетеп белгәндәргә таянып, уларҙың һәр береһенә яҙма характеристика биреп ҡарағыҙ. Береһе тураһында әкиәт уйлап сығарығыҙ һәм һүрәтен төшөрөгөҙ.

5. *Ҡаҡҡан бағана шикелле* тигәнде һеҙ нисек аңланығыҙ? Ошо уҡ мәғәнәне тағы ниндәй һүҙҙәр менән биреп була? Ошондай типтағы сағыштырыуҙарҙы табығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.
6. Текста *ҡара кис, ҡара көҙ* тигән һүҙҙәр осрай. *Ҡыҙыл кис, һары кис, йәшел көҙ, күк көҙ* тип тә әйтеп буламы? *Иртә, көн, төн, ҡыш, йәй, яҙ* һүҙҙәре менән ошондай һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.
7. *Билбау аҫты бик ныҡ бушаған* һөйләменең мәғәнәһе нимәлә? Ошо уҡ мәғәнәне тағы ниндәй кинәйәле һүҙҙәр менән әйтеп була? Тапҡан һүҙҙәрегеҙҙең барыһын да рус теленә тәржемә итегеҙ.
8. Ҡатын һарыҡтарҙы *дөррә!* тип ҡыуа. Кәзәне, һыйырҙы, этте, бесәйҙе, тауыҡты ниндәй һүҙҙәр менән ҡыуалар һәм саҡыралар? Ул һүҙҙәрҙе дәфтәрҙәрегеҙгә яҙығыҙ ҙа рус теленә тәржемә итеп ҡарағыҙ. Нимә килеп сыҡты?
9. Хикәйәнең авторы Жәлил Кейекбаев тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**76-сы күнегеү.** Иғтибар итегеҙ. Һәр бер мәҡәлдә бер үк формала ике ҡылым бар. Тәүгеһе сифат ҡылым, эште башҡарыусыны (затты, кешене) белдерһә, икенсеһе хәбәр һөйкәлешенең үткән заман формаһы уның эшен белдерә.

1. Тураһын әйткән туғанына ярамаған.
2. Айыуҙан ҡурҡҡан урманға бармаған.
3. Ашыҡҡан ашҡа бешкән.
4. Йәне теләгән йылан ите ашаған.
5. Күмәкләгән яу ҡайтарған.
6. Уйламай һөйләгән ауырымай үлгән.

Ошо ҡылымдар рус телендә лә бер үк формала булырмы? Тикшерегеҙ.

**77-се күнегеү.** Ҡылымдарҙағы баҫымдарҙың урынына иғтибар итегеҙ.

Айырылма́ҫ дуҫ (айыры́лмаҫ түгел), өҙмә́к булып (ө́ҙмәк түгел), алма́ҫһың, а́лмайһығыҙ, у́ҡығыҙ, уҡы́мағыҙ, барала́р, йөрөйҙә́р, бары́рһығыҙ, барырҙа́р.

**78-се күнегеү.** Башҡорт телендә бер үк формалағы ҡылымдар һөйләмдәрҙә төрлө мәғәнә аңлата. Уларҙың айырмаһы, рус теленә тәржемә иткәндә, бигерәк тә асыҡ күренә.

Сағыштырығыҙ.

1. Уҡыған кеше — уҡыған кеше инде. — Образованный человек — есть образованный человек.
2. Ағайым университетта уҡыған. — Брат учился в университете.

Артабан үҙегеҙ тәржемә итегеҙ.

1. Мин бокс секцияһына йөрөйөм. Мин дә берәй секцияға йөрөйөм әле.
2. Мин урамда уйнайым. Мин дә урамда уйнайым әле.
3. Үткән юлыбыҙ бик оҙон булды. Таһир бик оҙон юл үткән.
4. Йөрөгән таш шымара. Был урындарҙа ҡасандыр Аҡмулла ла йөрөгән.

*Жәлил Кейекбаев*

## ТУҒАНДАР ҺӘМ ТАНЫШТАР

### I

Үрге урамдан оҙон ҡолғаға һөбәләр тағып төшөп килеүсе бер төркөм егеттәрҙе күргәс, Фатиманың йөрәге жыу итеп ҡалды. Ул ишек алдында соландың һикәлтәһендә тора ине. Һөбә йыйып йөрөүселәр яҡыная башлағас, ул йәлп итеп өйгә инеп китте. «Килһәләр, нимә генә тағып ебәрер икән әсәйем? Берәй яулыҡ йә берәй аршын ситса-маҙар тағып сығарһа ярар ине, исмаһам», — тип уйланы Фатима.

Егеттәр араһында ул ағаһы Мәғәфүр менән энеһе Әбделхаҡты күрҙе. Уларҙың булыуы Фатиманы бер аҙ тынысландырҙы: ул ағаһы менән энеһенә арҡалана ала ине. Ләкин арала, Фатиманы алам, тип уның әхирәттәре араһында маҡтанып йөрөүсе Талха ла күренде.

«Бәрейем һөймәй шул һыпатһыҙ быжырҙы, — тине Фатима эстән. — Ҡыҫылмаған ере юҡ, йөрөй эшем эйәһеләй булып, һөмһөҙ».

Фатима Талханы яратмай ине. Әхирәттәре Фатимаға төнәгән егеттәрҙең ҡыҙҙар өсөн осарым тотошҡанын һөйләнеләр, Фатима өсөн осарымлашҡанда, Талха осҡан булған. Талха, күрәһең, шуны ғына көткән икән; шунан бирле ул, Фатиманы алам, тип йөрөй башланы; шул хаҡта һәр ваҡыт, өҙмәй ҙә ҡуймай, һөйләп йөрөр булды. Талханың был һүҙенә тиҫтер егеттәр ҙә, ҡыҙҙар ҙа артыҡ иғтибар итмәнеләр, уйын итеп ҡаранылар. Ләкин был хәбәр Фатиманың асыуын килтерҙе, ул ғәрлегенән ни эшләргә белмәне. Ә Талха эреләнеп китте, бик һауаланды. Фатима уны яратамы-юҡмы — унда Талханың эше юҡ ине...

Һөбә йыйыусылар шаулашып ҡапҡаға килеп туҡтаны. Өйгә башлап Мәғәфүр үҙе инеп китте, уның артынан Зәкәриә, йәнә бер-ике кеше инде. Фатима, оялышынан ҡыҙарып, түрбашта тора ине.

— Йә, Факиһа еңгә, эш башы һиндә хәҙер. Һинән генә арыуыраҡ нәмә көтәбеҙ инде, — тине Зәкәриә.

— Ваҡытһыҙ һабан туйы була тиме ни, әле һабан бөтмәгәнсе. Һабан туйында бирербеҙ әле кеше биргәнде, — тине Факиһа, асыуланмай ғына. Фатима әсәһенең былай тип әйтеүен көтмәгәйне, ул ни эшләргә белмәне, оялды. «Әсәйемдең шул булыр инде», — тип бошондо ул.

— Ана, Гөлсирәнең Гөлсирәһе бер яулыҡ тағып сығарҙы. Һиңә нимә ул, Факиһа еңгә, барҙыр әле шунда һалабашҡа килгән тауарҙан ҡалған ҡалдыҡ-боҫтоҡ ике-өс аршын нәмә, — тип Зәкәриә үҙ һүҙен ҡеүәтләне.

— Ярар инде, әсәй, ҡайҙа, ас һандыҡты, — тине Мәғәфүр, әсәһенең ай-вайына ҡуймай.

Факиһа, сулпыһы менән бергә сәс толомона тағылған асҡысын ала-ала, һандыҡ янына барҙы. Асҡысты борған ыңғайға, һандыҡтың йоҙағы ике тапҡыр зыңлап ҡуйҙы. Аҡ ҡалай менән һырлап көпләнгән ҙур һандыҡ асылды. Факиһа, иң төптән аршын ярымдай барсалы ситса алып, Зәкәриәгә тотторҙо.

— Үәт, шулай, Факиһа еңгә, һатыулашып тормау яҡшы, — тине Зәкәриә ҡәнәғәтлек менән һәм үҙе Фатимаға ҡарап боролдо: — Фатима, һин нимә тағаһың һуң?

Фатима урынына әсәһе яуап биреп өлгөрҙө:

— Әллә бер әйбер биргән етмәйме ни бер өйҙән, һабан туйығыҙ бик олонан икән!

— Ҙур һабан туйы булһа, былайтып аршын ярым ситса өсөн һатыулашып та тормаҫ инек, олорағынан төшөр инек, башмаҡтан йә һарыҡтан. Был уйын үҙебеҙ-ара ғына бит әле. Тик торғансы, күңел асып алайыҡ тигән һын, — тине Мәғәфүр.

— Эй еңгә, еңгә, аршын ярым ситсаға ҡалған көнөң юҡ та баһа, оло һүҙгә етмәгә, — тине Зиннур, ҡыртыраҡ киҫеп.

Билдәһеҙ нәмә хаҡында һүҙ көрәштереп тороуҙан файҙа юҡлығын күргән Зәкәриә Фатиманан тейер өлөштө атап әйтте:

— Йә, Фатима, һинең әхирәттәрең һынатманылар. Янсыҡмы, ҡулъяулыҡмы шунда, ярай беҙгә нимә булһа ла.

Мәғәфүр ҙә, бер нәмә көткәндәй, ҡарындашына ҡараны. Фатима камзулының кеҫәһенән сиккән ҡулъяулыҡ сығарып бирҙе. Һөбәләрҙе ҡолғаға таҡтылар. Талха Фатиманың һөбәгә биргән ҡулъяулығына ныҡ иғтибар итте. «Быны, моғайын, миңә тип сиккәндер әле, — тип уйланы ул эстән, — был ҡулъяулыҡты нисек булһа ла эләктерергә кәрәк...»

Егеттәр Фатималарҙың урам аша күршеһе Баһау ҡартҡа инделәр. Баһауҙың ҡатыны бер тиҫтә йомортҡа биреп сығарҙы.

Сәмиғулла уларҙы күтәренке тауыш менән ҡаршы алды.

— Һин! — тине ул, Сәлихаға тауыш итеп. — Ҡайҙа, юҡмы шунда берәй ҡырҡындың? Алмай сыҡмаҫтар инде былар барыбер. Үтеңде һытып булһа ла алырҙар!

Йәштәр шарҡылдап көлдө.

— Юҡ, юҡ. Буш сығыу юҡ ул! — тине Зәкәриә.

— Бер нәмәм дә юҡ та баһа, ҡапыл-ҡара ала һалып, тағып ебәрмәгә. Әйбер-фәлән теккән булмағас ни, — тине Сәлиха ҡыйыуһыҙ ғына, ә үҙе һандығын асып аҡтарына башланы.

— Бына, эшкә инһә, алығыҙ, — тине ул, һандығынан оҙон ыңырбау сығарып. — Был Сәлиханың, бала тапҡас, бала-сағаға өләшкәндән артып ҡалған бүләге ине.

— Эй бисәкәй, бисәкәй. Булманы, ахырыһы, һинән. Ҡайҙа, алып бир әле янсыҡты, — тине Сәмиғулла. Сәлиха уға һандыҡтан янсығын алып бирҙе, һәм Сәмиғулла егеттәргә илле тинлек көмөш аҡса һуҙҙы:

— Мә, лавканан берәй нәмә алырһығыҙ шунда.

— Бына быныһы ярай, исмаһам, — тине егеттәр.

Егеттәр өй беренсә һөбә йыйып йөрөнөләр. Һөбә артҡандан-артты, ҡолғаға тағылған әйбер күбәйгәндән-күбәйҙе. Хәленә күрә төрлө кеше төрлө әйбер тағып сығарҙы. Шулай ҙа, Шаһиәхмәт, Әхмәтша, Усман һымаҡ серегән байҙарҙан, улар араһына инергә тырмашып мал йыйған Исмәғилдән дә һөбәнең ҙуры эләкмәне. Улар, ҡырҡ һүҙгә етеп, бер-ике аршын ситса, ҡырҡынды биреп сығарыу менән сикләнделәр. Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәһен өсөн генә, һуҡрана-һуҡрана ғына, һандыҡтарын астылар.

Иртәгә уйын була икән тигән хәбәрҙе Фатима кисә үк ишеткәйне инде. Уйын тигәс, ул быны, яҙ көнө «ҡарға бутҡаһы»на сыҡҡандағы һымаҡ уйындыр, тип уйланы. Ташбатҡан ауылының йәштәре быны үҙҙәре лә шулайыраҡ итеп күҙ алдына килтергәйне. Сөнки һабан ваҡыты үтмәгәйне әле, кешеләр тегендә-бында ҡарабойҙай сәсә ине. Ғәҙәттәге һабан туйҙары башланғансы, ауыл йәштәре уйын ҡороп күңел асмаҡсы булдылар. Был ун беренсе йылғы аслыҡтан һуң тай-тулаҡ сабыштыра торған беренсе уйын ине. Бындай уйындар аслыҡ йылды һәм унан аҙаҡ та бер-ике йыл булмай торҙо.

Йәштәр уны хәҙер бик һағынғайны. Шуға күрә улар быға дәрт менән тотоноп алып киттеләр. Һөбәнең шулай күп йыйылыуын улар үҙҙәре лә көтмәгәйнеләр. Уйынсыларҙың бәхетенә ҡаршы, көн бик һәйбәт, салт аяҙ булды. Йәштәрҙең күңелдәре күтәрелде. Уйынды ауыл осондағы сиҙәмдә, Үҙәште һыуы буйында типһәндә яһамаҡсы булдылар. Был уғата хилүәт урын. Ялбыр тирәктә, ҡойроҡтарын борғолап, кәкүк саҡыра. Үҙәште һыуы тамам ҡайтҡан. Ул эре-эре тирәктәр араһынан шым ғына аға. Тирәк төптәрендә өйөрөлөп ятҡан ятыуҙа малайҙар ҡармаҡ һала.

Типһәндең төпкөлө әрәмәлек, әрәмә буйында мал утлай. Ауыл осонда уйын булаһы урынға алдан уҡ һырғауыл ҡуйылды. Уйын башланмаҫ борон уҡ, һырғауыл тирәһендә ваҡ малайҙар, ҡыҙҙар сыр-сыу килеп йыйыла башлағайны инде. Малайҙар түбәтәй типкес, соҡор туп һәм атырғыс уйнай торҙолар, ҡыҙ балалар, бер урынға өйөлөп ултырып, биш таш ырғыттылар.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. Яңы һүҙҙәр араһында хәҙерге ваҡытта бик һирәк ҡулланылғандары йәки бөтөнләй онотолғандары бармы? Ундай һүҙҙәр нисек атала? Һүҙҙәр ниңә шулай «иҫкерә» икән? Әңгәмәләшегеҙ.
3. *Бәрейем һөймәй, йөрәге жыу итеп ҡалды, әшем эйәһеләй булып йөрөй, үтеңде һытып алырҙар* һөйләмдәренең тура һәм кинәйәле мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
4. Ни өсөн *серегән бай* тип әйтәләр? Аңлатығыҙ.
5. Сәмиғулла ағай ҡатынына исеме менән түгел, «һин» тип кенә өндәшә. Атай-әсәйегеҙҙән, ололарҙан быны сәбәбен һорашығыҙ.
6. «Түбәтәй типкес», «атырғыс» уйындары тураһында мәғлүмәт табып, ҡыҫҡа ғына белешмәләр төҙөп яҙығыҙ. «Соҡор туп» уйынын уйнап ҡарағыҙ.

### «СОҠОР ТУП»

Диаметры 2 — 3 аҙым булған түңәрәк һыҙыла. Уртала бер тура һыҙыҡ буйынса ғына һәр уйынсы үҙенә уйпат яһай. Улар туп ятырлыҡ итеп соҡола һәм бер-береһенә тейеп кенә тора.

Уйынсылар уйпаттарҙы уратып баҫа. Береһе тупты бер яҡ остан ситтәнерәк шул уйпаттар буйлап тәгәрәтә. Туп кемдең соҡорона төшә, шул тиҙ генә уны эләктерә. Ҡалғандар түңәрәктән сығып ҡаса. Тупты эләктереүсе уларҙың яҡынырағына һуғырға тырыша. Сикте һыңар аяғы менән аша баҫҡанда ла һуғырға хаҡлы. Кемгә туп тейә, шул тупты ала һалып, түңәрәк эсенә инеп, үҙе башҡаларҙы аулай. Әгәр тейҙерә алмаһа, «яна», ул уйындан сыға, ә тейҙереүсегә бер мәрәй яҙыла (түңәрәктән тышта булғандар эскә инһә, уларҙы һуғырға ярамай).

Мәрәйҙең иҫәбен юғалтмаҫ өсөн, уның соҡорона сүп (берәй нәмә) һалына. Мәрәй, уйынсы «янған» осраҡта, уны ҡотҡарыу өсөн кәрәк: өс мәрәйе булһа, уйында ҡала. *(Ә. Сөләймәновтан)*

## УРТАҠ ҠЫЛЫМ

Ҡылымдың был формаһы эште эшләргә кәрәклекте, мөмкинлекте, тейешлекте, өндәүҙе йә иһә эшләүҙән тыйыуҙы (бигерәк тә юҡлыҡ формала) белдерә. Улар **уртаҡ**

**ҡылым** тип атала. Рус телендәге **неопределённая форма глагола,** йәғни **инфинитивҡа** тап килә. Уртаҡ ҡылым ҡылым нигеҙенә *(-ы, -е, -о, -ө) -рға, -ргә* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала: *уҡы-рға, һөйлә-ргә, ҡайт-ырға, көт-өргә, кил-ергә, ос-орға.* Юҡлыҡ формаһы *-маҫҡа, -мәҫкә* ялғауҙары ярҙамында яһала: *уҡы-маҫҡа, йөрө-мәҫкә.*

Иғтибар итегеҙ! Уртаҡ ҡылымдың юҡлыҡ формаһында баҫым һуңғы ижеккә төшә: *бармаҫка́* (*ба́рмаҫка* түгел), *һөйләмәҫкә́* (*һөйлә́мәҫкә* түгел).

Уртаҡ ҡылым йә икенсе ҡылымдар, йә ярҙамсы һүҙҙәр менән генә ҡулланыла: *уҡырға бара, уҡырға ине, уҡырға икән, уҡырға ултырҙы, уҡырға кәрәк, уҡырға мөмкин.*

Бойороуҙарҙа, саҡырыуҙарҙа, лозунгыларҙа, администрация яҙып элгән төрлө яҙмаларҙа уртаҡ ҡылым яңғыҙы ғына була ала*: Шауламаҫҡа! Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә! Сүпләмәҫкә!*

Шулай уҡ ғәҙәттәге телмәрҙә уртаҡ ҡылым һорау һөйләмдәрҙә, кәм һөйләмдәрҙә яңғыҙы килергә мөмкин:

*Инде ни эшләп ҡарарға?*
*— Ҡайҙа киттең?*
*— Уҡырға!*

**79-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Уртаҡ ҡылымдарҙы табығыҙ. Уларҙы бәйләнеп килгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ.

Өлгө: *Дуҫтарҙы ҡаршы алырға кәрәк.*

Ҡоштар — беҙҙең дуҫтар, ә дуҫтарҙы бик һәйбәт ҡаршы алырға кәрәк. Бының өсөн бөтәһенән дә элек уларға оялар әҙерләп ҡуйырға онотмағыҙ. Әммә шуны белегеҙ: төрлө ҡоштарға ояны төрлөсә яһарға кәрәк. Ҡыҙылғойроҡ турғай ояның яҡты булыуын ярата, ә ҡарабаш турғай ярым ҡараңғы урынға оялай. Сыйырсыҡтар күмәкләшеп, күршеләр булып йәшәргә ярата. Бына шуға күрә лә бер ағасҡа йәки бер тирәгә ояны күберәк элергә тырышығыҙ. Сыйырсыҡтар һәм башҡа ҡоштар өсөн ояларҙы ни тиклем күберәк ҡуйһағыҙ, уларҙан файҙа ла шул тиклем күберәк булыр. Быны һис тә онотторға ярамай. *(«Аманат» журналынан)*

## II

Йыйылған һөбәне ҡолғаһы менән һырғауылға бәйләп ҡуйҙылар. Ҡолғаны эйелтеп торған төрлө төҫтәге әйберҙәр: ҡыҙыл, йәшел дебет менән сигелгән таҫтамал баштары, ике-өс таҫтамал, барсалы һәм аҡ ситсалар, йыртыш ҙурлыҡ ҡыҙыл тауарҙар, ҡулъяулыҡтар, янсыҡтар, елберләп торған ыңырбау һәм бәйләместәр майҙанға уғата йәм бирҙе. Бәйге ауылдың йәштәрен үҙенә тартты. Егеттәр күптән килгәйне инде. Еткән ҡыҙҙар төркөм-төркөм булып килә башланы. Улар бер яҡ ситкәрәк барып, бүренән өрккән һарыҡ һымаҡ, бер урынға өйөлдөләр.

Фатима ла улар янына барып ҡушылды. Уның өҫтөндә һары сатин күлдәк. Күлдәк өҫтөнән йәшел бәрхәт камзул кейгән. Ул егеттәр янынан, һеңлеһен етәкләп, шәп-шәп үтеп китте, атлаған ыңғайға сәсендәге сулпыһы һәм түшендәге һаҡалының гөмбәҙҙәре, тәңкәләре сылтырап ҡалды. Фатима ҡыҙҙар төркөмөнә инеп йәшенгәнсе, Талха уны күҙе менән оҙатып ҡалды. Фатима уның яғына ҡараманы ла. Талханың йота яҙып ҡарауынан уңайһыҙланғанлыҡтан, ҡыҙҙың ҡуңыр түңәрәк йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Уның Талхаға бик асыуы килде, уны өҙгөләп ташларҙай булды.

Бәйге башланды...

Тәүҙә йәш үҫмер малайҙарҙы йүгерергә ебәрҙеләр. Улар килгәнсе, бәләкәй генә майҙан эсендә көрәш бара торҙо. Йәштәр көс һынаштылар. Көрәштә еңеүселәргә ҡулъяулыҡ, йомортҡа, ситса ҡырҡындылары, янсыҡтар бирҙеләр. Талха, көрәшеп, Фатима таҡҡан ҡулъяулыҡты эләктерергә тырышты. Ләкин бер кемде лә йыға алманы. Егеттәр,Талханы уның һайын ҡотортоп, көрәшергә димләнеләр. Аҡылға бер төрлөрәк Талхаға ҡотортоу етә ҡалды. Ул, бер нисә тапҡыр йығылып, көлкөгә ҡалыуына ҡарамаҫтан, йәнә көрәшергә сыҡты.

— Анау, Фатима таҡҡан ҡулъяулыҡты алмаға була тырыша ул, — тине Мәғәфүр Зәкәриәнең ҡолағына.

— Ә-ә-ә! Ул ҡулъяулыҡты берәүгә лә бирмәнекме әле?

— Юҡ, бына ошо шикелле. Бир әйҙә шуға, күңеле булһын бахырҙың.

Талха, тызрайып, ҡып-ҡыҙыл булып, тирләп-бешеп майҙанда Хөсәйен менән билләшә ине. Зәкәриә Хөсәйенгә

шым ғына күҙ ҡыҫты һәм, башын һелкеп, юрый йығылырға ишара итте. Хөсәйен дә баш һелкеү менән яуап бирҙе. Ул Талханың күтәреп алғанын көттө. Хәле бөткән Талха, Хөсәйенде күтәреп алмайынса, артына салҡан йығылды, Хөсәйен ергә таяна төшөп, Талханың өҫтөнән имгәкләп сыҡты ла уның баш осона барып ятҡан кеше булды.

— Аяҡ салды! Аяҡ салып йыҡты! — тип ҡысҡырышты ваҡ малайҙар.

— Ярар. Мә! Бик бәһлеүән икәнһең, ҡустым. Фатиманың ҡулъяулығы һиңә эләкте. Бәхетең икән.

Зәкәриә ҡулъяулыҡты Талхаға тотторҙо. Талха шатлығынан йылмайҙы, бик ҡәнәғәт ҡиәфәт менән йылтыр ҡара ҡарт имән ҡужыртмағы һымаҡ быжыр битендәге һәм маңлайындағы тирҙәрен көрәшеп алған ҡулъяулыҡ менән һөрттө лә, ҡара бәрхәт таҡыяһын ҡырыныраҡ һалып, майҙандан сығып китте. Ул, үҙенсә, ҡулъяулыҡты ысынлап та еңеп алдым тип уйланы һәм шуға маһайҙы. Майҙанда Хөсәйен ҡалғайны, уның менән көрәшергә Мәғәфүр сыҡты. Улар бик ҡыҙыу билләшә башланылар. Хөсәйен уны ҡапыл күтәреп алды. Мәғәфүр аяҡтарын тарбанлатып ергә terәргә маташҡанса, Хөсәйен уны әйләндереп ташлап өлгөрҙө. Йығыу ғәҙел булды, бер кем бәхәсләшмәне. Мәғәфүр оялышынан ҡыҙарҙы. Ул Хөсәйенде йығырына нығ ышанып сыҡҡайны, сөнки ул Хөсәйендән ике йәшкә ҙур һәм кәүҙәгә ирәбе ине...

Алыҫтан, тубырсыҡ һымаҡ тәгәрләп, йүгерешеп килгән малайҙар күренде. Кешеләр, икегә бүленеп, уртанан йүгереүселәр үтеп китер өсөн, ара ҡалдырҙы һәм уларҙың килеүен көтә башланы. Беренсе булып Әхсән килде, иң арттан килеүсе Әбделхаҡ, үҙенең артта ҡалыуын аҡлар өсөн, аҡһай-аҡһай йүгереп, халыҡ араһына килеп инде. Йүгерешеүселәрҙең береһен дә мәхрүм итмәнеләр: ҡармаҡ, ыңырбау кеүек әйберҙәр бирҙеләр.

Кискә табан, ауыл осондағы шау-шыуҙы ишетеп, Сәмиғулла һымаҡ мыйыҡ ебәргән ирҙәр ҙә килә башланы. Улар башта ҡарап ҡына торалар ине, һуңынан ҡыҙып китеп көрәшергә тотондолар.

Ҡурайын артына йәшереберәк тотоп, һалмаҡ ҡына баҫып, Әхмәди ҡурайсы килде. Мәғәфүр уның янына барып маңлайына бер йомортҡаны һуғып сатнатты ла:

— Йә, Әхмәди ағай, тамағыңды ебетеп ал әле тәүҙә, уйнарға еңелерәк булыр, — тине лә йомортҡаны ҡурайсыға һондо.

Әхмәди йомортҡаны эсеп ебәрҙе һәм ҡурай уйнарға тотондо. Бейеү башланды. Ҡыҙҙар күптән үк, бер яҡ ситтә өйөлөп, ҡумыҙ тартып, бейейҙәр ине инде. Егеттәр кем ҡыҙы бейегәнен ситтән генә үрелеп ҡарап торҙолар. Ҡыҙҙар бер-береһенә һыйынып баҫып торғанлыҡтан, кем бейегәнен белеү ҡыйын ине. Етмәһә, уларҙың өҫтәрендә ғәҙәттәге кейемдәре түгел, улар яңы күлдәктәрен кейеп, шәл ябынып, һаҡал тағып, биттәренә һандал буяп килгәндәр. Бәләкәй генә түңәрәк эсендә бейегәндә һаҡалдарының, сулпыларының сылтырағаны ишетелеп ҡала. Ҡайһы берәүҙәренең һаҡалдары тубыҡтарына төшә яҙып тора. Шуға ҡарап әсәләренең, апаларының йә еңгәләренең һаҡалдарын кейеп килгән икәнен бик тиҙ белеп була. Нисек кенә булмаһын, улар, оялып ситтә тороуҙарына ҡарамаҫтан, бөгөнгө уйынға айырыуса йәм бирҙеләр. Егеттәрҙең һәр береһенең күҙе төшөп йөрөгән ҡыҙы бар ине. Ләкин егеттәр уны тәрән сер итеп һаҡланылар. Тик Талха ғына, үҙ серен һаҡлай алмай, ҡыҙҙар араһында һармаҡланып йөрөнө. Ул, һарыҡ көтөүе араһына килеп ингән бүре һымаҡ, ҡыҙҙарҙың төркөм булып өйөлөп торған еренә ара-тирә йырып барып ингеләне, белер-белмәҫ эшенә тарбанлап бейергә маташҡан булды; көрәштә алған ҡулъяулығын болғап, Фатима алдына килеп бейеп торҙо. Уҫалыраҡ ҡыҙҙар Талханы түңәрәк эсенән төрткөләп сығарып ебәрҙеләр. Фатима бейергә төшһә, йәнә икенсе яҡтан йырып килеп инде һәм һаман Фатима тирәһендә һырылды.

Фатима ғәрләнеп иланы. Уйындың йәме китте. Талханың был ҡылығына егеттәрҙең дә асыуы килә башланы. Ҡыйыу ҡыҙҙар Талханы төрлө һүҙҙәр менән сәнскеләнеләр:

— Абау, мөхәббәтһеҙ! Кит!

— Бишмәтен күрһәтеп йөрөй ул.

— Ярай, бишмәтең бик һәйбәт икән. Күрҙек. Атлы кеше төшөп ҡарар, йәйәү кеше ятып ҡарар!..

— Байлығына маһайып йөрөгән була.

— Аҡыл өләшкәндә, сыуал артында ятып ҡалған ул.

— Бар! Ана, егеттәр янына барып бейе.

Ул арала ҡыҙҙар янына ҡурайы менән Әхмәди килде.

— Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар, һөнәрегеҙҙе күрһәтегеҙ, — тине ул йомшаҡ мөләйем тауышы менән һәм еңел бер бейеү көйөн уйнап ебәрҙе. Ҡыҙҙар тартынып тора бирҙеләр.

— Орҡоя, Орҡоя башлаһын, — тине ҡыҙҙар һәм кемдер Орҡояны, беләгенән тартҡылап, түңәрәк уртаһына килтереп баҫтырҙы. Ул, атаһынан оялып, ҡыҙҙар араһына инеп йәшенергә теләгәйне, индермәнеләр.

— Йә, ҡыҙым, башлап бир үҙең, булмаһа, шуларға, — тине Әхмәди.

Атаһы үҙе үк әйтеп торғас, Орҡоя бейергә төшөп китте. Ул, юрға ат шикелле, түңәрәкте ике уратып сыҡты ла, ҡурайсы алдына килеп өйрөлөп, бейеп торҙо. Ҡурайсы көйөн икенсе тапҡыр уйнай башлағас, ҡыҙ йәнә юрғалап түңәрәкте уратты. Егеттәр уның тартынмай, ихлас бейеүенә һоҡланып ҡарап торҙолар.

— Атаһының ҡыҙы бит! — тине егеттәр араһынан кемдер.

— Әйтмә, әй! Атаһы ҡурайсы булғас ни, ә?

Орҡоя үҙе туҡтағас, һөйрәкләп Фатиманы бейергә төшөрҙө.

— Әйҙә, әйҙә, әхирәтеңдән ҡалышма, Фатима, — тинеләр ҡыҙҙар.

Фатима, мин бейей белмәйем, тип бер аҙ борғоланып торҙо, ләкин әхирәттәре ҡыҫтағас, ҡотола алманы, бейене. Уның аҙағынан егеттәр, ҡыҙҙар алмаш-тилмәш бейергә төшөп торҙолар.

1. II бүлектең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағанда тәүҙә үҙегеҙ аңлатып ҡарағыҙ, шунан һуң ғына һүҙлеккә мөрәжәғәт итегеҙ.
2. Автор, Талханы *аҡылға бер төрлөрәк,* ти. Былай тип кемгә әйтәләр? Текстан быны раҫлаусы миҫалдар килтерегеҙ.
3. Ҡыйыу ҡыҙҙар Талханы *төрлө һүҙҙәр менән сәнскеләнеләр,* ти автор. Һеҙ быны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Аңлатып ҡарағыҙ.
4. Талха *аҡыл өләшкәндә сыуал артында ятып ҡалған,* тип көләләр ҡыҙҙар. Ошо мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән дә әйтәләр. Уйлағыҙ.

5. *Сыуал* — башҡорт мейесе. Уның тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Ололарҙан һорашып, белешмә төҙөгөҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.
6. «Осарым тотошоу» уйыны тураһында мәғлүмәт табығыҙ. Уйнап ҡарағыҙ. Ул хәҙерге замандағы ниндәй уйынға оҡшаған?
7. Һөбә йыйыу йолаһы тураһында өлкәндәрҙән һорашып, белеп килегеҙ. Был йола бөгөн һаҡланғанмы?
8. Башҡорт халыҡ милли кейемдәре тураһындағы тексты уҡығыҙ һәм, Интернет селтәренән һүрәттәрен табып, презентация эшләгеҙ.

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕ

Башҡорт кейеме, тип әйткән саҡта, әлбиттә, иң элек беҙ еләнде күҙ алдына килтерәбеҙ. Елән — иң уңайлы кейемдәрҙең береһе. Йоҡа елән дә, ҡалын елән дә булған. Ике ҡатлап тегелгән ул. Күлдәк өҫтөнән кейгәндәр. Елән, бик матур итеп зауыҡ менән биҙәлгән.

Еләндән ҡала — камзул. Уны ҡыҙ балалар кейгән. Ул да уңайлы, матур, йылы.

Башҡорт кейемдәренең ҡайһы берҙәрен һанап, аңлатма биреп китәйек.

Аҡ ҡалпаҡ — өлкән йәштәрҙәге ҡатындар кейә торған баш кейеме.

Алмиҙеү — тәңкәле, мәрйенле бәләкәй генә яға. Ул күлдәк иҙеүен ҡаплап һалына.

Ал сепрәк — алъяпҡыс.

Артлы ҡалпаҡ — арттан биҙәлгән йә сигелгән ярым ай рәүешендәге селтәр ҡуйылған баш кейеме.

Бала итәкле күлдәк — ҡатмарлы күлдәк, бер нисә ҡатмар һалына.

Баш бәйләгес — яулыҡты өсмөйөшләп ябыныу.

Ситек, бесем ҡата — күндән тегелгән аяҡ кейемдәре.

Биҙәкле шәл — ебәк йәки кешмир эре биҙәкле шәл.

Билле бишмәт — тубыҡҡа тиклем оҙонлоҡтағы өҫ кейеме.

Билле тун — тиренән тышлыҡ менән ҡатлап тегелгән тун.

Бөркәнсек — ҡушъяулыҡ.

Бүретун — бүре тиреһенән тегелгән тун.

Бүрек — тиренән тегелгән баш кейеме.

Буҫтау сәкмән — йоҡа ғына буҫтауҙан тегелгән өҫ кейеме.

Баса тун йәки инә тун — төлкө аяҡтарының тиреһенән тегелгән тун, ғәҙәттә, кейәү кеше ҡәйнәһенә бүләк иткән. Шуның өсөн хәҙер ҙә ҡәйнәгә бирелгән бүләк «инә тун» тип атала.

Йор тун — еңһеҙ ҡыҫҡа тун.

Көпө — тышһыҙ тун йәки һырып (мамыҡ йә йөн һалып) тегелгән өҫ кейеме.

Кәзәкей — туҡыманан тегелгән ҡыҫҡа өҫ кейеме.

Кәшпә күлдәк — эске күлдәк.

Ҡамсат бүрек — ҡамсат (Камчатка ҡамаһы) тиреһенән тегелгән башлыҡ.

Ҡуҙалы итек — төҫлө күндән тегелеп, ҡурғаш сым менән биҙәлгән итек, ҡатын-ҡыҙҙар уны байрамдарҙа ғына кейгән.

Ҡыҙыл тун — ҡыҙыл бәрхәт йәки плюш менән тышланған тун.

Ҡырма бүрек — ҡаракүлдән тегелгән оҙонса баш кейеме, уны ирҙәр кейгән.

Ҡолаҡсын — осло башлы кәпәс.

Сарыҡ — башы күн, ҡунысы кейеҙҙән тегелгән, зауыҡ менән ҡусҡарлап биҙәлгән аяҡ кейеме.

Сәмсәле итек — төҫлө күн менән биҙәлгән күн итек.

Тире бүрек — һарыҡ тиреһенән тегелгән баш кейеме.

Түбәтәй — мәрйен сүпләп биҙәлгән йоҡа баш кейеме.

Уҡа ҡалпаҡ — уҡа менән биҙәлгән баш кейеме.

Эшләпә — кейеҙҙән тегелгән баш кейеме.

Кейеҙ итек, кейеҙ ойоҡ, кешмир яулыҡ, киндер ойоҡ, һырыған салбар (ҡыш көнө кейер өсөн, мамыҡ һалып һырыйҙар), күн ҡата, бәйләм ойоҡ, дағалы итек, дағалы ҡата, дебет шәл, ебәк шәл — исемдәренән үк аңлашылып торған кейемдәр.

## ХӘЛ ҠЫЛЫМ

Берәй ҡылым белдергән эштең эшләнеү рәүешен, ваҡытын, сәбәбен белдерә торған ҡылымдар **хәл ҡылым (деепричастие)** тип атала. Күренеүенсә, хәл ҡылым янында мотлаҡ тағы бер ҡылым (төп ҡылым) булырға тейеш:

***Ҡайтҡас,*** *беҙгә* ***килерһең*** *әле* (ваҡыт — *ҡасан?*).

*Һин* ***ҡайтҡас,*** *хәҙер эштәр* ***еңеләйер*** (сәбәп — *ниңә? ни сәбәпле?*).

*Ҡаршыға* ***йүгереп килеп сыҡты*** (рәүеш — *нисек?*). *Үр яҡтан* ***ашыға-ашыға*** *кемдер* ***килә*** (рәүеш — *нисек?*).

Хәл ҡылымдарҙың бер нисә яһалыу төрө бар. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен ҡарайыҡ әле:

1. Ҡылым нигеҙенә *(-ы, -е, -о, -ө) -п* ялғауы ҡушыла. Был форма эштең эшләнеү рәүешен белдерә: *Уларға ҡаршы йүгереп Байназар менән Яҡуп сыҡты.* (Б. Бикбай)

Юҡлыҡ формаһы ҡылым нигеҙенә *-майынса, -мәйенсә (-май, -мәй)* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала. Миҫалдар:

| | барлыҡ | юҡлыҡ |
|---|---|---|
| *уҡы* | *уҡып* | *уҡымайынса (уҡымай)* |
| *йөрө* | *йөрөп* | *йөрөмәйенсә* |
| *ос* | *осоп* | *осмайынса* |

Хәл ҡылымдың был формаһы йыш ҡына ҡушма ҡылым эсенә лә инеп китә: *уҡып алды, ашамай булмай.*

2. Ҡылым нигеҙенә *-ҡас, -кәс, -ғас, -гәс* ялғауҙары ҡушыла. Был форма ваҡытты, сәбәпте белдерә: *Әсәйем һөйләгәс, Оксана көлөп ебәрҙе.* (М. Кәрим)

Юҡлыҡ формаһы сәбәпте генә белдерә: *бар-ма-ғас, йөрө-мә-гәс, уҡы-ма-ғас, ҡайт-ма-ғас, көт-мә-гәс, кит-мә-гәс, ҡара-ма-ғас.*

3. Ҡылым нигеҙенә *-ғансы, -гәнсе, -ҡансы, -кәнсе* ялғауҙары ҡушыла. Был форма эштең эшләнеү рәүешен, урынын һәм ваҡытын белдерә. Улар, ғәҙәттә, төп ҡылымдарҙың алдында килә һәм *нисек? ни рәүешле? ни эшләне? ҡасан? ҡасанға тиклем? ни сәбәпле? ни эшләгәнсе?* һорауҙарына яуап бирә: *Һин ҡайтҡансы, беҙ өйҙә булырбыҙ.*

**80-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Хәл ҡылымдарҙы табығыҙ.

Өйөрҙө һуғарырға Турыҡай үҙе алып барҙы. Һыу буйына еткәнсе, арттан ҡарап килде. Йылғаға барып еткәс, алға сығып, башҡаларҙы туҡтатты. Һыу эсеп, кире ҡайтҡас, тағы ла уларҙы күҙәтеп йөрөнө.

Көнбайыш яҡтан ниндәйҙер ҡара нөктәләр күренгәс, Турыҡай, ҡолаҡтарын торғоҙоп, шул яҡҡа ҡарай башланы. Былар, һис шикһеҙ, бүре булырға тейештәр.

Турыҡай бөтә йылҡыларҙы бер ергә килтереп түңәрәкләп теҙҙе. Бейәләр, баштары менән түңәрәк эсенә ҡарап, ҡойроҡтары менән түңәрәктең ситенә боролоп баҫтылар. Түңәрәктәр уртаһында ҡолондар һәм тайҙар ҡалды.

Бөтәһен дә шулай урынлаштырып бөтөргәс, Турыҡай муйынын дуғаландырып, ҡойроғон сәнсеп, күкрәген кире-берәк ебәрҙе. Тамам һоҡланғыс мөһабәт бер баһадир ҡиәфәтенә инде. *(С. Агиштан)*

## III

Ҡояш түбәнләй башланы.

Ташбатҡан ауылы йәштәренең кескенә һабан туйына оҡшаған бәйгеһе бөтөүгә яҡынланы. Уйындың иң аҙаҡҡы өлөшө булған ат сабыштырыу ғына ҡалғайны хәҙер. Ауылда һабан туйҙарында уҙып дан алған йүгеректәр юҡ ине юҡлығын. Сабышырға китеүсе аттарҙың күбеһе бығаса ҡамыт күрмәгән тай-тулаҡ та ҡырҡмыш булды. Уларҙы малайҙар ғына менгегә өйрәтеп ҡылананалар ине әле. Шуға күрә башта уҡ бик алыҫтан сабыштырмаҫҡа булдылар, Ташбатҡанға ете саҡрым Сосновка ауылының осонан сабыштырырға һөйләштеләр.

Йәштәр аттарҙың килеүен түҙемһеҙлек менән көтә башланы, бигерәк тә йүгеректәрҙең эйәләре борсолдо, һәр кем атының беренсе килеүен күрергә теләне һәм шуға ышанып эстән маһайҙы. Йүгеректәргә, килеү тәртибенә ҡарап, бәйге әҙерләнеләр. Ат һынаған кешеләр, кемдеке уҙып киләсәген юрап, алдан әйтергә тырыштылар, ни өсөн тиһәң, сабышырға киткән аттар араһында һыналғандары юҡ ине. Шулай ҙа юраусылар, һынсылдар — бөтәһе лә Баһау байҙың туры айғырына туҡталып ҡалдылар, уның нәҫелен юллап таптылар һәм, шул туры айғыр беренсе килер, тигән һығымта яһанылар.

Ташбатҡан ауылының һынсылдары яңылыштылар. Беренсе булып килеүсе бөтөнләй туры айғыр булманы, Фатиманың атаһы подрядчик Әхмәдиҙең ҡола тайы булды. Ҡола

тай ауылға бер саҡрым самаһындағы әрәмә морононан йәлп итеп килеп сыҡты. Уны шунда уҡ танынылар. Әрәмә моронон әйләнгәс, ул, орсоҡтан иҙәнгә төшөп киткән һары орсоҡташ һымаҡ, тәгәрләп туп-тура майҙанға атылып килә башланы. Сапҡанда ул бөтөнләй атҡа түгел, ә артынан ҡыуғын төшкәнгә һуҙылып, йән-фарман ҡасҡан төлкөгә оҡшай ине. Ул бер аҙ ер килгәс, башҡа йүгеректәр күренде. Улар инде ҡола тайҙан байтаҡ ер артта ҡалғайнылар. Баһау байҙың туры айғыры етенсе килә ине, ләкин ат өҫтөндәге малай әрәмәне әйләнгән бөгөлдә, башын осорған ағас һымаҡ, йығылып ҡалды. Туры айғыр, юлдан янтайып, йүгәненә баҫа-баҫа, бер үҙе бер яры әрәмә буйлап китте.

— Ай, маңҡорт! Шуны мендерәләрме ни? Тапҡандар кеше. Барып һыу эсмәһә ярар ине хайуан…

— Берәй ҡатҡылыраҡ малайҙы мендермәй.

— Эште бөлдөрҙө, сусҡа малай, — тип үкенделәр туры айғыр яҡлы кешеләр. Йығылып ҡалыусы малай тороп, осаһын ыуалай-ыуалай, атының артынан йүгергән булды.

Ул арала ҡола тай атҡан уҡ һымаҡ майҙанға килеп етте, ләкин шау-шыу, ҡысҡырыштан өркөп, юл биреп, ике яҡҡа айырылып торған халыҡ араһынан китмәйенсә, ярты яҡҡа ҡайырылды.

Һөбәгә бирелгән таҫтамалдың береһен йүгеректең муйынына таҡтылар. Халыҡ уны уратып алды. Хайуан һаман ҡолаҡтарын ҡайсылап өркөп торҙо, уның нәҙек боттары бәлтерәне.

— Йөрөтөргә кәрәк, йөрөтөргә. Аяғына һыу төшәр, — тинеләр ҡарттар.

Йүгеректе һыуындырыу өсөн йөрөтөргә алып киттеләр. Кешеләр ҡола тайға һоҡландылар.

— Быны ҡайҙа икән ул йүгерек. Йүгерек тигәс тә ярай, исмаһам, — тине Сәмиғулла.

— Бер нәмә сығыр был хайуандан.

— Аласыбар нәҫеленәндер был, Аласыбар, — тине Әҙһәм ҡарт.

— Шулай булыр. Йүгереүе бер ҙә был тирә хайуанына оҡшамай, — тине Әхтәри ҡарт, энеһенең һүҙен ҡеүәтләп.

— Аласыбар балаһы был, Аласыбар…

— Һуң, Аласыбар балаһы булырға, был ни ҡола лаһа, — тине Сәмиғулла.

Әҙһәм ҡарт, һаман үҙенең һүҙен өҫкә сығарырға тырышып:

— Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәр боронғолар! — тине.

Кискә табан Әхмәди үҙе Аҫҡын яғынан ҡайтып төштө. Күршеләре Әпхалиҡ менән Ваһап ҡарт уға килеп келәт алдында һөйләшеп торҙолар, тайҙы бик ныҡ тәрбиәләргә һәм оло йыйындарҙа сабыштырырға кәңәш бирҙеләр. Әхмәди, ғорурланып, маһайып ҡуйҙы:

— Насип булһа, йүгертергә ине инде. Кешенең аты уҙғансы, үҙеңдең тайың уҙһын, тигәндәр боронғо бабайҙар.

— Шулай, шулай. Бик кәрәк, бик кәрәк, — тинеләр күршеләре, уның һүҙен ҡеүәтләп...

1. Бүлектең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Атынан осоп ҡалған малайҙы ниндәй һүҙҙәр менән әрләйҙәр? Аңлатмалар бирегеҙ.
3. *Аяғына һыу төшөр; аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа; кешенең аты уҙғансы, үҙеңдең тайың уҙһын* һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Текстың йөкмәткеһенән сығып, унда һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың ҡасан булғанлығын төҫмөрләп ҡарағыҙ.
5. Текста һүрәтләнгән һабантуй менән әлеге заманда үткәрелгән һабантуйҙар араһында оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы табығыҙ.
6. Үҙегеҙ күргән (ҡатнашҡан) һабантуй тураһында хикәйә яҙығыҙ.

**81-се күнегеү.** Түбәндәге ҡылымдарҙы ике төркөмгә бүлегеҙ. Беренсеһенә — аттың эшен белдергән ҡылымдарҙы, икенсеһенә кешенең атҡа ҡарата эшен белдергән һүҙҙәрҙе яҙығыҙ. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.

Егеү, кешнәү, менеү, юртыу, менгәшеү, тышау, сабыу, эйәрләү, туғарыу, юрғалау, һөрөнөү, дағалау, өркөү, сығынлау, мисәү, һуғарыу, аунау, ҡолаҡ ҡайсылау, йыуыу, юшау, ашатыу, үрәпсеү, ауыҙлыҡлау, бәйләү, көтөү, бышҡырыу, сабыштырыу, ҡолонлау, биленләү, ҡарау.

Өлгө: *1) сабыу, кешнәү ...*
*2) егеү, менеү ...*

Ошо һүҙҙәрҙе индереп, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.

**82-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Мәғәнәһен аңларға тырышығыҙ.

**ЙӨРӘГЕМ**

Ташлап китте мине йөрәгем.
Йөрәкһеҙ бар кемгә кәрәгем.
Гүйә ҡашы төшкән йөҙөкмөн,
Аты йығып ҡасҡан егетмен.

*(М. Кәрим)*

**ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...**

Ағас емеше менән, кеше эше менән.

* * *

Аҙ һөйлә, күп эшлә.

* * *

Бер көн артта ҡалһаң, биш көн йүгерерһең.

# БАШҠОРТОСТАН — ҒӘЗИЗ ЕРЕМ

*Әхмәр Үтәбай*

## БАШҠОРТОСТАН

Ерһенгәнмен ошо ергә,
Илһенгәнмен ошо илгә.
Буйың-һының шау ҡоростан,
Уйым-йырым — Башҡортостан!

Айырылһам усағыңдан,
Ҡайырылһам ҡосағыңдан,
Талһыҙ ҡалған бахыр ҡоштай —
Һинһеҙ ҡалһам, Башҡортостан!

Башҡортостан — ҡурай иле,
Башҡортостан — Урал ере,
Башҡортостан — ҡумыҙ теле,
Башҡортостан — ҡымыҙ сере.

Ерһенмәгән ҡайтһын кире,
Илһенмәгән ҡайтһын кире;
Иҫкә алһын туған телен —
Башҡортостан мәңге тере!

Ошо илһеҙ юҡтыр үҙем,
Моңһоҙ булыр әйткән һүҙем.
Ҡабынғанмын осҡон, уттан,
Табынғаным — Башҡортостан!

1. Шиғыр, һеҙҙеңсә, ниндәйерәк тонда уҡылырға тейеш? Ни өсөн?
2. Шиғырҙа Башҡортостан нисек һүрәтләнә? Уның образын һеҙ нисегерәк күҙ алдына килтерҙегеҙ?
3. 3-сө строфаны ентекләп уҡығыҙ. Унда һалынған мәғәнәне аңлатығыҙ.
4. Тыуған илеңде, тыуған төйәгеңде яратыуҙы нисек атайҙар? Һеҙҙә шундай тойғо бармы? Ундай тойғо булмаған кешене кем тиҙәр? Әңгәмәләшегеҙ.
5. Башҡортостанды картанан табып, ниндәй республика һәм өлкәләр менән сиктәш булыуын билдәләгеҙ.

**83-сө күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, хәл ҡылымдарға һорау ҡуйығыҙ. Уларҙы бәйләнгән ҡылымдары менән күсереп алығыҙ. Хәл ҡылымдарға һүҙ составы буйынса анализ яһағыҙ.

Өлгө: *тырыш-ҡас (ни сәбәпле?) белә.*

1. Лавканың таш стеналары тәңгәленә еткәс, бөтөнләй туҡтаны. *(Я. Хамматов)* 2. Аҙна самаһы шулай уҙғас, Фатиманы бындай хәл борсой башланы. *(Б. Бикбай)* 3. Ҡыҙырас, уҡыуҙар башланғас, бер нисә көн шым ғына йөрөнө. *(З. Биишева)* 4. Яҫмаға һалынған бойҙай баҫыуына сыҡҡас, ел көсәйҙе. *(Д. Исламов)*

**84-се күнегеү.** Күп нөктәләр урынына тейешле ялғауҙарҙы ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Хәл ҡылымдың аҙағына йәйәләр эсенә һорауҙарын яҙығыҙ.

1. Шәфәҡ байы..., ҡараңғы төш..., Рәхим военкоматтың иң яҡшы атын ег... килтерҙе. *(И. Насыри)* 2. Һалдан төш..., Фатима Тирәкле ауылында туҡта... торманы. *(Я. Хамматов)* 3. Петроградҡа ҙур ҡурҡыныс кил... тыу..., ул, телеграмма һуғ..., башҡорт милли ғәскәрҙәрен саҡырып алды. *(М. Кәрим)* 4. Көн тамам күңелһеҙлән..., һалҡынсалан... китте. *(З. Биишева)* 5. Сәй урыны йыйыл..., бабай беҙҙе түр яҡҡа ал... инде. *(Ә. Вәли)* 6. Ул, ярһыуын баҫа ал..., ҡыҙыу атла..., ары-бире йөр... алды. *(И. Ғиззәтуллин)*

*Абдулхаҡ Игебаев*

## ОНОТМАНЫМ ҺИНЕ, АУЫЛЫМ!

Күңелемә дауа кеүек була
Көн дә һине иҫкә алыуым;
Нишләр инем,
                    әгәр был донъяла
Һин булмаһаң,
                    тыуған ауылым?!

Хушлашҡанда, һиҙмәгәнмен икән
Йөрәгемдең һиндә ҡалыуын;
Ғүмер үткән һайын, мин нығыраҡ
Һағынамын һине,
                         ауылым!

Яҙмышымдың күрҙем күкрәүен дә,
Күрҙем йән тетрәткес дауылын;
Юлым ҡайҙа ғына юлыкһа ла,
Онотманым һине,
                         ауылым!

Юҡҡамы ни һиңә ашҡыныуым,
Хис ҡуҙында баҙрап яныуым,
Әсәм элгән сәңгелдәгем һиндә,
Атам йорто һиндә, ауылым!

1. Лирик геройҙың күңелендә тыуған ауылына ҡарата ниндәй тойғолар ята?
2. *Хушлашҡанда, һиҙмәгәнмен икән*
   *Йөрәгемдең һиндә ҡалыуын,* тигән юлдар менән шағир нимә әйтергә теләй?
3. *Яҙмышымдың күрҙем күкрәүен дә,*
   *Күрҙем йән тетрәткес дауылын,* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.

**85-се күнегеү.** Түбәндәге ҡылымдарҙан хәл ҡылымдың өсөнсө төрөн яһағыҙ. Уларҙы индереп, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ. Һөйләмдәрегеҙҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡор, кил, сығып кит, уйла, ебәр, сыҡ, асыл, бөт, эс, башлап, алып бар, килеп баҫ, килеп туҡта.

**86-сы күнегеү.** Хәл ҡылымдарға һорауҙар ҡуйығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.

1. Мин үҙем дә бына тап һин уйлағанса уйлайым. *(И. Насыри)* 2. Беҙ сәй эсеп бөткәнсе, балыҡ та бешеп өлгөрҙө. *(М. Кәрим)* 3. Улар ауылдан сығып киткәнсе, Хәмит менән йәштәр урам уртаһында баҫып ҡалдылар. *(С. Агиш)* 4. Урал батырҙың ат йөҙҙөрөп килгән юлынан тау ҡалҡып сыҡҡан. Тау ҡалҡып сыҡҡас, һыу батшаһының иле икегә ярылған. *(«Урал батыр» эпосынан)*

*Мостай Кәрим*

## ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ ТУРАҺЫНДА

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына, —
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе, япраҡ, аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны — бөйөк Рәсәй —
Шундай йәшел, юғары.
Нисә быуат шул япраҡты
Ҡайындан өҙмәк булып,
Боҙ һалҡынында туңдырмаҡ,
Утта көйҙөрмәк булып,
Нисә диңгеҙ аръяғынан
Ниндәй елдәр иҫмәгән,
Ниндәй йәшен уйнамаған,
Ниндәй ҡырау төшмәгән.
Шул япраҡты ашар булып,
Нисә төрлө ҡорт һырыған,
Ҡайһы «милләт», ҡайһы «дәүләт»
Йә «өммәт» затлы булған.
Ғорур япраҡ өҙөлмәгән
Ғорур ҡайын-әсәнән,
Әсәһенең һуты менән,

Көсө менән йәшәгән.
Бөгөнгә яҙ килде илгә
Елдәр, дауылдар аша.
Ҡайындың шат япраҡтары,
Тыңла, нисек шаулаша!

Картаға ҡарап, еремде:
— Бер япраҡ саҡлы, — тинем, —
Мин хайранмын киңлегеңә,
Башҡортостаным — илем!
Бер сигең Яйыҡ ярында,
Ыҡ буйында бер сигең,
Бөркөт ҡанатын талдырыр
Сал тауҙарың бар һинең.
Һиндә тауҙар ғорурлығы,
Далалар иркенлеге.
Һыуҙарың көмөш. Тупрағың —
Торғаны алтын һинең,
Бар хазинаңдан ҡиммәтле
Бәхетле халҡың һинең!

* * *

Донъя картаһында ерем
Бер япраҡ саҡлы ғына,
Ә быуаттар төпкөлөнә
Ҡараһаң яҡшы ғына,
Ошо изге ерҙән уҙған
Күпме быуын яҙмышы —
Һауаларға ашҡан даны,
Һыуға һеңгән һағышы.
Был тупраҡҡа сәмле тарих
Ҡандар менән яҙылған,
Ҡаяларҙа ҡылыс эҙе —
Ташҡа тамға һалынған.
«Эйгән башты ҡылыс сапмай», —
Тиһә лә иҫке мәҡәл,
Баш эймәгән ғорур халҡым,
Теҙ сүгеп йәшәмәгән.

...Бик хәйерсе булған халҡым,
Тик хәйер һорашмаған,
Билгә ҡылыс таҡҡан, шуға
Арҡаға тоҡ аҫмаған,
Билгә ҡылыс таҡҡан, ләкин
Күршелә ил баҫмаған.
Кем уға ҡорал күтәрһә,
Шуны яуҙа тураған,
Дошманының атын һорап,
Затын һорап тормаған.
Кисәгең дә, бөгөнгөңдәй,
Күңелемә яҡын минең,
Утты, һыуҙы кисеп үткән
Ҡаһарман халҡым минең!

1. Башҡортостанға янаған *ел, йәшен, ҡырау, ҡорт* образдарын асыҡлағыҙ.
2. *Бөгөнгө яҙ килде илгә*
   *Елдәр, дауылдар аша.*
   *Ҡайындың шат япраҡтары,*
   *Тыңла, нисек шаулаша!* тигән юлдарға һалынған фекерҙе асыҡлағыҙ.
3. Башҡортостандың тәбиғәте, хазиналары, киңлектәре тураһында шиғырҙа нимә әйтелә?
4. Шиғырҙа халыҡтың тарихы һүрәтләнгән урындарҙы уҡығыҙ һәм фекер алышығыҙ.
5. Шиғырҙан йәнләндереү, сағыштырыу, метафора кеүек һүрәтләү сараларын яҙып алығыҙ һәм ҡулланылышын аңлатығыҙ.
6. Башҡортостанға арналған башҡа шиғырҙарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
7. Башҡортостандың ун ике мөғжизәһе тураһында Интернет селтәрендәге мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, презентация эшләгеҙ. Тағы нимәләрҙе мөғжизәләр исемлегенә индереп булыр ине?

Беҙ иҫ киткес ғәжәп, үҙенсәлекле һүҙ төркөмө булған ҡылым тураһында мәғлүмәттәр тупланыҡ. Нимә белдек һуң? Иң тәүҙә беҙ ҡылым формаларының һанап бөтә алмаҫлыҡ күп икәнен күрҙек. Мәҫәлән, бер генә ҡылым

тамырынан утыҙ меңләп һүҙ формаһы яһап була. Уны өйрәнеп бөтөүе мөмкинме? Юҡ, әлбиттә. Шулай ҙа шул тиклем күп форманың затлыларға һәм затһыҙҙарға бүленеүен беҙ белә алабыҙ.

Тағы ла. Ҡылымдың заман формалары ап-асыҡ өс заманда: үткәндә, хәҙер, киләсәктә булған, булыуы мөмкин эштәрҙе белдерә. Ләкин телмәрҙә иһә йыш ҡына ул формалар төп мәғәнәләрендә ҡулланылмай. Мәҫәлән, үткән заман формаһы киләсәктәге эшкә ишара яһай. Ҡарағыҙ.

— *Иртәгә һиңә Өфөгә барырға кәрәк.* — *Эйе, барҙым, ти, бармай ни!* — Үткән заман формаһы, ә киләсәктәге эште белдерә. — *Беҙҙекеләр тағы оттолар!* — *Булыр, булыр!* — Киләсәк заман формаһы, ә үткәндәге эште белдерә.

Күренеүенсә, ҡылымдың заман формалары үҙҙәре белдерергә тейеш ваҡытта булған эштәрҙе ҡайһы саҡта күрһәтә алмай икән. Йәғни форма менән реаль эш тап килмәй.

Бындай «тап килмәүҙәр» һөйләүсе, йәғни тыңлаусы, өсөн уңайһыҙлыҡтар тыуҙырамы, аңлауҙы ҡыйынлаштырамы? Юҡ, әлбиттә. Туған теле башҡорт теле булған кешеләргә был бик тәбиғи яңғырай. Ә телде өйрәнеүселәргә беҙҙең телебеҙҙең матурлығын, байлығын күрһәтә.

**87-се күнегеү.** «Ҡылым» темаһына ҡарата мөмкин тиклем күберәк һорау төҙөгөҙ.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Ата-бабам баҡҡан ер — кендек ҡаным аҡҡан ер.

* * *

Иле ныҡтың биле ныҡ.

# АП-АҠ ҠАРҘАР ЯУА

*Кәтибә Кинйәбулатова*

## ҺАУМЫ, АҠ ҠЫШ!

Һаумы, аҡ ҡыш,
Өр-яңы ҡар —
Аҡ болот.
Яу әйҙә, яу,
Ергә ят, ҡат-ҡат булып.
Хозурла һин,
Нағышла һин донъяны.
Урман-ҡырҙар
Булһын йәнә өр-яңы.
Аҡ түбәләр күтәрелһен үргәрәк,
Бейек-бейек тауҙар беҙгә
Бик кәрәк.
Әйтһендәр: «Был —
Уралтауҙың балаһы,
Әйҙә унан һәр кем шыуып
ҡараһын».
Осайыҡ беҙ,
ҡар-болоттар
туҙҙырып,
Саналарҙы ҡоштарҙан да
уҙҙырып.
Әйҙә, килсе,
Аҡ буранлы яңы йыл!

Яңы бәхет,
Яңы еңеү,
Яңы юл!
Ҡурҡаҡ түгел беребеҙ ҙә
арала,
Алһыу битле — ҡайһыбыҙға ҡарама.
Ҡулдарыбыҙ көслө —
тимер бөгөрлөк,
Һалҡындарҙа сыныҡырға өлгөрҙөк.
Әйҙә, килсе,
Аҡ буранлы яңы йыл!
Яңы бәхет,
Яңы еңеү,
Яңы юл!

*Шакир Бикҡолов*

**УРМАН...**

Урман ниндәй матур…
Яҙҙарын да, көҙөн дә,
Йым-йым итә алтын нурҙар
Япраҡтарҙың төҫөндә.

Аҡ ҡайындың моңло йырын
Яратып тыңлай имән.
Бындай данлыҡтың тамыры
Борон-борондан икән.

Мин үҙем дә был дуҫтарҙың
Бер туғаны һаналам.
Саған менән миләш дуҫты
Ҡайнар ҡосаҡҡа алам…

Һәр дуҫымдың үҙ йыры бар,
Һәр дуҫымдың үҙ теле.
Ниндәй шатлыҡ йәшәүҙәре
Япраҡтар телен белеп.

Бер кемгә лә теләмәйем
Яңғыҙлыҡты күрергә.
Оло бәхет... урман булып
Үҫеүе бергә-бергә,
Йәшәүе бергә-бергә.

1. Шиғырҙа ҡайын, имән, саған, миләш образдарында кемдәрҙе күрәһегеҙ?
2. *Оло бәхет... урман булып*
*Үҫеүе бергә-бергә,*
*Йәшәүе бергә-бергә,* тигән юлдарҙың мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?

**88-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын асыҡлап ҡарағыҙ. Уларҙы ниндәй бер һүҙ менән дөйөмләштереп әйтеп була?

Батман, бешкәк, ижау, көбө, туҫтаҡ, елпеүес, алтыр.

**89-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Бер мәҡәл буйынса ижади эш эшләгеҙ.

1. Тауға ҡарап таш атма.
2. Тауҙа үҫкән баланың ике күҙе ташта.

*Сафуан Әлибай*

## МАТУР КӨН

Ынйы-ынйы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн!
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.

Бәүелеп-бәүелеп төшә,
Ҡар яуа — матур ниндәй!
Әйтерһең дә, кемдер күктә
Ҙур иләктән он иләй.

*Ғабдулла Туҡай*
*татар шағиры*

**ЕР ЙОҠОҺО**

Ҡырға аҡ ҡарҙан
Юрған ябылған;
Ер яҙға саҡлы
Йоҡоға талған.

Ул тормаҫ, йоҡлар,
Ҡыштар үтмәйсә, —
Ҡибланан ҡоштар
Ҡайтып етмәйсә.

Яҙҙың айҙары,
Апрель, майҙары,
Бик матур һыҙылып
Атҡан таңдары;

Урман шаулауы,
Ҡоштар һайрауы,
Күктәр күкрәүе,
Ямғыр яуыуы.

Ҡойоноу көн һайын
Ҡояш нурында;
Унан һуң тағын
Төшкән ысыҡ төндә.

Был хәлдәр ергә
Барыһы бергә
Ҡалған тик инде
Төштә күрергә.

Ер йоҡлай тыныс,
Күреп тәмле төш.
Уяныр әле,
Туҡта, үтһен ҡыш!

1. Шиғырҙарҙы тасуири уҡығыҙ. Бөтәһе өсөн дә уртаҡ үҙенсәлектәрҙе билдәләгеҙ.
2. К. Кинйәбулатова ҡышты ниндәй кәйеф менән ҡаршылай, уға ниндәй өмөттәр бағлай? Шиғырҙа ниндәй төҫтәр өҫтөнлөк итә?
3. Һеҙҙең ҡышҡа мөнәсәбәтегеҙ нисек? Шағирәнең кәйефен уртаҡлашаһығыҙмы? Аҡ бурандар, ысынлап та, яңы бәхет алып килеүсе, ә сатнама һыуыҡтар — беҙҙе сыныҡтырыусы ғынамы? Уларҙың һеҙгә оҡшамаған яҡтары ла бармы?
4. С. Әлибайҙың «Матур көн» шиғырында *ынйы, бәүелеп* һүҙҙәре ни өсөн икешәр тапҡыр ҡабатланған? Бының менән берәй нәмә үҙгәргәнме?
5. Ҡар яуыуын он иләү менән сағыштырыу дөрөҫмө? Уны тағы нимәгә оҡшатып була?
6. Татар шағиры Ғ. Туҡай шиғырындағы *ҡибланан ҡоштар ҡайтып етмәйсә,* тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

## РӘҮЕШ

Эш-хәрәкәттең рәүешен, ваҡытын, урынын, сәбәбен, күләмен белдереүсе һүҙҙәр **рәүеш (наречие)** тип атала.

Рәүештәр һәр ваҡыт ҡылымдың алдынан килә. Миҫалдарҙы ҡарағыҙ: *шәп* (нисек?) *атлай, кисә* (ҡасан?) *ҡайттыҡ, уңға* (ҡайҙа?) *боролдо, юрамал* (ниңә?) *шаяртты, аҙ* (күпме?) *эшләгән.*

**90-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙән рәүештәрҙе табып, үҙе эйәреп килгән ҡылым менән яҙып алығыҙ.

1. Ашыҡҡан арба аҡрын тәгәрәй.
2. Бер эшлә, берәгәйле эшлә.
3. Иртәгәге эшеңде бөгөн уйлап ҡуй.
4. Күп эшләгән — аҙ эшләгән.
5. Тик ятҡан ятып ҡалыр.

Мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Бер мәҡәл буйынса ижади эш эшләгеҙ.

Рәүештәрҙең бер төрө сифаттарға оҡшаш. Тик рәүештәр һәр саҡ ҡылымға эйәрә, ә сифаттар исемде асыҡлай. Ҡайһы бер сифаттар рәүеш урынында ла килә ала: ***яҡшы*** *китап* (сифат) — ***яҡшы*** *уҡый* (рәүеш урынындағы сифат).

Сифат кеүек үк, ҡайһы бер рәүештәрҙең сағыштырыу дәрәжәһе була:

*Ҡаҙ үрҙәктән **ҙурыраҡ*** (сифат).

***Уңғараҡ** бар, **иртәрәк** тор* (рәүеш).

*Әхмәт Әһлиуллин*

**БИҘӘКЛЕ САНА**

Һуғышҡа тиклем әле, атайым менән Оҙонтөбәк яғынан урмандан ҡайтып килгәндә, бөкрәйеп атлаған бер бабай артынан ҡыуып еттек.

Атайым атты туҡтатты ла:

— Имаметдин ағай, сана табандарыңды йөккә һал, байтаҡ атлайһы әле, — тине.

Бабай беләк йыуанлығы ғына йыла ағастары бәйләмен утын өҫтөнә ҡуйғас, оҙон бишмәтен ҡыҫып быуған билбауына ҡыҫтырған балтаһын ипләне лә арба артынан атайым менән йәнәш атлай башланы.

Бәйләмде йөккә рәтләп ҡуйған арала, атайым:

— Насип булһа, көҙ көнө бабайыңдан үҙеңә берәй сана алырбыҙ, — тине.

— Быларҙан ниндәй сана сыҡһын! — тип эстән генә көлөп ҡуйҙым.

Ҡар яуып, Ҡаршытауҙан малайҙар, сыр-сыу килеп, тау шыуа башлағас, бер-ике малайҙа үрәсәһенә ҡыҙыллы-йәшелле биҙәктәр төшөрөлгән сана күргәс тә, атайымдың йәйге вәғәҙәһен иҫкә төшөрҙөм дә уға:

— Һарыҡай бабайҙан сана алайыҡ әле? — тинем.

Атайым миңә башта асыуланырға уйлағайны ла, шунан йөҙөн үҙгәртмәй генә:

— Оло кешене улай ҡушаматы менән атамайҙар, — тине.

Мин дә аптырап торманым:

— Бөтә малайҙар ҙа «Һарыҡай бабай» тигәс...

— Ауыл халҡына бер мәрәкә инде ул кешене ҡушаматы менән атау. Бабайыңдың исеме — Имаметдин, — тине лә, саҡ ҡына уйланып тороп, өҫтәп ҡуйҙы: — «Һарыҡай» — уның атаһына тағылған исем. Унда ла көлөп түгел, ә тыуғас та әсәһе һөйөнөп кенә: «Һарыҡай, һарыҡайым минең!» тип әйткән

булған. Элек Кәрәске күле тирә-яғы тотош урман менән ҡапланғайны. Күлдән алыҫ түгел, әлеге урман яҡлап ҙур аҡлан була торғайны. Ана шул аҡландарҙы беҙҙең заманда «Һарыҡай сабынлығы» тип атай торғайнылар. Хәҙер унда тау башы яланғас булғас та, — тип атайым һүҙен осланы. Шунан минең яуап көткәнемде күрҙе лә:

— Бына, әсәйең ҡушмай бит әле, нишләрбеҙ икән? — тип ҡуйҙы. Мин ялбарыулы күҙҙәремде әсәйемә төбәнем. Беҙҙең һөйләшкәнде ишетеп торған әсәйем:

— Ҡушам, бәй, нишләп ҡушмайым, ти. Тик үҙегеҙгә ойоҡтар ғына тегә алмайым бит әле. Бөгөн молотилкабыҙ ҙа ватылып туҡтаны, кис ултырырмын инде, — тине.

Бына әсәйем һуҡыр шәм яҡтыһында, яҙғы юл өҙөгөндә һуғылып, сәсеүҙәр бөткәс, һабан туйы алдынан баҫылған аҡ туланан башта атайыма, унан ҡалғанынан миңә тула ойоҡтар тегеп бирҙе. Береһенең ҡунысы ялғаулы булды булыуын, унаң ҡарауы, ысын тула ойоҡтар бит! Ҡалынлығы бер иле, быймаға торошло!

Ул кис миңә тағы бер шатлыҡ килтерҙе. Атайымдың ҡорҙашы Ғәлиәхмәт бабай, колхоз умарталығынан ҡайтышлай беҙгә инеп, миңә матур сабата биреп китте. Сабатаһы ла ойоғона торошло, ҡыҙҙарҙыҡы кеүек көлөп торған кескәй башлы. Атайым, ул сабатаны ҡулында әйләндереп ҡарап:

— Һе, ҡыҙҙар көнләшмәһә ярар ине лә бит, — тип ҡуйҙы.

Быны ишетеп торған әсәйем:

— Көнләшмәҫ, тула ойоҡ егеттәргә генә эләгә бит, — тине.

Иртән аяҡҡа яңы сабата, яңы ойоҡ кейеп, урамға сыҡтым. Өҫкә, ситтәренә аҡ киндер ҡайып, һоро туланан Әхмәтвәли бабай теккән сәкмәнде лә кейеп ебәрҙем.

Яңы яуған ҡарҙыңмы әллә сабатаныңмы шығырлауын тыңлап бара торғас, Имай бабайҙарға еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанмын.

Атайым, араталары бушап бөткән ел ҡапҡаны асып, мине үткәрҙе лә, йомшаҡ йүкәнән ишелгән, һүҫәрелеп бөткән бау менән ҡапҡаны эләктереп ҡуйып, өйгә табан атланы.

Беҙҙең алда — ҡалын һалам башлы, урам яҡтан — ике, ишек алды яғынан бер кескәй тәҙрәле өй. Бейек, ҡалын итеп, тәҙрәгә тиклем һалынған нигеҙ уны тағы ла тәпәшәйтеп күрһәтте. Өйҙөң ишек алдына терәлеп, мал ҡураһы һуҙыла. Өй тотош һалам менән ябылып, уның баҫтырма кәртәләре ике

яҡлап өҫкә менәләр ҙә, өй һыртына атланғандай, теҙелешеп торалар. Мин шул баҫтырма баштарында гөрләшеп ултырған күгәрсендәрҙе ҡарап та бөтмәнем, атайым иҫке таҡталарҙан ҡороштороған ишекте еп бауынан тартып асты. Ҡағылғаны бирле май күрмәгән ишек күгәне өйҙәгеләргә үҙенең асылыуын хәбәр итте. Кескәй тәҙрәнән төшкән яҡтылыҡ ишек таҡталары араһынан кергән ҡояш нурҙары менән ҡушылһа ла, эстә ярым ҡараңғылыҡ хөкөм һөрә ине. Соланға ингәс тә, һепереп ҡуйылған иҙән, бер мөйөшкә өйөлгән утын, кескәй генә таҡта бура һәм уның эргәһендә эреле-ваҡлы балсыҡ көршәктәр күҙгә салынды. Тупһа төбөнә һалынған аҡ ташҡа баҫып, өйгә атланыҡ.

Яңы ҡарҙан, ҡояш нурҙарынан ҡамашҡан күҙ бында ла күнегә алмай торҙо.

Унда мейес араһындағы саналарҙы күргәс, күҙҙәр асылып киткәндәй булды, йүгергеләй башланы. Тик бабайҙың ҡарсығының һуҡраныуы ғына беҙҙе тыйылып торорға мәжбүр итте. Ул:

— Илаһым, өс мыҫҡал ғына буяу алғайным, тағы тотоноп бөткәнһең инде. Бына үҙеңә күлдәкте манмай ғына тегеп кейҙерәйем әле, — тип бабайҙы тиргәп тора ине.

— Ярар инде, ҡарсыҡ, буялмаһа ни, ата-баба ғүмер буйы аҡтан кейенгән, — тине ҡарт.

Баҡтиһәң, бабай ҡарсығы яңы һуҡҡан киндер күлдәклеген манырға тип кенә алған буяуын, сана-көйәнтәләрҙе биҙәкләп, бөтөргән икән...

Сананы һайлап алғас, атайыма:

— Ә әсәйемә? Әсәйем дә ҡушҡайны бит, — тинем.

— Әйе шул, — тип атайымдың әйтеүе булды, Имай бабай, мейес башына үрелеп, биҙәкле көйәнтә алып та бирҙе.

— Бына ошоһо баҙыҡ булырға тейеш, Ҡыҙылъяр йылаһынан бөккәйнем, — тине ул.

Ә кис, ут алғас, көнө буйы сана шыуып өйгә ҡайтып ингәндә, минең аҡ ойоғом да, сәкмәнем кеүек һыуланып, һоро төҫкә ингәйне. Ә шулай ҙа кәйеф шәп ине...

...Уҙған көҙ ҡар яуғас, ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрөп, улыма Имай бабайҙан атайым миңә алып биргән кеүек, өс тешле сана яһап бирҙем. Малай үҙе лә ҡарап торманы, үрәсәләрен ҡыҙыллы-йәшелле буяуҙар менән сыбарлашты. Сана бик матур ҙа, ыҡсым да булды. Табанын да ҡомло ҡағыҙ менән шымартып ебәрҙек. Улым, яңы сананы һөйрәп, ҡанатланып

тау шыуырға сығып китте. Тик шатлыҡ оҙаҡҡа барманы: яңы ҡарға, биҙәкле санаға шатланып сығып киткән малайым илап ҡайтып керҙе.

— Малайҙар көләләр. «Был сананы музейға ҡуйырға кәрәк», — тиҙәр. Ҡайһы берәүҙәр: «Ат санаһы һөйрәгәнһең», — тип мыҫҡыллай...

Ә теге саҡта, тау шыуғанда, күпме иптәштәрем миңә көнләшеп ҡарап торғайны. Ҡаршытауҙың өҫтөндә генә йәшәгән Зәйнәғи, мин ике-өс мәртәбә шыуып төшкәс тә, ҡаршыға йүгереп сығып:

— Ҡайҙа әле, шәп шыуамы? — тип, мин уны-быны уйлап, әйтеп өлгөргәнсе, ҡар бураны уйнатып санамда шыуып төшөп тә китте. Уның иҫке бүркенең ҡолаҡсындары ялпылдауы ла, күлдәк итәктәре елберләүе генә күренеп ҡалды... Үргә табан да, төшкәндәге кеүек, шәп итеп килеп менде: уның ялан өҫ, башалтайҙан ғына булыуы йүгереп менергә бер ҙә ҡамасауламай ине шул... Ул тыны ҡыҫылып менеп етте лә, минең алдан йүгереп уҙғанда:

— Шәп, малай, санаң, тик әле шымармаған! — тип ҡысҡырып үтте.

Мин, бер шыуып төшкәс, ҡабаланмай ғына кире әйләнеп менгәндә, ул өрөп боҙон ирекҡән тәҙрәләре аша беҙҙең тау шыуғанды ҡарап ултыра ине. Мин уға ҡул болғағас, ул йылмайып ҡына ҡуйҙы...

Әле шундай сананы һөйрәп уйнарға сыҡҡан малай илап ҡайтҡан. Вәт заманалар, ә?!

— Ә санаңды ҡайҙа ҡалдырҙың? — тим.

— Малайҙарҙа. Үҙҙәре көләләр, ә үҙҙәре миңә бирмәйҙәр, шыуалар ҙа шыуалар...

Беҙ тауға киттек. Яҡыная башлағас, малайҙар, тау шыуыуҙан туҡтап, саналарын һөйрәп, беҙгә ҡаршы килә башланы. Уларҙың ҡайһыһы ҡурҡып, ҡайһыһы ғәйепле кешеләй, башын түбән эйеп атлай. Бөтәһендә лә алюминдан, тимерҙән яһалған, ялтырап торған буяулы саналар...

Алдан, беҙҙең сананы һөйрәп, күрше Фәрит килә. Ул:

— Беҙ ҙә шыуайыҡ инде, санаң шәп икән. Берәр генә төштөк инде. Һеҙҙең сана үҙе шәп шыуа, үҙе ултырырға уңайлы...

Икенсеһе былай тип өҫтәй:

— Беҙҙеке өҫтөндә — быҙау менгән кеүек, атлап барғанда ла ултырып була, шәбәйһә — осаһың да ҡалаһың...

— Ә музей? — тип һорайым мин.

— Күргән булмағас, «музей» тимәй, нимә тиһең?

— Бергәләп шыуығыҙ, улайһа. Ватылһа, күмәкләп бөтәнде яһарбыҙ...

Һәр йылды ҡар яуып, сана юлы төшә башлау менән, ауыл уртаһындағы клуб тауынан бала-саға, сыр-сыу килеп, сана шыуа. Тик уларҙа Имай бабайҙың биҙәкле саналары күренмәй. Әлек тау эргәһендә генә ултырған Имай бабайҙарҙың өйө юҡ. Ул урында ҙур мәҙәниәт һарайы ултыра. Ә бына уның берәй санаһы менән биҙәкле көйәнтәһен мәктәп музейына ҡуйғанда, насар булмаҫ ине...

1. Әҫәрҙәге *йыла ағас, бишмәт, сана үрәсәһе, молотилка, һуҡыр шәм, тула ойоҡ, сабата, сәкмән, ел ҡапҡа, киндер, ишек күгәне, ситән, мыҫҡал, күлдәк маныу, көйәнтә* һүҙҙәренең мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлек ярҙамында аңлатығыҙ.
2. Хикәйәнең йөкмәткеһен үҙегеҙҙең һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
3. Ниндәй ҡапҡа ул *ел ҡапҡа*? Әле ундай ҡапҡалар бармы?
4. Һеҙҙең сабата күргәнегеҙ бармы? Ололарҙан һорашып, уның тураһында кескәй белешмә төҙөгөҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.
5. Текста *беләк йыуанлығы, бер иле ҡалынлығы* тигән үлсәү берәмектәре осрай. Кешенең тән ағзаларына бәйле тағы ниндәй үлсәү берәмектәре бар?
6. *Ҡанатланып сығып китте* тигәндә, кешенең ниндәй кәйефе сағыла?
7. Ҡасан була ул *сана юлы төшкән ваҡыт?* Арба юлы төшкән ваҡыт та буламы?
8. Әҫәрҙә ниндәй осор ваҡиғалары һүрәтләнгән? Замандар үҙгәреше, быуындар бәйләнеше унда нисек сағылған?
9. Имай бабай кеүек оҫталар хәҙер бармы? Сана эшләү тураһында мәғлүмәт туплап, белешмә төҙөгөҙ.

**91-се күнегеү.** Рәүештәргә ҡылымдар өҫтәп яҙығыҙ.

Йәйәү, быйыл, һыбай, бушҡа, ары, бире, бөтөнләй, юғары, аҙ, йөҙ түбән, ашыҡ-бошоҡ, ҡышын, бергә, юрамал.

Өлгө: *йәйәү атлау, ...*

# ИЛ НАМЫҪЫ — ИР КҮҢЕЛЕНДӘ

*Рәшит Шәкүр*

## ҺАҠТА ТОРА ИЛДЕҢ УЛДАРЫ

Тыуған илем, мәңге изге һинең
Һәр аҙым ер, һәр ус тупрағың,
Изге күгең, икһеҙ-сикһеҙлегең,
Изге һинең тере һыуҙарың.

Ерҙән — ҡеүәт, һыуҙан ҡөҙрәт алып,
Анттар биреп халыҡ алдында,
Ыласындай ҡыйғыр егеттәрең
Сафта тора һинең һағыңда.

Һаҡта тора батыр ил улдары,
Тыныс булһын ауыл, ҡалалар,
Ал таңдарҙы һөйөп уянһындар
Тауҙар, таштар, һыуҙар, һауалар.

Тыуған илем, һинең киңлектәрең
Булһын һәр саҡ бәхет төйәге,
Бар халыҡтар тик шатлыҡтар менән
Ҡаршы алһын килер көндәрҙе.

Килер көндәр, тыуыр таңдар өсөн
Һаҡта тора илдең улдары.

Имен-аман булһын, эй кешеләр,
Ер шарының барыр юлдары!

1. Тыуған ил, тыуған ер ҡәҙере тураһындағы һүҙҙәр һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. Ил һағында торған егеттәрҙең *ерҙән ҡеүәт, һыуҙан ҡөҙрәт* алыуын һеҙ нисек аңлайһығыҙ?
3. *Ил һаҡсылары* тигәндән һеҙ ил сиген һаҡлаусы пограничниктарҙы ғына күҙ уңында тотаһығыҙмы? Армияла тағы ниндәй ғәскәр төрҙәре бар? Уларға, үҙегеҙ белгәнсә, характеристика бирегеҙ.
4. Үҫеп еткәс, һеҙ ниндәй хәрби часта хеҙмәт итергә теләр инегеҙ? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ, хәрби һөнәрҙәрҙең мөһимлеге тураһында фекер алышығыҙ.
5. «Минең ағайым (туғаным һ. б.) — танкист (лётчик, пограничник һ. б.)» тигән темаға кескәй хикәйә яҙығыҙ.
6. Ил һаҡсылары тураһында уҡыған китаптарығыҙ, ҡараған киноларығыҙ, белгән йырҙарығыҙ тураһында фекер алышығыҙ.
7. Түбәндәге мәҡәлдәр, әйтемдәр менән танышығыҙ.

1. Егетлек бүрек кейеүҙә түгел, батырлыҡта.
2. Иҙел кисмәй, ил булмаҫ; ҡурҡаҡ егет ир булмаҫ.
3. Ҡыйыулыҡ ҡыйынлыҡтан ҡотҡара.
4. Бөркөттө осоуынан, егетте эшенән танyйҙар.
5. Ир арыҫланы, ата балаһы, ҡайҙа барһа ла сер бирмәҫ.
6. Ирлек беләктә түгел, йөрәктә.
7. Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай.
8. Һүҙенән ҡайтҡан — ир түгел.

**92-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙән рәүештәрҙе табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Бер мәҡәл буйынса ижади эш эшләгеҙ.

1. Аҙ һөйлә, күп тыңла.
2. Иҫәр тәүҙә һөйләр, аҙаҡ уйлар.
3. Йәй санаңды, ҡыш арбаңды әҙерлә.
4. Ҡаҙанға яҡын барһаң, ҡоромо йоғор, яманға яҡын барһаң, бәләһе йоғор.
5. Яңы һепертке яңыса һеперә.



## ФӘРЗӘНӘ АҠБУЛАТОВА (1960)

Фәрзәнә Фәтих ҡыҙы Аҡбулатова 1960 йылдың 1 февралендә Башҡортостандың Хәйбулла районы Үрнәк ауылында тыуған.

Фәрзәнә Аҡбулатованың «Атай икмәге», «Зәңгәр ҡаялар» исемле китаптары донъя күрҙе.

1996 йылда «Ҡорбанлыҡ йәки ябай ғына алыш-биреш», «Тәгәрмәс ҡала йәки донъя кендеге» тигән фантастик повестары һәм «Атай икмәге» исемле китабы өсөн уға Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы бирелде.

### АТАЙ ИКМӘГЕ

#### I

Быйыл яҙ иртә килде. Һуңғы ике көн эсендә тау һыртындағы ҡарҙар иреп бөттө. Урамдан шаулап гөрләүектәр аҡты. Тик өйҙәрҙең һалам ҡыйыҡтары ғына, ҡарҙан әрселгәс, меҫкен ҡиәфәткә инде. Ҡайһы ере — балсыҡ, ә ҡайһы ере һыйыр тиҙәге менән һыланған, яртылаш ергә һеңгән был өйҙәр халыҡтың күргән нужаһы тураһында әллә ҡайҙан ҡысҡырып һөйләп торалар һымаҡ.

Шулай ҙа яҙ — яҙ инде. Ауылда ғәҙәттә булмаған йәнлелек һиҙелә. Миҙхәт менән Мотаһар ҙа өйҙә ятып түҙә алманы. Әсәләренең тыйып китеүенә ҡарамаҫтан, тупһаға сығып ултырҙылар. Ә бер аҙҙан, ҡыйыулыҡ итеп, епшек ҡарға аяҡ баҫтылар. Ҡыш буйы өйҙә ятып алҡҡан тәндәрен яҙыр өсөн, талды ат итеп ялан аяҡ әле был яҡҡа, әле теге яҡҡа саптылар.

Йорт хужаһы Ғәлләм ағай һуғыштың тәүге көндәрендә үк, ҡатынын, береһенән-береһе бәләкәй ике улын ҡалдырып, фронтҡа китте. Уны оҙатҡанда, кесе улы Мотаһар атламай ҙа ине әле. Атаһын бөтөнләй хәтерләмәгәнгә күрә: «Атайым

былаймы, атайым тегеләйме?» — тип Маһикамал апайҙың да, Миҙхәттең дә теңкәһенә тейеп бөтә. Ә һуңынан ишеткәндәрен үҙе күргән төҫлө итеп һөйләп йөрөй. «Атай миңә, ҙур булып үҫ, тип әйткәйне, үәт», — тип ҡуя. Ҡайһы берәүҙәр йәлләйҙәр, икенселәре: «Ә һин нимә тип яуап бирҙең?» — тип һорайҙар. Мотаһар, күҙҙәрен ҙур асып, тотлоға-тотлоға һөйләргә керешә: «Мин, ҙур булам, тинем. Өй түбәһен төкөгәнсе үҫәм, тинем. Юҡ, бына хәҙер үк төкөйөм», — тип стенаға бәрелеп ала. Башын ауырттырһа, аҡланып та ҡуя: «Ныҡ ҙур булһаң, ныҡ төкөй ҙә ҡуяһың шул».

Миҙхәт атаһын томанлы ғына булһа ла хәтерләй. Шуға ҡустыһы һөйләгәндәргә төҙәтмә индереп тә ебәрә.

Бына ошо балалар һуғыштың дүртенсе яҙын ҡаршылайҙар. Мотаһар, һыуыҡтан ҡаҙ тәпәйе кеүек ҡыҙарған аяҡтарын ыуа-ыуа, ағаһына өндәште:

— Ағай, әйҙә тупһала ғына уйнайыҡ!

— Сыҡҡанға яңы ғына, өшөнөң дәме?

— Аяҡтарым туңды, әйҙә инде!..

Миҙхәт һуҡрана-һуҡрана өйгә табан китә:

— Бешмәгән булып сыҡтың бит, ә! Етмәһә, мин һалдат булам, тигән була.

Үҙенең аяҡтары туңһа ла, ағай булараҡ, ул сер бирергә теләмәй. Мотаһарҙың бик тә һалдат булғыһы килә, шуға ла ул да яуапһыҙ ҡалмай:

— Нишләп булалмай, ти?

— Була алаһың инде, — тип ирештерә тупһаға килеп ултырған Миҙхәт. — Йә, нимә уйнайыҡ?

— Сәй эскән булып, йәме?

— Ҡыҙҙар уйыны бит ул.

— Аһ-аһ, ниңә, беҙ ҙә сәй эсәбеҙ бит.

Миҙхәт, ҡустыһы менән һүҙ көрәштереүҙе файҙаһыҙға һанап, ҡул ғына һелтәне: «Яһа».

Мотаһар, мыш-мыш килеп, үҙе йыйған сынаяҡ ярсыҡтарына «сәй яһай» башланы.

— Ниңә һөт ҡоймайһың?

— Ағай, әсәйем һыйырҙы һатты бит, шуға һөтһөҙ генә эсерәм.

Миҙхәт, әсәһенең көҙөн үк һыйырҙарын һатып ебәргәнен хәтерләп, көрһөнөп ҡуйҙы. Хәйер, ҡыш сығарырлыҡ һаламы булһа, һатмаҫ ине лә...

— Беҙ бында юрый ғына сәй эсәбеҙ. Шулай булғас, һөт тә бар, төшөндөңмө? Ана, башмағыбыҙ һыйыр булған, тип уйнайыҡ.

— Ярар, — тип Мотаһар баш ҡаҡты ла балсыҡ киҫәктәрен теҙә башланы. — Икмәк аша, ағай, бына, эй күп улар... — Ҡапыл иламһырап, Миҙхәткә төбәлде: — Асыҡтым, ағай.

— Туҡта, ҡустым, уйнап бөтәйек.

— Эй-й, мин бүтән уйнамайым, ашағым килә... Эһ-эһ... — Мотаһарҙың күҙҙәренән йәш бөрсөктәре тәгәрләне.

— Үәт һине, туҡта инде! Үҙе ҙур, үҙе илай. Әсәйем ҡайтҡанды көтәйек. Хәҙер ашап, кисен ас ултырғың киләме?

— Минең бынау ерем ауырта. — Мотаһар ашҡаҙан тәңгәлен күрһәтеп уфтанды.

Миҙхәт уны тынысландырырға тырышты:

— Оҙаҡламай атайым ҡайтыр. Әсәйем, ул ҡайтһа, икмәк тә, картуф та мул булыр, ти бит, шуны ишетмәнеңме ни?

Миҙхәт үҙе лә шул көндө күҙ алдына килтерергә тырышты, ысынлап та, икмәк, картуф көн һайын булырмы икән?

Мотаһарҙың күҙҙәрендә шатлыҡ оскондары күренде:

— Атайым тиҙҙән икмәк алып ҡайта, эйе бит?

— Эй иҫәрһең дә инде! Ул нисек һуғыштан икмәк алып ҡайтһын, ти?

— Ниңә? Икмәк тә алып ҡайта ул. — Мотаһар ағаһын ышандырырға тырышты. — Атайым беҙҙең гел асыҡҡанды белә лә инде. Ағай, әйҙә, мейес эсен ҡарайыҡ, картуф онотолоп ҡалманымы икән?

Миҙхәт ҡустыһының ниәтен кире ҡағырға батырсылыҡ итмәне. Бына Мотаһар мейес эсенә инеп китте. Бер аҙҙан уның төшөнкө генә тауышы ишетелде:

— Юҡ...

Һүҙ юҡ, Миҙхәт үҙе лә бик асыҡты. Эсен нимәлер семетеп-семетеп ала. Өйҙә картуф бар барын, әммә әсәһе, уларҙы хисаплап, көндәгеһен көнгә бүлеп ҡуйған. Һике аҫтындағы кискә бешерергә тигәндәренән икене генә алып... Юҡ, әсәһе туҡмар. Ул эштән арып ҡайта, әрләп тә, сәпәп тә ебәргән саҡтары була.

Мотаһар йәнә көйһөҙләнә башланы:

— Ана, Хәҙисә инәйҙең мейесенән төтөн сыға. Ашарға бешерәләрҙер әле.

— Сеү, тим бит. Мин дә асыҡтым, ә бер ҙә иламайым. Түҙ!

Шулай тиһә лә, Миҙхәт түҙмәне, ике бөртөк картуфты усына ҡыҫты. Хәҙисә инәйҙән бешертеп алырғамы әллә?

Түрбашта ни менәндер булашып йөрөгән Хәҙисә әбей ишек тауышына әйләнеп ҡараны.

— Кем икән, тип торам, һинме ни, Миҙхәт балам? Әйҙә, уҙ.

— Юҡ, үтеп тормайым. Ошо ике картуфты бешереп кенә бир әле, инәй. Беҙҙең мейескә ут яғылмаған.

— Картуф тиһеңме? Аһ-аһ, бешерермен, ниңә бешермәй, ти! Бына үҙем дә балаларға берәй нәмә әтмәлләп йөрөй инем, — тине Хәҙисә әбей ейәндәре яғына күрһәтеп.

Миҙхәт тиҙерәк өйҙәренә йүгерҙе.

— Мотаһар, булды! Тиҙҙән картуф ашайбыҙ.

Ҡустыһы шатлығынан урындыҡта тәгәрләй башланы.

— Ура-ура!

— Эй, һин, туҡта әле! Ашауын ашарбыҙ, ә әсәйгә нимә тиербеҙ? Үәт бит.

— У-у-у, беҙҙең әле картуф күп тә инде. Ашап та бөтә алмаҫбыҙ әле, ысын, атайым ҡайтҡансы.

Миҙхәт уның аңралығына аптырап ҡуйҙы. Атаһы ҡайтһа, имеш, уның ҡасан ҡайтыры билдәһеҙ шул. Әсәһе генә ул, тиҙҙән ҡайтыр, ти, ә тиҙҙең һаман тиҙ булғаны юҡ.

Ниһайәт, картуф артынан барыр ваҡыт етте. Миҙхәт күршеләренә дөбөр-шатыр барып инде һәм урындыҡ өҫтөндә сыр-сыу килеп илашып ултырған балаларҙы күрҙе лә аптырап туҡтап ҡалды.

— Инәй, мин картуфҡа килгәйнем...

— Һинме был, балаҡайым? Нимә тип кенә аҡланайым икән һуң, Хоҙай тәғәлә? Бынау ҡара йөҙҙәр, мин урамдан ингәнсе, бөтә картуфты мейестән ала һалып, ҡырып-һепереп ашап бөткән дә ҡуйғандар бит. Тымығыҙ, тим, ҡороғорҙар, тауышығыҙ сыҡмаһын!

Миҙхәттең ҡапыл теҙ быуындары ҡалтыраны, ул, ҡолап китеүенән ҡурҡып, ишек яңағына һөйәлде. Хәҙисә әбей һаман ейәндәрен орошто:

— Мин юҡта ризыҡҡа тейеп кенә ҡарағыҙ! Бына күрәһегеҙме? — Ул ҡулындағы шыйыҡ сыбыҡты һелкеп алды.

Балалар, ҡурҡышып, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ илай башланы. Уларҙың тауышы Миҙхәтте һиҫкәндерҙе, башын түбән эйгән малай сығырға боролдо.

— Балам, тороп тор, риза итәйем. — Ҡулына бер туҫтаҡ ҡатыҡ тотҡан Хәҙисә әбей уға табан атланы. — Күптән ҡатыҡ күргәнегеҙ юҡтыр. Аҡ менән туҡланған кеше һау була ул.

Миҙхәт ҡатыҡты алырға ла, алмаҫҡа ла белмәне. Уның был балалар ризығы икәнен яҡшы аңлай ине, тик Мотаһарҙы күҙ алдына килтергәс, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡулы һауытҡа табан һуҙылды. Күҙ йәштәрен еңе менән һөрткәс, Хәҙисә әбейҙең ягымлы йөҙөнә баҡып, ишетелер-ишетелмәҫ кенә бышылданы:

— Ҙур рәхмәт, инәй... — Ул туҫтаҡты әләктерҙе лә сығып ысҡынды.

Мотаһар, ағаһы килеп инеү менән, уның ҡулына йәбеште.

— Бештеме, ағай, бештеме?

— Ҡустым, Ғәлиәләр беҙҙең картуфты белмәйенсә ашаған да ҡуйғандар, һин уны әсәйемә әйтмәҫһең, йәме. Ә Хәҙисә инәй беҙгә ҡатыҡ бирҙе.

Мотаһар ул һөйләгәнде әллә ишетте, әллә юҡ, ашығаашығa ҡатыҡ һемерергә тотондо. «Миңә лә ҡалдырмаҫмы икән?» — тип уйланы Миҙхәт. Ас мәлдә икенсе берәүҙең ашағанын ҡарап тороуҙан да ауыр нәмә юҡтыр. Миҙхәт, ғазап сигә-сигә, төкөрөктәрен эскә йотто. «Ярар, мин түҙермен. Әсәйем ҡайтырға ла күп ҡалманы инде», — тип йыуатты ул үҙен. Мотаһар ҡатыҡты эсеп бөткәс, буш туҫтаҡтың ситен бармаҡтары менән һыпырып ялап ҡуйҙы. Тағы әҙ генә булғанда, их, юҡ шул...

Маһикамал апай эштән ғәҙәтенсә һуң ғына ҡайтты. Мотаһар, әсәһе инер-инмәҫтән, уға ҡаршы йүгерҙе:

— Әсәй, беҙ картуф ашаманыҡ, ысын!

Миҙхәт ирендәрен ауырттырғансы тешләне, ышан был Мотаһарға, әйтмәй, имеш.

— Ашаманыҡ, ағай, эйе бит. Беҙ уны, беҙ уны... — Ул, ағаһының әйтмәҫкә ҡушыуын хәтерләп, шып туҡтаны.

Маһикамал апай, былар нимә һөйләй әле, тигән шикелле аптырап ҡарап торҙо ла, һике янына килеп, картуфтарҙы барланы.

— Икәүһе ҡайҙа?

Миҙхәт өндәшергә ҡыйманы, бары тик Мотаһар ғына әсәһе янында уралды:

— Беҙ уны, беҙ уны... Әсәй, беҙгә атайым тиҙҙән картуф, икмәк алып ҡайта, эйе бит?

Маһикамал апай берсә эргәһендә һөйләнеп торған бәләкәсенә, берсә күҙҙәрен аҫҡа төбәгән ҙур улына ҡарап уфтанды. Бына Миҙхәт, әкрен генә атлап, әсәһе янына килде һәм башын түбән эйгән килеш:

— Беҙ теймәҫ инек, әсәй... Беҙ теймәҫ инек... — тине, уның тауышы ҡалтыранды. Әсәһе ауыр эштән ҡытыршыланған һөйәлле ҡулдарын улының иңенә һалды.

— Беләм, теймәҫ инегеҙ, балам. Эх, был һуғыш...

Күңелһеҙ тынлыҡты боҙоп, Мотаһарҙың сағыу тауышы яңғыраны:

— Мин һуғышты еңәм, әсәй!

Йылына башлаған көндәр тағы һыуынды. Ҡар яуып, ер өҫтөн ҡаплағас, яңынан ҡыш булды ла ҡуйҙы. Миҙхәт менән Мотаһар өйҙә генә ултыралар. «Ҡар ниңә йылы булмай икән, мин сығып ҙа йүгерер инем», — тип бошоноп ала Мотаһар. Ул үҙе әллә ашау яғы насар булғанғамы, әллә һалҡын алдырҙымы, йыш ҡына ауырый башланы, төндәрен туҡтауһыҙ йүткереп сыға.

Маһикамал апай күҙгә күренеп шиңгән бәләкәсенә нисек ярҙам итергә белмәй.

— Ах, һыйырыбыҙ юҡ бит, исмаһам, балаҡайҙарым, былай уҡ бирешмәҫ инек, — тип зарлана ул.

— Һыйырыбыҙҙы теге олатайҙарҙан алайыҡ та ҡайтайыҡ, — тип үҙенсә кәңәш бирә Миҙхәт. Маһикамал апай күңелһеҙ генә йылмая:

— Анһат ҡына уйлайһың...

— Их, тиҙерәк башмағыбыҙ ҙурайһын ине. Беҙҙең дә Хәҙисә инәйҙәрҙеке кеүек ҡатығыбыҙ булыр ине, эйе бит, әсәй? Әллә ниңә мин дә, башмағыбыҙ ҙа үҫмәй ҙә ҡуябыҙ, — тип Мотаһар ҙа һөйләнеп ала. Уның һүҙҙәренән һуң Миҙхәттең йөрәге әрней.

Һуңғы көндәрҙә Мотаһар үтә ябыҡты. Бөгөн дә хәле шәптән түгел, ахырыһы, сырайын һытып, көс-хәл менән тын алып ултыра. Нисек күңелен күрергә һуң?

— Мотаһар, әйҙә, күмер алайыҡ та, иҙәнгә һүрәт төшөрәйек.

Мотаһар баш сайҡаны:

— Эй-й-й, мин төшөрә белмәйем.

— Белмәһәң, өйрәтәм. Кил, ат эшләйек. Бына, ҡара әле, нисек шәп сыға. — Миҙхәт үҙе төшөргән рәсемгә һоҡланып

ҡарап торҙо. Мотаһар өндәшмәгәс, уның яғына боролдо. — Ҡана, ҡарайым әле, һин нимә төшөрҙөң?

Ул Мотаһар яһаған түңәрәктәрҙән бер нәмә лә аңлай алманы.

— Былар нимә була һуң ул?

— Аһ-һа, картуф икәне күренеп тора ла инде! Быныһы һиңә, быныһы миңә, быныһы әсәйемә, ә быныһы…

Миҙхәт уны һаҡ ҡына бүлдерҙе:

— Ҡара әле, ҡустым, мин һиңә картуф төшөрөргә ҡушмағайным да баһа, әйҙә уларҙы ҡояш итәйек.

— Юҡ, минең картуф төшөргөм килә! — Мотаһар ҡыҙып-ҡыҙып йәнә түңәрәктәр һыҙа башланы. Инде Миҙхәт асыуланды:

— Барыбер төшөрмәйһең! Ниңә гел картуф уйлайһың? Ашарға ҡайҙан алайым һиңә мин?

Миҙхәт ҡустыһының картуфтарын һөртөп алды ла ағас төшөрә башланы:

— Хәҙер яҙ етә бит, япраҡһыҙ ғына ағастар төшөрәйек беҙ.

Ул, ҡустыһының был тәҡдимгә ризамы, түгелме икәнлеген белер өсөн, уның яғына боролоп ҡарағанда, Мотаһар, урындыҡ аҫтына инә яҙып, ниҙер төшөрә ине. Миҙхәт әкрен генә уның янына килеп баҫты. Тағы түңәрәктәр.

— Картуфмы?

Мотаһар башын ҡалҡытты һәм, төшөргән һүрәтенә бармағы менән төртә-төртә:

— Юҡ, былары көлсә. Көлсә, ағай. Был ҙурҙары һиңә, әсәйемә, атайыма, ә был иң бәләкәсе миңә, — тине, үҙе аяныс йылмайып, Миҙхәткә баҡты. Әллә шул күҙҙәрҙән, әллә һүҙҙәрҙән тетрәнде Миҙхәт, таш һымаҡ ҡатты ла ҡалды. Быны үҙенсә аңлаған Мотаһар һүрәттәрен кәүҙәһе менән ҡапланы.

— Икмәккә теймә, ағай!..

Миҙхәттең бите буйлап күҙ йәштәре тәгәрәне.

1. I бүлек буйынса һүҙлек эше үткәрегеҙ.
2. *Теңкәһенә тейеү, йөрәк әрнеү, сырай һытыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә яңы үҙләштергән һүҙҙәрҙе лә ҡулланығыҙ.
4. Миҙхәт ҡустыһы Мотаһарға *бешмәгән* ти. Былай тип кешегә ҡайһы осраҡта әйтәләр? Ә *бешкән* тип әйтеү бармы?

5. Миҙхәт менән Мотаһар *һуғыштың дүртенсе яҙын* ҡаршылайҙар. Тимәк, ваҡиғалар нисәнсе йылда бара? Был балаларға нисә йәш? Асыҡлағыҙ.
6. Бала сағы һуғыш йылдарына тура килгән кешеләрҙең кисергәндәрен күҙ алдына килтерергә тырышығыҙ. Миҙхәт менән Мотаһарҙың сәй эсеп уйнау, иҙәнгә күмер менән һүрәт төшөрөү эпизодын ҡабатлап уҡығыҙ.

**93-сө күнегеү.** Тексттың беренсе бүлегенән рәүештәрҙе табығыҙ һәм һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

## II

Көндәр йылытты инде. Әммә һуңлап килгән яҙ Миҙхәттәрҙең өйөнә шатлыҡ алып килмәне. Кескәй Мотаһар бына нисә көн инде түшәктән тора алмай, ә көндәр йылытһа, һауығыр төҫлө ине бит!

Тубыҡтарын ҡосаҡлаған Миҙхәт тәрән уйға батҡан. Мотаһарҙың ара-тирә ыңғырашыуы ғына тынлыҡты боҙоп, өйгә ниндәйҙер хәсрәт өҫтәй. Миҙхәт ҡустыһы янына килде.

— Ыумасыңды эс инде, әсәйем, ашау барҙа — йәшәү бар, ти бит.

Мотаһар, күҙҙәрен йомған килеш, хәлһеҙ генә баш сайҡай, Миҙхәт тубыҡтарын ҡосаҡлай ҙа тағы уйға бата. Бөтә балалар урамда, ә уға ҡустыһын ташлап сығып китергә ярамай шул. Мотаһар тиҙерәк йүнәлһә, улар ҙа башҡалар һымаҡ йыуа, ҡуҙғалаҡҡа йөрөрҙәр ине. Уйҙары әсәһенә барып тоташты. Меҫкен әсәһе көнө буйы эштә, ә төнөн Мотаһар янында була. Был арала йонсоно, берүк үҙе ауырып китмәһен. Малай ҡустыһының тауышына һиҫкәнде.

— Нимә тиһең, ҡустым?

— Ҡояшты күргем килә...

Миҙхәт Мотаһарҙы күтәрҙе лә уның еңеллегенә аптырап ҡалды: мендәрҙән дә ауыр түгелдер, моғайын. Ә ҡышҡыһын ул ҡустыһын саҡ-саҡ күтәрә торғайны...

Миҙхәт уны болдорға алып сыҡҡас, артына мендәр ҡуйып, рәтләп ултыртты. Ауырыу бала күҙҙәрен сытырлатып йомдо. Әллә ҡояш үтә сағыу булғанғамы, уның бите буйлап күҙ йәштәре тәгәрләне.

— Йә, ҡустым, һиңә рәхәтме? Ыумасыңды эсәһеңме?

— Юҡ, үҙең эс...

— Кит, улай тимә. Беләһеңме, бөгөн Ғәлиәләр йыуаға китте. Һиңә лә алып ҡайтабыҙ, тинеләр. Әсәйем тағы ла тәмлерәк итеп ашарға бешерер. Хәҙер көндәр һәйбәт, инде һин терелерһең.

Ә сабыйҙың бите буйлап күҙ йәштәре аҡты ла аҡты.

— Минең шәбәйгем килә, ағай...

Ул әллә тороорға теләне, ҡапыл ҡалҡына бирҙе лә мендәренән шыуып төштө.

— Уй, Мотаһар, нимә эшләйһең?

Ҡустыһы өндәшмәне.

— Мотаһар! Мотаһар!

Ниндәйҙер бәләнең яҡынлашҡанын тойған Миҙхәт ҡустыһын индереп түшәккә һалды ла күршеләргә йүгерҙе.

— Инәй, Мотаһарға әллә ни булды ла ҡуйҙы! — тип ҡысҡырҙы ул, күҙ йәштәренә төйөлә-төйөлә. Хәҙисә әбей, Мотаһарҙы барып күргәс, Миҙхәтте әсәһенә ебәрә һалды.

— Иҫен юғалтҡан бит, балаҡайым, бар, тиҙерәк әсәйеңә хәбәр ит!

Кисен Миҙхәткә күршеләрҙә ҡунырға ҡуштылар.

— Балам, беҙҙә генә йоҡла. Мин әсәйең янында ҡалам, — тине уға Хәҙисә әбей. Малай башҡа ваҡыттағы шикелле киреләнеп торманы, ҡустыһы янына барып әкрен генә уның сәсенән һыйпаны һәм ҡапыл боролоп сығып китте.

Төнөн ул төш күрҙе. Атаһы ҡайтҡан, имеш. Тик бына Мотаһар әллә ҡайҙа булған да ҡуйған. Миҙхәт, уны эҙләп, әле был, әле теге яҡҡа йүгерҙе. Күпмелер ваҡыт йөрөгәс, алыҫта ҡустыһын күреп ҡалды. Ҡыуып еттем, тигәндә генә, Мотаһар ҡошҡа әйләнеп осто ла китте. Миҙхәт ҡоштоң артынан йүгерә, ҡысҡыра...

Уны Хәҙисә әбей уятты:

— Балам, икенсе яғыңа әйләнеп ят, һаташаһың.

Миҙхәт башта үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңламаны, иҫенә төшкәс, һикереп тороп ултырҙы.

— Юҡ, мин үҙебеҙгә ҡайтам.

— Иртә әле, балам, таң да атмаған, ят, ят.

Ул һуң ғына уянды. Күҙен асҡанда, Хәҙисә әбейҙең ейәндәре сыр-сыу килешәләр ине. Уларҙың иң ҙурыһы Ғәлиә Миҙхәттең янына килде:

— Ә һин беләһеңме, Мотаһар үлгән бит.

Миҙхәттең йөрәге жыу итеп китте. Ул бер аҙға тораташтай ҡатып ҡалды. Унан, үҙен үҙе белештермәйенсә, Ғәлиәгә барып йәбеште.

— Алдама-а!

Ҡыҙыҡай күҙҙәрен сылт-сылт йомдо, ҡалтыранды.

— Мин әбейҙәрҙең һөйләшкәнен тыңлап торҙом. Бәлки…

Миҙхәт ишеккә ташланды. Ләкин ул тыштан бикле ине. Малай бар көсөнә ишекте этте.

— Асығыҙ! Ас!

Күпме ҡысҡырғандыр ул, әммә бер кем дә ярҙамға килмәне. Өйҙәге балалар уға ҡушылып иланы. Бер ни күрмәй, бер ни ишетмәй, Миҙхәт үкһене лә үкһене. Күҙ йәштәре бөттө, тауышы ҡарлыҡты, ә ул йәшһеҙ-тауышһыҙ һаман иланы. Ахырҙа, өҙөк-өҙөк һулҡылдап, иҙәнгә йөҙ түбән ҡапланды. Һәм шул килеш йоҡлап китте.

— Балам, тор, ҡустың менән хушлашып ҡал, — тип уятты уны Хәҙисә әбей.

Миҙхәт аңламаны, нисек хушлашырға? Әллә Мотаһарҙы бер ҡайҙа алып китәләрме? Үлгәндәр менән нисек хушлашып булһын, улар ишетәләрме ни? Тимәк, Ғәлиә яңылыш аңлаған.

Бөтә күк йөҙөн ҡаплап сәүкәләр оса. Миҙхәт төшөндә ниндәй ҡош күргәнен хәтерләргә тырышты. Ниндәй ҡош һуң? Күгәрсенме, турғаймы? Юҡ, ул Мотаһар ине бит. Мотаһар — ҡош.

Хәҙисә әбей уны етәкләп алды.

— Атла, балам.

Ниңә һуң бөгөн сәүкәләр бөтә күк йөҙөн ҡаплаған? Ә кем әле, сәүкәләр түбәндән осһа, ямғыр яуа, тип әйткәйне? Мотаһар, бер көн көтөп-көтөп тә, ямғыр яумағас, сәүкәләр алдаҡсы, тигәйне…

— Инәй, ул йоҡлай ғыналыр. Бәләкәйҙәр ҡаты йоҡлай бит ул. Инәй, ул һуңғы ваҡытта төндәрен дә йоҡлай алмай торғайны.

Әбейҙең өндәшмәүе Миҙхәттең күңеленә шом һалды. Мотаһар бер ҡасан да: «Сәүкәләр оса, бәлки, ямғыр яуыр!» — тип һөрән һалмаҫмы?

— Юҡ!

Миҙхәт бөтә кәүҙәһе менән ҡалтыранды. Хәҙисә әбейҙең ҡулынан ысҡынып, өйҙәренә ҡарай йүгерҙе.

Ишек алдында ике-өс ҡарт күренә. Миҙхәт, былар мине тотҡарлай күрмәһендәр тигәндәй, дөбөр-шатыр өйгә килеп инде. Эстә әбейҙәрҙе күргәс, тағы туҡталды. Ни эшләйҙәр улар бында? Әбейҙәр малайға ин тип тә, сыҡ тип тә өндәшмәнеләр. Миҙхәт, һаҡ ҡына атлап, урындыҡта ятҡан ҡустыһы янына килеп баҫты. Ә Мотаһар, күҙҙәрен йомған килеш, тып-тын ята. Тып-тын. Элекке кеүек ыңғырашмай ҙа, сырайын да һытмай. Күҙҙәрен, тик бына күҙҙәрен генә асһасы…

— Мотаһар, ҡустыҡайым, мине ишетәһеңме?

Ҡустыһы уға яуап бирмәне. Миҙхәт йәш тулы күҙҙәрен унан оҙаҡ ала алмай торҙо. Ҡот осҡос дөрөҫлөккә бер нисек тә ышанырға теләмәне, һаман да Мотаһарҙың уянырын көттө.

— Мотаһар, һин йоҡлайһың ғына, эйеме?

Әммә уның һорауы яуапһыҙ ҡалды. Миҙхәт әбейҙәр яғына боролдо. Малайҙың ялбарыулы ҡарашы әле был, әле теге әбейгә төбәлде, ләкин ул теләгән яуап ишетелмәне. Кемдер һаҡ ҡына уның яурынына ҡағылды. Әсәһе ине. Миҙхәттең күҙенән йәштәр тәгәрләне.

— Әсәй, ниңә улай булды икән? Юҡ, ул барыбер үлмәгән!..

Бына ҡарттар ҡабыҡҡа һалынған кескәй Мотаһарҙы алып сығалар. Миҙхәт әсәһенең ҡулынан ысҡына ла уларҙың артынан йүгерә.

— Алып китмәгеҙ! Алып китмәгеҙ, олатайҙар! — Үҙен тыңламағандарын күргәс, ҡысҡырып иларға тотона.

— Туҡта, олатай, туҡта!

Миҙхәтте тотоп алалар, ул сәбәләнеп ысҡынырға тырыша.

— Мотаһар! Ҡустым!

Ҡарттар артынан йүгерә.

— Туҡтағыҙ! Ҡарайыҡ, ҡарайыҡ, үлмәгән бит ул! Ниңә туҡтамайһығыҙ һуң?

Был айырылышыуҙың мәңгелек икәненә ул бер нисек тә ышанырға теләмәне. Нимәгәлер әләгеп ҡоланы. Торҙо ла аҡһай-аҡһай зыярат яғына атланы.

1. Эҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә?
2. Мотаһарҙың ауырып китеү сәбәбен аңлатығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Мотаһарҙың үлемен Миҙхәт нисек кисерә?

**94-се күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырҙарынан алынған һөйләмдәрҙән рәүештәрҙе табығыҙ, һорауҙар ҡуйығыҙ.

1. Аҡбуҙ атты менеп, күк бурҙайҙы алып,
Яңғыҙ сығып киттем һунарға. *(«Исламгол»)*
2. Күп йылдарға беҙгә яҙһын инде
Яңынан-яңы килеп йәйләргә. *(«Юрмый буйы»)*
3. Ҡарағай ҙа урман ҡая бите
Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта. *(«Тәфтиләү»)*
4. Алыҫ ҡына ерҙән, һай, күренгән —
Ағиҙелкәй башы Ирәмәлтау микән? *(«Шоңҡар»)*
5. Үтеп кенә киткән йәш ғүмерем
Кире килмәҫ инде әйләнеп. *(«Ғайса»)*
6. Ашағанҡай бөтә, кейгән туҙа,
Татыу йәшәүҙәргә ни етә? *(«Татыу йәшәүҙәр»)*
7. Һауаларҙа килә, әй, ағылбай,
Ҡыйғас-ҡыйғас оса ем тапмай. *(«Яҙғы мәлкәй»)*
8. Иҫән генә йөрөп, һауҙар ҡайтһын
Ғәзиз атаң, ошо теләгем. *(«Сәңгелдәк йыры»)*

Һеҙгә билдәле булыуынса, һәр бер башҡорт халыҡ йырының тарихы, легендаһы бар. Үҙегеҙгә оҡшаған бер йыр һүҙҙәренә ҡарап, уның тарихын уйлап яҙығыҙ.

## III

— Улыҡайым! Һуғыш бөткән!

...Миҙхәт башта был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнә алмай, аңына барып еткәс, шатлығынан ҡысҡырып ебәрә лә әсәһенең ҡосағына ташлана.

— Бөткән? Нисек бөткән? Инде һуғыш булмаймы, әсәй?!

Маһикамал апай, күҙ йәштәренә төйөлә-төйөлә, улын күкрәгенә ҡыҫа.

— Булмай!.. Еңгәндәр! Ниндәй бәхет, балам!.. — Шатлығынан иҫергән әсәнең тыны ҡыҫыла, ул әкрен генә сүгәләп төшә.

— Зиһенем таралды, Миҙхәт. Бар, Хәҙисә инәйеңдәргә йүгер. Һөйөнсө... Һөйөнсө ал... Әле бөтәһе лә белмәй. Идараға яңы ғына хәбәр иттеләр... Әле мин...

Миҙхәт әсәһенең әйтеп бөткәнен дә көтмәй урамға атыла...

— Кешеләр! Ишеттегеҙме?!

Шатлыҡлы хәбәр тиҙ тарала икән. Күҙ асып йомғансы урам халыҡ менән тулды ла ҡуйҙы. Кешеләр бер-береһен ҡотлайҙар, илайҙар.

Миҙхәт тә башҡа балалар менән көнө буйы урамда сапты. Күптән ишетелгән был ҡыуаныслы хәбәрҙе, өйҙән өйгә йөрөп, ҡабат-ҡабат һөйөнсө алдылар.

Миҙхәт кисен оҙаҡ ҡына йоҡлай алманы. «Һуғыш бөткән»дең мәғәнәһенә ныҡлап төшөнөргә тырышты. Башҡаса бер ҡасан да һуғыш булмаҫмы? Иҫ белә башлағандан, һуғыш һүҙенә күнеккән меҫкен бала, һуғыш дауам итә лә итә, шулай булған һәм шулай буласаҡ, тип уйлай торғайны шул. Ахыр сиктә ул үҙенә ҡыҫҡырып һорау бирҙе:

— Хәҙер бер дошман да ҡалманымы икән?

Көндәр үҙ яйы менән үтә торҙо. Хәҙер фронттан ҡайта башлаусылар ҙа күренде, тик Миҙхәттең атаһы ниңәлер һаман ҡайтманы. Малай һәр көн һайын атаһын түҙемһеҙлек менән көттө. Ә ул ҡайтманы ла ҡайтманы. Хәҙер Миҙхәткә атаһының хатындағы «тиҙҙән ҡайтырмын» тигәне мәңге шулай дауам итер ҙә, ә үҙе бер ҡасан да ҡайтмаҫ кеүек тойола башланы.

Һуңғы ваҡытта ул Мотаһар ҡустыһын йыш иҫләй, һәр нәмә уны хәтерләтә лә тора. Миҙхәт ҡустыһы менән нисек уйнағандары, һөйләшкәндәре тураһында әсәһенә ҡабат-ҡабат һөйләр булып китте. Мотаһарҙың ҡәберенә барып, үҙенең яңылыҡтарын һөйләп ала. Нишләптер, уға ҡустыһы тыңлап яталыр һымаҡ тойола ине.

Миҙхәт, көнө буйы балыҡта йөрөп, эңер төшкәс кенә ҡайтып инде. Әсәһенең эштән ҡайтыуына бешереп ҡуйырға тигән балыҡтарын таҙартырға йөрөгәндә, ишек асылған тауышҡа һиҫкәнеп, башын ҡалҡытты һәм ҡатып ҡалды. Уның алдында һалдат кейемендә бер ағай баҫып тора ине.

Миҙхәт һикереп торорға итте — хәле етмәне, ҡысҡырырға теләне — тауышы сыҡманы. Бына һалдат уға табан ҡулдарын һуҙҙы.

— Улыҡайым!

— Атай! Атай!

Күҙ асып йомған арала, Миҙхәт күптән, бик күптән көткән атаһының ҡосағында ине инде. Ата улын һөйҙө:

— Йә, илама инде, улым, беҙ ирҙәр бит. Ҡайһылай ҙурайып киткәнһең! — Ул улының күҙҙәренә ҡарап торҙо ла тағы ҡосаҡланы.

— Беҙ һине шундай көттөк. Көнөн дә, төнөн дә әсәйем юлдан күҙен алманы. Ә мин... Мин, ҡайта алмаçһың, тип ҡурҡҡайным. Мотаһар ҙа көттө... Атай, ул... ул...

— Улым, йә...

— Атай, һин иртәрәк ҡайтһаң, ул үлмәç ине...

Был һүҙҙәрҙе ишеткән Ғәлләм ағай тетрәнде. Күҙҙәрен ҙур асҡан килеш, улына ҡарап ҡатып ҡалды.

— Ниңә, улым, был турала бер нәмә лә яҙманығыҙ?! — тип һыҡранып өндәште ата.

Миҙхәт ни тиергә лә белмәне. Әсәһенең «атайыңдың ҡайғыһын арттырмайыҡ, яҙмай торайыҡ» тигәнен әйтергәме ни?

Улын ҡосаҡлаған килеш, оҙаҡ өнһөҙ ултырҙы Ғәлләм ағай. Нимә тураһында уйлағандыр ул был ваҡытта, кем белә...

Бына ул иçән ҡалған ҙур улына һағыш та, мөхәббәт тә сағылған күҙҙәрен тултырып ҡараны һәм тағы ла нығыраҡ ҡосаҡланы:

— Юҡ, йәшәргә тейеш һеҙ! — Атаның күҙҙәре йәшле ине... Миҙхәт уға нығыраҡ һыйынды.

— Атай, инде бер ҡайҙа ла китмәйһеңме?

— Юҡ, улым, һеҙгә ҡайттым. Тик ниңәлер әсәйең һаман ҡайтмай...

— Мин хәҙер уның янына барып киләм, атай! Эштәре бөтөргә тейеш.

Миҙхәттең әйтеүе булды, ишектән Мәһикамал апай күренде.

— Ғәлләм!

Бына ул илай-илай ғәзиз кешеһенә ташланды.

— Йә Хоҙа! Күрер көндәрем бар икән!

Маһикамал апай оҙаҡ тыныслана алманы, бәйләнешһеҙ оҙаҡ-оҙаҡ һөйләнде:

— Килеп һөйөнсөләнеләр. Сығып йүгергәнемде лә, килеп ингәнемде лә белмәйем, Хоҙайым! Ах, Ғәлләм! Ғәлләм! Именһау!..

Ғәлләм ағай уны ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫҡан килеш йыуатты:

— Йә инде, Маһикамал... Бына теремен. Хәҙер илашырға түгел, шатланырға кәрәк. Тыныслан, әсәһе, йә...

Ҡатынының яурынынан тотоп, күҙҙәренә ҡараны ла:

— Үҙегеҙҙең хәлдәр нисек һуң? Нисек көн иттегеҙ, Маһикамал? — тип һораны.

— Илдә сәпсек асҡа үлмәй... Бына үҙең күреп тораһың.

— Еңдек, Маһикамал! Еңдек, улым! — Ир ҡәҙерле кешеләрен тағы ла ҡосаҡланы. — Былдай ҡайғы-хәсрәттәрҙе башҡаса бер ҡасан да күрмәҫһегеҙ! Тик... Ниңә улай булып ҡуйҙы, Маһикамал?..

Ҡатыны, һүҙҙең бәләкәстәре — Мотаһар тураһында барғанын аңлап, күҙҙәрен йомоп бышылданы:

— Аҡылдан яҙырлыҡ хәлдәр... Ҡулымдан килһә, үҙ йәнемде биргән булыр инем! Һаҡлай алманым бит!.. Көнөн-төнөн йөрәк әрней... Ниҙәр генә ҡылайым һуң?!

— Йүгерә-атлай ҡайтып киләм. Ә үҙем ҙур улымды етәкләгәнмен, бәләкәсен елкәмә ултыртҡанмын... Селпәрәмә килде... Ниңә һуң хатҡа яҙманың! Ошо минутҡа тиклем бер нәмә лә белмәнем бит мин...

— Сеү-сеү, Ғәлләм... Һиңә ут эсендә былай ҙа ауыр ине. Етмәһә, һуғыш бөтөп килгән мәл. Әйләнеп ҡайта алмаҫһың кеүек тойолдо. Ошо балаң хаҡына тере ҡайтыуыңды теләнем. Әгәр был ҡайғыны ишетһәң... Юҡ, юҡ...

Ир кеше нык була. Ғәлләм ағай кеүек ут-һыу кискәндәре бигерәк тә үҙҙәрен тиҙ ҡулға ала беләләр. Хәҙер ул үҙе ҡатынын тынысландырырға тырышты.

Тағы бер яугирҙың әйләнеп ҡайтҡанын ишеткән ауыл халҡы ла йыйыла башланы. Улар үҙҙәре менән өйгә ниндәйҙер күңеллелек тә алып килде. Маһикамал апай бер аҙ тынысланып, башҡорттоң борондан килгән йолаһы буйынса, ҡунаҡтар өсөн сәй ҡайнатырға йүгерҙе.

Күҙ йәштәре лә кибеп өлгөрмәгән ҡатын, бәхетле йылмайып, ауылдаштарын табынға саҡырҙы. Йәше лә, ҡарты ла

һаман килә бирҙе. Уларҙы ҡаршы алыусы атаһынан Миҙхәт бер тотам да ҡалманы. Сәй эсергә ултырғас, әсәһенең: «Ҡуй, балам, атайыңды йонсотоп бөтмә, ҙурһың бит инде», — тиеүенә ҡарамаҫтан, тубығына менеп үк ултырҙы.

Атаһы алып ҡайтҡан икмәкте табынға ҡуйҙылар. Бындай икмәкте Миҙхәт ғүмерендә лә күргәне юҡ ине әле.

— Атай, ниңә был дүрткел? Әсәйем бешергән көлсәләр йә оҙонса, йә түңәрәк булалар, — тип ғәжәпләнгән ҡарашын атаһына төбәне. Үҙе шунда уҡ, табындағыларҙың көлгәнен ишеткәс, оялып, йөҙөн атаһының күкрәгенә йәшерҙе. Тере булһа, ҡустыһы ла ошолай иркәләнер инеме икән?.. Ул, оялғанын да онотоп, тиҙ генә башын ҡалҡытты:

— Атай, ә Мотаһар гел һинең икмәк алып ҡайтырыңды көттө. Бәләкәй булғас, аңламағас, ул һуғыштан икмәк тә алып ҡайталар, тип уйлай торғайны, эйе бит, әсәй?

Кешеләрҙең йөҙө уйсанланды. Маһикамал апай яулығы менән күҙен һөрттө.

— Шулай булды, балам... Тик үҙе генә...

Барыһы ла тын ҡалды. Һәр кем һуғыш күрһәткән ҡайғы-ғазаптарын ирекһеҙҙән иҫенә төшөрҙө. Бер аҙҙан ҡайғыһын эсенә йәшергән Ғәлләм ағайҙың тауышы ишетелде:

— Миҙхәт, иртәгә ҡустың ҡәберенә икмәк алып барырбыҙ. Ул шатланасаҡ, сөнки атаһы һүҙендә торҙо. Күрәһеңме, бына икмәк!

Малай атаһының муйынынан ҡосаҡлап алды. Уның һөйләйһе һүҙҙәре бик күп йыйылған, тик ауылдаштары ауыҙ асырға ирек бирмәйҙәр шул, төн булыуға ҡарамаҫтан, һаман килеүҙәрен дауам итәләр. Юҡ, Миҙхәт әлегә һөйләмәйенсә түҙер, тик атаһы ғына башҡаса бер ҡайҙа ла китмәһен.

Ғәлләм ағайҙың тубығында ята торғас, ул ойоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Бер аҙҙан тертләп уянды һәм, атаһының алдында икәнен тойғас, йәнә тынысланып йоҡоға талды. Кешеләрҙең геүләүенә тағы бер тапҡыр уянды һәм, ҡалҡына биреп, тирә-яғын байҡаны, ашъяулыҡ өҫтөндәге икмәк телемдәрен күргәс, йоҡоһо асылып китте. Улар бит Мотаһар ҡустыһы өсөн әҙерләнгән, һағынып көткән атай икмәге...

— Атай, һин бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла китмәйһеңме?

— Юҡ, улым, һеҙгә ҡайттым мин, мәңгегә!

Атаһының тыныс, яғымлы тауышын ишеткәс, Миҙхәт йәнә йоҡоға тала. Ҡыҫҡа, әммә михнәтле ғүмерендә иң татлы йоҡо ине был.

1. III бүлек буйынса һүҙлек эше башҡарығыҙ.
2. Хикәйәлә *һоҡланып ҡарау, күҙ тултырып ҡарау, ялбарып ҡарау* төшөнсәләре бар. Кешенең ҡараштары тағы ла ниндәй була?
3. *Ут эсендә йөрөгән, ут-һыу кискән* тип кемгә әйтәләр? Ни өсөн? Аңлатығыҙ, икенсе һүҙҙәр менән әйтеп ҡарағыҙ.
4. Ниндәй мәл ул *иҫ белә башлаған ваҡыт*? Үҙегеҙҙең иҫ белә башлаған ваҡытығыҙҙы төҫмөрләп ҡарағыҙ — һеҙ нисә йәштә инегеҙ?
5. Йөкмәткеһенән сығып, хикәйәнең ни өсөн нәҡ шулай аталғанын аңлатып ҡарағыҙ.
6. «Война глазами детей» тигән китап донъя күрҙе. Унда бала сағы уҙған быуаттың ҡырҡынсы йылдарына тура килгән балаларҙың һуғышҡа мөнәсәбәте сағыла. Мөмкинлек табып, китап менән танышығыҙ һәм фекер алышығыҙ.
7. Ф. Аҡбулатованың башҡа әҫәрҙәрен дә уҡыу теләге тыуманымы? Тыуһа, мөмкинлек табып, класығыҙҙа уҡыусылар конференцияһы ойоштороп ҡарағыҙ.
8. Ф. Аҡбулатованың «Атай икмәге» әҫәре буйынса викторина үткәрегеҙ. Һорауҙары:
   1. Әҫәрҙең башында ниндәй йыл миҙгеле һүрәтләнә?
   2. Ғәлләм ағайҙың ғаиләһендә нисә кеше? Улар кемдәр?
   3. Балаларға ни өсөн ҡарҙа ялан аяҡ уйнарға тура килә?
   4. Мотаһар ни өсөн илай? Ул нимә һорай?
   5. Миҙхәт Хәҙисә инәйҙәргә ни өсөн бара?
   6. Хәҙисә инәйҙең өйөндә ниндәй ваҡиға була? Ни өсөн Миҙхәт картуф урынына ҡатыҡ алып ҡайта?
   7. Мотаһар ни өсөн ауырый?
   8. Ни өсөн Мотаһар картуф, көлсә һүрәттәре төшөрә?
   9. Миҙхәтте ҡустыһының һүрәттәре ниҫә тетрәндерә?
   10. «Ашау барҙа — йәшәү бар» тигән мәҡәлдең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
   11. Ни өсөн Миҙхәткә Хәҙисә инәйҙәрҙә йоҡларға ҡушалар?
   12. Миҙхәт ҡустыһының үлемен нисек кисерә?
   13. Атаһының ҡайтыуы Миҙхәттә ниндәй хис-тойғолар уята?
   14. Миҙхәт менән атаһы ни өсөн Мотаһарҙың ҡәберенә икмәк алып барырға булалар?

Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән үҙ аллы һүҙ төркөмдәре менән танышып сыҡтыҡ. Улар — исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш. Уларҙың һәр береһенең аңлатҡан мәғәнәләре, һорауҙары, үҙгәреү үҙенсәлектәре, яһалыу юлдары бар.

Исемдәр — предметты белдерә, һан, килеш менән үҙгәрә, эйәлек заты формаларында була.

Рус теленән айырмаһы:

1) йәнле, йәнһеҙҙәргә (одушевлённые, неодушевлённые) бүленмәй. Кешене белдергәндәре генә *кем*? һорауына яуап бирә, ҡалғандарының һорауы — *нимә?;*

2) бөтә исемдәр ҙә берлектә лә, күплектә лә була ала: *сана — саналар, ҡайсы — ҡайсылар, пальто — пальтолар;*

3) бөтә исемдәр ҙә килеш менән үҙгәрә ала, килеш менән үҙгәреү бер төрлө. Сағыштырығыҙ:

Эйәлек килеш — *өҫтәл-дең, мәктәп-тең, йылға-ның, әсәй-ҙең, ялҡын-дың, эшсе-нең, уҡыусы-ның* һ. б. Родительный падеж — *стол-а, школ-ы, рек-и, мат-ери, плам-ени, рабоч-его, учащ-егося* һ. б.;

4) эйәлек заты формалары була:

*атай-ым — мой папа;*

*китаб-ың — твоя книга;*

*өй-ө — его дом.*

*Вәзих Исхаҡов*

## КЕШЕ КҮҢЕЛЕ — ТӘРӘН ДАРЪЯ

*Украиналағы дуҫым*
*Борислав Степанюкка арнайым*

Кеше күңелендә ниҙәр барын бер ваҡытта ла белермен тимә икән. Уның менән һин йылдар буйына дуҫлашып йөрөйһөң, серҙәреңде уртаҡлашаһың, ә асылмаған, белмәгән яҡтар һаман ҡала килә. Борис менән минең аралағы ваҡиға ла тап ана шулай килеп сыҡты, шикелле.

Бористың беҙҙең яҡтарҙа булыуын да, уның Өфө госпиталдәренең береһендә дауаланып ятыуын да күптән белә инем. Һуңғы бер осрашыуыбыҙҙа ул: «Беләһеңме, Шамил, ә бит минең Башҡортостанда иҫтәлекле урындарым, яратҡан

яҡын кешеләрем бар!» — тип ҡуйҙы. Тик быға ул саҡта артыҡ иғтибар итмәгәйнем.

Борис — украин егете. Ул беҙҙән алыҫта йәшәй. Әммә тыуған илдәре — Украина ере иңрәп ятҡан һуғыш осоронда улар ҡайҙарға ғына сәселмәне лә ҡайҙарҙа ғына көн күрмәне инде?

Байтаҡ ваҡыттар күрешмәүебеҙ сәбәпле, Бористың беҙгә килергә теләүе миндә ҡыуаныс уятты.

— Шамил, дуҫҡайым, — тине Борис, вагондан төшөп, ергә аяҡ баҫыу менән. — Һин мине бөгөн үк ауылға алып барһаң ине.

Шунда Борис был ауылдың исемен әйтте. Мин, күҙҙәремде тазырайтып, уға ҡараным, ләкин Борис иғтибар итмәне.

— Минең ул ауылды, ундағы кешеләрҙе күргем килә...

Келт итеп бер нәмәне хәтерләнем: «Ә-әх, бына ҡайһы Борис икән һин!» Тик был яғын мин белмәмешкә һалыштым.

Ә юлда барғанда, Борис миңә үҙе менән булған бер хәлде һөйләне...

## I

...Буй-буй булып һуҙылған бакуйҙар һаны артҡандан-арта барҙы. Болон йәшел бесән еҫенә, сәскәләр еҫенә күмелде. Инде бер аҙға туҡталып, ял итергә лә ваҡыт ине. Шул ваҡыт улар эргәһенә киң яурынлы йәш кенә бер егет килеп сыҡты. Быға са эш менән мауығып, уның ҡайһы яҡтан килеүен берәүһе лә абайламай ҡалғайны. Аяғына күреклəп ҡуйған хром итек, өҫтөнә өр-яңы гимнастёрка кейгәйне ул. Ҡулдары — салбар кеҫәһендә.

— Эш барамы, бисәләр? — тине ул, ваҡ ҡына тештәрен ҡояшта ялтыратып. — Күрәм, бик дәррәү тотонғанһығыҙ...

Ләкин егет башлаған һүҙен әйтеп тә бөтә алманы, уны оҙонса битле Ғилминур исемле апай бүлдерҙе. Ул егеткә баштан-аяҡ һөҙөп ҡарап алды ла:

— Ай-һай, тәтәй егет икәнһең! — тине һәм, ауыҙын ҡыйшайтып, үсекләгән һымаҡ: — Ҡыҙыу эш өҫтөндә ошолай йөрөгәнсе, мырҙам, ҡулдарыңды кеҫәңдән алып, беҙгә булышыр инең, исмаһам, — тине.

Ғилминур апайҙан башҡалар йүнләп русса белмәй ине. Шуға ла улар ҡапыл ғына һүҙгә ҡушыла алманы. Ғилминур апай иһә:

— Беҙҙекеләр һинең кеүек ауыҙ йырып бында йөрөмәй, ә ана тегендә ҡан ҡоя! — тип, ҡулдарын һуҙып, туйыралыҡҡа, Сағылтау яғына — көнбайышҡа күрһәтте.

Егет бында ят кеше ине. Шулай ҙа бисәләрҙән берәүһе, ҡыҙыҡ табып, хихылдап көлгән булды. Был хәл егетте, бөтөнләй ҡаушатып, бер аҙға аптырашта ҡалдырҙы. Ғилминур апайҙың һүҙҙәренә ул ни тип яуап бирергә лә белмәй торҙо. Тулҡынланыуы йөҙөнә бәреп сыҡты: бит остары алһыуланып китте.

— Ҡайҙа, апай, кил әле бында! — тине ул, бер аҙҙан һуң өҙөп кенә. — Кил, тим, кил, — тип ҡабатланы егет, ҡулдарын кеҫәһенән сығармаған килеш. — Бәйлә бына ошонан...

Ул уң ҡулын кеҫәһенән алып, һул ҡулының терһәктән юғары урынын күрһәтте. Ғилминур апай — һүҙгә йор һәм ҡыйыу бисә. Бик оҙаҡ уйлап та тормай ул. Бына әле башындағы биҙәкле ситса яулығын йәһәт кенә систе лә һөйләнә-һөйләнә егеттең ҡаршыһына барып баҫты.

— Бәйләрмен дә шул, ниңә бәйләмәҫкә? Ҡулыңдан килһә, күрһәт кем икәнеңде...

— Ҡыҫыбыраҡ бәйлә, — тине егет, Ғилминур апайҙың һүҙҙәрен ишетмәгәндәй.

— Ҡыҫып бәйләргә лә мөмкин...

Ғилминур апай үҙенсә һөйләнеүен белде, ә егеттең һул ҡулы иһә әле булһа кеҫәһендә ине. Апай уға иғтибар ҙа итмәне, шикелле.

— Бир салғыңды! — тине егет ҡоро ғына һәм, салғыны ҡулына алғас, уның һабын яйлап һул терһәге аҫтына ҡыҫтырҙы ла шунан һуң ғына ҡулын кеҫәһенән тартып сығарҙы. Кемдер аһ итеп ҡуйҙы. Бүтәндәр, ни тиергә лә белмәй, өнһөҙ ҡалғандай тора бирҙе. Ә егет салғыһы менән ашыҡмай ғына һелтәнергә кереште.

Бисәләр, баштарына һуҡҡандай, бер ауыҡ шаҡ ҡатып торҙолар. Егеттең һул ҡулы урынында протез икәнлекте әле генә күреп алды улар.

Ҡояш бөтә ер йөҙөнә нурҙарын һибеп ҡыҙҙыра ла ҡыҙҙыра. Ҡайҙалыр яҡында ғына бер ҡош һайрай. Ул, йәм өҫтөнә

йәм өҫтәгәндәй, бөтә болондо яңғыратып тора. Тәгәрлектәр тауышы, бытбылдыҡтар ҡысҡырғаны ишетелә.

Аяҡтарын киң итеп айыра баҫҡан егет бесән саба. Уның галифе салбарының ҡанаттары бер киңәйеп китә, бер боттарына һылашып ҡала. Егет инде арыу ғына йырағайып та бара — уға йөҙ илле сажинлы сабынлыҡтың башына етергә лә күп ҡалмаған.

— Егетте рәнйеттегеҙ, бисәләр! — Салғы тапаусы ҡарттың бер кемгә лә төбәмәй әйткән ошо һүҙҙәре бесәнсе ҡатындарҙы айнытып ебәргәндәй итте. — Ул бит госпиталдән генә сыҡҡан килеш…

…Был егет менән бабай иртән колхоз идараһы алдында танышҡайны. Шунда уға егет үҙенең кемлеген, ҡайҙан һәм ни өсөн килеүен әйткәйне. Бында ул, комсомолдың район комитеты ҡушыуы буйынса туҡталып, колхозсыларға фронттағы хәлдәр тураһында һөйләргә тейеш ине. Ләкин уны бит ана нисек ҡаршыланылар.

Тәүләп Ғилминур апай һушына килде:

— Һай, Аллаҡайым, кем белгән һуң уны?! — тине ул, эске бер уфтаныу ҡатыш. — Исемен дә әйтмәне бит, исмаһам!

— Борис, — тине ҡарт бер генә һүҙ менән. Ул Ғилминурҙың әҙәпһеҙлегенә әрнеп ултыра ине. Бабай, мәсет манараһы һымаҡ ослайып торған аҡ кейеҙ эшләпәһен һалып, керләнеп бөткән ҡулъяулығы менән тирен һөртөп алды. — Телең тел түгел бит, тилсә төшкөрө…

— Һә-әй, бынауы… — Ғилминур апай салғы тапаусы бабайға асы итеп яуап ҡайтармаҡсы ине, әммә уны бисәләр бүлдерҙе.

— Ни сыҡһа, Ғилминурҙан сыға.

— Абау, Хоҙайым, йәнәһе, ул ғына белдекле!

— Һорау юҡ, белеү юҡ — кешегә ташлана бит! — тине салғы тапаусы бабай ҙа. — Әйтерһең, ул ғына бында…

— Ярай, ярай, — тине Ғилминур апай, зәһәрләнеп. — Күрә алмағанығыҙ — шул мин инде. Әлдә Ғилминур бар, юҡһа, кемде сәйнәр инегеҙ?..

Салғы тапаусы ҡарт ҡулдарын һелтәне:

— Һиңә әйттең ни ҙә, әйтмәнең ни… — Ул ултырған еренән ҡуҙғала биреп ҡуйҙы ла йәнә салғы сүкергә тотондо.

— Харап икән, тәрбиәселәр табылған — Ғилминурҙы тәрбиәләйҙәр! — Ғилминур апай, осоп ҡуныръай булып, үҙен әрләүселәрҙең әле береһенә, әле икенсеһенә ҡарап ҡуйҙы.

1. I бүлектең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙе ҡулланырға тырышып, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән Бористың колхозсылар менән осрашыу эпизодын һөйләгеҙ.
3. *Тазырайып ҡарау, һөҙөп ҡарау, шаҡ ҡатып тороу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
4. *Тәтәй егет* тип кемгә әйтәләр? Һеҙ үҙегеҙҙе шулай маҡтағандарын теләр инегеҙме?
5. Һеҙҙең *галифе салбар* күргәнегеҙ бармы? Хәҙерге хәрби формала ундай салбар бармы? Хәҙерге Рәсәй армияһындағы хәрби кейем формалары тураһында үҙегеҙ белгәнсә фекер уртаҡлашығыҙ.
6. Яҡшы ҡылыҡмы ул *белмәмешкә һалышыу?* Кеше ни өсөн ҡайһы берҙә белмәмешкә һалыша? Һеҙҙең үҙегеҙҙең белмәмешкә һалышҡанығыҙ бармы?
7. *Әлдә мин бар, юҡһа, кемде сәйнәр инегеҙ?..* ти Ғилминур. Һеҙҙең *кешене сәйнәгәндәрен* күргәнегеҙ (ишеткәнегеҙ) бармы? Яҡшы ғәҙәтме ул? Икенсе төрлө уны нимә тиҙәр?
8. Салғыны нисек *тапайҙар?* Ә салғыны *сүкеү* нимә ул? Салғының төҙөлөшө, бесән сабыу тәртибе тураһында белешмә төҙөгөҙ.
9. Салғы тапаусы бабайҙың *телең тел түгел бит, тилсә төшкөрө...* тигән һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
10. Ғилминур апайҙың Бористы ҡаршылағандағы ҡылығына баһа бирегеҙ.

**Сифаттар** — предметтың билдәһен белдерә. Сағыштырыу, артыҡлыҡ дәрәжәләре була. Тәмде, төҫтө белдереүсе ҡайһы бер сифаттарҙың аҙһытыу дәрәжәләре була.

Рус теленән айырмаһы:

Ярашыу (согласование) юҡ, сифат исем алдында бер нисек тә үҙгәрмәй. Сағыштырығыҙ: *яңы өй, яңы китап, яңы эш — новый дом, новая книга, новое дело. Яңы өйҙәр, яңы өйгә, яңы өйҙәрҙе — новые дома, новому дому, новых домов.*

**Һандар** — предметтың иҫәбен белдерә, төркөмсәләргә бүленә.

Рус теленән айырмаһы:

Исем алдында килгәндә, бер нисек тә үҙгәрмәй. Сағыштырығыҙ: *бер мең биш йөҙ илле туғыҙ һумға — одной тысяче пятистам пятидесяти девяти рублям.*

Һәр бер һан айырым яҙыла: *биш йөҙ — пятьсот, алтмыш биш — шестьдесят пять.*

**95-се күнегеү.** Һүҙ төркөмдәре тураһында һорауҙар төҙөгөҙ. Ике һорауығыҙға яуап бирегеҙ.

## II

Һелтәгән һайын бесән йығыла. Һелтәгән һайын сыжлай. Был тауыш Борисҡа башынан үткәндәрен, тормош юлын хәтерләтә...

...Йәшләй атаһыҙ ҡалды Борис. Әсәһе уҡытыусы ине. Улын ул бөтә көсөн һалып уҡытырға, кеше итергә тырышты. Борис яҡшы ғына уҡый ҙа ине. Шуның өҫтөнә ауылда беренсе булып хромкала уйнарға өйрәнде. Бығаса уларҙың ауылында рәтле гармунсы ла юҡ ине бит.

Көтмәгәндә күк йөҙөн ҡаплаған дәһшәтле өйөрмә Бористы ла ситтә ҡалдырманы. Туғыҙынсы кластан уны армияға алдылар ҙа, өс айлыҡ хәрби училище тамамлағас, кесе лейтенант погондары тағып, бер взвод һалдат менән туп-тура һуғышҡа оҙаттылар...

Саж-сыж... Саж-сыж!..

Был тауыш Борисҡа, бер килеп, сафта барған һалдаттарҙың атлауын хәтерләтһә, икенселәй, ана шул һалдаттарҙың батырлығын, фронт картиналарын иҫенә төшөрә.

Ҡапыл Бористың күҙ алдына ут эсендә ҡалған тыуған яҡтары, әсәһе, уның менән хушлашыу минуттары килеп баҫҡандай булды. Ул көн әле булһа хәтерендә. Пароход, пристандән ҡуҙғалғанда, быу бөркөп, тәгәрмәстәре менән һыуға лып та лып бәреп, бәйгелә ҡатнашҡан арғымаҡ һымаҡ бышҡырына ине.

Шау-гөр килгән тауыштар бөтә яр буйын күмеп киткән кеүек. Берҙән-бер улын, ғәзиз балаһын, оҙата килгән Бористың әсәһе иламаны ла, әллә ни өгөт-нәсихәт тә уҡып булашманы. Ул яулыҡ сите менән күҙ ҡырыйҙарын һөртөп алды ла:

— Иҫән ҡайтырға яҙһын инде, балам, — тине. — Дошманды еңеп ҡайт.

Ниндәй көс тапты икән әсә был минутта?!

Эйе, аҙмы беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, беҙҙең әсәләребеҙ яурындары менән ауырлыҡ күтәреп, оло яу осоронда ил терәге булдылар!..

Һелтәгән һайын салғы сыжлай, һелтәгән һайын үләндәр йығыла, һелтәгән һайын...

Пулемёт тыҡылдауы, туп шартлауы фронтта, ана, һелтәгән һайын күпме кешеләрҙе юҡҡа сығара. Һуғыш яланында уның күпме фронтташ дуҫтары ятып ҡалды. Күпме арыҫландай азамат ир-егеттәр, ошо яҡты көндө һаҡлау өсөн, баштарын һалды...

«Һынатмаҫҡа, юҡ, һынатмаҫҡа!» — Борис ҡулының ауыртыуына иғтибар итмәҫкә тырышты. Тағы ике генә аҙым, бер генә...

Болон тамамланып, туйыралыҡҡа барып еткәндә, Борис, бөтөнләй көсһөҙләнеп, хәлдән тайҙы. Ул салғыһын ергә ташланы ла, артына боролоп та ҡарамайынса, Сағылтауға ҡарай ыңғайланы. Был минутта уның тәне генә түгел, ә күңеле һыҡтай, йөрәге әрней ине. Эйе, эйе... «Һин тәтәйләнеп килгәнһең дә, ә беҙҙекеләр ана тегендә ҡан ҡоя!» — тине Борисҡа баяғы апай. Уҫал итеп әйтте ул быны. Уйлап-нитеп тормай әйтте. Ә бит Борис та таштан яһалмаған: уның да эсе тулы хис, эсе тулы асы нәфрәт. Фашист һалдаты уның тыуған төйәген бысраҡ итеге менән тапап йөрөй, фашист уның киләсәк хыялдарына балта сапты. Йәп-йәш көйөңә һыңар ҡул менән ҡал әле... Бористың яҡты ҡояшына һыу һипте һуғыш. Ана шуларҙы беләме икән был апай? Юҡ, белмәйҙер, белмәйҙер, әлбиттә...

...Баштараҡ Бористың Сағылтауҙағы туйыралыҡҡа инеп китеүенә болондағыларҙың берәүһе лә ғәжәпләнмәне. Ғилминур апай ғына пыр туҙып маташтты ла, яңынан эше менән мауығып, был хәл онотолоп та бара ине инде.

Көн аҙағына иҫке кәжәнен аҫтына һалып, атҡа атланған бригадир килеп етте.

— Һалдат ҡайҙа, күренмәй? — тине ул, атынан төшмәй генә. Шунда Бористы йәнә иҫкә төшөрҙөләр.

— Егет тәки килмәне бит кире, — тине салғы тапаусы бабай, хафаға ҡалып.

— Ауылға ҡайтҡандыр, — тиеште бесәнсе бисәләр. Улар үҙ-ара бер-береһенә ҡарашып алдылар. Иптәштәренең ҡыланышын тиҙ генә аңлаған Ғилминур апай:

— Ҡайтҡандыр, әлбиттә, ҡайтмай ҡайҙа барһын? — тип йәһәт кенә һүҙҙе осларға ашыҡты.

— Белмәйем шул. Бер ҙә күҙгә-башҡа күренмәне, — тине бригадир ағай, икеләнеберәк. — Уны районда һорап йөҙәттеләр, һеҙгә килдеме, тиҙәр.

— Килде, килде! — тине быға ҡаршы Ғилминур апай. — Етмәһә, бесән сабып күрһәтте. Һинең һымаҡ ат зәхмәте ҡағылмаған әле уға. Һин генә ул, атлы ҡаҙаҡ...

Ләкин Ғилминур апайҙың ғәҙәтен белгән бригадир һүҙ оҙайтманы.

## III

Малдарын ябып, һыйырын һауғас, Ғилминур апай идараға китте. Бына өсөнсө йыл инде, ире фронтҡа киткәндән алып берәй яңы хәбәр ишетмәмме тип, ирҙәр кеүек, кис менән дә идараға барып ҡайта торғайны ул. Шунда барғас, Badistyң ауылда юҡлығын белде.

— Һинең арҡаңда, тиҙәр, егет юғалған, ана! — тип ҡаршылаңы уны бригадир.

— Сурт та булмаç, табылыр әле, — тине Ғилминур апай бригадир менән телләшеп. Ләкин үҙенең йөрәге жыу итеп киткәндәй булды. «И-и, Хоҙайым, урманда эт-ҡошҡа юлыға күрмәһен!» — тип уйланып, бошаманға ҡалды. Уғаса булмай, күк йөҙөн ҡара юрғанға томалап, ҡараңғы төштө.

Ғилминур апай ашығып өйөнә ҡайтты ла, ҡулына фонарь алып, тиҙ генә Сағылтау яғына китеп барҙы. Берәйһе күрмәнеме тигәндәй, яҡ-яғына ҡаранып та ала. Бер аҙ барғас, туҡтап, тыңлап тора.

Бары туйыралыҡта ғына фонарын ҡабыҙҙы ул. Көндөҙ Борис инеп киткән ергә еткәс, аҡрын ғына тауыш бирҙе: «Борис туғаным, Борис!..»

Ҡайҙалыр ябалаҡ пырх итеп осоп китте. Шаңдау булып Ғилминур апайға үҙ тауышы ишетелде, ләкин яуап биреүсе юҡ ине.

Йәйге төн ҡыҫҡа бит ул — бер яҡтан ҡараңғы төшһә, икенсе яҡтан яҡтыра ла башлай. Туйыралыҡты айҡап

тигәндәй сыкһа ла, Ғилминур апай егетте таба алманы. Таң һыҙығы менән ул ауылға ашыкты. Бәй, кеше-фәлән һиҙеп, үҙенән көлмәһендәр тағы!..

Һыйырын көтөүгә ҡыуып, аҙбар ҡапҡаһын япҡанда, ырҙын артынан үтеп барған һалдатты күреп ҡалды.

— Туғанҡайым, бауыр киҫәгем! — Ғилминур апай ҡысҡырып ебәреүен һиҙмәй ҙә ҡалды. — Һә-әй, туғаным!..

Картуф баҡсаһында йөрөгән тауыктарҙы ҡурҡытып, Ғилминур апай абына-һөрөнә ырҙын аша егеткә табан йүгерҙе. Үҙе туктауһыҙ һөйләнә ине.

— Ҡотомдо алдың бит, туғанҡайым! Көнө генә аяҙ булһын, беҙ бесән сапмағанмы, умырып сабасаҡбыҙ...

Ләкин Борис ҡапыл ни тиергә лә белмәне. Хәйер, ул былдай осрашыуҙы бөтөнләй көтмәгәйне. Баҡһаң, ниндәй апай икән дә баһа!.. Күтәрелеп килгән иртәнге ҡояш яҡтыһында был апайҙың алсаҡ йөҙөнә ҡарап, уңайһыҙланып китте: унда борсолоу ҙа, әйтеп бөткөһөҙ ҡыуаныс та күрҙе ул...

...Борис һөйләп бөтөүгә, беҙҙең газик ауыл осона яҡынлашып килә ине инде.

— Ошонда мин ике йыл эшләнем, — тине Борис ғорурлыҡ менән. — Тәүҙә учётчик булып йөрөнөм, аҙаҡка табан бригадир итеп ҡуйғайнылар...

Шофёрға мин магазин тапҡырындағы рус ҡапҡалы йорт алдына барып туктарға ҡуштым. Борис быға ғәжәпләнде, әммә өндәшмәне.

Ҡапҡа төбөндә эскәмйәлә ултырған һоро мыйыҡлы ағай:

— Бәй, Шамил ҡайтҡан да баһа! — тип һөйләнә-һөйләнә, киң итеп ҡапҡаны асып ебәрҙе.

Машинанан төшөп, юл саңын ҡағырға ла өлгөрмәнек, күтәрмәлә өлкән йәштәрҙәге апай күренде. Ул, ҡулдарын алъяпҡысына һөртә-һөртә, беҙҙең янға ашыкты.

— Әйҙүк, ҡунаҡтар, рәхим итегеҙ!.. — Ләкин апай ҡапыл туктап ҡалды. — Бәрәкәт, әллә Борис инде?!

Борис та, сәйерһенеп, бер миңә, бер был апайға ҡарап тора ине. Мин йылмайып ҡуйҙым.

— Еҙнәм фронтта саҡта, һин бит уларҙа торғанһың, Борис. Был бит минең апайым!..

Апай яулығының осо менән күҙ ҡырыйҙарын һөртөп алғандай итте. Борис та, шатлыҡтан ни эшләргә белмәй, ҡаушап ҡалды.

Сәсенә күптән инде сал ҡунған һәм өлкән йәштәге был апай, әлбиттә, Ғилминур апай ине.

1. II, III бүлектәрҙең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ.
2. Һөйләү телмәрегеҙҙе шымартығыҙ: һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтеп, йөкмәткене үҙ һүҙҙәрегеҙ менән эҙмә-эҙлекле һөйләп бирегеҙ.
3. *Күңел һыҡтау, хәлдән тайыу, пыр туҙыу, һүҙҙе ослау, ҡаушап ҡалыу, осоп ҡунырҙай булыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.
4. *Ат зәхмәте ҡағылмаған; Һинең арҡаңда юғалған* һөйләмдәрен рус теленә тәржемә итегеҙ.
5. Борис образына характеристика бирегеҙ.
6. Ғилминур апай образына характеристика бирегеҙ.
7. Хикәйәлә ҡайһы осор ваҡиғалары тасуирлана? Һеҙ уны нимәгә ҡарап белдегеҙ?
8. Һеҙҙеңсә, хикәйәнең төп геройы кем? Хикәйәнең исемендә кемдең күңеле күҙ уңында тотола?

## ЯРҘАМСЫ ҺҮҘ ТӨРКӨМДӘРЕ

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә **теркәүес (союзы), бәйләүес (послелоги, рус телендәге предлогтарға тап килә), киҫәксә (частицы)** инә. Уларҙы схема рәүешендә түбәндәгесә күрһәтеп була.

1. Теркәүес.



*Атайым **менән** әсәйем көнө-төнө баҫыуҙа.*

Теркәүестәр ике тиң һүҙҙе, һөйләмде бер-береһенә теркәй.

2. Бәйләүес.



*Иртә булыуға **ҡарамаҫтан,** халыҡ гөжләп тора.*

Бәйләүестәр эйәреүсе һүҙҙе эйәртеүсегә, эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләй.

3. Киҫәксә.



*Аҡсаның бер тинен дә кәметке килмәй.*

Киҫәксәләр һүҙгә (ҡайһы ваҡыт тотош һөйләмгә лә) өҫтәмә мәғәнә бирә.

**96-сы күнегеү.** Алда уҡылған әҫәрҙәрҙән ярҙамсы һүҙҙәрҙең һәр төрөнә бишәр миҫал яҙып алығыҙ.

## АҪЫЛҒУЖА БАҺУМАНОВ
## (1945 — 2005)



Аҫылғужа Ишемғужа улы Баһуманов 1945 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа.

Аҫылғужа Баһумановтың «Ҡояшлы таң», «Боҙҙар аҡтарылғанда» исемле шиғри йыйынтыҡтары донъя күрҙе. Уның бик күп проза, шул иҫәптән балалар өсөн әҫәрҙәре лә билдәле.

### ЮЛАМАН

*(«Ҡайҙа һин, генерал?» әҫәренән өҙөк)*

Башҡорт атлы дивизияһының Нижне-Грачинскийҙа тороп ҡалған санитар эскадронына 275-се полк командирының сәйәси урынбаҫары Сәғит Әлибаевты кисә ҡараңғы төшкәс кенә килтергәйнеләр. Врач Чулков, аяғындағы яраһын ҡарап, таҙартып бәйләне лә хөкөмөн сығарҙы:

— Иртәгә госпиталгә ебәрербеҙ, иптәш майор.

— Дивизия рейдтан сыҡмайынса, бер ҡайҙа ла китмәйем! — тип ҡырт киҫте Әлибаев.

Бөгөн врач кисәге ҡарарын тағы ҡабатланы, ләкин майор һүҙендә ныҡ торҙо. «Ҡыҙыл атлылар» газетаһынан хәл белергә килгән Мөхәммәт Йәмилевкә:

— Ҡайҙа, тап әле шунда берәй таяҡ-маҙар, тышта йөрөштөрөп киләйек. Бынауы табип йоратына үҙемдең бик насар хәлдә түгеллегемде иҫбатлайым, булмаһа, — тип үтенде.

Бер аҙҙан журналист әйләнеп инде.

— Ҡарағыҙ, самай һеҙгә яраҡлыһын таптым!..

...Йәмилев — һөнәре-белеме буйынса педагог, Сәғит Рәхмәтович менән яҡшы таныштар, бер-береһенә ышаналар. Шуға ла икәү-ара саҡтарында ян-яҡтарына бик ҡаранмайҙар. Әңгәмә әллә күпме, әллә ҡайһы юҫыҡта дауам итер ине лә, мәйет һөйрәп килгән ике сапёрға тап булдылар. Башҡорттар икән, өлкән йәштәгеләр, быларҙы таныйҙар — сәләм бирҙеләр.

— Кемде ерләйһегеҙ? Яранан үлгәнме?

Әлибаевтың һорауына был икәү тулы яуап бирә алманы:

— Аңына килмәй үлде, тиҙәр. Исемен генә беләбеҙ: Юламан.

Әлибаевҡа ла, Йәмилевкә лә исем таныш һымаҡ тойолдо. Икеһе лә бер ауыҙҙан:

— Асығыҙ әле йөҙөн! — тип бойорҙо. — Ҡайһы Юламан икән?

Япма ҡайтарылғас, Әлибаев та, Йәмилев тә байтаҡ һүҙһеҙ ҡалып торҙолар. Бик тә таныш егет ята ине алдарында, заманында 313-сө полкта, Ғариф Маҡаевта автоматсылар взводында уғата батыр һуғышты. Үткән көҙ заградотрядҡа алынып, яраланғандан һуң кире дивизияға ҡайтҡайны. Әрәм генә булған икән, йәп-йәш кенә бит әле... Әлибаев уның ҡайһы райондыҡы икәнлеген тәки иҫенә төшөрә алманы.

— Ҡай яҡтыҡы ине әле был егет? Белмәйһеңме? — тип һораны майор мәйеттең йөҙөн ябырға әйелгән Йәмилевтән.

— Хәтерем алдамаһа, төньяҡ райондарҙан, буғай. «Танып буйы батыры Иҫәнбаев Юламан» тип яҙғайныҡ газетаға.

— Ә һеҙ кемдәр? Бик белеп бөтмәйемсе һеҙҙе, — тип өндәште майор тапанышып торған ағайҙарға.

— 313-төң сапёр взводынан, полктан осраҡлы ғына тороп ҡалдыҡ, санэскадронға беркетеп ҡуйҙылар әлегә... Беҙ һуңғы пополнениенан, шуға белеп бөтмәйһегеҙҙер.

— Фамилияһы — Иҫәнбаев. Батыр егет. Ҡурҡыу белмәй һуғышты. Һәйбәт тәрбиәләп ҡуйыуығыҙ, йәме?! Командирҙарығыҙҙан кем бар, әйтегеҙ: тыуған ауылына хат яҙһындар!

Сапёрҙар, «ярар-ярар» тиешеп, ары ҡуҙғалды.

Әгәр Сәғит Әлибаев менән Мөхәммәт Йәмилев ошо Нижне-Грачинскийҙа үҙенең мәңгелек йортона инеп ятасаҡ Иҫәнбаев Юламан атлы егеттең фажиғәһен белһәләр, ни уйларҙар ине икән?..

...Взводтан иҫән ҡалған өсәү араһында Юламан Иҫәнбаев та бар ине. Еңелсә генә яраланды ул: уң ҡолағының аҫҡы кимерсәген ярсыҡ ҡыйып алып китте — һырҙай ҡанға туҙҙы. Ике иптәшенең — ни ғиллә менәндер — сыйылған урыны ла юҡ. Был икәү танкыларҙың урындарынан ҡуҙғалыуын, үҙҙәренә табан әкрен генә килә башлауын күрҙе лә артҡа шыуышты. Соҡорлораҡ урында ятҡан Юламан иптәштәренә йән көсөнә аҡырҙы:

— Ҡайҙа ҡасаһығыҙ?! Назад! Атығыҙ!

Береһе һүгенеп яуапланы.

Икенсеһе лә өлөшһөҙ ҡалманы:

— Имен саҡта тай!

Һуғыш шундай инде ул — үҙенән үҙе һүгендерә, һәм Юламан лайыҡлы һүҙ тапты:

— Тайҙың ни, тайманың ни! Лутсы дастуйын үлеү!

Иптәштәренең береһе шул арала күҙҙән юғалғайны. Моғайын, анау уя яғына шылғандыр, ул тирәлә көрт тә тәрәнерәк, өйкөм ағаслыҡтар ҙа күберәк. Икенсе яуҙашы ла шул тарафҡа ыңғайланы һәм Юламанға ипле генә ҡысҡырҙы:

— Дуракланма, ҡустым! Үлеүҙән хәҙер файҙа юҡ. Буш ҡул менән ни... Имен ҡалһаҡ, аҙаҡ имандарын уҡытырбыҙ әле был ғифриттәрҙең. Һыҙ беҙҙең арттан!

Үҙе шул арала ғәйеп тә булды, һәм Юламан... ҡасты! Танкылар, ҡалын ҡарҙан ҡуйы буран туҙҙыра-туҙҙыра, алға уҡталғайны.

Ҡасты Юламан, теге ике иптәше артынан ҡасты! Былары көтәүелләберәк торған икән — бергәләп һыпырттылар. Танкылар уяға төшөп торманы, бүтән йүнәлештә китте, ә былар һаман йүгерҙе. Петровкаға тоҫмаллап сапҡандарында тағы әллә кемдәр ҡушылды, сырамытыуҙарынса, 55-се дивизиянығылар. Тора-бара ҡасыусылар апаруҡ йыйылды...

Пистолет тотҡан ят лейтенант иң элек Юламанды бөрә эләктереп алды — ғәм халыҡ араһынан тап уны бит әле!

Юламан иҫ йыйғансы, лейтенант йәнә әллә кемдәрҙе йә яғаһынан, йә салғыйынан тотоп туҡтатҡылаланы, береһенә хатта аяҡ салырға ла өлгөрҙө…

Ғәжәп, баяғы ике иптәше Юламан янында ҡарға сүкәйеп ултыра.

— Тәмәкең юҡмы? — тине береһе.

— Мына ла, имен ҡалдыҡ та покаға, — тине икенсеһе.

Юламан өндәшмәне. Ҡайҙалыр кемдәрҙер ҡысҡырыша, баяғы лейтенант үҙ полкыныҡыларҙы айырым урынға өйөрөп йөрөй, һәр кемгә сабыр ғына мөрәжәғәт итә:

— Николай, посиди, посиди, отдышись немного…

— Старшина, вон та группа не из наших? Сходи, пожалуйста…

— Кто из 87-го полка? Ко мне! Ко мне!

Пистолеты ҡулында, яй ғына атлап йөрөй. Бер тапҡыр Юламандар эргәһенән үтеп китте, быларға һирпелеп кенә ҡараны ла ләм-мим өндәшмәне… Таныған тиһеңме…

Ҡапыл һауала тиҫтәнән ашыу дошман самолёты пәйҙә булды. Ерҙәгеләр тегеләй-былай йүгерешергә, кемдер кемгәлер ҡысҡырынырға тотондо. Самолёттар иһә ары үтте лә китте — бындағы әҙ халыҡ менән бысранып торғолары килмәгәндер. Шулай ҙа тәртип өсөн тигәндәйерәк ике бомба ташланылар. Артыҡ зыяны теймәне, ике ат һәм шулар тирәһендә булашҡан ағай ғына йәрәхәтләнде. Баяғы лейтенант алты-ете ҡыҙылармеец араһында нимә тураһындалыр гәп һата, һул ҡулы менән бомбардировщиктар киткән тарафҡа төртөп-төртөп ала, шарҡылдап көлгәне апаруҡ асыҡ ишетелде. Юламандың тәне сымырлап ҡуйҙы…

Юламан Башҡорт атлы дивизияһына үҙ теләге менән 1941 йылдың декабрь аҙағында килде. Бүтәндәр менән бергә киләһе йылдың йәйендә һуғыштарға инеп китте. Байтаҡ эсте яу һурпаһын, егетлеген әҙ күрһәтмәне, бер миҙал, бер орден таҡтылар, партияға кандидат итеп алдылар.

Көҙгөһөн көтмәгәндә уны дивизияның сәйәси бүлегенә саҡырҙылар. Ни өсөн нәҫел-нәсәбенәсә төпсөнгәндәрен, үҙен ҡырҡ иләктән үткәргәндәрен тәүҙә төшөнмәй йонсоно. «Һеҙҙе заградотрядҡа боец итеп ебәрәбеҙ, ышанысты аҡлағыҙ!» — тинеләр ҙә машинаға ултыртып ебәрҙеләр.

Ғәҙәттә, уларҙың отрядын оборона тотҡан частар артына ҡуя торғайнылар. Тәғәйенләнгән урынға алып баралар, ут секторы билдәләйҙәр, төрлө күрһәтмәләр бирәләр, бурыстарыңды ҡат-ҡат аңлаталар. Яталар шунан... Оборона тотҡандар заградотрядтың килгәнен, ҡайҙа урынлашҡанын хатта яҡшы күрә, әлбиттә.

Ҡояшлы һыуыҡ иртәләрҙең береһендә алдағы батальонды ғәләмәт иҙҙе немец. Ул бомбалары, ул артналёты, ул танкылары — мәхшәр инде. Ә тегеләр бирешмәгәс бирешмәй бит — ике тапҡыр ҡул-штык һуғышына ла инеп сыҡтылар. Кискәрәк батальон өҫтөнә тағы ла танкылар ябырылды, эйәрткән пехотаһы оборона тотоусыларҙан өсләтә күберәк икәнлеге асыҡ күренде. Мәхшәр ҡубыу менән, заградотряд командирына йәш кенә лейтенант йүгереп килде, баш осонда пакет болғай-болғай: «Атмағыҙ!» — тип ҡысҡырынды. Пакетын һонған арала, капитан эргәһендәге сержанттың фляжкаһын һорап алды ла бер тынала түңкәрҙе һыуҙы.

— Не имею на то указаний, идите! — тине капитан.

— Товарищ капитан, свяжитесь со своим начальством выделите патронов, — тип ялбарҙы лейтенант һәм үҙе килгән яҡҡа ҡулын йәйеп күрһәтте: — На такую ораву и поштучно не хватит, сами видите, сколько их.

— Я вам русским языком говорю: идите в свою часть!

Лейтенант заградотряд биләгән позицияға күҙ йүгертеп сыҡты ла ғәжәпләнде:

— У вас даже гранаты и миномёты имеются... Так шарахните же своими «самоварами» вон по той группе фрицев!

— Лейтенант! Шагом, нет, бегом марш на передовую! — Капитан, йылан күҙҙәрендә һалҡын ут йүгертеп, янбашын ҡарманы.

Ҡурҡыуҙан үткән әҙәм икән лейтенант, тоҡанды:

— Ах ты, сволочь! Пристрелить хочешь? На, попробуй! Тебе своих не жалко, а патронов для фрица жаль?! Попадись только на поле боя!

Лейтенант капитандың йөҙөнә ласҡылдата төкөрҙө лә кире йүгерҙе. Капитан, берсә йөҙөн һөртә-һөртә, берсә ҡалтырана-ҡалтырана, пистолетын һауытынан һурып аҙапланды. Ниһайәт, тартып сығарҙы һәм алыҫлашҡандан-алыҫлаша барған лейтенантҡа ҡарай ике-өс тапҡыр атты — тейҙерә алманы. Тегеһе, быны мыҫҡыллап, үҙ осаһына

һуҡҡылап күрһәтте, нимәлер ҡысҡырҙы, һүҙҙәре ишетелмәһә лә, мәғәнәһе аңлашыла. Капитан, ҡотороноп, янындағы Юламанға аҡырҙы:

— Ну-ка, дай ему!

Автоматтан тәгәрәтергә мөмкин ине лейтенантты, ләкин Юламан көбәкте саҡ ҡына өҫкәрәк күтәрҙе. Хәйләне һиҙмәйме һуң инде, яуыз — һалдаттың ҡулынан ҡоралын һыпыра тартып алды ла үҙе тырылдатты. Тәкмәсләне лейтенант, ҡабат ҡалҡманы.

— Вот так надо обращаться с оружием! Смотри у меня! — тине ул Юламанға, автоматын ҡайтарып биргәндә. Теге батальон сигенмәне. Күршеләре лә позицияһын ташламаны. Эңер төшөүгә, тотош полк тиерлек ҡырылып бөткәйне — немецтарға юл асылды, ләкин улар һөжүмде туҡтатты. Еңеүселәргә лә ял кәрәк... Ебәргән разведкалары заградотряд торған урындарҙа ни үле, ни тере кеше тапманы.

Бер ваҡыт заградотрядты ҡапыл күтәрҙеләр ҙә ниндәйҙер йәйәүле дивизияға ҡаршы ташланылар — ҡалдығы тәртипһеҙ сигенә ине. Тәүҙә һауаға аттылар, аҡырҙы-баҡырҙылар — булманы.

Юламан сауҡалыҡ эсенә йән-фарман сабып инеп барған төркөмдөң юлын ҡыймаҡҡа автоматынан оҙон-оҙон итеп атты. Икәү-өсәүһе киҫелгәндәй ауҙы, бүтәндәре йәшенеп өлгөрҙө.

Капитан Юламанға бойорҙо:

— Возьми двоих и выкури их оттуда!

Заградотряд һалдаттарының ата-ата сауҡалыҡҡа юлды кәртәләргә йүгергәнен күреп, бүтән ҡасыусылар икенсе йүнәлешкә юҫыҡланды — тәгәрәгәне ятып ҡалды, ҡасҡандары ҡаса бирҙе.

Сауҡалыҡ ситендәге үлектәр — үҙе атып йыҡҡан һалдаттар янынан уҙғанда, Юламан саҡ абынып ҡоламаны. Береһе таныш тойолдо... Бәй, салҡан төшөп ятҡаны Оморҙаҡ ағаһы лаһа! Ҡот осҡос осрашыуҙан аҙаҡ, ни булғанын һис иҫләмәй Юламан. Сауҡалыҡҡа ҡасҡандарҙы таба алмағандарын да, кире ҡайтҡандарын да, сигенеүсе дивизияға ярҙам килеп, немецтарҙы этеп алып киткәндәрен дә, заградотряд һалдаттарын да, яуға индергәнде лә, үҙенең яраланғанын да... Госпиталдән һуң кире Башҡорт дивизияһына ҡайтарыуҙарын һораны...

Ошоларҙы башынан үткәреп, күҙ алдына килтереп, Юламан ҡар өҫтөндә хәтһеҙ ултырҙы. Иптәштәренең әңгәмәһендә лә ҡатнашманы, бергәләшеп тәмәке тарттылар ҙа тарттылар... Бына уларға патрондар, гранаталар таратып бирҙеләр, барыһын бергә тупланылар ҙа, Ново-Анновка яғына алып та киттеләр. Ниндәйҙер ҡалҡыулыҡтан немецтарҙы тәгәрәтә һуғырға кәрәк икән, «Катюша»лар залпынан һуң һөжүм итәсәкбеҙ, тип аңлаттылар. Юл буйынса Юламан бөгөнгө хәлен кисереп барҙы.

Бөгөн ул дошмандан ҡасты. Ҡасмай әмәле юҡ ине башта, ләкин аҙаҡтан ниндәйҙер аңлашылмаған дөйөм паникаға бирелеп киткән түгелме? Һуң, дошман уларҙы эҙәрлекләмәй ине ләһә! Әллә эҙәрлекләй инеме икән? Ә үҙен туҡтатҡан лейтенант нишләп атып йыҡманы әле Юламанды йәки башҡа берәүҙе? Тимәк, яҡында дошман булмаған, уға ҡаршы барырға булмаған?.. Алып ҡасҡан ат шикелле бер ни аңламай йүгерешкән әҙәмдәрҙе иҫенә индерер өсөн килеп индеме икән ни лейтенант улар араһына? Ә бит ҡайҙалыр яҡында ғына атыштар бара ине ләһә...

Күпме уйланһа ла, һис ни аңламаны Юламан. Күҙ алдына Оморҙаҡ ағаһы килә лә килә, килә лә килә. Сауҡалыҡҡа ҡасып инеп барғанында, ниҙәр кисергән икән ағаһы? Үҙ ҡустым йәнемде ҡыйыр, тип башына ла килтермәгәндер...

Таштай ауыр баҫып ята уның күңелендә ҡайғылы сере. Ваҡыт-ваҡыты менән, бына бөгөнгөләй, шул ҡайғыны ҡабаттан кисереүе түҙеп торғоһоҙға әйләнә, мейеһе быраулангандай. Тыуған яҡтарына имен ҡайтһа ла, ҡотолоу әмәлен тапмаҫ был сирҙән. Еңгәһенең, ҡустыларының күҙҙәренә мәңге тура ҡарай ҙа алмаясаҡ, дөрөҫөн дә һөйләп биреп булмаясаҡ...

...Һөжүм мәлендә алдына ғына төшкән мина Юламандың эсен ярғысланы. Ике санитар санаға һалғандарында аңына килде... Ғәжәп, иҫһеҙ оҙаҡ та ятмаған. Яҡында ғына һуғыш дауам итә. Санитарҙар яңы яралылар артынан китте, ә Юламан ҡулдарын ҡыбырлатып ҡараны. Шөкөр, имендәр, аңына буйһоналар. Кеҫәһенән йәшереп йөрөтөлгән пистолетын һөйрәп сығарҙы. Тәжрибәле һалдат үҙ хәлен аңламаймы ни! Йәшәү юҡ уға...

Сана ситендә ята ине, ҡыйынлыҡ менән һулға ҡырынайҙы. Уң ҡулын йөрәк тәңгәленә өҫкәрәк күтәрҙе. Иҫәбе

дөрөҫ сығырға тейеш: ҡул сана ситенә һәленәсәк, пистолеты ергә, ҡарға төшәсәк. Бынау күҙ бәйләнгән мәлдә, аяҡ аҫтындағы теләһә нәмәгә иғтибар итмәҫтәр, моғайын. Санаға егелгән ат ағасҡа бәйләүле, йәнә лә һуғыш аты — пистолет сыртылдауынан ғына өркмәҫ. Әҙерәк тертләп, сананы урынынан саҡ ҡына шылдырһа ла ярай — ҡулынан төшкән ҡоралы иғтибарлы күҙҙән йәшерелер...

Санитарҙар Юламандың үлек икәнлеген Нижне-Грачинскийға еткәнсе абайламаны. Юлда үлгәндәр аҙмы ни ауыр яраларҙан! Врач рядовой Иҫәнбаевтың иҫән түгеллеген мәйеттең һыуынып ҡатҡанлығынан уҡ билдәләне лә ҡарап торманы. Документтарын кеҫәләренән алғанда ла, йөрәк тәңгәлендәге ҡанға иғтибар итмәнеләр — эскенәйе ныҡ телгеләнгән ине шул Юламандың...

Сәғит Әлибаев менән Мөхәммәт Йәмилев егеттең кәүҙәһе киткән яҡҡа оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ҡарап торҙолар.

1. Яңы һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Ғәйеп булды, пәйҙә булды, егетлеген күрһәтте, лаҫҡылдата төкөрҙө* һүҙбәйләнештәрен рус теленә тәржемә итегеҙ.
3. Майор Сәғит Әлибаев үҙен дауалаусы врачҡа *табип йораты*, ти. Ул быға ниндәй мәғәнә һала. Һеҙ үҙегеҙгә шулай *егет йораты, малай йораты, кеше йораты* йәки башҡа шундайыраҡ баһа биреүҙәрен теләр инегеҙме?
4. *Алып ҡасҡан ат шикелле* тигәндә һеҙ нисек аңлайһығыҙ? *Алып ҡасҡан атты* күргәнегеҙ бармы? Ололарҙан һорап, уның тураһында аңлатма яҙығыҙ.
5. Нимә ул заградотряд? Улар ниндәй маҡсатта булдырылғандар? Мөмкинлеккә ҡарап, берәй һуғыш ветераны менән осрашыу үткәрегеҙ.
6. Юламандың шәхси фажиғәһе нимәлә? Яҙмышы шулай булғанға ул үҙе ғәйеплеме? Уның образына тулы характеристика бирегеҙ.
7. *Һыҙ беҙҙең арттан! Байтаҡ эсте яу һурпаһын, егетлеген әҙ күрһәтмәне. Самолёттар ары үтте лә китте — быңдағы әҙ халыҡ менән бысранып торғолары килмәгәндер. Ҡурҡыуҙан үткән әҙәм икән лейтенант, тоҡанды.* Был һөйләмдәрҙе текстан табып уҡығыҙ, мәғәнәләренә ентекле аңлатма бирегеҙ.

**97-се күнегеү.** Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә ингән һүҙҙәрҙе ҡарағыҙ. Һәр бер ярҙамсы һүҙ төркөмөнә икешәр һөйләм төҙөгөҙ.

Теркәүестәр: һәм, ләкин, ә, тик, сөнки, йә, йәки, менән, хатта...

Бәйләүестәр: өсөн, менән, кеүек, һымаҡ, һайын, хаҡында, тураһында, тиклем, табан, ҡарамаҫтан, бирле, башҡа, бүтән, һуң, тыш...

Киҫәксәләр: да (дә), да баһа (дә баһа), иң, бик, ғына (генә), уҡ, үк, -мы (-ме, -мо, -мө), -дыр (-дер)...

**ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...**

Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ.

* * *

Ил һаҡлаған — ирәйеп йәшәгән.

* * *

Ил һуғышһыҙ, һуғыш батырһыҙ, батыр яраһыҙ булмаҫ.

## ҒӘЗИЗДӘРҘӘН-ҒӘЗИЗ ӘСӘЛӘР

*Гөлшат Зәйнәшева*

### ЙЫРЛАЙЫМ ӘСӘЙЕМ ТУРАҺЫНДА

Бер ҡыҙ бала йыр сығарған,
Бағышлап әсәһенә.
Икәү бергә йырлайыҡ, тип
Өйрәткән энеһенә.

Ҡояш, ҡояш мәңге балҡый,
Мәңге нур һибә,
Ҡояш ғүмере теләйем,
Әсәйем, һиңә.

Йырҙы шишмәләр ишеткән,
Ҡоштар отоп алғандар,
Һандуғастар һәм турғайҙар
Матур көйгә һалғандар.

Ҡушыл һин дә, йырлайыҡ беҙ,
Яңы матур йыр тыуһын,
Ерҙә әсәйҙәр ҡояштай
Оҙон ғүмерле булһын.

1. Тексты тасуири уҡығыҙ һәм төп фекерен әйтегеҙ.
2. Йырҙың М. Әхмәҙиев яҙған көйөн тыңлағыҙ һәм уға ҡушылып йырларға өйрәнегеҙ.
3. Түбәндәге юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

*Ерҙә әсәйҙәр ҡояштай*
*Оҙон ғүмерле булһын.*

*Зөһрә Алтынбаева*

## ӘСӘ ҺҮҘЕ

Өй күтәрһәң, улым, тәҙрәләре
Ҡояш сыҡҡан яҡҡа ҡараһын.
Алһыу таңдар менән өй эсенә
Аҫыл моңдар ғына таралһын.

Ҡояш менән тороп-ятып өйрән,
Яҡтылығы күсһен йөҙөңә.
Ул сағында ҡояш кеүек уңған,
Йомарт булырһың һин үҙең дә.

Йорт күтәрһәң, улым, тәҙрәләре
Ҡояш сыҡҡан яҡҡа ҡараһын.
Ҡояш нуры менән өй эсенә
Бәхет нуры ғына таралһын.

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Әсәнең улына әйткән һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

**98-се күнегеү.** Ярҙамсы һүҙҙәре булған һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Оҡшашлыҡтар, тап килеүҙәр булырмы икән?

1. Теркәүестәр: *Атайым* ***менән*** *әсәйем. Һыуыҡ,* ***ләкин*** *өшөтмәне.* ***Йә*** *уңам,* ***йә*** *туңам.*

2. Бәйләүестәр: *Ҡайтыу* ***менән****. Сәғәт* ***һайын****. Дәрестән* ***һуң****. Урманға* ***табан****. Инереңдән* ***алда*** *сығырыңды уйла.*

3. Киҫәксәләр: *Яңғыҙ* ***ғына****.* ***Салт*** *аяҡ. Ҡайттың****мы****? Өшөгән****дер****.* ***Бик*** *матур.*



# ФӘРИТ ИҪӘНҒОЛОВ

## (1928 — 1984)

Фәрит Әхмәҙулла улы Иҫәнғолов 1928 йылдың 6 мартында Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыманбашы ауылында тыуа.

Фәрит Иҫәнғолов — балалар әҙәбиәтенең иң күренекле әҙибе.

1950 йылда «Ҡотлоәхмәт ҡарт» тигән тәүге хикәйәһе баҫыла. Бер-бер артлы «Тәүге һынау», «Баҫҡыс», «Хәмит күпере», «Сабирҙың дуҫтары», «Нәҙекәйбил», «Быйыл йәй» һәм башҡа хикәйә, повестары донъя күрә.

1970 йылда «Арыш башағы» романы өсөн Фәрит Иҫәнғоловҡа республикабыҙҙың С. Юлаев исемендәге премияһы бирелә.

### БЕР ЙОМҒАҠ МАЙ

#### I

— Намыҫ... — тине лә минең юлдашым, көләмһерәп ҡуйҙы. — Ошо һүҙҙе ишетеү менән, әле һаман булһа минең күҙ алдыма иң тәүҙә... бер йомғаҡ май... һәм Ҡырмыҫҡалы баҙары килеп баҫа. Әйе, әйе, көлһәгеҙ көлөгөҙ. Әммә шул бер ҡаҙаҡ май арҡаһында беренсе мәртәбә ошо мәңгелек бөйөк һүҙ менән осрашырға, уның менән йөҙгә-йөҙ бәрелешергә тура килгәйне шул. Утыҙ йылдан ашыу ваҡыт уҙған уға, тик һаман иҫтән сыҡмай шул кескәй генә ваҡиға.

Атайым менән әсәйем көнө-төнө баҫыуҙа. Өйҙәге эштәрҙең күпселегe минең, ун йәшлек малайҙың, өҫтөнә төшә.

Бына картуф баҡсаһын баш баҫып утайым. Бил һыҙлай, шырт билсәндәрҙе көсәнеп йолҡҡанда, күҙҙән йәштәр килә, ҡулдар һыҙырылып, ҡанға туҙышып ҡатҡан. Мин үҙем утап, тәпке менән күмеп киткән ергә — артыма күҙ һалам да, баҡсаның арғы башына ҡарап, күпмерәк ҡалды икән, тип самалап алам. Күп шул әле... Бөтөрә алырмынмы, юҡмы?

Әммә бөгөн бөтөрмәй ярамай. Йәнә иренемде тешләп, сәмләнеп эшкә тотонам. Юҡ, һис тә уңған, тыңлаусан малай булғаным өсөн түгел. Бына нәмә өсөн…

Әсәйем аҙна башында уҡ инде:

— Был аҙнала картуф баҡсаһын утап бөтөрһәң, үҙеңде баҙарға ебәрермен. Бер ҡаҙаҡ май әҙерләрмен, — тип дәртләндергәйне.

Ҡырмыҫҡалы баҙары!.. Мин, ошо бәхеткә ирешер өсөн, картуф баҡсаһы утау түгел, бер аҙна таш киҫергә лә әҙермен! Сөнки ул саҡ ҡыҙыҡлы нәмәләргә бигүк бай булмаған беҙҙең ауылыбыҙ тормошонда Ҡырмыҫҡалы баҙарына бер барып ҡайтыу әллә ниҙәреңә биргеһеҙ бәхет һанала ине. Әлбиттә, был иң тәүҙә минең тиҫтер малайҙар өсөн шулай булғандыр. Сөнки ауылыбыҙҙан ун ике саҡрымдағы Ҡырмыҫҡалы, иң алыҫ ер булып, күҙ алдыма килә ине. Унда әллә нindәй мөғжизә һарайҙары барҙыр төҫлө. Сөнки беҙҙең иҫте китерерлек көллө нәмә: ҡыҙыҡлы уйынсыҡтар, кәнфит, перәниктәр ҙә, күлдәкыштанлыҡ ситса ла — барыһы ла, барыһы ла шунан килә бит. Ә тәмле-татлы нәмәләр, моғайын, уның баҙарында тау-тау булып өйөлөп ҡуйылғандыр ҙа шунда барыу бәхетенә ирешкән малайҙар, ул тауҙарҙың ситенән туйғансы сүпләп ашап, аҙаҡ, ауылға ҡайтҡас, малайҙарҙың күҙҙәрен ҡыҙҙырырға, итәктәренә тултырып алаларҙыр…

Киске табан күҙ алдарым ҡараңғыланды. Беләктәр тамам хәлһеҙләнде. Әммә мин картуф баҡсаһын утап бөтөрҙөм.

Атайым менән әсәйем, ҡараңғы төшөрөп кенә, баҫыуҙан ҡайтты. Улар мине маҡтанылар. Әсәйем һүҙендә торҙо. Шунда уҡ аҙна буйы тамсылап йыйылған ҡаймаҡты баҙҙан сығарып, май яҙырға, төпрәһе ҡалмаһын, һап-һары, ҡаты булһын өсөн, һалҡын һыуҙа тасҡарға кереште. Элек ул май яҙғанда, ике туғаным, мин гел уның тирәһендә өйрөлә, икмәккә яғып май биргәнен түҙемһеҙлек менән көтә торғайныҡ. Май яҙыу ваҡыты беҙҙең өсөн байрам төҫөн ала ине. Ә был юлы улай ҡыланманым. Үҙемде өлкәнерәк кеше итеп тойҙом. Туғандарыма ҡушылмай, ситтәрәк, икенсе нәмә менән мауыҡтым. Сөнки мин бит — шул май йомғағын тотоп баҙарға барасаҡ кеше. Уны үҙ ҡулым менән һатасаҡмын да, теләгән бер тәмле әйберҙе, лавканан үҙем һорап, аҡсаһын да үҙ кеҫәмдән сығарып түләп аласаҡмын. Ә бер ҡаҙаҡ май хаҡына көнө буйы печенье кетерләтеп, кәнфит

һурып, көнбағыш сертләтеп йөрөп була. Хатта ике туғаныма әҙерәк күстәнәс алып ҡайтырға ла ҡалыр әле. Иртән әсәйем мине таң һарыһынан уятты:

— Ана, Сабирйән ағайың ат егергә китте. Тиҙерәк бул.

Мин, әлбиттә, әүәҫ һикереп торҙом инде. Ҡатырырға тип, шаллы туҫтаҡҡа һалынып, баҙға төшөрөп ҡуйылған май йомғағы сығарылды. Уны әсәйем өр-яңы ашъяулыҡҡа төйөнсөк итеп төрөп бәйләне.

— Аңшайып, ҡулыңдан ысҡындыра күрмә, берүк. Йән урынына күргән, кеше алдына ғына йәйә торған ашъяулығым... — тип ҡат-ҡат тылҡыны.

Ул ваҡытта баҙарға беҙҙә бик күңелле йөрөй торғайнылар. Бараһы кешеләр, алдан һөйләшеп ҡуйып, ике-өс бричкаға ат егәләр, шунда тейәлешәләр. Таҡыр юлдан бричкалар күңелле келтерәшеп бара. Йәш-елкенсәк көлөшә, матур итеп йырлап та ебәрә.

Мин иң арттағы бричканың иң артына бер мөйөшкә бөршәйеп кенә һыйып ултырҙым. Ҡәҙерле төйөнсөгөмдө ҡулыма ҡыҫып тотоп барам, ә күңелем... йырлай! Ҡуғанаҡ ауылы ла үтелде, Ҡарлыман ауылы ла сығылды. Беҙҙең арттан да бик күп атлылар килә. Мин беләм инде: был юлдан Ташбаш, Бәпес, Озёрки, Щеголевка, Аитулла, тағы бик күп ауылдар баҙарға йөрөй.

Ана, алда Ҡырмыҫҡалы ла күренде. Ай-һай, бигерәк ҙур ауыл икән ул. Хатта уны ауыл тиһәң, кәмһетеү ҙә булыр төҫлө. Беҙҙең бәләкәй ауылда ғына әле Түбән ос, Үрге ос тигән ике бригада бар. Бында, моғайын, кәм тигәндә, ун бригада булырҙыр. Ауыл ҙурлығы беҙҙең яҡта һәр кем телендә бригадалар менән үлсәнә. Колхоз ойошоуға ла әле өс-дүрт кенә йыл. Кескәй ауыл булһа ла, ул үҙенә бер башҡа колхоз.

Тик быларҙың, минең бер ҡаҙаҡ май тотоп, баҙарға килеүемә бер ҡыҫылышы ла юҡ.

Бына беҙ, Ҡырмыҫҡалыға килеп ингәс тә, бер урамдан икенсеһенә борола-борола, байтаҡ барҙыҡ әле. Ауыл уртаһындағы бер күперҙе сыҡҡас, өҫкә күтәрелдек һәм... баҙар майҙанына килеп индек. Ә унда! Иртә булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ гөжләп тора. Ҡырмыҫҡа иләүеме ни! Моғайын, ауылға исем ҡушҡанда, ошо баҙарға ҡарап әйткәндәрҙер, тигән иҫәр уй башҡа килеп сыҡты.

Сабирйән ағай аттарҙы бер ситкәрәк илтеп туғарырға кереште. Бричканан төшә башланыҡ. Һәм мине шунда йәшен һуҡкандай булды. Ҡулымда өр-яңы кизеле ашъяулыҡҡа төрөлгән шаллы туҫтаҡтағы май юҡ ине. Әсәйемдең «аңшайып йөрөмә» тип киҫәткәне шул булғандыр инде. Төшөрөп ҡалдырғанмын.

Мин шунда йәш үләнгә ҡапландым да буҫығып-буҫығып илай башланым. Аттарҙы туғарып, бесәнгә ҡушҡас ҡына, Сабирйән ағай миңә иғтибар итте.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Мәғәнәләрен асыҡлап, уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәнегеҙ.
2. *Май яҙғанды, май тасҡағанды* күргәнегеҙ бармы? Әсәйҙәрегеҙҙән һорап, был эш тураһында белешмә төҙөгөҙ.
3. Күпме ул *бер ҡаҙаҡ* май? Иҫкесә тағы ниндәй ауырлыҡ үлсәмдәрен беләһегеҙ? Уларҙы хәҙерге ауырлыҡ үлсәмдәре менән сағыштырығыҙ.
4. Яҡшы ғәҙәтме ул *аңшайып йөрөү*? Фекерегеҙҙе текстан миҫалдар килтереп дәлилләгеҙ.
5. *Йән урынына күргән* тип ниндәй нәмәгә әйтәләр? Һеҙҙең йән урынына күргән нәмәләрегеҙ бармы?
6. *Күңел йырлай* тигәндә нисек аңлайығыҙ? Һеҙҙең күңелегеҙ йырлаған саҡтарығыҙ буламы? Ә күңел илай ҙа беләме?
7. Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә? Фекерегеҙҙе текстан миҫалдар килтереп дәлилләгеҙ.
8. Һеҙҙең баҙарҙа булғанығыҙ бармы? Хәҙерге баҙарҙар хикәйәлә һүрәтләнгән Ҡырмыҫҡалы баҙарынан нимә менән айырыла?
9. «Мин баҙарға барҙым» тигән хикәйә яҙығыҙ.

## II

— Бәрәмәс, нишләп ятаһың, сауҙаға килгән кеше? — Шунда ул минең бысраҡ йөҙрөғөм менән ышҡыуҙан ҡыҙарған йәшле күҙҙәремдә күреп ҡалды һәм, эш үҙе уйлағандан етди икәнен һиҙеп алып, шаярыуын ташланы: — Ни булды һиңә?!

— Май... һыуҡ... төшөп ҡалған... һыуҡ!..

— Бына һиңә аказиә! Вәт тибә нә-ә!.. — тип, бот сабып һыҙғырып уҡ ҡуйҙы ул. — Ҡайҙараҡ төшөрөп ҡалдырҙың һуң һин уны?

Аптырап һорашыуы инде. Ҡайҙа төшөрөп ҡалдырғанымды белһәм, мин уны шул урында тағы ла ҡыҫыбыраҡ тотҡан булыр инем.

— Әйҙә, ҡарап киләйек әле! — тине Сабирйән ағай өмөтһөҙ генә тауыш менән. Ул беҙ үткән күпергә ҡарай, итек ҡуныһына сыбыртҡы һабын һуға-һуға атланы. Мин мышҡылдай-мышҡылдай уға эйәрҙем. Ә унан атлылар, йәйәүлеләр беҙгә ҡаршы өҙлөкһөҙ ағыла ла ағыла. Осо-ҡырыйы юҡ. Әгәр башымдың тамам ҡатҡан сағы булмаһа, был ҡәҙәре кешегә кәнфит, перәник нисек етер икән был баҙарҙа, тип уйлаған булыр инем.

Бара бирәбеҙ ҙә, Сабирйән ағай, аптыраған көндән, килгән кешеләрҙән һораштырып ҡараған була. Юҡ, кизеле ашъяулыҡ төйөнсөктө күреүсе булмаған. Табырһың инде! Өмөт өҙөп, кире боролдоҡ. Мин тағы ла ныгыраҡ һулҡылдай башланым. Аҙна буйы сәғәт һанап көткән шатлыҡлы көнөм юҡҡа сыҡты. Хәҙер инде баҙар минең өсөн бөтөнләй юҡ ине. Уның бер ҡыҙығы ла ҡалманы, мәғәнәһеҙгә әйләнде.

— Ҡайғырма, — тигән булды Сабирйән ағай.

Беләм, үҙе лә аптыраған инде. Һүҙ өсөн генә әйтә. Нисек ҡайғырмайһың. Һатҡас, көнө буйы баҙар йөрөрлөк май юҡ хәҙер! Шаллы туҫтаҡ юҡ! Әсәйем йәне урынына күргән, кеше килгәндә, ҡәҙерлегә генә йәйә торған өр-яңы кизеле ашъяулыҡ юҡ! Ни күҙем менән күренермен мин хәҙер, өйгә ҡайтып?..

Мин, бик меҫкен төҫ менән, шымтайып ҡына бричкаға менәм дә тағы ҡапланам. Сабирйән ағай үҙе ашыға, үҙе мине йыуатҡан була. Ул, мине йәлләп, ҡулыма ун биш тинлек аҡса тотторҙо ла, үҙ юлына ашыҡты. Был ун биш тин дә мине йыуата алманы. Ул, бер ҡәҙерһеҙ нәмә булып, тирле усыма йомарланған көйөнсә еүешләнеп бөттө. Шунда Гөлйыһан апай өтәләнеп яныма килеп етте. Минең ҡазаға ҡалғанымды ишеткән икән. Арҡамдан һөйөп йыуатты.

— Улай илап ултырма инде, баҙарға килгәс, — тип ун тин аҡса тотторҙо. Ул ғына етмәгән, кеҫәмә ике ус эре көнбағыш һалды.

Ҡазаға ҡалғаныма ярты сәғәт тә үтмәгәндер, уны бөтә ауылдаштарым ишетеп өлгөрҙө. Ҡыҙғаналар, йыуаталар. Йыуатыуҙары ҡоро һүҙ генә булмаһын өсөн, береһе — биш тин,

икенсеһе ун тин йомдороп китә усыма. Кеҫәләр көнбағыштан, кәнфит-перәниктән кәпәйҙе. Тәмле-татлыны көнө буйы ашап йөрөһәм дә, туймам төҫлө ине. Бәй, тиҙ үк бүктерҙе лә ҡуйҙы, йыйылған аҡсаның бер тинен дә тотонорға кәрәк булмай сыҡты. Аҡсаларҙы иҫәпләп ҡараһам, бер ҡаҙаҡ май хаҡынан артып уҡ киткән имеш. Бына, мин әйтәм, бәхет! Хәҙер әсәйем әрләмәҫ инде. Туҡта, май хаҡы сыҡты. Ә кизеле ашъяулыҡ, шаллы туҫтаҡ хаҡын нисек сығарырға?

Шунда атайымдың знакомы дядя Сергей тап булды.

— А-а-а, Ахмадулкин малайка! — тип килеп арҡамдан һөйҙө.

Мин, унан да рәт сығаһын тойоп, шунда уҡ:

— Дядя Сергей, мин базар гулял дә маслы питирал, — тип бик меҫкен төҫ сығарҙым. — Базар ходить сәпсим динге ниту!

Дядя Сергей, шунда уҡ, ыһ та тимәй, ике егерме тин сығарып та тотторҙо.

Эш бик хутлыға китте бит әле. Аҡса бик еңел йыйыла. Уның бер тинен кәметкә лә килмәй, киреһенсә, тиҙерәк-тиҙерәк арттырырға сабырһыҙланам. Шунда ла инде эсемдә аҡсаға ҡомһоҙлоҡ ҡорто яралды. Берәй ауылдашым осрау менән, төҫөмә ҡайғы һөрөмө сығарам да әлеге: «Май юғалттым бит әле», — тием. Үҙем мөлдөрәп күҙҙәренә ҡарайым. Ҡулдарым ҡалтырана. Апай йә ағай үҙе белеп бирмәһәләр:

— Берәй биш тинегеҙ артмаҫмы? — тип һорауҙан да тартынмайым. Бына китте эш! Аҡса үҫә лә үҫә. Был баҙарҙа минән дә шәберәк сауҙа иткән кеше юҡтыр! Ә минең нәфсем һаман арта бара. Тағы берәй ауылдашты тиҙерәк осратаһы ине тип, ҡабалана-ҡарһалана кешеләрҙе йырмаслап йөрөйөм.

Бәй! Бәхет бер килһә, килә икән. Күтәртеп элеп ҡуйған бер тәртә башында минең кизеле ашъяулыҡ төргәгем эленеп тора. Етмәһә, өҫтөнә сатай-ботай бер яҙыу элгәндәр: «Ҡайһы асыҡ ауыҙҙыҡы был нәмә?» Ул, әлбиттә, бысранып бөткән, эсендәге майы иреп тамып тора.

Мин Ҡырмыҫҡалы баҙарынан, донъяла иң ҙур эш ҡырған кеше булып, үҙемде батырҙарҙың-батыры тойоп ҡайтып төштөм. Күпме күстәнәс! Өҫтәүенә, күпме аҡса!

— Ҡайҙан алдың был ҡәҙәре аҡсаны? — тип әсәйем һағая төштө.

Мин, артыҡ иҫ китмәгәнгә һалышып, эре генә сирттереп, барын да һөйләп бирҙем. Бына хәҙер маҡтай башлаясаҡтарын көтәм. Ни күрәм: әсәйемдең йөҙөнә тәрән асыу билдәләре сыҡты.

— Оят! — тип бот сапты ул. — Намыҫың ҡайҙа! Һатҡанһың бит һин намыҫыңды! — тип әрнене ул. Әммә атайымдың минең сикәгә сабырға күтәрелгән ҡулын тотоп кире этәрҙе. — Теләнсегә әйләнгәнһең! Выжданыңды юғалтҡанһың! — Ул шунда уҡ аҡсаны кире йомарлатты. — Хәҙер үк таратып бир кире! Бер тинен ҡалдырма! Шунһыҙ өйгә аяҡ баҫаһы булма!

Теләнселәп алған аҡсаларҙы таратырға тура килде. Күбеһе етмәй ҡалды. Уларын түләп бөтөрмәүҙе әсәйем башына ла килтермәне. Киләһе аҙнала ла әле уны ҡапларға Ҡырмыҫҡалы баҙарына бер нисә ҡаҙаҡ май китте.

— Бына шулай осраштым мин «намыҫ» һүҙе менән, — тине минең юлдашым, әсе көлөмһөрәп. — Әгәр шунда әсәйем менән атайым: «Мал табыр егетһең икән, молодец!» — тип маҡтаһалар, мин ғүмерлеккә намыҫһыҙлыҡ ҡолона әүерелгән булыр инем.

**1.** Малайҙың баҙарҙағы «эштәре» тураһында һөйләгеҙ, уның ҡылығы үҙгәреүенә иғтибар итегеҙ.

**2.** *Буҫығыу, мышҡылдау, һулҡылдау* — ниндәй һүҙҙең синонимдары? Ошо уҡ мәғәнәне биреүсе тағы ниндәй һүҙҙәр бар?

**3.** *Асыҡ ауыҙ, эсендә ҡомһоҙлоҡ ҡорто яралған, намыҫһыҙлыҡ ҡоло, мал табыр егет, ҙур эш ҡырған кеше.* Был һүҙбәйләнештәрҙең ҡайһылары малайҙың холҡона хас? Һеҙ уға хас тағы ниндәй сифаттарҙы атай алаһығыҙ?

**4.** Һәйбәт сифатмы ул *эре сирттереү*? Һеҙҙә эре сирттереүселәр бармы? Һеҙҙең быға ҡарашығыҙ нисек?

**5.** Кеше ниндәй осраҡта *бот саба*? Сабирйән ағайҙың, малайҙың әсәһенең һүҙҙәрен табып уҡығыҙ. Һеҙҙең шундай хәлде күргәнегеҙ йәки үҙегеҙҙең бот сапҡанығыҙ бармы?

**6.** Май яҙыу тураһында мәғлүмәт табып йәки ололарҙан һорашып белегеҙ. Мәҡәлдәр менән танышығыҙ.

1. Май бешмәк — йән сыҡмаҡ.
2. Майы барҙың яйы бар.
3. Май ашағандың йөрәге талмай.

*Әнүәр Бикчәнтәев*

## ЯРАЛАНҒАН БҮРЕ КҮҘҘӘРЕ

### I

Әсәйемдең иркә ҡулдары һарыҡтың йәрәхәтле аяғына тотонһа, уның шифаһы тейә; әгәр ул ҡамыр иҙһә, уның уңмаған сағы булмай. Хатта әсәйемдең матурлығы ла үҙе кейгән күлдәккә, үҙе ябынған яулыҡҡа күскән кеүек тойола миңә.

Бер ваҡыт шулай, ҡышҡы һалҡын төндә, туңған сәпсекте әсәйем, ерҙән күтәреп, усына алды, теге бисара шунда уҡ тыпырсына башланы һәм, күҙҙәрен асып, шатлығынан «тиү-тиү» тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

Минең үҙемдең дә әсәйем ҡулдарының шифаһын әллә нисә тапҡыр татып ҡарағаным бар. Баш ауырта-нитә ҡалһа, дарыу эсеп тороу юҡ инде; әсәйем маңлайыма, ҡулыма ҡулын ҡуйып торһа, ауыртыу бөтә лә китә.

Әсәйемдең эшләгән сағын күҙәтеп тороу ҙа шул тиклем күңелле! Һарыҡтарҙың йөнөн ҡырҡа башлаһа йә булмаһа Аҡбар менән Һарыбайҙы иркәләргә тотонһа, мин инде уның аяҡ араһында уралып йөрөмәй түҙә алмайым. Ләкин мин әсәйемдең башҡа кешеләр менән һөйләшкәнен айырыуса тыңлап торорға яратам. Ул иң кәрәклене генә әйтә лә туҡтай. Күп һөйләшеп, бәхәсләшеп тормай. Ошо минуттарҙа мин уға һоҡланып: «Ул ысын ирҙәр кеүек һөйләшә лә баһа», — тип уны маҡтап ҡуям. Шатлыҡтың сиге юҡ инде!

Әсәйем, үҙ башынан бик күп ауырлыҡтар кисермәһә, моғайын, шулай уҡ батыр була алмаҫ ине. Ул күргәнде башҡаға күрергә яҙмаһын... Минең беренсе атайым, бөтөнләй сит атай, һуғышта үлгән. Минең икенсе атайым, ысын атайым, бынан өс йыл элек тракторға тапалып үлде. Шунан һуң беҙ икәү генә көн күрәбеҙ. Ваҡыты-ваҡыты менән мин йылмая һәм илай белмәгән әсәйемә ҡарап-ҡарап торам да хайран ҡалам: мин ундай түҙемле кеше була алмаҫ инем, тим.

Бөгөн беҙ йәш көтөүсе Исмәғилде ҡалаға оҙатабыҙ.

— Әгәр ҙә трибунаға сығып һөйләргә тура килһә, — ти әсәйем, — һин, һүҙ башлар алдынан, бына был тауҙарҙы иҫеңә

төшөр. Бында таш күп булһа ла, һыу аҙ. Шуға күрә самалап ҡына һөйлә, артыҡ ҙур йөкләмәләр алма...

...Исмәғил ағай күҙҙән юғалып өлгөрмәне, минең йөрәгем жыу итеп китте. Хәҙер инде был тауҙар араһында әсәйем менән икәү генә тороп ҡалабыҙ. Беҙҙең ҡарамаҡта биш йөҙҙән артыҡ һарыҡ, ике эт һәм бер ҡарт ат. Башҡа бер кем дә юҡ!

Тәүҙә әсәйем атты эсереп алды — ирҙәр ҙә эште шунан башларҙар ине. Һуңынан эттәрҙе ашатты.

Ул ни генә эшләмәһен, ҡайҙа ғына бармаһын, мин унан бер аҙым да ҡалмайым. Минеңсә, һәр бер ярҙамсы шулай эшләр ине. Әсәйем ат эсергәндә, мин теҙгенен тотоп торҙом... Ғәҙәттә, аттар ҡатын-ҡыҙ халҡын тыңламайҙар, уларҙың ҡулын һиҙәләр булһа кәрәк. Ләкин минең әсәйемдә ат тыңлай. Эттәр ҙә әсәйемдең күҙҙәренә генә ҡарап тора. Уның Аҡбарға ла, Һарыбайға ла ҡысҡырғанын һис бер хәтерләмәйем. Әллә хайуандарҙы иркәләп кенә лә тыңлатып буламы икән?

Бына мин үҙем әсәйемә бер яғым менән дә оҡшамағанмын. Башҡа ҡыҙҙар кеүек, бик йомшаҡ күңелле кешемен. Иларға ғына торам.

Матур күлдәктәрҙән башҡа нәмәгә минең иҫем дә, һушым да китмәй. Ә әсәйем инде һарыҡтарҙан башҡа йәшәй алмай. Оҙон йөнлө ҙур малдар үҫтерәм, тип хыяллана.

Ул бер яғы менән дә ирҙәрҙән ҡалышмай: улар кеүек үк һыбай йөрөй. Тальян гармунда уйнай башлаһа, йырламай ҙа, бейемәй ҙә түҙеп тороп булмай... Ә бына әсәйем ҡулына тәүге тапҡыр мылтыҡ алғас, ул атырға өйрәнер, тип бер кем дә ышанманы. Унан көлмәгән кеше ҡалманы. Иллә-мәгәр әсәйем сер бирмәне, атырға өйрәнмәй туҡтаманы. Хатта ул мине лә мылтыҡ менән эш итергә өйрәтте.

— Мал көтөүсенең етмеш төрлө һөнәре булырға тейеш, — ти ул, — йыртҡыстар һөжүм итһә, көтөүсе һалдат була. Мал ауырыһа, ул доктор вазифаһын үтәй. Ысын көтөүсе һарыҡтар өсөн хужа ла, әсәй ҙә, дуҫ та, иптәш тә...

...Тауҙар араһында был саҡта шаҡтай һалҡын була, шуға күрә беҙ йылы кейенгәнбеҙ. Шәлде сисеү юҡ инде!

Ҡараңғы төшә башлағас, беҙ һарыҡтарҙы кәртә эсенә йыйырға тотондоҡ. Эттәр үҙ эштәрен яҡшы беләләр, уларҙы өйрәтеп тораһы юҡ. Аҡбар, сабауыллап, һарыҡтарҙы ҡыуа, ә Һарыбай өрөп туя алмай. Уға эш тә, уйын да.

Һарыҡтарҙы урынлаштырып бөткәс, беҙ үҙебеҙ тураһында ла уйлай башланыҡ. Иң әүәл төн буйы яғырға етерлек сыбыҡ-сабыҡ йыйып ҡуйҙыҡ. Шишмәнән мин бер биҙрә һыу алып килгәс, әсәйем ҡамыр баҫырға тотондо.

Тап бына ошо күҙ бәйләнгән саҡта, бүре олоған тауыш ишетелде. Тыным ҡыҫылды. Айбанып киттем.

— Абау, ниндәй ҡурҡыныс! — тинем мин, ләкин әсәйем өндәшмәне.

Һарыҡтар әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ташланып ҡаранылар ҙа, ялтырауыҡ күҙҙәрен тумһайтып, шым булдылар. Беҙҙең ерән ҡашҡабыҙ, асыуланып, алғы тояҡтары менән сапсынырға тотондо.

Аҡбар, тамаҡ ҡырғандай, ырылдап алды. Бәләкәй Һарыбай, ҡурҡыуынан ни эшләргә белмәй, миңә һырышып һырыша. Ул, йөнөн тырпайтып, һалҡын моронон минең аяҡҡа төртөп ятты. Тик әсәйем генә, йыртҡысҡа иғтибар итмәй, ҡамыр йәйә бирҙе.

Бүре олоп арыны булһа кәрәк, ул һуңғы тапҡыр әсе итеп сыйнап ебәрҙе лә ҡапыл тынды. Йөрәгем һыҡрап китте. Шунан һуң ғына әсәйем миңә боролоп ҡараны.

— Мылтыҡты алып кил! — тине ул.

— Әсәй! — тип ҡысҡырып ебәрҙем. — Мин бүренән ҡурҡам... Бик ҡурҡам!..

— Тиҙерәк бул, ҡыҙым! — тип өҫтәне ул. — Бүре олоған яҡҡа табан бар ҙа атып ебәр...

Нисек инде әсәйеңдең һүҙен тыңламайһың! Аяғым тартмаһа ла, мылтыҡты ҡулыма тотоп, әле генә бүре олоп тынған яҡҡа табан атланым. Күҙгә төртһәң, күренмәй. Алан-йолан ҡарана-ҡарана, күп булһа егерме аҙым киткәнмендер, артыҡ атлар хәлем ҡалманы. Йөрәгем сыға яҙҙы! Мылтыҡты ҡапыл ғына күтәрҙем дә, тоҫҡап-нитеп тороу юҡ инде, атып ебәрҙем.

Мылтыҡ тауышы төндө урталай ярып киткән кеүек тойолдо. Яурыныма приклад тибеп алһа ла, иғтибар итеп торманым. Шатлыҡтан ни эшләргә белмәй:

— Әсәй, аттым! — тип ҡысҡырып ебәрҙем.

Тик Һарыбай ғына мине өрөп ҡаршыланы, Аҡбар иһә миңә иғтибар ҙа итмәне.

— Ишеттем, — тине әсәйем бик тыныс ҡына. — Әйҙә, ҡулыңды йыу ҙа ашарға ултыр. Ләкин беҙ, ҡашыҡ күтәреп,

бер ҡабырға ла өлгөрмәнек, бүреләр ҡот осҡос итеп олоп ебәрҙеләр. Был юлы уларҙың иҫәбе-һаны ла юҡ кеүек тойолдо.

Мин, түҙә алмай, ҡалтыраныуымды һиҙҙермәҫкә тырышып:

— Әсәй, — тинем, — тағы ла мылтыҡ алып үҙҙәрен ҡурҡытып киләйемме?

— Юҡ, — тип яуап ҡайтарҙы ул. — Был юлы уларға ҡаршы мин үҙем сығырға тейешмен. Ас бүреләрҙән һаҡ булырға кәрәк, улар юҡҡа ғына оломайҙар, Ә һин, ҡыҙым, утын йәлләмә. Бындай төндә усаҡ яҡты янырға тейеш.

Әсәйем кеҫәһенә патрондар тултырҙы ла мылтыҡҡа һуҙылды. Уның ҡулы дерелдәмәй. Ул шундай тыныс!

Әсәйем артынан Аҡбар ҙа ҡуҙғалды. Ни өсөндөр ул миңә теләр-теләмәҫ кенә киткән кеүек тойолдо; беҙҙең батыр эткә ни булған?

Мин, бер үҙем генә ҡалғас, һикереп торҙом да бер ҡосаҡ утынды усаҡҡа килтереп ташланым. Сытырлыҡ ағас гөрләп янып китте. Ҡулымдан килһә, бөтә тирә-яҡты яҡтыртып ебәрер инем, ләкин ҡулымдан ғына килмәй...

Әсәйем китеп күҙҙән юғалғас, бик оҙаҡ ваҡыт үткән кеүек тойолдо. Ул ғына һаҡ булһа ярар ине! Бына шомло, йөрәк ярырҙай әсе тауыш яңғырап китте. «Әллә беҙҙең Аҡбарҙы бүреләр өҙгөләйме икән?» — тим. Ни эшләргә? Тап ошо минутта әсәйем мылтыҡ атып ебәрҙе.

Бер ни белмәй, бер ни күрмәй, усаҡ янында ултырып түҙер хәлем ҡалманы. Аймылыш булмаҫ өсөн, ҡулыма бер ҙур торонбаш тотоп алдым да әле генә ниндәйҙер аяныс тауыш ишетелгән яҡҡа табан саптым.

Өҙгөләнеп сыйнаған һәм әсәйемдең аяҡ аҫтында ятҡан ҙур бүрене күргәс кенә, мин иркен тын алдым. Әсәйем ниңәлер аптырап ҡалған кеүек тойолдо. Уның йөҙөндә: «Шундай йыртҡысты еңдем дә баһа!» — тигән шатлыҡ күренмәй. Уға ни булған?

— Әсәй! — тинем мин, ләкин ул миңә яуап ҡайтарманы.

Уға ҡарап, минең үҙәгем өҙөлөп китте, күңел тулышҡанға сыҙай алмай, илап ебәрҙем: «Әгәр ҙә мәгәр беҙҙең ғаиләлә ир кеше булһа, әсәйемдең үҙенә бүре көтөүенә ҡаршы сығырға

тура килмәҫ ине, — тинем мин. — Исмаһам, мин дә малай булмағанмын... Колхоз өсөн ул бына тигән һарыҡтар үрсетергә теләй, ләкин уҫал бүреләр һәм уҫал телле кешеләр уға тыныс ҡына эшләргә ирек бирмәй. Моғайын, әсәйем шул турала уйға ҡалғандыр... Уны шул борсойҙор».

Мин илағанды ишетеп, әсәйем әйләнеп ҡараны ла:

— Факелыңды юғарыраҡ күтәр, ҡыҙым! — тине. — Бына хәҙер йәрәхәтләнгән бүренең күҙҙәренә ҡара; улар ҡоролар, йәшһеҙ илайҙар, һәм ул ҡомһоҙ күҙҙәр ниндәй уҫалдар! Шуны онотма! Был донъяла һиңә әсәйеңдең күҙҙәренән башҡа бүре күҙҙәре менән дә осрашырға тура килер. Уларҙың һәр ҡайһыһын да айыра белергә тейешһең...

1. Хикәйә кем исеменән алып барыла?
2. Ҡыҙҙың әсәһе түҙемле, аҡыллы, көслө, ҡыйыу кеше булыуын текстан миҫалдар табып иҫбатлағыҙ.
3. Ҡыҙыҡай ни өсөн үҙен әсәһе менән сағыштыра?
4. *Йомшаҡ күңелле, сер бирмәм, мал көтөүсенең етмеш төрлө һөнәре булырға тейеш, күҙгә төртһәң күренмәй, үҙәгем өҙөлөп китте, күңел тулышыу, уҫал телле кешеләр* тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ, уларҙың синонимдарын табығыҙ.
5. Төндә бүреләр һарыҡ көтөүенә яҡынлашҡас, әсә үҙен нисек тота? Ҡыҙ нимәләр кисерә?
6. Аҙаҡҡы абзацты уҡығыҙ һәм унда һалынған мәғәнәне аңлатығыҙ.
7. Ни өсөн әҫәр «Яраланған бүре күҙҙәре» тип атала?

**99-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе табығыҙ, төрөн әйтегеҙ.

1. Ағас емеше менән, ә кеше эше менән.
2. Ағыу менән дарыу бер заттан.
3. Дауылдан һуң диңгеҙ тына.
4. Кешегә ай менән ҡояш та ярамай.
5. Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй.
6. Өйөңдәге сүптеситән аша ырғытма.
7. Һөрөнөр өсөн түңгәк табыла.



## ГӨЛНУР ЯҠУПОВА

## (1948)

Гөлнур Миҙхәт ҡыҙы Яҡупова 1948 йылдың 24 июнендә Ғафури районы Сәйетбаба ауылында тыуған.

Балалар өсөн бер-бер артлы «Ярғанат», «Ғәжәп хәбәр», «Ҡыҙыл китап аманаты», «Тылсымлы ҡәләм» исемле китаптары донъя күрә.

Иң күренекле әҫәре — «Ҡатындар» трилогияһы.

### МЕЙЕС ӘБЕЙ

Әлфиәнең тиҙерәк үҫкеһе, бөтә нәмәне белгеһе килә. Шуғалыр төпсөнөргә ярата, төрлө һорауҙар биреп, өлкәндәрҙе йөҙәтә. Яңыраҡ ул бер ғәжәп нәмәгә иғтибар итте: баҡһаң, ауылдың күп кенә кешеләренең исеме генә түгел, ҡушаматы ла бар икән. Бына уның өләсәһен, мәҫәлән, Мейес әбей тип йөрөтәләр. Күрше Зөлфиә инәйҙе Көләкәс тиҙәр, ул, ысынлап та, гел көлөп кенә тора, шуғалыр. Баҡса арты Хатип бабайҙы Ялтас тип йөрөтәләр, сәсе ҡойолоп, башы ялтырап торғанғалыр. Ә өләсәһенә ни өсөн Мейес әбей тигән ҡушамат тағылғанын аңлай алмай Әлфиә. Ҡарап-ҡарап ҡуя, тик бер ҙә уны мейескә оҡшатмай. Бер көндө шулай берсә түр яҡта он иләп торған ҡаҡса кәүҙәле өләсәһенә, берсә ярты бүлмәне биләп ултырған оло мейескә оҙаҡ ҡына теклəп торҙо ла әсәһенән һорай ҡуйҙы:

— Әсәй, ниңә өләсәйемдән Мейес әбей тип көләләр ул?

— Яратып әйтәләр уны, көлөп түгел, — тине әсәһе. — Өләсәйең мейес менән бер туған һымаҡ бит ул.

— Нисек инде бер туған? — Әлфиә тамам аптыраны был һүҙгә.

— Ә һин ашыҡма, күҙәт, үҙең дә күрерһең, аңларһың быны...

Иртәгеһенә, көн боҙолоп, ямғыр яуып ебәрҙе. Көндәр һыуыта, көҙгә тарта башлағайны шул. Тышта — бысраҡ,

өйҙә — һыуыҡ, ҡотһоҙ. Бесәй ҙә мыраулап Әлфиә эргәһенә килеп һыйынды, ул да өшөйҙөр инде. Шул саҡ өләсәһе утын күтәреп килеп инде.

— Оло мейескә яғып ебәрәйем, — тине ул, — икмәк һалайым, өй ҙә йылыныр.

Күп тә үтмәй, усаҡта сытырлап ут тоҡанды, өйгә йәм инде. Өләсәһе ҡамырҙы йомарлаҡлап табаларға һалды. Ә утын янып бөткәс, күмерҙе алғараҡ тартып, табаларҙы мейескә ҡуйҙы. Өй эсенә тәмле икмәк еҫе таралды.

Әлфиә тағы ла бер мейескә, бер өләсәһенә ҡарап алды.

Бәй, аҡ алъяпҡыс быуып, бөйөрөнә таянып торған сағында ул, ысынлап та, мейескә оҡшаған икән! Әлфиә йүгереп барып өләсәһен ҡосаҡланы. Өләсәһе унның арҡаһынан һөйҙө, сәсенән һыйпаны. Уның ут эргәһендә йөрөп ҡыҙарған йөҙөнән, ҡулдарынан йылы бөркөлә һымаҡ тойолдо Әлфиәгә.

Ул да булмай, бер төркөм сөгөлдөрсө апайҙар килеп инде. Өйҙәре ауыл осонда ғына булғас, йә һыу эсеп сығырға, йә икмәк-тоҙға инеүселәре йыш була уларға.

— Ямғырға эләктек, туңдыҡ, Мейес әбей, һиндә йылынып, кибенеп китәйек әле, — тип апайҙар йылы бәреп торған оло мейесте уратып алды.

— Әйҙүк, әйҙүк, минең мейесемдең йылыһы һәр кешегә етерлек, — тип өләсәһе уларҙы ихлас ҡаршы алды.

Бәй, өләсәһенең алсаҡ сырайын Әлфиә ап-аҡ булып, өй яҡтыртып ултырған мейескә оҡшатты ла ҡуйҙысы был юлы!

Шунда тағы ишек асылды, түбәнге ос Ҡалай әбей килеп инде. Ни өсөн Ҡалай тигәндәр икән уны? Әлфиә быны башына һалып ҡуйҙы, һорашып белергә кәрәк әле, моғайын, берәй хикмәте барҙыр.

— Эй, был мейес, күп йылытты инде ул беҙҙе, — тип һөйләнә-һөйләнә, Ҡалай әбей ҙә арҡаһын мейескә терәне. — Анау һуғыш йылдарында һуң… Әрҙәнә ҡырҡып ҡайтышлай, Мейес әбейгә инеп хәл алып сыҡмаһам, үҙебеҙҙең осҡа ҡайтып та етә алмаҫ инем әле. Тамам туңғансы, ҡулдан балта-бысҡы төшөп киткәнсе эшләй торғайныҡ бит.

— Мейес әбей үҙе өйҙә ултырғанмы ни ул саҡта? — тип һүҙгә ҡушылды апайҙар.

— Юҡсы, ул да беҙҙең менән эшләй. Иртүк мейескә тултырып яғып, булдырып, йүшкәһен бикләп китә, йылыһы

шул көйөнсә беҙ ҡайтҡансы һаҡлана. Тәрбиәләп, һылап-һыйпап тотто бит ул мейесен ғүмер буйы…

Өләсәһе шунда оло мейес эргәһенә барып, уның ап-аҡ һыртын һыйпап-һыйпап алды.

Мейес әбей… Ҡайһылай килешле ҡушамат. Әлфиә йылмайып ҡуйҙы.

1. Көндөң боҙолоуын, күҙгә тарта башлағанын һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Фекерҙәрегеҙҙе үҙегеҙҙең күҙәтеүҙәрегеҙ менән дәлилләргә тырышығыҙ.
2. Тәбиғәттең насар көндәре буламы? Ә кеше ни өсөн уларҙы *яҡшыға* һәм *насарға* бүлеп ҡарай? Һеҙҙеңсә нисек? Яҡшы һәм насар көндәргә хас сифаттарҙы һанап сығығыҙ.
3. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: *бөйөргә таянып тороу* кешенең күңел торошона бәйлеме икән? Әйтәйек, кәйефһеҙ кеше бөйөргә таянып торамы? «Тән хәрәкәттәренә, торошҡа ҡарап, кешенең кәйефен белеп буламы?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Ауыл мейесен күҙ алдына килтерегеҙ: унда оло мейес, усаҡ, плита бар. Уларҙың һәр береһенең — үҙ тәғәйенләнеше, шуны асыҡларға тырышығыҙ. Ошонан сығып, текста ебәрелгән бер аңлайышһыҙ деталде табығыҙ.
5. Сыуал – мейесме, әллә каминмы? Һәр береһенең һүрәтен төшөрөгөҙ. Башҡорт ауыҙ-тел ижадында *сыуал* төшөнсәһе бар, ә *мейес* тигән нәмә юҡ. Ниңә икән? Фекер алышығыҙ.
6. Әлфиә ауылдаштарының исемдәренән тыш ҡушаматтары булыуын белеп аптырай. Һеҙҙең ауылда (ҡасабала) ҡушаматлы кешеләр бармы? Ололарҙан һорашып, берәй ҡыҙыҡлы ҡушамат тураһында белешмә төҙөгөҙ.
7. Әлфиә өләсәһен, *аҡ алъяпҡыс быуып, бөйөрөнә таянып тороуына, алсаҡ сырайына* ҡарап, мейескә оҡшата. Ә уның *мейес менән бер туған һымаҡ* булыуының сәбәбе шунда ғынамы икән? Һеҙҙеңсә нисек? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
8. «Минең әсәйем» йәки «Минең өләсәйем» тигән темаға инша яҙығыҙ. Түбәндәге мәҡәл, әйтемдәрҙе лә ҡуллана алаһығыҙ.
   1. Әсә хаҡы — Тәңре хаҡы.
   2. Әсә йөрәге бала тип өҙөлөр.
   3. Инә — өйҙөң өрлөгө.

**100-сө күнегеү.** Ярҙамсы һүҙҙәр тураһында ижади эш эшләгеҙ (әкиәт, хикәйә, һ. б.)



# НАЖИӘ ИГЕҘЙӘНОВА

## (1946)

Нажиә Заһир ҡыҙы Игеҙйәнова 1946 йылдың 1 сентябрендә Башҡортостандың Ҡыйғы районы Абзай ауылында тыуған.

Нажиә Игеҙйәнованың «Таныш булайыҡ», «Еҫле һабын», «Исемем матур икән», «Яҡты хыял», «Көндәш», «Тәҡдир» тигән китаптары бер-бер артлы донъя күрә.

### ӨЙРӨЛМӘК

Яҙғы ташҡында ҡайҙандыр ағып килеп, ярҙа ҡалған ҡарт өйәңке өҫтөндә бер әбей ултыра. Уңып бөткән яулығы аҫтынан ҡылғандай аҡ сәстәре бүҫелеп сыҡҡан. Төпкә батҡан моңһоу күҙҙәре ташҡын килтереп ташлаған өйәңкенән башҡа бер нәмә лә күрмәй, ҡолаҡтары бер ни ишетмәй... Ә яҡында ғына, йылға буйын яңғыратып, бала-саға һыу инә, таллыҡта ҡоштар сырҡылдай, бөтә тереклеккә ғүмер бүләк итеүенә ҡыуанғандай, ҡояш йылмая. Тик әбей генә был хозурлыҡты күрмәй ҙә, тоймай ҙа һымаҡ, яҫы устары менән өйәңкенең ҡытыршы олонон һаҡ ҡына һыйпай ҙа һыйпай, көлһыу ирендәре ҡыбырлап-ҡыбырлап ҡуя: «Хәс тә минең һымаҡ, һин дә ҡартайғанһың инде, кәрең кәмегән. Ҡасандыр тирәйүнде йәмләп, ирәйеп ултырғанһыңдыр, яныңдағы ағас-ҡыуаҡтарға, тамырҙарыңдан шытҡан үҫентеләреңә көс-ҡеүәт биргәнһеңдер, йәйҙең зәһәр ҡыуанынан, ҡыштың ыжғыр буранынан ҡурсалағанһыңдыр. Минең дә дүрт бөртөк балам бар. Шөкөр, барыһы ла имен-аман, Хоҙай уларға бәхет, оҙон ғүмер бирһен, йәмәғәттәре менән тигеҙ ҡартайһындар, балаларының изгелеген күрһендәр...» — Әбейҙең хәсрәтле күҙҙәренән ҡурғаштай ауыр йәш тәгәрәне. Ғәҙәттә ҡарт кешенең күҙ йәше сыға һалып бармай, әммә күңеле тулышҡан Нуриҙә әбейҙең йәше субырлап аҡты ла аҡты. Үҙенең был халәтен күреп ҡалмаһындар, типтер, ахырыһы, күҙҙәрен яулыҡ осо

менән йәһәт кенә һөрттө лә ҡарашын йылға буйына күсерҙе: «Әле ҡасан ғына минең балаларым да һыу буйынан ҡайтмай торғайны. Эҙләп киләм. Бәбекәйҙәрем, мине күргәс кенә, асыҡҡандарын белер, көлөшә-көлөшә кемуҙарҙан ҡаршыма йүгерер, һәр береһе ҡосағыма үҙе генә һыйынырға тырышыр ине.

— Әсәй, нимәкәй бешерҙең? — тип һорай Фәриҙәм.

— Миңә ҡоймаҡ ҡойған! — ти Фәритем.

— Белмәнегеҙ, белмәнегеҙ, әсәйем билмән бешергән, үәт! — тип иламһырағандай итә Сәғиҙәм.

— Әсәйем мине генә ялата, миңә лә бешелгән! — тигән була төпсөгөм — Сәғитем.

— Ҡайтҡас, күрерһегеҙ. Һәйбәтләп ашап алығыҙ ҙа, мунсаға! — тигән фарман бирәм.

— Эйе лә, тағы мунса! — тип танауын сира Фәриҙәм.

— Көн буйына һыуҙан сыҡмайһығыҙ, бетләрһегеҙ бит! — Был юлы мин ысынлап асыуланам.

Ана шулай шау-гөр килеп, өйгә ҡайтып еткәнебеҙҙе лә һиҙмәйбеҙ. Әй-й-й, булған бит бәхетле саҡтарым...»

* * *

Нуриҙәнең йәшлеге һуғыш дәүеренә тура килде. Ул замандағыларҙың иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы Нуриҙә лә күтәрҙе. Еләктәй бешкән ҡыҙҙар ауыр эштән, аслыҡтан иртә ҡартайҙы, күбеһе бауырына бала баҫманы. Нуриҙәнең яҙмышы йәштәштәренән айырылды: һөйгәне яуҙан ҡайтты — Мөхәммәте менән ҡауышты. Яугирҙың аяҡ-ҡулы теүәл булһа ла, үпкә сире менән ҡайтҡайны. Мөхәммәт кәләшенең тәрбиәһенән һауыҡҡандай ҙа булғайны, Фәриҙәләре тыуған йылда колхоз эшенә йөрөй башлағайны. Бер нисә йыл ғына әҙәмсә йәшәргә өлгөрҙө: көҙгө һалҡын ямғырға эләгеп, ҡабаттан ауырып китте. Фәриттәре тыуғанда, сире көсәйгәйне инде. Сабыйына мөлдөрәп кенә ҡарап ятты: ҡулына алып, һикертә алманы...

Нуриҙә ике бала менән тол ҡалды. Әлдә әсәһе бар. Балаларҙы Рауза әбей ҡарашмаһа, йәш ҡатын колхоз эшенә көн ҡалдырмай йөрөй алмаҫ ине.

Мөхәммәттең гүр эйәһе булыуына биш йыл тулғас, уларҙың ауылына Сәйет тигән кеше килеп сыҡты. Колхоз

хужалары уны Нуриҙәнең әсәһе Рауза әбейгә фатирға урынлаштырҙы. Ҡулы алтын ине ирҙең, ауыл өсөн бик кәрәкле оҫта ине: колхоз тимерлегендә эшләне, дан итеп быйма баҫты, итек, тун текте, самауыр төҙәтте, Рауза ҡарсыҡ уның ипле холҡон, эшкә маһирлығын маҡтап бөтә алмай: «Йәш бит әле ул, арыу ғына ҡатынға йортҡа керһә инде...» — тип һүҙ ыңғайында ғына әйтеп ҡуйған була. Нуриҙә һәйбәт төшөнә: әсәһе уға димләмәксе, ҡыҙымдың ғүмере яңғыҙ үтмәһен, донъя көтөргә, балаларын үҫтерергә еңелерәк булыр, тигән уйылыр.

***

Артабан Сәйет менән Нуриҙә һәүетемсә генә донъя көтөп алып китәләр һәм ике балалары: Сәғиҙә менән Сәғит тыуа. Нуриҙәнең бәхете оҙаҡҡа бармай, Сәйеттең икенсе ауылда ғаиләһе барлығы билдәле була. Уны ҡатыны килеп, йәшәгән яғына, өс улы янына, алып ҡайтып китә.

***

Ошо хәлгә Рауза әбей, бахыр, бөгөлөп төштө:

— Эй Аллам, баламды харап иттем, минең арҡала ғына булды был бәхетһеҙлек! Ата-әсәһе, зат-зәүере тураһында һораша башлаһам, әллә нишләп китә торғайны ла. Һуғыш кемдәрҙе генә яңғыҙ ҡалдырманы, бының да бер кеме юҡ икән, йөрәк яраларын ҡуҙғалтмайым, тип әрһеҙләнеп төпсөшмәнем. Ә үҙе бер нәмә лә һөйләмәне. Кешенең кемлеге маңлайына яҙылмай шул, — тип һамаҡлай-һамаҡлай, һығылып иланы.

— Кеше ишетмәһен, кеше көлмәһен, илама, әсәй. Тәҡдирем шулай икән, бер кемгә лә үпкәләмәйем. Үҙем ғәйепле, мин дә уны әкрәбәһеҙ ҡыутомшоҡ тип йәлләнем. — Нуриҙә әсәһен йыуатҡан булды.

Ҡыҙының ошондай яҙмышына үҙен бөткөһөҙ ғәйепле һанаған Рауза әбей Нуриҙәгә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡайғырҙы, аяҡтан яҙып ауырып китте. Саҡ ҡына арыуланғас, ике өй араһында йөрөүе ҡыйын, тип Нуриҙәһенә күсеп килде, балаларҙы ҡарашты. Йәше лә бара ине уның, әжәл тигән әрһеҙ «ҡунаҡтың» оҙаҡ көттөрмәҫен аңлаған Рауза әбей Алланан еңел үлем, йәй көнө генә мәрхүмә булыуын теләне. Ҡышын китһә, Нуриҙәгә ҡыйыныраҡ булыр, тип уйланы. Теләге

ҡабул булды: йәйҙең йәмле көндәрендә, аҙна-ун көн генә ауырып, донъя ҡуйҙы.

Нуриҙә эш атына әйләнде. Колхоз йөгөн дә тартты, үҙенең донъяһын да ирле кешеләрҙекенән һис кәм көтмәне. Ул эшләмәгән эш ҡалманы: утынын да киҫте, бесәнен дә сапты, ситәнен дә үрҙе. Бағана ултыртырға ла оҫтарып алды: тәүҙә ерҙе ярты метрҙай ҡаҙа, соҡорға һыу ҡоя ла ослanған ағасты ергә ҡаҙай, һурып ала ла һыу ҡойоп, йәнә ҡаҙай. Һыуға йомшарған ергә бағана еңел керә. Унан тупраҡты тапап-тапап күмә. Бер ҙә ир кешенең эшенән кәм булмай.

Нуриҙә тағы ла ҡырыҫланып китте, әсәһе кеүек, Хоҙайға ялбара башланы: «Кеше хурлаһа хурлаһын. Хоҙайым, һин хурлама! Балаларымды үҫтерергә көс бир, һаулыҡ бир, ғүмер бир!» — Сабырлығы сатнаған мәлдәрҙә шулай һамаҡлай торған булды. Хоҙай Тәғәләнең теләктәрен ҡабул итеүенә ихлас ышана, күңеле тынысланып ҡала, донъя көтөргә көсө артҡандай була. Ә Аллаһы Тәғәлә уны бәлә-ҡазанан, ысынлап та, ҡурсаланы.

Бер йылды (ул саҡта балалары ҡул араһына кererлек түгел, бәләкәй ине) йәй көнө өйөп ҡуйған ҡоро утынды ташырға өлгөрмәне, ҡышҡа ҡалды. Ваҡыт табып, бәләкәй санаһын һөйрәп, билдән ҡар йырып, китте шуны алырға. «Эй, Хоҙайым, ошо балаларҙы үҫтергәнсе, ғүмер, һаулыҡ бир», — тип, ғәҙәтенсә, һөйләнә-һөйләнә, санаһына тауҙай итеп сытыр тейәне лә йүкә бау менән ҡыҫып бәйләне. Аҙна буйы торған һыуыҡта йылғаны туңған тип уйлап, ат йөрөгән урау юлдан бармай, туранан сығырға булды. «Алла бирһә, балаларыма бәлеш бешерермен». — Шундай уйҙар менән килгән Нуриҙә һиҙмәй ҙә ҡалды, аяҡ аҫтындағы боҙ уйылып китте.

— Аллаҡайым, йәтим ҡалдырма балаларымды! — тип әллә ниндәй тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе.

Ул арала боҙ йәнә кителде. Һыуыҡ һыуҙан бигерәк ҡурҡышынан Нуриҙәнең тәне ҡорошто: бөтә ауылдың ҡото осҡан өйрөлмәккә тура килгәйне. Хаяһыҙ өйрөлмәк яй ғына өйрөлөп ята. Уның хаҡында белмәгән кеше шәйләмәй ҙә. Ҡорбанын әлегәсә ысҡындырғаны юҡ уның. Былтыр ғына колхоз бейәһен йотто. Бер ни ҙә эшләй алманылар, кешнәй-кешнәй өйрөлөп, һыу төбөнә киткәнен йәлләп ҡарап тороуҙан уҙманылар.

Бәхетенә, сытыр тейәлгән санаһы йылға ситендәге талға эләккәйне. Сана бауын урап тотҡан Нуриҙә шуның арҡаһында ғына ағымға бирешмәне. «Балаларым хаҡына, Хоҙайым, балаларым хаҡына ҡотҡар!» — тип Нуриҙәнең асырғанып ҡысҡырғанын ишеткәнме, әллә һыуға төшөп киткәнен күреп ҡалғанмы, ат һуғарырға килгән Хатмулла баҡсаһының буй кәртәһен күҙ асып йомғансы һурып алды ла килеп тә етте.

— Тотон, Нуриҙә, ныҡ тотон! Артыҡ сәбәләнмә! Санаңдың бауын ысҡындыр!

Нуриҙә боҙло һыуға ҡулдары тунһа ла, һайғауға йәнтәслим йәбешкәйне. Һыуланған кейем аҫҡа, Хатмулла өҫкә тарта. Боҙ өйрөлмәк яғына тағы саҡ ҡына уйылһа, Хатмулла ла, һайғауы ла ярҙам итмәйәсәк, «аждаһа» һурып ҡына аласаҡ…

Нуриҙә ҡотолдо.

Кейемдәре туңып ҡатҡан әсәләрен күргәс, балалар аҡырып иларға тотондо.

— Хоҙайға мең шөкөр, һеҙҙең бәхеткә тере ҡалдым. Хатмулла бабайығыҙға рәхмәт, ғүмере оҙон булғыры! — Тешетешкә теймәй, хәбәрен саҡ һөйләне Нуриҙә.

Ул арала Хатмулланың ҡатыны килеп керҙе:

— Мунсамды томалап ҡына тора инем, Хатмулла хәлеңде һөйләне. Кейен дә, әйҙә, тиҙерәк мунсаға! — тип ашыҡтырҙы.

— Хәҙер, апай, санамды барып алам да, балалар өшөй башлар, мейескә яғайым да…

— Санаңды Хатмулла барып алыр, мейесеңде үҙем яғырмын. Йә, йә, тиҙерәк!

Мәтрүшкәле миндек менән сабынып, дан итеп мунса кереп сыҡты Нуриҙә. Иртәгеһенә сөскөрмәй, йүткермәй, һин дә мин донъяһын көтөп алып китте.

Ошо ваҡиғанан һуң, тағы әллә ниндәй бәләгә юлыҡмаҫ борон тип, колхоз етәкселәре өйрөлмәктән ҡотолорға уйланы. Йылғаның юлын борорға тип, биш-алты йөҙ метрҙай арыраҡ бульдозер менән йырын йырҙылар. Ни хикмәттер, йылға юлын үҙгәртмәне, яр буйҙарын, бынамын тигән кисеүҙе боҙоуҙары ғына булды, һуңғы йылдарҙа йылға һиҙелерлек һайыҡһа ла, өйрөлмәк юҡ-юҡ та үҙенә ҡорбан алып тора: яңыраҡ ҡына ҡунаҡҡа килгән егет харап булды. Уны өйрөлмәк хаҡында иҫкәртергә өлгөрмәгәндәр.

Нуриҙә колхозда «таяҡҡа» эшләһә лә, дүрт балаһының тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булды. Өҫ-баштарының бөтөнлөгө менән бүтәндәрҙән айырылып та үҫте әле уның балалары. Донъяһын да ете ҡат уйлап, ете ҡат үлсәп көттө. Ҡош-ҡортто күп аҫраны, һауын һыйыр менән ҡышлауҙан өҙөлмәне, быҙауы менән өс баш булып китә. Аҙна-ун көн йыйған йомортҡаһын, ҡаймаҡ-майын, ҡоротон йөкмәп, ун биш саҡрымдағы ҡалаға сығып китә. Юлға һары таңдан ҡуҙғала, эңер төшөүгә ҡайтып етә. Шулай айына бер нисә ҡабат ҡала баҙарын тапай. Тәүҙәрәк колхоз рәйесе менән бригадир уны баҫтырып ҡаңғырттылар. Әммә Нуриҙә бик оҫта ҡаса ине. Күпме ҡарауыллаһалар ҙа, осрата алмай ҙа ҡуялар: берҙән, ерек араһынан Нуриҙә һалған тар ғына һуҡмаҡты белмәйҙәр, икенсенән, ҡатын тегеләрҙең ҡаты йоҡоһонда юлға сыға. Нисек бүре-фәләнгә осрамаған — Алла һаҡлағандыр. Һис ҡурҡмай торғайны, нужа батырайтҡандыр инде.

Бер заман колхоз рәйесе уның шулай баҙар йөрөүен оло ғәйеп итеп, йыйылышта һөйләп маташты:

— Ҡыҙыу эш мәлендә Нуриҙә апай баҙар сабыуҙан бушамай! — тип ауыҙын ғына асҡайны, быныһы тоҡанды ла китте:

— Йомортҡа ғына ла һатмағас, дүрт тамаҡҡа нимә ашатырға ла нисек кейендерергә тейешмен? Һинең балаң берәү генә бит, әллә минекеләрҙе үҙең ҡарарға социалистик йөкләмә алаһыңмы?

— Мәктәп ярҙам итә бит, Сәғиҙәңә форма алып биргәндәр. — Рәйестең асыуҙан күҙҙәре түңәрәкләнде.

— Бер күлдәкте ике ҡыҙ нисек бүлешер икән? Фәриҙәмә һыймай ҙа бит әле ул, һыйһа, бер көн Фәриҙәм, икенсе көн Сәғиҙәм форма кейеп уҡырға йөрөр ине. Әйҙә, шулай килешәйек: дүртеһен дә ашат, кейендер — ике аяғымдың береһе лә баҙарға баҫмаҫ, исмаһам, сабаталарым туҙмаҫ! Былтыр нисә көнөм бар ине лә быйыл күпме? Хисапсыға ышанмайым, һәр көнөмдө, ҡайҙа эшләгәнемде яҙып барам. Ә хәҙер әйт, кемдең хеҙмәт көнө минекенән күберәк? — Йәне көйгән Нуриҙә һаман ҡыҙа барҙы.

Рәйес ыҡ-мыҡ итте, ҡайтарып бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Ысынлап та, Нуриҙәнең хеҙмәт көнө ауыл бисәләренең барыһынан да артыҡ була. Шунан инде рәйес тә, бригадир ҙа ҡул һелтәне, өлгөргәс, әйҙә, үҙенсә йәшәһен, тигәндәрҙер.

Балалар, тип Нуриҙә тамағын да ҡыҫа ине. Арыуыраҡ ризыҡ булһа, балаларына һаҡлай. Бесән ваҡытында колхоз мал һуя, өмәселәргә итле аш бешерәләр. Нуриҙә аштың һурпаһын ғына эсә лә, бүтәндәргә күрһәтмәй генә итте көрөшкәһенә сүпләй. Өйгә ҡайтҡас, «ҡуян күстәнәсе» өләшә. Тегеләр хәс тә ҡош балалары һымаҡ, теҙелешеп ултыралар ҙа кинәнеп ашайҙар.

Балалары һәйбәт уҡыны. Йыйылыштарҙа уҡытыусылары маҡтаһа, Нуриҙә әллә кем булып китә ине. Ҡайһы бармағыңды тешләһәң дә ауырта, тиҙәр. Нуриҙә дүрт бөртөгөн берҙәй яратты. Шулай ҙа йыш ауырыған Фәриҙәһе өсөн нығыраҡ борсолдо, уға иғтибарын күберәк бүлде, үҙенең өлөшөн йышыраҡ уға ашатты. Атаһы кеүек, үпкәһе сирлелер, тип көйөнгәйне лә, ете йәше тулғас, ҡыҙыҡай ҡапыл ғына таҙарҙы ла китте.

Балаларҙың бөтәһе лә үҙенә оҡшаған һөнәрҙе алды: Фәриҙәһе — медучилище, Сәғиҙәһе педучилище бөтөрҙө. Фәриҙәһе тыуған төйәгендә, Сәғиҙәһе күрше ауылда тормош ҡорҙо. Уландары ғына ерекмәне, бала саҡтан диңгеҙ менән һаташҡан Фәрите хеҙмәтенән һуң Владивосток тигән бик алыҫ ҡалала ҡалды. Сәғите Өфөлә йәшәй. Сажидә килене бер малай тапты. Улы институтта уҡыта, килене лә ҙур кеше — ашханала башлыҡ, ти.

1. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Ҡайһы осор ваҡиғалары тураһында һүҙ барғанын асыҡлағыҙ.
2. Тексты̇ң йөкмәткеһен эҙмә-эҙлекле итеп, үҙ аллы һөйләргә өйрәнегеҙ. Телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе лә ҡулланырға тырышығыҙ.
3. *Күңел тулыу, күңел болғаныу, әллә кем булып китеү, ҡул һелтәү, ҡойолоп төшөү, таң ҡалыу, аяҡтан яҙыу, донъя ҡуйыу, донъя көтөү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Һәр береһенең ниндәй ситуацияла булыуын ентекләп аңлатығыҙ.
4. Һеҙҙең *ҡуян күстәнәсе* ашағанығыҙ бармы? Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, уның нимә икәнлеген, ни өсөн шулай аталғанлығын асыҡлап, кескәй белешмә төҙөгөҙ.
5. Колхоз рәйесе менән бригадир ни өсөн Нуриҙәне баҙарға йөрөтмәҫкә тырышалар? Ололарҙан һорашып, шундай «тәртип», колхозсыларҙың *«таяҡҡа» эшләүҙәре* тураһында фекер алышығыҙ.
6. *Атайҙы аҡса алмаштырмай; кешенең кемлеге маңлайына яҙылмай* әйтемдәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

* * *

Нуриҙә әбей балаларын йыш ҡына бергә йыйып ала торғайны. Тегеләр әсәләренә ҡунаҡҡа килергә бик ярата. Нуриҙә әбей барыһына ла хәленсә бүләк тарата, күстәнәстәр тейәп оҙата. Эш ҡушыр, тип ҡурҡмаһындар өсөн, уларға бер мәшәҡәт тә ҡалдырмаҫҡа тырыша. Донъяны оҫта көтөп өйрәнгән бит ул: пенсияһын утын килтерергә лә, быстырырға ла, бесәнен ташытырға ла еткерә. Көсө барҙа, ейән-ейән-сәрҙәрен дә ҡарашты.

Йәшәгән һайын йәшәрмәйһең: етмешкә еткәс, тормош йөгөн тартыуы ауырлашты. Ҡыҙҙарының һүҙен тотоп, малтыуарын кәметте: Фәриҙәһенә һыйыр бирҙе, Сәғиҙәһенә башмағын тотторҙо, Сәғитенә ҡаҙ-өйрәктәрен һуйып оҙатты. «Олоғайғас, тыуған тупраҡ тарта ул. Фәрит тә ситтә толҡа тапмай башлар. Үҙе үҫкән өйгә ҡайтмай, ҡайҙа ҡайтһын?» — тип Владивостоктағы улына өйөн инселәне. Фәриткә өйөн инселәүен әйткәс, ҡыҙҙарының йөҙө боҙолоп китте. Нимә хаҡындалыр быш-быш һөйләштеләр ҙә икеһе бер юлы һүҙ башланылар:

— Яртышар йыл диңгеҙҙән ҡайтмаған Фәриткә өй ниңә кәрәк? Һата ла аҡсаһын бисәһенә тоттора. Мәрйәһен былай ҙа алтын-көмөшкә лә бәрхәт-ебәккә күмгән, — тип үрһәләнде Фәриҙә. — Һине үҙемә алып ҡайтам, әсәй, өйөңдө һатырбыҙ! — тине бик тә ҡәтғи итеп.

Апаһының ниәте Сәғиҙәгә лә оҡшаны.

Ҡустыһынан алдараҡ өлгөрөргә тырышҡандыр, Фәриҙә эште ҡыҙыу тотто: йәһәт кенә әсәһен үҙенә күсерҙе лә өйҙө һатып ебәрҙе.

Заманында ат кеүек эшләгән Нуриҙә әбейҙең кәре кәмене, һыҙланды, йыш ауырыны. Яйлап кеше көнлөгә әйләнде, меҫкен генә ҡарсыҡ булды ла ҡуйҙы. Әбей эшкә ярамай башлағас, уға иғтибар тиҙ кәмене. Ғүмер буйы балалары өсөн генә йәшәгән әбей үҙен һанға һуҡмауҙарын ауыр кисерҙе. Яҡшы мөнәсәбәткә зар-интизар ҡарт әсә саҡ ҡына һәйбәтерәк һүҙ ишеһәләр ҙә һөйөндө, аҡырмай-баҡырмай ашатһалар ҙа, кинәнде. Тик ундай һәйбәт көндәр кеше барҙа, ҡунаҡ килгәндә генә эләгә. Бер аҙҙан Фәриҙә әбей «күсмәнде»гә әйләнде.

Фәриҙә, ҡунаҡҡа тигән булып, әсәһен күрше ауылдағы Сәғиҙә һеңлеһенә алып барып ташланы. Унының ире көн

дә эсә, көн дә ауыҙынан эт ашамаҫ һүҙ өҙөлмәй. Нуриҙә әбей бысраҡ һүҙҙәргә ояла, ҡыҙын ҡыҙғана. Сәғиҙәһен үҙәктәре өҙөлөп йәлләй ҙә бит, ярҙам итерлек көсө лә, малы ла юҡ.

— Буштан-бушҡа ниңә талаша ул? — тип ғәжәп итә Нуриҙә әбей.

— Һаранлығын беләһең бит, һин килгәс, бөтөнләй шашты, һине күпһенә, — тип илап ебәрҙе Сәғиҙә.

— Һм-м-м...

Етеш йәшәгән ҡәйнәһенә ҡунаҡҡа килгәндә генә, үҙен һапалы тоторға тырышҡан икән. Әле ҡәйнәһе үҙендә ике-өс ай йәшәргә лә өлгөрмәне, күҙҙәрен алартып, Сәғиҙәгә ташланырға ғына тора. Мәңге этелеп-төртөлөп йәшәгән ҡатынҡай әсәһе арҡаһында тағы ла нығыраҡ йәберләнә. Түҙмәне Нуриҙә әбей, Фәриҙәһенә ҡайтып китте. Унывы, исмаһам, үҙе баш, үҙе түш, иренән туҡмалмай.

— Атаҡ, нимә тип, һәптәнләп ҡайтып та киләһең? Сәғиҙә лә балаң, һине ул да ҡараһын, миңә генә тимәгән! — тип ҡаршылаyы Фәриҙә.

— Ауылымды һағындым. Һеҙҙе нисек йәшәй икән, тип тә борсола башланым, — тигән булды әбей.

— Эйе лә, һинһеҙ донъям китек ине!.. — Ҡыҙы, тәгәстәрен шалтыр-шолтор килтереп, тырт-мырт сәй яһаны.

Кис еткәс, тағы бер һөжүм булып алды.

— Минең бүлмәгә һалмағыҙ әле шуны, төнө буйы әллә уҡына, әллә төшәнә торған! — тине Фәриҙәнең төпсөк ҡыҙы.

— Атайың менән икебеҙҙең араға һалайыммы? — тип аҡырҙы уға Фәриҙә.

Их, өйө булһа, ҡайтыр ҙа китер, был ҡәҙәре мыҫҡыллауҙарын ишетмәҫ ине. Нисек тә йән аҫрар ине әле. Яңғыҙ йәшәп өйрәнгән башы. Терһәк яҡын да бит, тешләп булмай. Өйөн һаттырғанға үкенә. Мәңге бер нәмәһе булмаған бахыр кеүек, бер телем икмәккә зарығып, ятып ял итергә ҡурҡып ултыр инде. Аптыранған әбей күтәрмәгә сығып ултырҙы. Артынса Фәриҙәһе күренде.

— Атаҡ, үтергә ҡамасаулап, юл өҫтөндә нишләп ултыраһың?! — тип туҙынып китте.

Нуриҙә әбей ҡапҡа алдындағы эскәмйәгә йүнәлде. Хәсрәтле башҡайында төрлө уй ҡайнашты: ҡайҙа барырға, ҡалған ғүмерен нисек йәшәргә инде? Шулай ҙа бөтөнләй терәкһеҙ түгел бит әле. Өфөлә Сәғите бар, биргән бүләк-күстәнәстәрҙе

ихлас ҡабул иткән тәмле телле килене бар ҙаһа! Ярар, яртышар йыл диңгеҙҙән ҡайтмаған, әллә ниндәй сит илдәрҙә йөрөгән, әсәһенә ҡош телендәй хат яҙырға йыбанған, тыуған яғына ҡайтып та әйләнмәгән Фәритен эҙләп таба алмаç, эҙләргә хәле лә юҡ. Ә бына Сәғитенә морон төртөргә кәрәк. Район үҙәгенән Өфөгә көнөнә ике мәртәбә автобус йөрөй, тиҙәр.

Уйланған эш — бөткән эш. Йәш сағындағы тәүәккәллеге һаҡланған — Нуриҙә әбей Өфөгә йыйынды. Улында ҡалһа, ауылын, ауылдаштарын бик һағыныр инде. Донъя хәлен белеп булмай — бөгөн барһың, иртәгә юҡһың... Шуны уйлап, юлға сығыр алдынан яҡыныраҡ әхирәттәренә, Мәликә күршеһенә кереп, хушлашып, бәхилләшеп сыҡты.

Фәриҙәһе ҡыуана-ҡыуана, әсәйегеҙҙе ҡаршылағыҙ тип, Өфөгә телеграмма һуҡты. Кейәүе еңел машинала ғына район үҙәгенә алып барып ҡуйҙы. Бөтә әйберҙәрен, хатта ҡышҡы кейемдәрен дә ниңә тейәүҙәрен әбей аңланы...

Вокзалда ҡаршылаусы булманы. Сит кеше ярҙамында вокзал эсенә кереп, әйберҙәрен ҡосаҡлап уйға ҡалды: улын нисек табыр ул? Ниндәй машинаға ултырырға, ҡайһы яҡҡа барырға? Сәғите ошонда уҡығанда ит, май йөкмәп, бер нисә килгәйне. Университет, упшыжитие тигәс, такси тигән машина өс тәңкәгә генә һә тигәнсе алып та барғайны. Бәй, әле лә шулай итергә кәрәк, ҡулында улының адресы бар бит. Нәмәләрен саҡ йөкмәп, вокзал алдында теҙелеп ултырған машиналар янына килде. Шофёрға адрес яҙылған ҡағыҙҙы күрһәтте, теге һүҙһеҙ ҙә аңланы: «Илле меңде әҙерлә, әбей!» — тине. Үҙенең мосолманына юлығыуына сикһеҙ ҡыуанһа ла, әбей телһеҙ ҡалды. Ҡайҙан булһын, ти, унда шул ҡәҙәре аҡса! Ҡыҙы һуҡрана-һуҡрана утыҙ мең тотторғайны, етмәй бит әле. Шофёр ҡарсыҡтың хәлен тағы һүҙһеҙ төшөндө:

— Ярар, ултыр, әбекәй, берәй пассажир тапһаҡ, юл ыңғайы булһа, бушлай ҙа алып барырмын, — тине, рәхмәт төшкөрө.

Бәхеткә, кешеһе лә табылды, юл ыңғайы ла булды, шофёр Нуриҙә әбейҙе улы йәшәгән йорт алдында ҡалдырып китте.

Шунда йәшәгән бер ҡатын ярҙамында улының фатирына күтәрелделәр. Ҡатынҡай ҡыңғырау төймәһенә күпме баçмаһын, ишек асыусы булманы.

— Эштәләрҙер, көт инде. — Быныһы ҡабаланып ҡайҙалыр китеп барҙы.

Әй, сарсауҙары! Бына шунда әбей һыуһауҙың иҫ киткес ғазап икәнен тәүләп белде. Исмаһам, ошондағы әллә нисә ишектең береһе асылһа, һыу һорап эсер ине. Күҙ алдары ҡараңғыланды. Һушынан яҙыр сиктә лифттан берәү күренде. Тыны менән тартып алырҙай булып кеше көткән Нуриҙә әбей ейәнен үҙе сырамытмаһа, уныһы өләсәһен танымаҫ та ине. Әйберҙәрен күтәрешергә лә башы етмәгән үҫмер артынан Нуриҙә әбей бар көсөн туплап эйәрҙе.

Сажидә ҡәйнәһен күргәс, төҫөн боҙманы. Көтөлмәгән ҡунаҡ түгел, телеграмманы алғайнылар. Ҡалған ашын йылытты, лимонлы сәй эсерҙе.

Ишек төбөндәге төйөнсөктәрҙән элекке кеүек бүләк-күстәнәстәр сыҡмағас, ирендәрен ҡымтып ҡуйҙы шулай ҙа. Шуны шәйләгән әбей уңайһыҙланды: бүләк таратырға ярата ла бит, хәл генәһе былай булып китте бит әле, киленен шатландырырлыҡ бер нәмәһе лә юҡ.

Сәғит әсәһе менән ихлас күреште, хатта арҡаһынан һөйгәндәй итеп, бер нисә ҡағып та ҡуйҙы. Шул минуттарҙа әбейҙең ҡайғылары таралып китте, әйтерһең, улы иңендәге бөткөһөҙ хәсрәтте һыпырып алды.

Дүрт бүлмәле фатирҙа әбейгә урын да табылды: бер генә карауат менән бәләкәй генә өҫтәл һыйғаны әлегәсә буш торған, шунда урынлаштырҙылар. Нуриҙә әбей иркен тын алды, ваннала йыуынып сыҡҡас, бер ни белмәй, рәхәтләнеп йоҡланы. Иртәнге сәйҙә килене:

— Гомере авылда үткән эбиләр шәһәрдә чыдамый инде... Син, әнкәй, ничек тә берәр ай түз, яме, — тип ҡуйҙы.

Үҙен йәлләй тип уйлаған әбей киленен тынысландырырға ашыҡты:

— Ҡарт кешегә ҡалала ишшу ҙа һәйбәт инде ул, — тип һүҙ башлағайны, Сажидә эшкә ҡабалана инеме, әллә берәй нәмә иҫенә төштөмө, ҡәйнәһенең һүҙен тыңлап бөтмәне, ҡырт ҡына урынынан ҡалҡынды.

Бер аҙна үткәс, икеһе генә ҡалғас, килен кеше:

— Интеллигенцияның аҡсаһы аҙ, мин ашатмаһам, Сәғит астан үлер ине! — тип һүҙ башланы.

— Пенсиямды тиҙерәк бында күсерһәгеҙ, — тип ауыҙ асҡайны, Сажидә, күҙҙәрен таштырып, ҡәйнәһенә бер ҡараны ла кухнянан сығып китте.

Тағы өс көндән:

— Әсәйҙәр ҡыҙҙарға яҡын була, бәхетең, ике ҡыҙың бар. Минең дә әсәйем һеҙҙә генә йәшәрмен, бөтә донъям һеҙгә ҡалыр, ти әле. Оҙаҡламай килтерербеҙ инде, әле һин йоҡлаған бүлмәне ремонтларға кәрәк, — тип әйтеп һалды.

Аңлағанға ишара ине был, зирәк әбей хәбәрҙең мәғәнәһенә яҡшы төшөндө.

Былар Нуриҙә әбейҙең «ҡайтам» һүҙен көтмәне, машина барҙа, тигән булып, ултыртып ебәрҙеләр. Сәғит, әсәһенә күтәрелеп ҡарамай ғына, еңел машинаға әйберҙәрен тейәне...

* * *

Фәриҙә төйөнсөктәрен йөкмәп, арып-талып, ҡапҡанан кереүсене күрмәмеш булып, мунсаһына инеп китте, унан ихатаһында улай-былай йөрөндө лә күтәрмәлә ултырған әсәһенә:

— Ҡайтты инде, юлды быуып тағы ултырған! — тип ажғырҙы.

Нуриҙә әбей әйберҙәрен соланға ташыны, унан, хәс тә йомошон әйтергә баҙанған бала һымаҡ, бөршәйеп кенә ишек янындағы ултырғысҡа ултырҙы. Ныҡ һыуһауы үҙенекен итте: бер аҙ икеләнгәс, самауырҙан һыу ағыҙып эсергә уйланы. Тәгәскә һыу ағыҙа башлауға, Фәриҙә килеп инде.

— Һаман тамаҡтарын ғына ҡайғырталар! Мине барыһы ла ике тешләп бер йоторға әҙер! Һыйырҙар көтөүҙән мөңрәп ҡайта, нимә ашайым, тип эштән ир ҡайта, урамға сыҡһам, сиреү кеүек ҡаҙ-өйрәк уратып ала. Бөтәһен дә ашат, бешер, өлгөрт! — Фәриҙә ҡыҙҙы ла китте. — Ҡарттар йортона ебәрмәй булмаҫ! Иртәгәнән тағы юлларға тотонам! Элеккеләр үлә белмәй бит ул, йөҙгә тиклем йәшәйҙәр! Сажидә ҡарамай инде ул, түшкәһе менән ит, батманы менән бал-май ташығанда, алтын тештәрен йылтыратып, ауыҙын япмай йылмая торғайны. Хәҙер түлкә бер Фәриҙәгә, — тип әрләшә-әрләшә, самауырына тотондо.

Ҡарттар йорто хаҡында һүҙ сыҡһа, Нуриҙә әбей оло хафаға төшә. Ҡарттар йортон төрмә кеүек нәмә итеп күҙ алдына килтерә. Ғүмерҙә төрмә күрмәһә лә, донъялағы иң яман урын — төрмә, тип белә. Төрмәне дуҫың түгел, дошманың күрмәһен, тип элек-электән теләй торғайны.

Ҡыҙы ҡыҙғанда ғына әйтәләр, тигән бәләкәй генә өмөтө бар ине лә, Фәриҙә былай ғына әйтмәгән икән. Ике-өс көндән ауыл советында эшләгән ир килеп инде.

— Нуриҙә апай, — тине ул, Фәриҙәгә ҡарап алғас. — Һинең кеүек әбей-һәбей, бабайҙар йәшәгән бик һәйбәт йортҡа ебәрергә булдыҡ. Унда һиңә яҡшы булыр: арыу ҡарайҙар, ти. Үҙең һымаҡ ҡарсыҡтар менән һөйләшеп, ғүмер үткәне лә һиҙелмәҫ. Әллә ҡасан урынлаштырған булыр инек: бала-сағалы кешеләрҙе алмайҙар. Ә һинең дүрт балаң бар. Фәриҙәнең сослоғо, минең тырышлыҡ менән йүнен таптыҡ. Иртәгә юлға сығабыҙ, әҙерлән! — Ул, ҙур изгелек эшләгәндәй, көр тауыш менән татылданы.

— Шулай икән… — Нуриҙә әбей һыҙлаған тубыҡтарын ыуа-ыуа, ҡыйынлыҡ менән урынынан торҙо ла, иҫерек кешеләй, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй, ишеккә йүнәлде. Быуыны тотмаған аяҡтарын саҡ һөйрәп, ташҡын ташлап киткән ҡарт өйәңкегә табан атланы.

«Ҡарттар йорто тигән төрмәнән нисек ҡотолорға, кемдән ярҙам һорарға?.. Ярҙам итер кешем юҡ, йәшенер инем — өйөм юҡ. Йәш саҡта көсөң барҙа, донъяңды көткәндә, бер нәмәнән дә ҡурҡмайһың икән. Бәғерһеҙ балалар үҫтереп ҡуйҙым бит. Ҡартлыҡта кәрәк икән ул бәхет…» — Башы ҡаңғырған әбей, елгә бәүелгән ҡыу ҡурай һымаҡ сайҡалып, өйәңке өҫтөндә ултырҙы ла ултырҙы…

* * *

Ҡапыл һыу буйында ниндәйҙер ығы-зығы ҡупты. Әллә нимә тип ҡысҡырышалар. Һуңғы арала ҡолаҡҡа ҡатыланған әбей һүҙҙәрҙе асыҡ ишетмәне. Мәликә күршеһенең йылғаға табан йүгереүен күреп ҡалды. Бер аҙҙан барыһы ла һыу буйынан ҡайта башланы.

— Әлдә баҙап ҡалмағандар, бата башлау менән, ярҙамға ташланғандар, — тине кемдер.

— Әйтмә лә! Ярай әле, өйрөлмәк йыраҡ, — тине Мәликә. — Шуны күрһәтергә лә өлгөрмәнем бит, сыҡҡан да һыу буйына сапҡан! Йәй көндәре бер яфаға әйләнә, балаларын килтереп ташлайҙар ҙа рәхәтләнеп йәшәйҙәр, ә һин бында ут йотаһың! Үҙемдең ейәнем булһа ла, кеше балаһы бит әле ул, икеләтә яуаплыһың!

Һыу буйынан ҡайтыусылар ҙа Мәликә лә әбейгә иғтибар итмәне. Мәликә күршеһенең күрмәмешкә һалышыуын аңларға була. «Улына ла һыймаған, тағы ҡайтҡан. Арыу һүҙ ҡушһам, эйәрер», — тип уйлағандыр. Мәликәлә йыш ҡунды шул Нуриҙә әбей. Өйҙә талаш башланһа, күршеһенә керә торғайны...

Ғәрсел, сәмсел Нуриҙә әбей быңдай хәлгә төшөүенә кешеләрҙән бик ояла. Эйәһеҙ эт көнөндә йөрөтөүҙәре өсөн балаларына үпкәһе ҙур. Яҡты донъяла бер генә көн дә, бер генә сәғәт тә йәшәгеһе килмәй. Нығыраҡ сирләһә, әжәлем килде, тип ҡыуана. Тик әжәл әбейҙе алып китергә ашыҡмай. Бына әле лә хайран булып, күпмелер ултырғас: «Ниңә теге ваҡыт өйрөлмәк йотманы икән?..» — тигән уй килде бәхетһеҙ башҡа. Өйрөлмәк яғына боролоп ҡараны ла кинәт тертләп китте! Өйәңкене һыйпаған ҡулдары дерелдәп ҡуйҙы, йөҙө үҙгәрҙе: «Хоҙайым, кисер гонаһлы бәндәңде. Әй Аллам, балалар минән ҡотолһон, үҙем күңел ғазаптарынан арынайым, ниәтемде атҡарырлыҡ көс бир!» — Ул ҡара эштән ҡытыршыланған устары менән сырыш биттәрен яй ғына һыпырҙы ла урынынан ҡалҡынды. Йылғаға табан бер нисә аҙым яһағас, туҡтаны, кемделер көткәндәй, ауылға боролоп ҡараны. Ҡарашы менән өйөн эҙләп тапты. Оҙаҡ ҡараны ғүмер кисергән, балаларын үҫтергән, инде үҙе кеүек иҫкергән өйөнә. Шунан ауыр көрһөндө лә, тәүәккәлләп, йылғаға табан атланы. Берҙән-бер зиннәтле әйбере — көмөш беләҙегенә күҙе төштө: «Әрәм итмәйем, ҡыҙҙарымдың береһенә булыр, — тигән уй үтте башынан. — Ҡуй, ҡулымда ҡалһын, беләҙекте күргәс, минең ҡайҙа икәнемде белерҙәр бит. Минең бындалыҡты белмәһендәр инде улар, белмәһендәр...» — Ул ҡабаланып ярҙан төшә башланы. Шул тиклем ашыҡты: һыңар калушының тороп ҡалыуын да, яулығының талға эләгеүен дә һиҙмәне. Әбей шаптырлап һыуға керҙе, яй ғына өйрөлөп, ҡорбан көҫәгән ергә яҡынлашты. Һыу тәүҙә тубыҡтан, унан биленән булды һәм өйрөлмәк хәлһеҙ кәүҙәне ҡапыл тартып алды ла өс-дүрт кенә өйрөлттө... Теге саҡта бейә кешнәргә өлгөргәйне, мәхлүк. Нуриҙә әбей тирә-яғына күҙ һалырға ла, ауыҙын асырға ла өлгөрмәне...

Күп тә үтмәне, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан уҫлаптай ҡара болот көләс ҡояшты тотош ҡапланы. Ер менән күк тоташҡандай, тирә-йүн ҡараңғыланды, үҙәктәргә үтеп әсе ел иҫте. Талға эләккән яулыҡ һаман көсәйә барған елгә елберләне лә елберләне...

1. Ниндәй һүҙҙәр ул *эт ашамаҫ һүҙ, бысраҡ һүҙ*? Ғөмүмән, һүҙҙәрҙең «яҡшыға» йәки «насарға» бүленеүенең сәбәптәрен аңлатып ҡарағыҙ.
2. *Күҙ алартыу, һанға һуҡмау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Уларҙы икенсе төрлө әйтеп буламы?
3. *Кеше көнлөгә әйләнеү* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Фекерегеҙҙе Нуриҙә әбейҙең яҙмышына бәйләп дәлилләгеҙ.
4. Нуриҙә әбейҙең образына тулы характеристика бирегеҙ.
5. Нуриҙә әбейҙең балаларының образдарына дөйөм характеристика бирегеҙ.
6. «Әсәләр һәм балалар» темаһына фекер алышығыҙ. Һөйләшеүҙе үҙегеҙҙең шәхси тормошоғоҙ, атай-әсәйҙәрегеҙ менән мөнәсәбәтегеҙ, уҡыған әҫәрҙәрегеҙ, ҡараған кинофильмдарығыҙ, әсәлек бурысы, балалыҡ бурысы, быуындар араһындағы күсәгилешлек мәсьәләләре менән бәйләргә тырышығыҙ.
7. Һеҙ яҙыусы булһағыҙ, хикәйәнең аҙағын нисек тамамлар инегеҙ?

**101-се күнегеү.** Рус телендәге мәҡәлдәрҙе 99-сы күнегеүҙәге мәҡәлдәргә мәғәнәләре буйынса тап килтерегеҙ. Береһен һайлап алып, ижади эш башҡарығыҙ.

1. После грозы — вёдро, после горя — радость (вёдро — *ҡояшлы, аяҙ*).
2. Дерево красно плодами, а человек — делами.
3. На всех не угодишь.
4. Лекарство — тот же яд.
5. Не всё коту масленица.
6. Не выноси сор из избы.
7. Найдётся место, где споткнуться.

## ЭХ, КҮҢЕЛЛЕ ЯҘ КИЛӘ!

*Рәшит Ниғмәти*

### ЯҘ КИЛДЕ, ЯҘ!

Тәүҙә
тау биттәрен ҡарҙан әрсеп,
Гөрөлдәтеп шыя һыуҙарҙы,
Яҙ килде, яҙ!
Тәрән һулыш алды
Киң күкрәге тынıс ҡырҙарҙың.
Яҙ килгәйне,
сана ялға китте.
Юл асылды йүгерек арбаға.
Ағас ботаҡтарын бүлешә алмай,
Сыр-сыу килде ҡара ҡарғалар.
Яҙ килде, яҙ!
Ергә шатлыҡ килде,
Ер ырғытты эсе бошоуҙы.
Яҙ килде, яҙ!
Гүйә, бар донъяны
Һағынылған бер хис уятты,
Танауҙарҙы ярып килеп инде
Тәмле еҫе ҡара тупраҡтың.

1. Шиғырҙа яҙғы тәбиғәттең уяныуы нисек һүрәтләнә?
2. Шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарын аңлатығыҙ.

*Рәми Ғарипов*

## ҺАБАНТУРҒАЙ

Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай,
Ҡарҙар бөткәнен дә көтөп тормай…
Һабансылар күңелен нурлай-нурлай,
Һай, йырлай ҙа һуң был һабантурғай!

Йә атылып күккә менә уҡтай,
Йә йомолоп ергә төшә туптай,
Ерҙе күккә әйҙәп яна уттай.
Был еҙ шөңгөр ҡасан ялға туҡтай?

Ҡанатынан яҙҙы түгә буғай,
Яҙға ҡойона бар ялан-туғай.
Түгелдер был, ахыры, һабантурғай,
Был йөрәгем, ахыры, шулай йырлай?!

1. Һабантурғай яҙҙың ҡайһы мәлендә һайрай? Шиғырҙан табып уҡығыҙ. Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән аңлатығыҙ.
2. Шиғырҙа һабантурғай кемдәр һәм ни өсөн шатланып «йырлай»?
3. Р. Ғариповтың «Һабантурғай» һәм Р. Ниғмәтиҙең «Яҙ килде, яҙ!» шиғырҙарының уртаҡ яҡтарын табығыҙ. Фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ.
4. Тәбиғәткә экскурсияға сығығыҙ, яҙ билдәләрен күҙәтегеҙ. Һабантурғайҙың йырлағанын тыңлағыҙ, фекер алышығыҙ.

*Муса Йәлил*
*татар шағиры*

## ЙЫРҘАРЫМ

Йырҙарым, һеҙ шытып йөрәгемдә,
Ил ҡырында сәскә атығыҙ!
Күпме булһа һеҙҙә көс һәм ялҡын,
Шул ҡәҙәрле ерҙә хаҡығыҙ!

Һеҙҙә минең бөтә тойғоларым,
Һеҙҙә минең керһеҙ йәштәрем.
Һеҙ үлһәгеҙ, мин дә онотолормон,
Йәшәһәгеҙ, мин дә йәшәрмен.

Йырлап үттем данлы көрәш ҡырын,
Йырлап килдем тормош яҙыма.
Һуңғы йырым палач балтаһына
Башты тотҡан килеш яҙыла.

Йыр өйрәтте мине хөр йәшәргә
Һәм үлергә ҡыйыу ир булып.
Ғүмерем минең моңло бер йыр ине,
Үлемем дә яңғырар йыр булып.

## ЫМЛЫҠТАР

Хис-тойғоларҙы, тәбиғәттәге төрлө тауыштарҙы, ҡош-ҡорт тауыштарын, уларҙы ҡыуыу йәки саҡырыуҙы белдергән һүҙҙәр **ымлыҡтар** тип атала. Ымлыҡтар, ғәҙәттә, өндәр теҙмәһенән тора. Шулай ҙа хис-тойғоларҙы белдергән саҡта, тулы һүҙҙәр ҙә ҡулланылыуы мөмкин.

Сағыштырығыҙ:

1. Хис-тойғолар (шатланыу, аптырау, ҡурҡыу, тертләү һ. б. ) — *уф, әһә, их, ой, эй, о, эх, о-һо-һо, атаҡ, әл-лә-лә, эй эттәгенәһе, бынағайыш, әстәғәфирулла* һ. б.

2. Төрлө тауыштар — *гөррр, геүүү, зыйт, беззз, сут-сут, мү-ү-ү, бә-ә-ә, ҡа-ҡа-ҡа, кә-күк, саңҡ-саңҡ* һ. б.

3. Саҡырыу, ҡыуыу ымлыҡтары — *һәү-һәү, тырр, на-на, сөбә, көш* һ. б.

**102-се күнегеү.** Һәр ымлыҡ төрөнә миҫалдар килтерегеҙ һәм улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**103-сө күнегеү.** Һәр бер халыҡ ҡош-ҡорт тауыштарын үҙенсә ишетә, шуға күрә уларҙы һәр бер телдә үҙенсәлекле яҙып йөрөтәләр. Сағыштырығыҙ.

Берлиндан, Мәскәүҙән эттәр
Килеп төштө ҡунаҡҡа
Шүлгән буйында йәшәгән
Ябай ғына Муйнаҡҡа.
— Бау-бау-бау! — ти сит илдеке,
— Гав! — ти Мәскәүҙән көсөк.
— Һау-һау! — тип сәләмләй Муйнаҡ, —
Һаулыҡтарығыҙ нисек?

*(Г. Ситдиҡова)*

## ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНА

## (1905 —1954)



Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 5 мартында элекке Һамар губернаһы (хәҙерге Һамар өлкәһе) Пугачёв өйәҙенә ҡараған Хәсән ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа.

1926 йылдың мартында «Башҡортостан йәштәре» газетаһында «Һылыуҡай — пионерка» тигән тәүге хикәйәһе баҫылып сыға.

1931 йылда «Айбикә», киләһе йылына «Башаҡтар тулҡыны» тигән повестары донъя күрә. 1935 йылда уның «Хикәйәләр шәлкеме» исеме аҫтында һайланма әҫәрҙәренең тәүге китабы сыға.

Һәҙиә Дәүләтшинаның иң ҙур һәм иң күренекле әҫәре — «Ырғыҙ» романы.

Рәсәй Федерацияһы яҙыусыларының I съезында Леонид Соболев: «Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын белмәй тороп, башҡорт халҡының тормошон аңлап етеү мөмкин түгел», — тип юғары баһалай.

### АЙБИКӘ

*(Әҫәрҙән өҙөк)*

### I

«Тор, тор инде, Айбикә килен, тор. Был ни бөтмәҫ йоҡо?! Йылдай төндә лә йоҡо туймаҫ икән. Ҡыҙыл эңерҙән ятып йоҡлайһың, ҡояш ауалағансы, йоҡо туймаҫ булырмы? Ана, һыйырҙарың ызылдашып торалар, һауа һалып ал!» — тигән тауышҡа Айбикә, күҙен асып, һикереп торҙо. Уның янында, ҡулына ҡомған тотоп, Ғәйшә тора ине. Ул, Айбикә тороп, аяғына итеген кейгәнсе, туҡтамай әрләне лә тышҡа сығып китте, тағы үҙенең түшәгенә инеп ятып, тәмле йоҡоға китте.

...Таңдың әрә-һәрәһе, йүнләп аяҡ юлы ла күренмәй. Йоҡо туймаған, күҙ ҡабаҡтары ауыртып, үҙенән-үҙе кире

йомолалар. Тәндә ауырлыҡ, әйтерһең, берәү иҫәңгерәтә туҡмап ташлаған да, шунан яңы ҡалҡып торғанһың. Кисә лә, унан элекке көндәрҙә лә шул уҡ таң, шул уҡ тәндең ауыртып талыуы, шул уҡ Ғәйшәнең мыжыуы, шул уҡ һыйырҙар, быҙауҙар, бейәләр, осо-ҡыры юҡ ваҡ йорт эше.

Айбикә сығып биш һыйырҙы быҙауҙары менән эйҙереп һауып алды ла, ике силәк һөттө ишек алдындағы өлкән аҡ келәт эсенә сепарат янына ултыртып, һыйырҙарын көтөүгә ҡыуырға китте. Унан ҡайтып, быҙауҙарын, егерме-утыҙ башлап һарыҡты ҡыуҙы, унан ҡайтҡас, сепараттан һөт үткәрҙе, самауыр ҡуйҙы, ул арала йылҡы көтөүе төшөп, бейәләрҙең ҡолондарын айырҙы, дүрт-биш көйәнтә һыуға барҙы, икмәк баҫты, иҙәндәрен һеперҙе, һөтөн бешереп ойотто, һауыт-һабаларын йыуып, тағы ҡаҙанға эркет ҡайнатырға һалды, ул арала бейәләрҙең һауыны етеп, дүрт бейәне һауып алды.

Шунан һуң ғына Ғәйшә, йылы түшәгенән тороп сығып:

— Ҡана, килен, сәйеңде өлгөрт... Көнһылыу менән Ишбулдыны уят, — тине.

Айбикә Көнһылыу менән Ишбулды йоҡлаған бүлмәгә инде... Айбикә, әле Көнһылыуҙы, әле Ишбулдыны уятып, торғоҙа алмағас, Ғәйшә янына сығып:

— Еңгә, Көнһылыуҙарҙың торғолары килмәй. Уяттым-уяттым, тағы йоҡлай ҙа китәләр, — тине.

Ғәйшә, ҡыҙыл сыбар тышлы ҙур мендәрҙең өҫтөнә аяҡтарын бөкләп ултырып, сәй яһай башлағайны.

— Йә, ярар, йоҡолары туймаһа, ятһындар, ни уларҙы ҡайта-ҡайта маҙаһыҙлайһың, аталары менән бергә эсерҙәр, — тине. Уға яңғыҙ сәй эсеү күңелһеҙерәк булды, ахыры, ул Айбикәгә:

— Килен, барсәле, Көмөш еңгәйҙе сәйгә алып кер, — тине.

Айбикә, Көмөш әбейҙе тиҙ генә үҙе менән бергә алып килеп, боролоп, аш өйөнә сығайым, тигәйне, Ғәйшә тағы ла:

— Самауырың һыуынып китте, ҡана, тиҙ генә шаулатып алып кил, — тине.

Айбикә шунан һуң ғына тағы үҙ эшенә тотоноп китте.

Аш өйөндә Ҡотлояр ҡарттың тороуына икенсе самауырҙы ҡуйҙы, икмәк һалды, эркет ҡутарып, уны тоҡҡа ҡойоп һарҡытырға ҡуйҙы. Сәйҙәрен йыйып алып, уның арты икенсе самауырҙы ултыртыуға, бейәләрҙең икенсе һауыны

етте, уларҙы һауыуға, көтөүҙән һыйырҙар безәкәйләп ҡайта башланы. Уларҙы, быҙауҙарына ҡушылмаһын өсөн, ҡураға бикләне. Һыйырҙарҙы урынлаштырып әйләнгәнсе булмай, бесәнселәрҙең береһе килеп етте. Уларға аҙыҡ әҙерләп бирергә кәрәк. Хатта аҙ ғына ултырып хәл алырға ла әмәл юҡ. Төшкө сәйҙән ҡалған самауырҙағы йылы һыуға икмәк ҡушып тамаҡ ялғарға ғына ултырғайны, тағы Ғәйшә тауышы…

Айбикә самауыр төбөнән һикереп тора. Ҡомғанға һыу һала, усаҡтағы тиҙәк ҡуҙын аҡтарып, ҡаҙанға таҙа һыу ҡоя, тастарын таҙартырға тотона. Ауыҙына ҡапҡан икмәген эш араһында сәйнәп йота, ә уның яртыһы эселмәй ҡалған шәшкеһе самауыр төбөндә һыуынып көтә…

1. I бүлектәге таныш булмаған яңы һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ, уларҙы дөрөҫ әйтергә, яҙырға, үҙ телмәрегеҙҙә кәрәкле урында ҡулланырға өйрәнегеҙ. Был һүҙҙәр араһында историзмдар, архаизмдар, неологизмдар бармы?
2. *Ҡыҙыл еңер, ҡояш ауалау, таңдың әрә-һәрәһе, һөттө бешереп ойотоу, эркет ҡайнатыу, эркет ҡутарыу, икмәк баҫыу* һүҙбәйләнештәрен аңлатығыҙ.
3. Текстан Айбикәнең көндәлек башҡарған эштәрен табып, һанап сығығыҙ.

**104-се күнегеү.** Алда бирелгән бүлектең 3-сө абзацын рус теленә тәржемә итегеҙ.

## II

Айбикә арып-талып, төн уртаһы ауғас ҡына, йоҡларға ятты. Әллә үтә арығанғамы, әллә борсоулы уйҙар күп булғанғамы, ул һуң ятыуына ҡарамаҫтан, йоҡлап китә алманы. Уның күҙ алдынан үткән көндәрҙең күренештәре береһе артынан береһе үттеләр.

Ана әле ул ун дүрт-ун биш йәштәрҙәге ҡыҙ. Өйҙә ҡартайған әсәһе менән ҡартайған атаһы ғына. Уларҙың барлығы ун бер балаһы булһа ла, төрлөһө төрлө ауырыуҙан үлеп бөтөп, яңғыҙ Айбикә генә ҡалған. Шуның өсөн дә уны бик яраталар. Булған ғына нәмәләрен Айбикәгә бирергә, уны йүнәтергә, хәлдән килгән тиклем бөтәйтергә тырышалар.

Айбикәнең күҙ алдына үҙҙәренең бәләкәй генә, соланһыҙ кирбес өйҙәре килеп баҫты. Уның ҡарындыҡ күҙле тәҙрәләре,

ишекте асҡанда ла, япҡанда ла бер эскә, бер тышҡа һуғылып, ҡырп-ҡырп итеп, йырпылдап торалар. Урындыҡ өҫтөнә йәйгән алама кейеҙ өҫтөндә атаһы һәр ваҡыт тегеп, итек ямап, быйма табанлап ултыра. Ҡартлыҡ менән күҙҙәренең күреүе лә насарланған. Шуға күрә ул, энә һапларға булһа, йә энәһен төшөрөп юғалтһа, тиҙ генә Айбикәне саҡыра ла: «Балам, энәмде һаплап бир әле; балам, энәм төшөп китте, табып бирсәле», — ти.

Атаһының янында әсәһе йә тарамыш ишеп, йә тарамыш һумалап, ҡайһы саҡтарҙа кешегә ярым-ярты хаҡҡа йә бушлай уҡ ситек йолдоҡлап, ямап ултыра. Күрше бисәләре йәһәт кенә, өҫтәренә көпөләрен бөркәнеп инәләр ҙә, Айбикәнең атаһынан биттәрен йәшерә-йәшерә, шыбырлап:

— Бибекәй еңгә, бына ҡатамдың билтер генәһе айырылып сыҡҡан, шуны эт теше тартып ҡына тегеп бирсәле, — тиҙәр. Әбей тиҙ генә тегеп биреп ебәрә.

Айбикәнең берҙән-бер бала, уның да ҡыҙ булыуы ҡайһы саҡтарҙа ҡарт менән ҡарсыҡтың күңелен бойоҡтора. Улар, икәүһе генә ҡалып, шулай эшләп ултырған саҡтарында, аҡрын ғына, ауыр ғына һүҙҙәр менән, бер-береһенә ҡарамай ғына, зарланышып алалар: «Эй әбей, әбей, ҡартайғанда күрергә ҡалды һинең менән миңә. Сынтимер генә һау булһа ла, хәҙер уға ун өс йәш булыр ине бит инде. Шул уҡ ир бала ҡартайған көнөмдә ҡул-ҡамытлыҡ итер ине. Хәҙер ни, етмешкә еткәс, бөксәңләп, эшең ни ҙә, үҙең ни. Ураҡ урайым тиһәң, бил ярамай, тегенәйем тиһәң, күҙ күрмәй... Ат булһа ла, әллә кеше-маҙарға ҡушылып эшләр инең...» Әбей ҡартының был һүҙҙәренән Айбикәгә тел тейеүҙән ҡурҡа. Шуға күрә лә уның һүҙен тиҙерәк бүлергә тырыша: «Нисек итәһең, Алла яҙғанылыр инде. Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар, тигәндәр боронғолар. Ҡыҙ булһа ла, ошо яңғыҙыбыҙ һау була күрһен инде. Әле бына өй эсендәге эште ҡулыма ла тейҙермәй бит. Урыны тура килеп, арыу ғына кеше осраһа ла инде, әллә бәлки, ярҙамы булыр ине...» Һүҙ бүтәнгә борола. Ҡулына энәһенме, беҙенме сәнскән бабай, ҡапыл тертләп:

— Әьемм... һүҙең генә бар булһын, күҙең бар булғыры, — тип асыуланып ала. — Ошо көн болот булһа, бер нәмә күрмәйем. Исмаһам, ҡырҡ тартмасыһы ла йөрөмәй бит, берәй күҙелдерек алыр инем.

— Ана йәй көнө йөрөгәндә, алайыҡ, тинем мин һиңә. Ҡыйбат, тигән булдың.

— Ҡырҡ тиндән төшмәне бит, кафыр, уныһы ла. Утыҙ биш тин бирҙем бит сусҡаға, бирмәне.

Ҡарт менән ҡарсыҡтың бөтә ҡышы тигәндәй шулай үтә...

Тышта буран ҡоторғандан-ҡотора. Тәҙрәне яртыһынан ашыу ҡар баҫып киткән. Мөрйә геүләй, тәҙрә ярығынан ел һыҙғыра, ҡар өрә. Был ваҡыттарҙа Айбикә һабаҡта була. Ул мулла бисәһе Фатимаға һабаҡҡа йөрөй. Бик сатлама һыуыҡ көндәр булмағанда, ул атаһы бейек дағалы итеп тегеп биргән ҡара итеген сылғау урап кейә лә, өсөнсө йыл тегелгән, еңе-салғыйҙары ҡыҫҡарып, уңып бөткән ҡыҙыл сатин көпөһөнөң түшенә «Иман шарты»н ҡыҫтырып, ауыл уртаһындағы мәсет эргәһендә торған мулланың өйөнә йүгерә. Өшөп-туңып, ҡулдары ҡыҙарып ҡайтып килеүгә, әсәһе, усаҡтағы тиҙәк ҡуҙын көл араһынан ҡутарып сығарып, ут тоҡандырырға әҙерләнә. Тиҙәк, сатырҙарҙы усаҡҡа һала ла мөрйә асырға Айбикәне көтә.

Айбикә, тиҙ генә йүгереп өй башына менеп, мөрйә өҫтөндәге өлкән ташты, уның аҫтындағы өлкән көл тоҡсайын алып, мөрйә янына ҡуя ла, йышылып бөткән боҙло баҫҡыстан шыуып төшөп, өйгә инә. Был ваҡытта инде усаҡ дөрләп яна башлай, бәләкәс кенә йәмшек еҙ самауырға ҡаҙандан эҫе һыу ҡойоп, шаулатырға ҡуҙ һалып, самауыр соҡалағына ҡуялар. Әсәһе сәй ултырта башлай. Киндер ашъяулыҡ. Замазкалар менән ҡоршалып бөткән, ҡайһыһы тотҡаһыҙ өс шәшкене ҡара батмусҡа ҡуя. Шәкәр юҡ, ҡара ғына итеп тартылған бойҙай икмәге, һөтһөҙ үлән сәй. Әсәһе сәй яһай, атаһы Айбикәнең һабағын һораша:

— Бөгөн ни уҡының, ҡыҙым?

— Әбжәткә төштөм инде, атай.

— Яраған. Кәлимәтеңде бөттөң иһә, бүтән йөрөмәҫһең. Ҡыҙ кешегә шул еткән.

Әсәһе лә йөпләй:

— Эйе шул, ҡыҙ балаға ни, шул иман белеп, намаҙлығын белде иһә, етте инде, — ти.

Үҙҙәренең иген сәсерлек хәлдәре булмағанға күрә, йәйҙең йәй буйы өсәүләшеп ураҡҡа йөрөп, ялланып ураҡ уралар. Бәләкәйерәк саҡта Айбикә усма ғына һала торғайны, туғыҙ-ун йәшкә еткәс, үҙе лә ура башланы. Бәләкәй генә, ябыҡ ҡына ҡыҙыл һыйырҙы күршеләге Нәғимә әбейгә ҡалдырып китәләр ҙә, ул йәй буйы һауып, һөтөн эсә, быларға егерме-егерме биш

ҡаҙаҡтай май, ҡырҡ-илле башлап булһа ла ҡорот йыйып, әҙерләп ҡуя ине. Ураҡтан ҡайтҡас, Айбикә әсәһе менән башаҡҡа йөрөп, биш-алты боттай бойҙай әҙерләйҙәр. Бына уларҙың бөтә ҡыш буйына әҙерләгән запас аҙыҡтары. Улар шуның менән әл-йөл итеп ҡышты сығалар. Шулай ҙа был көндәр Айбикәнең күңелендә ғүмеренең иң яҡшы, тормоштоң иң рәхәт, иң йылы ваҡыттары булып иҫендә ҡалғандар.

Ә ул көндәр, балалығының ғәмһеҙ мәлдәре, күпкә бармай. Айбикәгә яңы ун дүрт йәш тулғайны шикелле, уны һорап, күрше ауылдан яусы килде. Оҙаҡ тартышып торманылар, «урын яҡшы, улы аҡыллы, тип әйтәләр», — тип, ун алты һум мәһәр, туйына бер ҡуй һуйып, уны кейәүгә биреп тә ебәрҙеләр. Мулла никах уҡыны.

1. *Тел тейеү (тейҙереү), энә һаплау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
2. Ниндәй тәҙрә ул *ҡарындыҡ күҙле тәҙрә*? Ололарҙан һорашып, аңлатма төҙөгөҙ.
3. Ниндәй үлсәү берәмеге ул *бот*? Уға аңлатма бирегеҙ. Шул заманда ҡулланылған тағы ниндәй үлсәү берәмектәрен беләһегеҙ?
4. *Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар* тигәндең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
5. Кем ул *ҡырҡ тартмасы?* Ул ни өсөн шулай аталған, нимә менән шөғөлләнгән? Хәҙер ҡырҡтартмасылар бармы?
6. Айбикәнең ата-әсә йортондағы һәм Ҡотлояр байҙағы тормошон сағыштырығыҙ.

**105-се күнегеү.** Икенсе бүлектән рәүештәрҙе, ымлыҡтарҙы яҙып алығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.

## III

Айбикәнең ҡайны менән ҡәйнәһе бар саҡтағы ғүмере арыу ғына үтте. Ҡайныһы тыныс, ҡәйнәһе бигерәк тә йомшаҡ күңелле һәйбәт әбей ине. Ул һәр ваҡыт Айбикәгә:

— Ҡарап ҡалғаныбыҙ һин инде, балам. Бындағылары бында үлеп бөттө, инде анау ут эсендә йөрөгән Юлдыбайҙа ни өмөт... Әллә, бәлки, һуғыштар туҡтап китһә, әйләнеп ҡайтып та килер. Батшаныҡын белмәҫһең, ни эшләйем тиһә лә, ирке бар, Алла күңеленә рәхимдәрен һалмаҫмы, — ти торғайны.

Юлдыбайҙан тәүҙә хаттар йыш-йыш ҡына килһә лә, һуңға ҡарай бик һирәк килә башланы. Ҡайһы ваҡыттарҙа биш-алты ай хат килмәй китә ине. Был ваҡыттарҙа Фәғилә әбей олоҫҡа барып ҡайтҡан бер кешене дүрт күҙ менән көтә, ауылдағы улдары һуғышҡа киткән үҙ тиңе әбейҙәргә барып һорашып, илашып ҡайта. Ҡарт, көндөң көнө буйы ҡайғыға күмелеп, әбейҙең һөйләгәндәрен өнһөҙ-тынһыҙ тыңлай ҙа тәрән көрһөнөп ҡуя ине.

1917 йылдың ҡар ҡатыш ямғыр, боҙлауыҡ яуып торған рашҡылы яҙ көнө ине. Айбикәгә ҡәйнәһе:

— Килен, көндәр һалҡынайтып тора, төшкә һыуға ғына булһа ла күжә төйөп, бешереп алмаһаң булмаҫ. Балам, бик ҡарын асты, — тине.

Айбикә, соландағы шандан бер өлкән туҫтаҡ бойҙай индереп, мейес артындағы ағас килене сығарып, бойҙайын ебетеп һалып, төйөп алды. Усаҡҡа ут тоҡандырып, ҡаҙанға бойҙайҙы һалып, ҡайната башланы. Ҡайныһы мөйөштә, ҡыптыр тунын ябынып, йоҡомһорап ята, ҡәйнәһе нуҡта ишергә ҡыл шөйкәләп ултыра ине. Ишекте ҡапыл асып, Ирмәт бабайҙың ҡыҙы Хәтирә килеп инде. Әбей, һиҫкәнеп:

— Атаҡ, балам, аҡрын, — тип әйтеп өлгөрмәне, ҡыҙ ашыға-ашыға, шатланып:

— Фәғилә инәй, һөйөнсө! Олатай, һөйөнсө! Һөйөнсө! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Өсәүһе лә урындарынан һикерешеп торҙолар.

— Ни бар, ҡыҙым, ни булған?

— Һөйөнсө, Айбикә еңгә! Ни бирәһең һөйөнсөһөнә, тиҙ бул, — тине Хәтирә, һаман да һүҙен бирмәй.

— Йә, ни бар? Бер самауыр сәй үҙеңә, ни бар, әйт.

— Юлдыбай ағайым ҡайтты! Юлдыбай ағайым ҡайтты, әле генә баҙарҙан атайыма ултырып ҡайтты. Мин тәүҙәрәк йүгерҙем...

— Ысынмы, балам? Уй, балам, ысынмы?

Улар, шулай итеп әлән-борхан булып, йүгерешеп сығырға ҡаталарын кейеп тә өлгөрмәне — Юлдыбай менән Ирмәт ҡарт килеп тә инде.

Юлдыбайҙың өҫтөндә һоро шинель, башында иҫке бейек бүрек, аяғында өлкән ботинка өҫтөнән обмотка уралған. Ул, килеп ингәс үк, көлөп ебәрҙе, эсендә котелоктан башҡа бер

нәмә лә булмаған тоҡсайҙы урындыҡ ситенә ырғытты ла ашыҡ-бошоҡ барыһы менән дә күрешергә тотондо.

Өй эсе шатлыҡ менән тулды. Юлдыбайҙың әсәһе, ҡыуанысынан бер илап, бер көлөп, күҙҙәрен күлдәк еңенә һөртөп:

— Хоҙайым, өнөммө, төшөммө?! Хәбәрһеҙ-ниһеҙ бит әле, үлгәндер үк тигәйнем балаҡайымды, һаҡал ғынаһы үҫеп киткән, — тип һөйләнә-һөйләнә, уны арҡаһынан ҡағып яратты. Атаһының да ҡыуанысының сиге юҡ. Ул иламай, ә йыйырсыҡланған бите, нурһыҙ күҙе, тешһеҙ ауыҙы менән бер туҡтауһыҙ йылмая ине. Күрше-тирәләр йыйылып киттеләр. Әллә кемдәр әллә кемдәрен һораша. Ирҙәр, әбейҙәр, Юлдыбайға яҡын ғына ултырып, ауыҙына инерҙәй булып һорашалар.

Ләкин был тыныс ваҡыттар оҙаҡҡа һуҙылманы. Юлдыбай ҡайтып бер йылдай ҙа торманы, Ҡыҙыл гвардияға яҙылып, тағы ла һуғышҡа китте.

Атаһы менән әсәһенең:

— Ҡуй, балам, йөрөмә инде. Ҡарт көнөбөҙҙә беҙҙе ташлап, ҡайҙа бараһың? Һуғыштан туйманыңмы, ҡайтып саҡ күҙебеҙгә күрендең дә тағы китәһең! Бына килен дә нисә йыл көттө. Ул бахырға ла рәхмәт инде. Ҡартайған көнөбөҙҙә беҙҙе ташламай, һаман ҡарап торҙо. Йөрөмә инде! — тип ҡабат-ҡабат инәлеп илаһалар ҙа, Юлдыбай уларға ҡараманы, яңынан китте.

Юлдыбайҙың, шул көндән бик күп ваҡыт үткәс кенә, бер хаты килде, «Бөтә полкыбыҙ менән Петроградҡа киттек», — тип яҙғайны. Шунан бирле хаты ла, хәбәре лә юҡ. Әллә үле, әллә тере. «Үҙе булһа, әллә былайтып йөрөмәҫ тә инем...» Айбикәнең күҙҙәренән эре-эре йәш бөрсөктәре тәгәрәп төштөләр. Аслыҡ йылда үлеп ҡалған ҡайны менән ҡәйнәһе күҙ алдына килде.

Айбикә лә асығып, йөҙө шешенде. Ул эт тә, бесәй ҙә, табылғанда алабута ла ашаны, йәш кеше шулай ҙа түҙҙе. Ул арала инде совет ашхана асып, шуның менән тамаҡ ялғанып китте. Ашхананы Ҡотлоярҙың өйөндә астылар. Ул ваҡытта ауыл советы рәйесе, арғы остоң Хөсәйене, Ҡотлоярҙың яҡын кешеһе ине. Уларҙың ҡулдарынан һыҡҡандары ғына тама. Үҙҙәре, бер өйкөм генә ағай-эне, бергәләп эш күрәләр. Ботлап-ботлап аҡ он, какао, дөгөләрҙе бүлешеп алып ашайҙар. Бисәләре ҡаҙаҡлап кейем-һалым, көмөш тәңкәләргә алмаштырып кейенәләр. Уларҙың һәр береһендә бер-ике

ҡаҙаҡ онға йәки бер ҡаҙаҡ иткә алмаштырып алынған төрлө ҙурлыҡтағы самауырҙар, өлкән-өлкән яҫтыҡтар менән келәттәре тулып ята. Быны берәй кеше һиҙеп, уларға һүҙ әйтә икән, ашханала ашатмау менән ҡурҡыталар ине.

Ана шул ваҡытта, йортҡа өйрә, икмәк бешерергә кеше кәрәк булғас, Ҡотлояр байҙың бисәһе Ғәйшә, Айбикәне үҙенә саҡырып алып:

— Айбикә килен, былайтып асығып йөрөмә. Ашхананан алып ашаған менән, өйөңдә яғырға утының юҡ, һыуыҡ өйҙә яңғыҙ ултырғансы, беҙгә кил. Миңдә арлы-бирле эш эшләшерһең. Хәҙер, кемгә әйтһәм, шул килә. Тик һине үҙебеҙҙеке, тип кенә әйтәм, — тине.

Шул ваҡыттан бирле Айбикә Ҡотлояр байҙа тора. Шунан бирле көнө-төнө эштән бушамай, шул көндән бирле йүнләп йоҡоһо туйғаны, рәхәтләнеп ял иткәне юҡ. Шунан бирле әрләнә-тиргәлә ине…

…Айбикә уйҙарының шул еренә еткәндә, төпкө өйҙөң ишеге асылған тауыш ишетелде. Ул урынынан һикереп торҙо. Ишектән Ғәйшә күренде:

— Әстәғәфирулла. Яңы тороп киләһеңме? Һай-һай, йоҡлайһың да инде. Ҡыҙыл эңерҙән ятып, ҡояш сыҡҡансы… — тип һөйләнә-һөйләнә, ҡулына ҡомған тотоп, тышҡа сығып китте.

Тик әле, ҡояш сығыу түгел, таң яғы яңы аллана башлағайны.

1. Айбикәнең кейәүҙәге тормошо тураһында һөйләгеҙ. Малбай ҡарт менән Фәғилә әбейгә характеристика бирегеҙ.
2. Юлдыбай ниндәй һуғыштарҙа ҡатнаша?
3. Аслыҡ йылы ярлы халыҡтың, шул иҫәптән Айбикәнең яҙмышын нисек хәл итә?
4. Айбикә Ҡотлояр байҙың өйөнә нисек килеп эләгә?
5. Артабан Айбикәнең яҙмышында ниндәй үҙгәрештәр була? Әҫәрҙең аҙағын «Мәктәп китапханаһы» серияһында сыҡҡан «Һәҙиә Дәүләтшина. Һайланма әҫәрҙәр» китабынан уҡығыҙ.

**106-сы күнегеү.** Ымлыҡтарҙан яңы һүҙҙәр яһалған. Уларҙы уҡығыҙ һәм үҙегеҙ ҙә яңы һүҙҙәр уйлап яҙығыҙ.

Ух — ухылдай, ҡарҡ — ҡарҡылдай, зыңҡ — зыңҡылдай, без — безелдәй, …

# ТЕЛ — ТЕРЕ ШИШМӘ

*Ҡәҙим Аралбай*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Иң боронғо замандарҙан килгән бай тел,
Телем телгә йоҡмаҫ йомшаҡ, ипле наҙ тел,
Әсәйҙәрҙең бишек йыры — нағыҙ бал тел,
Атайҙарҙың ҡобайыры — оран, дау тел.

Сит-яттарҙан туйғанынса һыйланған тел,
Йүкә таштан һуйылғандай ҡыйналған тел,
Ниндәй булдың икән сабый сағыңда, тим,
Күп ырыуҙан төйнәлгән тел, йыйналған тел.

Борондарҙан донъяларға танылған тел,
Борсаҡ кеүек һибелгәнгә — юғалған тел,
Уралынан айырылған башҡортҡа ла
Рухы ҡалһа — өр-яңынан табылған тел.

Ниһайәт, һин үҙ илеңдә таныҡландың,
Заңың менән хоҡуҡ яулап нарыҡландың,
Үҙ еремдә дәүләт теле — башҡорт телем,
Ҡотоң ҡайтһын, көсөң ташһың, даның артһын!

Аҡһаҡалдар аҡылындай хаҡлыҡ теле,
Сабыйҙарҙың сафлығындай намыҫ телем,
Атам теле, әсәм теле, сәсән теле —
Уралымдай йәшә мәңге, башҡорт теле!

1. Шиғырҙа башҡорт теле нисек һүрәтләнә?
2. Халыҡ, тел тарихы һүрәтләнгән строфаны табып уҡығыҙ. Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Башҡорт теле тураһында тағы ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ?

**107-се күнегеү.** Ҡош-ҡорт тауыштарын белдергән ымлыҡтарҙан яһалған һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Түбәндәге эш-хәрәкәттәрҙе башҡарыусыларҙың эйәләрен табығыҙ.

Ҡытҡылдай, мыяулай, мөңрәй, ҡаҡылдай, сипылдай, ҡорҡолдай.

*(быҙау, тауыҡ, себеш, ҡоҙғон, ҡаҙ, бесәй)*

Барлыҡҡа килгән һөйләмдәрегеҙҙе, яңы һүҙҙәр өҫтәп, тулыландырығыҙ.

*Мостай Кәрим*

## ИСКӘНДӘР ӘСҒӘТЕ

*(«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесынан өҙөк)*

Әсғәттәр урамын «Губернатор урамы» тип йөрөтәләр... «Бында губернатор үҙе йәшәгән, имеш...» — тип уйламағыҙ тағы. Ҡасандыр, әллә йөҙ йыл әүәл, ошо урам шәрәмәтенән, тройкала елдереп, губернатор уҙып киткән, имеш, тиҙәр. Шул тиклем ҙур түрәнең көймәһе туҙҙырып уҙған туҙанда ҡойоноп, рәхәтлектең, ғорурлыҡтың сигенә еткән бәндәләр шунда уҡ үҙ урамдарына яңы исем ҡушҡандар — «Губернатор урамы». Әйтергә кәрәк, биш кенә йорттан торған был тыҡрыҡтың «Кәзәләр төбәге» тигән элекке исеме лә тиҙ генә онотолмаған. Губернаторҙар, байҙар, түрәләр, күҙҙән төшөп, түрҙән тәгәрәгәс, «Кәзәләр төбәге»н яңынан йәбештерергә маташыусылар ҙа булған буғай. Ләкин «губернаторҙар», һәр йорттоң нигеҙ буйында кәзәләр көйшәп ятыуға ҡарамаҫтан, был мәсхәрәне ҡабул итмәгәндәр, берҙәм кире ҡаҡҡандар. Губернатор урамы ауылдағы «Туң мөрйә», «Өс әтәс», «Ябалаҡ», «Серсә» исемдәрен йөрөткән башҡа төбәктәргә ишме ни? Тегеләрҙең һәр береһенән меҫкенлек, наҙанлыҡ, томаналыҡ аңҡып тора.

Бәләкәй саҡта Губернатор урамы минең өсөн сит бер донъя, ундағы кешеләр тотош сер ине. Ул һауалы фәҡирҙәрҙең сәйер ҡылыҡтарын мин һуңыраҡ, ологая биргәсерәк кенә төшөндөм. Тәкәбберлек уларҙың ҡоралы, ҡалҡаны, таяныр терәге булған икән. Башҡаларҙың мөлкәтенә, дәрәжәһенә, көсөнә нимәнелер ҡаршы ҡуйырға кәрәк бит. Улар шул ҡоро мин-минлекте килтереп баҫтырғандар. Бахыр, ғорур, әкәмәт «губернаторҙар»! Мин һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә һағынып иҫкә алам — тереләрҙе лә, мәрхүмдәрҙе лә...

Шул «губернаторҙарҙың» береһе Әсғәт ине.

...Мин Губернатор урамынан Тау артына быҙау эҙләргә китеп барам. Үҙҙәренең ҡапҡа төбөндә хас та етен төҫлө ап-аҡ сәсле Әсғәт баҫып тора. Күҙҙәре лә етен сәскәһенә оҡшаған — зәп-зәңгәрҙәр. Мин уны beләм. Тик әлегәсә бер тапҡыр ҙа бергә уйнағаныбыҙ юҡ. Был миңә йә таш ырғытыр, йә телен сығарып үсекләр, йә «Кендек»тән һалдырып исем атар, тип үҙемсә яуап ҡайтарырға әҙерләнеп киләм.

— Эй, малай, ыңғайла былай! — тип бойорҙо теге, таҡмаҡлап.

— Үҙең ыңғайла. Мин быҙау эҙләргә барам, — тип сәйнәштем мин.

— Шөрләмә, һиңә булмаҫ һис нәмә, мин кешегә теймәйем, — тине Әсғәт. Мин туҡтаным. Үҙем, хәжәте килеп сыҡмағайы тип, уң йоҙроҡто йомарлап, артҡа йәшереп ҡуйҙым. Ике күҙенән зәңгәр нурҙар сәсә-сәсә, «етен баш» үҙе миңә табан ыңғайланы. Килеп еткәс тә, усын йәйеп, минең танау аҫтына килтереп терәне.

— Нимә еҫе килә? — Мин, ауыҙҙы йомоп, аптырап ҡалдым. Әгәр яман ниәт менән булһа, ул ус төбөн түгел, йоҙроғон еҫкәтер ине. Һуғыш сығарырға самалаған малайҙар шулай йоҙроҡ еҫкәтәләр.

— Йә, әйт инде, нимә еҫе килә? — тип ҡабатланы.

«Эт еҫе» тип ауыҙын ҡапларға уйлағайным да, тегенең хәйләһеҙ йылмайыуы тыйып ҡалды.

— Юҡсы, бер еҫ тә килмәй, — тип баш сайҡаным.

— Һин яҡшылабыраҡ еҫкә, — тип ныҡышты теге, — танауыңды йырыбыраҡ...

Ярылып бөткән бысраҡ ус төбөн мин, бара торғас, ысынлап еҫкәргә тотондом. Әммә айырып ҡына әйтерлек еҫ таба алманым.

— Их, һин, — тип кәмһетмәксе итте мине Әсғәт, — шуны ла белмәйһең... Күмәс еҫе, май күмәсе. Әле генә күмәс ашап сыҡтым.

Быныһы ла мине шаҡ ҡатырҙы — тапҡан маҡтаныр нәмә! Уның күмәс ашауы миңә бик хәжәт, ти, ана. Харап икән!

— Ашаһаң ни... Мин быҙау эҙләргә барам.

— Мин дә һиңә быҙау эҙләшәйемме?

— Эҙләшһәң ни...

Һай соҡор тигән ергә еткәндә, беҙ Әсғәт менән етәкләшеп китеп бара инек инде. Шул арала ул, мине арбап, ҡулға эйәләштереп алды.

— Эй, туҡта әле, ыштан кеҫәңдә һинең нимә ҡабарып тора ул?!

— Икмәк ҡатыһы.

— Булмаҫ, йә таштыр әле.

— Бына, ышанмаһаң, — тип мин кеҫәләге ҙур ғына икмәк ҡатыһын сығарып күрһәттем, — быҙау алдатырға. Бына...

— Быҙауҙы, ни уны, былай ғына, алдатмай ғына ҡыуып ҡайтырбыҙ. Әйҙә, икмәкте ултырып ашайыҡ.

— Үҙең әле генә, май күмәсе ашаным, тип маҡтандың...

— Күмәс кенә тамаҡты туйҙырмай шул, уны икмәккә ҡушып ашарға кәрәк.

— Ә ниңә һуң ҡушып ашаманың?

— Икмәк булмағас...

Әкәмәт был донъя. Берәүҙәрҙә гел генә күмәс, икмәк юҡ, икенселәрҙә икмәк бар, күмәс юҡ. Беҙҙә, әйтәйек, күмәс бары йома көндө генә була. — Әсғәт минең ҡулдағы икмәк киҫәгенә йотолоп ҡараны ла, ирендәрен ялап, ауыҙын сапылдатып ҡуйҙы.

— Мә, аша, — тип һыныҡты уға тотторҙом. Киҫәкте ул һаҡ ҡына уртаға һындырып яртыһын миңә һондо. Мин баш сайҡаным.

— Икмәктән туйған әҙәм дә булыр икән, — тип, арыҡ боттарын һуҙып, үлән өҫтөнә ултырҙы. Күлдәк итәген теҙ баштарына һәйбәтләп япты ла ашыҡмай ғына ашарға кереште. Итәгенә төшкән валсыҡтарҙы шунда уҡ алып ҡаба барҙы.

— Икмәкте баҫып ашарға ярамай, — тип аңлатты миңә. — Баҫып ашаһаң, туҡландырмай ул. Әгәр бер валсығын ергә төшөрһәң, яҙыҡ була. Яҙыҡ булғас, тамуҡта яндыралар — үлгәс. — Ул һуңғы ҡабымын сәйнәп йотто. Тик урынынан

торорға ашыҡманы. Туйынып, күңеле хушланып алғас, ул ғибрәтле бер әңгәмә һөйләп ташланы. — Атайым әйтә, борон-борон заманда бер батша дала буйлап һыбай китеп бара икән, ти. Бара торғас, бының ҡорһағы асҡан. Ҡуйынындағы икмәген алып, атынан төшмәй генә ашарға керешкән был. Ваҡыты ҡыҫтау булған, ти, батшаның. Аҡтыҡ ҡабымды ҡаптым, тигәндә генә, бер валсығы ергә тәгәрәп төшкән. Батша шунда уҡ эйәренән һикергән дә әлеге валсыҡты эҙләргә тотонған. Эй эҙләгән, эй эҙләгән. Өс көн, өс төн буйы, имгәкләп, бөтә тирә-яҡты ҡыҙырып сыҡҡан. Тәки таба алмаған. Дүртенсе көндө өйөнә ҡайтһа, бөтә һарайҙы ҡара ҡайғы баҫҡан, ти. Бынан нәҡ өс көн элек батшаның иң яратҡан улы һыуға төшөп үлгән икән. Хоҙай ҡәһәренең тағы ла яманырағы төшөүҙән ҡурҡып, батша әлеге икмәк валсығы төшкән урынға ҡуш манаралы мәсет һалдырған, ти. Бынан һуң уны Хоҙай ярлыҡағандырмы, юҡтырмы — уныһы беҙгә мәғлүм түгел...

Ана ниндәй нәмәләр белә был сәйер малай!

«Шыҡыр-шыҡыр» шыҡырыҡлап, баш өҫтөнән түбәндән генә бер төркөм һайыҫҡан осоп үтте. Быныһын мин дә beләм: инә һайыҫҡан балаларын осорға өйрәтә. Уҙған аҙнала ғына сыйырсыҡтар менән ҡарлуғастар бала осорғайны. Бөгөн — һайыҫҡандар. Мин йәһәт кенә бер таш табып, һайыҫҡандарға тоҫҡап ырғыттым:

— Һайыҫҡан, һайыҫҡан, күкәй эскән, май эскән!

— Тейҙерһәң һуң? — тип һикереп торҙо Әсғәт.

— Тейһә, тейә бирһен, һандуғас балалары түгел әле.

— Һайыҫҡанға ла үҙ балаһы ғәзиз. Уның да эсендә йәне бар. Бөтә нәмәләрҙең дә йәндәре бар — ағастарҙың да, таштарҙың да, үләндәрҙең дә... Йәндәре булмаһа, йәшәрҙәр инеме ни улар? Беҙҙең бармаҡ киҫелһә, ҡыҙыл ҡан аға, ағас ботағын ҡырҡһалар, аҡ ҡан аға. Тимергә тимерҙе һуҡһаң, сыңлай бит, эйеме. Шул — тимерҙең илауы була инде. — Белмәгәне юҡ был Әсғәттең.

Беҙ Һай соҡорҙо ла, Тәрән соҡорҙо ла бер итеп, бөтә тау артын әйләнеп сыҡтыҡ. Йүкәлеҡул урманына барып еттек, Мәкәш шишмәһенә төшөп һыу эстек. Әллә нисә быҙау осраттыҡ, ә беҙҙең Аҡмаңлайҙың эҙе лә юҡ. Арып-талып өйгә әйләнеп ҡайттыҡ. Ҡайтһаҡ, беҙҙең ҡойма күләгәһендә Аҡмаңлай һуҙылып ята. Тиҙ генә ҡапҡаны асып, быҙауҙы, һәүкәшләп, ҡурağа ҡыуаланыҡ.

Аласыҡ тирәһендә нимәлер мәшәҡәтләнеп йөрөгән Оло инәйем мине маҡтап ҡаршы алды.

— Бына рәхмәт, улым, ҙур үҫтең инде, ҡул араһына кергәнһең.

— Мин түгел, Оло инәй, быҙау ҙур үҫкән…

— Улайһа, икегеҙ ҙә ҙур үҫкән.

— Оло инәйем, был Әсғәт исемле малай. Ул миңә быҙау эҙләште.

— Уға ла рәхмәт. Былай булғас, өсөгөҙ ҙә ҙур үҫкән. Барығыҙ, ана, мөгәрәптән алып, ҡунағың менән һалҡын ҡатыҡ эсегеҙ.

— Икмәкләпме?

— Икмәге лә шунда аласыҡта.

— Ярай, мин ҡайтайым инде, — тигән булды Әсғәт, — өйҙә лә йомортҡа бешергәндәрҙер.

Быны ишетеп ҡалған Оло инәйем, хәйләкәр йылмая һалып, Әсғәтте ҡыҫтарға уҡ тотондо.

— Аш — ашҡа, урыны башҡа. Йомортҡаға ла урын табылыр. Ҡатыҡ сеүәтәләрегеҙгә берәр ҡашыҡ ҡаймаҡ та һалып бута. — Быныһын ул миңә әйтте.

Әсғәт башҡаса инәлтмәне… Аласыҡ эсенә еләҫкә ултырып, беҙ тиҙ үк ҡашыҡтарҙы бейетергә керештек. Үҙ сеүәтәһен ялап ҡуйғас, ҡунағым миңә яңы хәбәр һалды:

— Күмәс тураһында бая мин фәстерҙем. Аслыҡты аҙаштырыр өсөн генә әйтелгән алдаҡ һүҙ ул. Йомортҡаһы ла шулай. Беҙ икенсе аҙна инде көнөнә бер тапҡыр ыумас ҡына ыуып торабыҙ. Атай мәсеттән ҡайтмай, оло ағайым ҡалаға китеп олаҡты. Донъяны беҙ Ибрай менән икәү генә алып барған булабыҙ. — Хәҙер инде уның тауышында баяғы тәкәббер ғәмһеҙлектең әҫәре лә юҡ. Минең ҡаршыла бәләкәс кенә бабай ултырған да үҙенең аһ-зарын һөйләй. — Беҙҙең тәндә хәҙер бер тамсы ла май ҡалманы. Кисә Ибрай менән икәү, ҡорһаҡтарҙы асып, әллә ни саҡлы ҡояшта ҡыҙҙырып ҡараныҡ. Бөрсөк тә май сыҡманы. Шунан мин ағайымды үсекләп йыр сығарҙым. Кешегә һөйләмәҫ булһаң, һиңә лә әйтәм.

— Икмәк өҫтө, ант! — тинем мин.

— Былай ҙа, ант итмәһәң дә, ышанам.

Ибырашка-дурашка
Артын асҡан ҡояшҡа.
Ике ҡаҙаҡ майы сыҡкан
Күстәнәскә күмәскә.

Ирмәкме йыры?

— Ирмәк. Ибрай нимә тине һуң?

— Сабата ҡалыбы менән башҡа тондорҙо. Бына ороһо әле лә бүлтәйеп тора. Бөтөр әле, мәңгегә бармаç. Ә төртмә йыр ҡалыр. Уға ҡалып менән һуғып булмай.

Әсғәт бер ҡатлы малай булып сыҡты. Уның эсендәге тышында икән. Сер артынан серен сисә генә бирҙе.

— Минең ҡушаматым — «Һары серәкәй», — тине. — Төçөмә ҡарата ла, телемә ҡарата ла ҡушылған ул. Телем әсе минең. Тартай теленән таба тигәндәй, шул телем арҡаһында эләгеп кенә тора миңә. Ә ҡушаматтан мин ғәрләнмәйем. Исем атауҙан бер ер ҙә кәмемәй. Харап икән — «Һары серәкәй», имеш...

— Минең дә ҡушамат бар ҙа ул, — тигән булдым мин, унан ҡалышмаçҡа тырышып. — Тик, әйтһәләр, ғәрләндерә.

— И-и-и-һи, — тип күтәреп алды Әсғәт, — һинең ҡушамат бер тигән — «Кендек»! Донъяла иң кәрәкле әйбер — кендек ул. Арт арбаны ал арба менән нимә тоташтыра? Кендек! Иң ғәййәр ир уҙаманына нимә тиҙәр? «Донъя кендеге» тиҙәр. Уның өçтәүенә, һин ауылда бәпес тыуған һайын, өйҙән өйгә, һыйҙан һыйға йөрөп, күпме игелек күрәһең — шул кендек арҡаһында!

— Ҡара уны, тағы бер исем атаһаң, һуғышам, — тип иçкәрттем мин.

— Иçәр һин, һинең ҡушамат миңә эләкһә, мин маҡтанып ғына инем.

— Бик маҡтанғым килеп тормай әле, — тип ҡырт киçтем мин. Ул да һүҙҙе ары һуҙманы.

Бер көн эсендә Әсғәт мине бөтөнләй сихырланы. Ул ҡайтып киткәс тә, үҙен һағына башланым. Бынан ары беҙ ташлашмаç дуçтар булдыҡ.

Әсғәт бәхетле заттарҙан түгел. Ғүмер буйы уның башы бәләнән сыҡманы. Ҡорбан байрамы алдынан ғына уға бер-бер артлы ике яфа килде.

Көтөү ҡайтҡас та, ҡойроҡтан ғына сығып, Әсғәттәргә барҙым. Былар ағаһы Ибрай менән икәүләп артҡы аҙбарға мал ябып йөрөй. Үгеҙҙәре аҙбарға күндәм генә керә, ә һыйырҙары ҡарыша. Өгөтләп тә, сыбыҡлап та ҡарайҙар — тыңламай. Ахырыһы, һыйырҙары үҙ аҙбарынан биҙгән. Аптырағас, Ибрай һыйырҙы атланып та әйҙәп ҡараны. Барып сыҡманы.

Теге ҡапыл бер яҡҡа тайшанды ла бешмәгән һыбайлыны тиреҫ өҫтөнә атып бәрҙе. Уға шул таман да. Үҙе ул кешенән көлөргә, әҙәм ҡоторторға бик һәүәҫ.

Ҡустыһы шунда уҡ таҡмаҡлап та алды:

Атың арыҡ, Ибырай,
Артың ярыҡ, Ибырай!
Ат тигәнең пар мөгөҙлө,
Тоҙ ялай ҙа һыу һорай.

Ибрай аҡайып Әсғәткә табан килә башлағайны, ҡустыһы йәтеш кенә һүҙҙе икенсегә борҙо:

— Үгеҙ көслөмө, һыйыр көслөмө? — тине ул.

— Үгеҙ! — тинек беҙ Ибрай менән бер юлы, сөнки ир затының көслөрәк икәнен бот буйы малай ҙа белә.

— Әйҙәгеҙ, улайһа һыйырҙы тарттырып индерәбеҙ.

— Нисек?!

— Ҡойроғон үгеҙ ҡойроғона бәйләйбеҙ ҙә! — Ибрайҙың баш йоҡа уның. Бындай йәпле фекер уның уйына бер ваҡытта ла киләсәк түгел, ләкин ағай кеше алды бирмәгән булды:

— Алйот, алабарман! Ағайың башында яралған аҡылды әйтеп ысҡындырырға кем ҡушты һиңә?

— Әллә инде.

— Ағайың иҫән саҡта, кәм-хур булмаҫһың, энем, баш түгел беҙҙә — хазина. — Китте, китте был «губернатор» ҡуҡырайып. Был һүҙҙәрен ул бигерәк тә минең ҡолаҡҡа төбәп әйтте буғай. — Бар, килтер бында үгеҙҙе!

Әсғәт йыуаш ала үгеҙҙе һыйыр эргәһенә ҡыуалап килтерҙе. Ибрай үҙ ҡулдары менән ҡойроҡто ҡойроҡҡа нығытып бәйләне. Әсғәт, үгеҙҙең мөгөҙөнән тотоп, яй ғына эске аҙбар яғына ыңғайланы, һыйыр, киреһенсә, дүрт аяғын да терәп, ергә йәбеште. Үгеҙ ҙә буй бирмәне, егетлеген итте, бар ҡеүәтен йыйып алға ынтылды. Ике хайуандың да ҡойроҡтары, һуҙылып нескәргәндән-нескәрә барҙы. Дарманға дәрт өҫтәп, Ибрай оҙон сыбыҡ менән үгеҙҙең һырт буйына һыҙырҙы. Ала мәхлүк, үрә һикереп, алға ынтылды. Нимәлер шырт итте. Баҡһаң, үгеҙ ҡойроғо булған урында бер ҡарыш самаһы ғына йөнтәҫ ҡырҡынды һерәйеп ҡалған икән. Ҡырҡындынан эркелеп ҡан килеп сыҡты. Үгеҙ яман итеп үкереп ебәрҙе лә, бөтә ҡураны бер итеп, үрһәләнеп сабырға кереште. Өй эргәһен-

дәге ултыртма ситәнгә килеп бәрелде, ситән ҡолап төштө. Шашып ҡоторған бисара хайуан тау артына сығып ҡасты.

Беҙ өсәүләп үгеҙ артынан тороп йүгерҙек. Тик эңер төшөүгә генә, уны кире алып ҡайттыҡ. Ул шул саҡлы сабыуҙан, һыҙланыуҙан тамам йонсоғайны. Башын да күтәрә алмай. Ауыҙынан туҡтауһыҙ һеләгәй аға.

Сәлләһен кейеп, мәсеткә барырға тип сыҡҡан Искәндәр ағай беҙҙе ҡапҡа төбөндә ҡаршы алды. Был үгеҙ мажараһын Әсғәттең апаһы күреп торғайны. Эштең асылын атаһына еткергәндер, күрәһең. Шуға күрә Искәндәр ағай бәйнә-бәйнә һорашып торманы.

— Ҡайһығыҙҙың этлеге был? — тине ҡулындағы үгеҙ ҡойроғон һелтәп.

— Әсғәтең уйлап сығарҙы, — тине Ибрай. — Башҡа ла ингән нәмә түгел ине, атай.

— Әлеге һин! Атаң яҡшы, инәң яҡшы, эттән тыуған эт балаһы! — Мәсет ҡарты оятһыҙ, әшәке һүҙҙәр әйтеп, кесе улының ҡолағынан әләктереп алды. Икенсе ҡулындағы үгеҙ ҡойроғоноң ҡанлы йыуан башы менән Әсғәттең арҡаһын ҡайыҙлай-ҡайыҙлай, аҙбар эсенә алып инеп китте. Ибрай шунда уҡ ҡайҙалыр шылды. Әсғәттең, «ыһ» тигән тауышы ишетелмәне, тик үгеҙ ҡойроғо ғына шыйылданы. Бөтөнләй күҙ бәйләнә башланы. Аҙбар эсенән Искәндәрҙең аҡ сәлләһе килеп сыҡты.

— Һиңә нимә ҡалған бында? Бар, өйөңә ҡайт! — тип екеренде миңә. Әммә туҡталып торманы, ары китте. Ишек төбөндәге ҡомғанды тибеп осорҙо ла өйгә инде.

Мин боҫоп ҡына Әсғәт эргәһенә индем. Ул тиреҫ өйөмө өҫтөнә ҡапланып ятҡан. Ара-тирә һулҡылдап ҡуя. Уға әйтер бер һүҙ ҙә таба алманым. Баш осона тубыҡланып ултырҙым. Ул, аҡрын ғына ҡулын һуҙып, минең тубығымды ҡапшаны. Шул саҡ яҡында ғына Оло инәйемдең мине саҡырған тауышы ишетелде.

— Мин бында, Оло инәйем!

— Ҡайҙа?

— Аҙбар эсендә. Искәндәр ағайҙар аҙбарында! — Үҙем тауыш бирәм, тороп китергә үҙемдең әллә кәрем, әллә зиһенем етмәй.

Оло инәйем аҙбар ауыҙына килеп туҡтаны.

— Нимә эшләп ултыраһың бында, кеше аҙбарында, эңер төшөп бөткәс?

— Әсғәтте атаһы үлтергәнсе туҡманы. Үгеҙ ҡойроғо өсөн. Ул тора алмай хәҙер.

«Ниндәй үгеҙ, ниндәй ҡойроҡ?» тип төпсөнөп торманы ул. Ыңғырашып ятҡан Әсғәтте ҡараңғыла һәрмәнеп килеп тапты ла яй ғына ҡулынан тартып торғоҙҙо.

— Әйҙә, улым, өйгә инәйек.

— Әл-лә арҡам! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Әсғәт. Оло инәйем, етәкләп, уны өйгә алып инде.

Искәндәрҙең түр яғында һуҡыр лампа яна. Йорттағы барлыҡ йән эйәһе шаршау эсендә, ахырыһы. Шылт иткән тауыш юҡ. Был яҡта бер Искәндәр генә һике өҫтөндә тубыҡланып тиҫбе тартып ултыра.

— Тиҫбеңде ҡуйып тор әле, Искәндәр! — тине Оло инәйем, тауышын күтәрә төшөп. Теге тыңламаны. — Һиңә әйтәмсе! — тип ҡабатланы.

Ҡарт тиҫбеһен ҡуйманы, шулай ҙа тартыуҙан туҡтаны. Алға һуҙылған ике ҡулының бармаҡтары, төймә тотҡан көйө бөгәрләнеп, ҡатып ҡалды.

— Әйҙүк, еңгә. Хуш... — тине, тешен ҡыҫып ҡына. — Түрҙән уҙ.

— Иманың бармы һинең? — Ул Әсғәттең буй-буй булып ҡан һауған арҡаһын асып күрһәтте. — Йыртҡыс һин. Улай тиһәң, йыртҡыс та үҙ балаһын был тиклем үк иҙеп, имгәтеп ташламаҫ. Һин унан да ҡанһыҙыраҡ. Хоҙайҙан ҡурҡмаһаң, әҙәмдән оялыр инең. Былай булғас, һинең мәсеттән сыҡмай намаҙ уҡыуың ҡороһон!

— Хоҙа ғәмәленә тел тейҙермә, еңгә. Тәңре ҡарғышы төшә күрмәһен...

— Ә һин әҙәм балаһын рәнйетмә. Әҙәм ҡарғышы төшһә, гүреңдә лә урын табалмаҫһың.

Оло инәйемдең былай асыуланғанын мин бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ ине. Әйтерһең, ул, бәпкәләрен яҡлап, төйлөгәнгә ташланған инә ҡаҙ. Бәпкәһе лә үҙенеке түгел бит әле. Үҙенеке түгел, тимен дә... Моғайын, Оло инәйем Әсғәттең дә кендек әбейелер әле.

— Ҡара уны, — тип киҫәтте ҡартты, — бармаҡ менән сиртәһе булма балаға. Уның күңеленә хәҙер асыу сәсһәң,

һуңыраҡ нәфрәт урырһың. Иң яман ҡаза — ата менән бала дошманлығы.

Искәндәр ҡарт бүтәнсә әрепләшмәне. Башҡа кеше уға ошолайыраҡ тел тейҙерһә, ҡарт пыр туҙыр ине. Минең Оло инәйемә ҡаршы әйтә алмай шул. Ауылда уға берәү ҙә ҡаршы әйтмәй.

— Эй, кем бар унда шаршау эсендә? — тип ҡысҡырҙы Искәндәр. — Ҡунаҡ килгәнен ишетмәйһегеҙме ни? Самауыр ҡуйығыҙ!

...Икенсе бәлә Әсғәткә иртәгә ғәйет тигәндә килде. Байрам көндө төштән һуң бөтә урамдағы малайҙар, Аҡманай һыулауына ат йөҙҙөрөргә барабыҙ, тип алдан һөйләшеп ҡуйҙыҡ. Мортаза ағайым миңә лә күк алашаны биреп торорға вәғәҙә итте. Аҡманайҙа ат йөҙҙөрөү — үҙе бер тамаша ул. Унда барғансы, һәр малай үҙ атын ҡырғыслап таҙарта, ялдарын дегәнәктәрҙән әрсей, хатта, ҡыҙҙар сәсе һымаҡ, толом-толом итеп үреп тә ҡуя. Ҡупшыраҡтары әлеге толомдарға төрлө-төрлө таҫмалар ҙа тағып ебәрә. Беҙҙекеләр улай ҡыландырғанды яратмайҙар. Мин күк алашаны буйым еткәнсә ерҙән, буйым етмәгән урындарын өҫтөнә менеп ҡырғысланым, һыланым-һыйпаным да Әсғәттәргә киттем. Әсғәттең инде арҡаһындағы ҡутырҙары ҡубып төшә башланы, йөҙөндәге ҡара янған урындар ҙа һарғылт зәңгәргә әйләнде. «Ни эшләнең?» — тип һорағандарға, ул: «Үгеҙ һөҙҙө», — тип яуап ҡайтарҙы. Миңә лә шулай әйтергә ҡушты. Бахыр үгеҙ өҫтөнә юҡ ғәйепте ташлап, ниңә алдашабыҙ икән беҙ? Быныһын мин аңлап еткермәйем әле.

Ҡура уртаһында кейәү ҡуйынына инергә әҙерләнгән кәләш һымаҡ биҙәлгән һыңар күҙле ҡара бейә баҫып тора. Бейә түгел, торғаны менән бер кәртинкә. Ике ҡолағына сигелгән суҡлы ҡулъяулыҡтар бәйләнгән, ялына аллы-зәңгәрле таҫмалар ҡушып үрелгән, хатта алғы бәкәлдәренә аҡ сепрәктәр уралған, ҡойроғона эреле-ваҡлы тәңкәләр тағылған. Үҙе ҡара һөлөк төҫлө йылҡылдап тора. Тик күҙ генә берәү. Уныһы ла, әмәлгә ҡалғандай, сылт-сылт йомолоп, эрен ағыҙа, ҡәһәрең. Был тиклем бай йыһаз ҡара бейәгә ҡайҙан килде икән, тиһегеҙме? Самалауы ҡыйын түгел: малайҙар ике апаһының да бирнә һандығына ярайһы ғына тәрән сумып сыҡҡан булырға тейеш. Йә улай ҙа түгелдер. Йә апалары

үҙҙәре биреп торғандыр. Әсғәт хәл эсендә ҡалғандан һуң, улар бөтәһе лә йомшара төштө.

Шундай итеп биҙәнеп-төҙәнеп, ҡупшылыҡтың сиген уҙған ҡыҫҡа муйынлы күпкәк ҡара бейәнең йүкә нуҡтаһын ике яҡтан Ибрай менән Әсғәт тотоп алған. Улар, таҡмаҡ әйтеп, бер урында һикергеләп бейеп тора:

Һайт, ҡара юрға! Һайт, ҡара юрға!
Аҡҡош муйын, нескә бил,
Елде уҙып ел дә ел,
Һайт, ҡара юрға!
Тауис ҡойроҡ, шәм ҡолаҡ,
Бер аҙымы биш булыр.
Уның менән уҙаман
Хан ҡыҙына иш булыр.
Һайт, ҡара юрға! Һайт, ҡара юрға!
Алтын тояҡ, ебәк ял!
Бер мөләйем ҡараш һал!
Һал! Һал! Һал!

Ошо тиклем оло маҡтауҙы ҡара бейә аҙағына тиклем баш та ҡаҡмай, ҡойроҡ та ҡыймылдатмай, үтә тыныс, үтә сабыр тыңлап торҙо. «Бер мөләйем ҡараш һал! Һал! Һал! Һал!» — тигән ялбарыу һүҙҙәрен ишеткәс, тертләп киткәндәй итте. Шулай ҙа йырҙың күрәләтә ярамһаҡ булыуы оҡшаманы буғай бейәгә. Әсғәт яғына кинәт башын бороп, тегенең һул ҡолағын төбөнән үк умырып та алды, ә иртәгә ғәйет ине...

...Яҙмыш менән бәхәсләшеп, беҙ үҫә барҙыҡ. Буйға еттек. Әсғәт уйсан тәбиғәтле, сабыр холоҡло егет булып китте. Кескәй саҡта уны атаһы: «Шайтан һабағына йөрөмә!» — тип мәктәпкә барыуҙан тыйҙы, һуңынан үҙе күңел һалманы. Ул хәреф таныр-танымаҫ көйө ҡалды. Үҙе бөтә ауылда сәсән телле һүҙ оҫтаһы, йыр, таҡмаҡ сығарыусы булып дан алды. Шул әсе теле, тапҡыр һүҙе арҡаһында уға ара-тирә туҡмаҡ та төшкөләй торҙо. «Яҙығына күрә язаһы», — тип ул телен дә тыйманы, йәбер-йоборға ла иҫе китмәне.

Бер заман бөтә ил өҫтөнә көрән өйөрмә ябырылды. Ул, өйрөлдөрөп-өйрөлдөрөп, еләк кеүек егеттәрҙе алыҫ яҡтарға алып китте. Бәхет иленән түгел, бәхетһеҙлек иленән килгәйне был ғәрәсәт. Ул, киреһенсә, беҙҙе рәхәтлек донъяһынан

хәүеф донъяһына олаҡтырҙы. Әсғәт тә инде ебәк үләнле ғәзиз тупраҡтың үҙ аяғы аҫтында икәнен күптән аңлағайны. Шул өйөрмә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап беҙҙе ир итте. Ҡайһыларыбыҙға әжәлдән, ҡайһыларыбыҙға дандан өлөш сыҡты. Әммә бөтәһенән дә юғарыраҡ күтәрелеп, тыуған тупраҡтың изге нуры тереләрҙең рухын, үлеләрҙең гүрен яҡтыртты.

Бик күптәребеҙҙе утлы өйөрмә кире әйләнеп ҡайтмаҫ ерҙәргә алып китте. Әсғәт тә хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Юҡ, быға ышанып булмай. Ул хәбәрһеҙ юғала торғандарҙан түгел ине. Күрәһең, уның күҙҙәренең зәңгәрлеге ҡайҙалыр күктәрҙең зәңгәрлеге менән барып тоташҡандыр. Үлгәндә, ул ерҙә ятып, тартышып, сәбәләнеп, сырай һытып үлмәгәндер; йә, һыбай елеп барғанда, эйәр өҫтөнән атылып төшкәндер, йә, самолётта осоп килгәндә, һауала дөрләп янғандыр. Ул яҡшы күңелле, матур кеше ине. Сибәр түгел, матур ине. Яҡшы күңелле матур кешенең йәмһеҙ үлеүе мөмкин түгел. Ул шағир ине. Шағирҙың йәмһеҙ үлеүе мөмкин түгел…

1. Әсғәттәр урамын ни өсөн «Губернатор урамы» тип йөрөтәләр?
2. Кендек менән Әсғәттең осрашыуы тураһында һөйләгеҙ. Әсғәттең һүҙҙәренә, телмәренә һәм фекер йөрөтөүенә иғтибар итегеҙ. Башҡа малайҙарҙан ул ни яғы менән айырыла? Ни өсөн Кендек уны «сәйер малай» тип атай?
3. Үгеҙ менән һыйыр мажараһын һөйләгеҙ. Был мажараны ойоштороуҙа кем ғәйепле? Кем ул Ибрай? Был тамашала уның ниндәй сифаты асыла?
4. Оло инәй Искәндәргә ниндәй өгөт-нәсихәт бирә?
5. Әсғәттең икенсе бәләһе (ҡолағы өҙөлөүе) хаҡында һөйләгеҙ.
6. Сәсән телле Әсғәттең яҙмышын автор нисек тасуирлай? Нисек уйлайһығыҙ, Әсғәт иҫән ҡалһа, кем һәм ниндәй кеше булыр ине?

Тел буйынса үтелгән темаларҙың бөтә билдәләмәләрен, әҙәбиәт буйынса әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе (ҡыҫҡартып) йыйып, сәскә формаһында терәк схема төҙөгөҙ.

# ЙӘМЛЕ ЙӘЙ

*Мәжит Ғафури*

## БОЛОН

Йәшел хәтфә кеүек матур болон
Нурҙар сәсеп ята донъяға,
Һығылып үҫкән талдар араһынан
Көмөш таҫма кеүек һыу аға.

Леп-леп итеп оса күбәләктәр,
Сутылдашып һайрай ҡоштары,
Ал, ҡыҙыл, аҡ, һары сәскә менән
Биҙәкләнгән үлән баштары.

1. Шиғырҙың йөкмәткеһенә тап килгән һүрәттәр ҡарағыҙ һәм йәйге тәбиғәт тураһында әңгәмәләшегеҙ.
2. Шиғырҙа сағыштырыу, йәнләндереү кеүек троптарҙы (күсмә мәғәнәлә әйтелгән һүҙҙәрҙе) табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
3. Шиғырҙың йөкмәткеһенән сығып, һүрәт төшөрөгөҙ. Йәй тураһында шиғырҙар табып уҡығыҙ.
4. Тәбиғәткә экскурсияға сығығыҙ.

*Хәсән Назар*

## ЙӘЙГЕ ЙӘШЕН

Йәшел ботаҡтар семәрләй
Зәп-зәңгәр тын күктәрҙе.
Бына ул булды ыуыҙҙай,
Ел елкәнде күтәрҙе.

Шаңғыртмай ғына лабырлай
Алыҫ-алыҫта йәшен.
Салт көндән иҙрәп, әле ер
Ята алмалай бешеп.
Ҡоштар сырҡылдашып тынды,
Ҡуйырҙы ҡараңғылыҡ.
Шомло ғәскәр шәүләһеләй,
Ағыла ҡара болот.
Тағы күк дарһылдап янай,
Салыш-солош ут ялтлай,
Күктең ҡурғаштай күҙ йәше
Үләнде ергә ҡаплай.
Ҡойон, дауыл... Бер мәл бына
Ҡояштан тартыла ҡыл...
Селләле, яуынлы миҙгел —
Ярһыу Урал йәйе был!

1. Йәшенле ямғыр һүрәтләнгән берәй картина менән шиғырҙа һүрәтләгән йәшенле ямғырҙы сағыштырығыҙ. Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Шиғырҙа ниндәй төҫтәр, тауыштар өҫтөнлөк итә?
3. Йәшенле ямғырҙы автор ниндәй саралар ярҙамында һүрәтләй?

*Сафуан Әлибай*

## ЯМҒЫР ТЕЛӘҮ

Ямғыр, яу-яу-яу,
Ҡыйыҡтарҙа тыптырлап,
Урамдарҙа шыптырлап;
Япраҡтарҙы елпетеп,
Серләшеп ҡал шыбырлап.
Ямғыр, яу-яу-яу,
Болоттарҙы һау-һау!..

Ямғыр, яу-яу-яу,
Туғайҙарҙа бейеп ал,
Гөл-сәскәне һөйөп ал;
Ҡояш көлөп ҡараһа,
Күккә йәйғор элеп ҡал.
Ямғыр, яу-яу-яу,
Болоттарҙы һау-һау!..

Ямғыр, яу-яу-яу,
Баҫыуҙан үт йүгереп,
Шыптыр-шыптыр түгелеп;
Туҡ башаҡтар баш эйһен,
Алтын көҙгә өлгөрөп.
Ямғыр, яу-яу-яу,
Болоттарҙы һау-һау!..

1. Был шиғырға Данил Хәсәншин көй яҙған. Уның яҙмаһын тыңлағыҙ һәм тәьҫораттарығыҙ менән бүлешегеҙ.
2. Алдағы шиғыр менән был шиғырҙа ниндәй уртаҡ күренештәр һүрәтләнә?

*Яков Ухсай*
*сыуаш шағиры*

## БОЛОТТАР

Волганан да, Суранан да
Быу йыйып төрлө төҫтә,
Көн битендә йым-йым яна,
Болоттар йөҙә өҫтә.

Ап-аҡ ебәк елкәндәрен
Ап-аҡ елдәр ҡаға тын —
Әйтерһең, тулҡын иркәләй
Аҡсарлаҡтың ҡанатын.

Бына болоттар — мамыҡтай —
Йомарланды, уҡмашты,

Гәлсәр тамсыларға ҡушып,
Ергә һипте ҡояшты.

Йәмләнһен ҡыр,
Йәшелләнһен
Һары тал менән ерек...
Йәндәрҙе кинәндереп.

1. Шиғырҙа ниндәй төҫтәр һәм ниндәй кәйеф өҫтөнлөк итә?
2. Текстан һүрәтләү сараларын яҙып алып, рус теленә тәржемә итегеҙ.
3. С. Әлибайҙың «Ямғыр теләү» һәм сыуаш шағиры Я. Ухсайҙың «Болоттар» шиғырҙарында һүрәтләнгән ямғырҙарҙы сағыштырығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер айынан ҡиммәт.

* * *

Йәй эшләһәң, ҡыш ашарһың.

* * *

Йәйгә көҙҙән әҙерлән.

## ҺҮҘЛЕК

### А

**абруй** — авторитет
**ағас киле** — деревянная ступа
**аждаһа** — дракон
**айбаныу** — вздрогнуть
**айырса** — развилина, развилка
**аҡтыҡ** — последний
**аласыҡ** — летняя кухня; лачуга
**алсаҡ** — приветливый
**ант** — клятва
**аңһыҙ** — несознательный
**артмаҡлау** — навьючивать
**асыл** — суть
**атҡара** — выполняет
**аусы** — ловец
**ахун** — ахун (высший религиозный чин у мусульман)
**аямау** (йәлләмәү) — не жалеть

### Б

**барымта** — баранта (набег на соседние племена с целью угона скота)
**батман** — батман (небольшая кадка, служащая для хранения мёда, масла и т.д.)
**башалтай** — носки (шерстяные)
**Башбала** *(зд.: имя)* — старший ребёнок
**билсән** — осот
**бисара** — бедный
**бөркәнеү** — закутываться с головой
**буҙ** — сивый (о масти лошади)
**буръяҡ** — мутный
**бүгеү** — переедать
**бүкән** — чурбан, обрубок дерева
**бәғзе** — некоторый
**бәғер** — душа
**бәкәл** — щиколотка, лодыжка
**бәһлеүән** — богатырь
**бәхәс** — спор

### В

**вайымһыҙ** — беззаботный
**выждан** — совесть

### Г

**гонаһ** — грех
**гәпләшеү** — беседовать

### Ғ

**ғауға** — шум, крик
**ғөрбәт** — чужбина, заграница
**ғәйрәтле** — сильный
**ғәрип** — уродливый
**ғәрсел** — обидчивый

### Д

**дау** — тяжба
**дарман** — сила
**дилбегә** — вожжи
**дөйә** — верблюд
**дүнән** — жеребец по четвёртому году

### Е

**елбәҙәк** — воздушный
**елкән** — парус

**емтек** — мертвечина, падаль
**енәйәт** — преступление
**епшек** — мокрый
**ерһенеү** — привыкать

## З

**зар илау** — горько плакать
**зая** — напрасно
**зәғиф** — изувеченный

## И

**идара** — правление, управление
**изге** — святой
**иламһырау** — чуть не плакать
**илаһи** — божественный
**имен-аман** — целый и невредимый
**имәнес** — жуткий
**инселәү** — завещать, предназначать
**иңрәү** — рыдать
**ишкәк** — весло

## Й

**йомарт** — щедрый
**йот** — голод
**йөкләмә** — обязательство
**йүшкә** — вьюшка
**йүн** — толк
**йылҡысылыҡ** — коневодство
**йәймә** — лепёшка
**йәйләү** — летовать; летовка
**йәрәхәт** — рана
**йәшенмәк** — прятки

## К

**келт** — подражание звуку щёлканья
**кибет** — магазин
**киҙәнеү** — замахиваться
**Кинйә** *(зд.: имя)* — младший ребёнок
**көбәк** — ствол
**көйһөҙләнеү** — расстраиваться, капризничать
**көйәнтә** — коромысло
**көллө нәмә** — всё
**көмөш тәңкә** — серебряная монета
**көптәй** — толстый
**көрлөк** — упитанность, обеспеченность
**күгән** — петля
**күрән** — осока
**күтер** — трясина
**кәйеф** — настроение

## Ҡ

**ҡаҙаҡ** — фунт; гвоздь
**ҡайны** — тесть
**ҡаҡса** — сухощавый
**ҡалай** — жесть
**ҡалҡан** — щит
**ҡама** — выдра
**ҡамыл** — стерня
**ҡаһарман** — герой
**ҡашыҡ** — поварёшка; деревянная ложка
**ҡеүәт** — сила
**ҡеүәтләү** — подбадривать
**ҡибла** — юг; южный
**ҡойма** — забор
**ҡорос** — сталь
**ҡөҙрәт** — могущество
**ҡурсалау** — защищать, оберегать
**ҡурпы** — отава
**ҡыл** — щетина
**ҡырау** — заморозки, изморозь

**ҡырма** — оторoченный мехом
**ҡырсын** — галька
**ҡырыҫ** — суровый
**ҡушамат** — кличка
**ҡәҙер-хөрмәт** — почести
**ҡәнәғәт** — удовлетворение
**ҡәрҙәш** — родственник
**ҡәһәр** — гнев

**Л**

**лыбырлау** — лепетать

**М**

**май яҙыу** (май бешеү) — сбивать масло
**манара** — башня, минарет
**мансылыу** — озариться лучами
**меҫкен** — жалкий
**монар** — мгла
**мосафир** — прохожий
**мохтаж** — нуждающийся
**мөғжизә** — чудо
**муйынсаҡ** — бусы, ожерелье
**мәхрүм** — лишённый

**Н**

**нағыҙ** — чистый; настоящий
**нағыш** — узор
**намыҫ** — честь
**нахаҡ** — несправедливый
**нескә** — тонкий
**нуҡта** — недоуздок
**ныҡыш** — настойчивый
**нәрәтә** — нерето (рыболовная снасть из прутьев)

**О**

**оран** — клич
**орсоҡ** — веретено
**осҡор** — быстрый
**отоу** — выиграть

**Ө**

**өйлә намаҙы** — полуденная молитва
**өйөрмә** — вихрь
**өйрә** — суп без мяса
**өйрөлмәк** — водоворот
**өңөү** — рыть
**өрө** — навар на поверхности бульона

**Р**

**рашҡы** — мокрый снег с дождём
**ризыҡ** — пища

**С**

**сағыл** — косогор
**сажин** — сажень
**сал** — седина
**салыш** — кривой
**сама** — мера
**сапсаҡ** — кадка
**семәр** — узор
**селлә** — самый жаркий и самый холодный периоды года (по 40 дней)
**ситлек** — клетка
**сиҙәм** — целина
**сөйөү** — метать
**суртан** — щука
**сүгәләү** —приседать
**сүллек** — пустыня
**сүмес** — ковш
**сыйнау** — пищать
**сынйыр** — цепь
**сыңрау** — звенеть
**сырхау** — болеть
**сыуаҡ** — ясный
**сыуалған** — спутались

**сәмле** — честолюбивый
**сәпсек** — трясогузка
**сәфәр** — путешествие

### Т

**табаҡ** 1. лист бумаги; 2. чаша (большая)
**табикмәк** — лепёшка
**тай** — жеребёнок по второму году
**тамаша** — представление
**тарамыш** — сухожилие
**тары** — просо
**тасҡау** — ополаскивать (в холодной воде только что сбитое масло)
**тейәк** — перекладина для подвешивания туши
**тереклек** — жизнь, существование
**теүәл** — ровно, точно
**тибен** — тебенёвка
**тинтәк** — бестолковый
**типһән** — равнина
**тирмән ташы** — мельничный жёрнов
**томшоҡ** — морда, рыло
**томралау** — темнеть
**торна** — журавль
**төбәк** — определённая местность
**төйөнсөк** — узелок
**төйәк** — родина
**төпкөл** — глубинка, глушь, захолустье
**төпрә** — осадок
**төшлөк** — южная сторона
**туплау** — летнее стойбище для скота
**тупырсыҡ** — место на щиколотке лошади, куда накладывают путы
**түбә** — крыша
**тәпе** — капкан, ловушка
**тәүләп** — впервые

### У

**уба** — холм
**уҙалы-ҡаҙалы** — как попало
**уҡлау** — скалка
**упҡын** — пропасть
**ураҡ** — серп
**усаҡ** — костёр, очаг

### Ү

**үкһеҙ йәтим** — круглый сирота
**үрсемле** — плодовитый

### Ф

**фажиғә** — трагедия
**фәрештә** — ангел

### Х

**хайран** — изумлённый, поражённый
**хаяһыҙ** — бесстыдный, беззастенчивый
**хилүәт** — тихий; спокойный
**хисап** — подсчёт
**хозур** — блаженство
**хөрт** — плохой
**хыянатсы** — неверный, предатель

### Һ

**һабантурғай** — полевой жаворонок
**һабансы** — пахарь
**һағыш** — тоска, грусть
**һайлам ат** — самый лучший конь
**һаҡ** — осторожный
**һал** — плот
**һаран** — скупой, жадный
**һөйөнсө** — вознаграждение за радостную весть

**һөрән** — крик
**һырға** — серёжка, серьга
**һырмаланыу**— облеплять
**һырт** — хребет
**һәлмәк** — тяжёлый, увесистый
**һәүәҫ** — пристрастный

### Ш

**шаҡшы** — поганый
**шаңдау** — эхо
**шаршы** — перекат (на реке)
**шимал** — северный
**шифа** — исцеление
**шомло** — тревожный
**шымтайыу** — молчать

### Ы

**ыҙан** — меха
**ыҙма** — зимовка
**ыжғыр** — пронзительный
**ыҫмала** — смола
**ыҫпай** — аккуратный
**ыумас** — затируха

### Ә

**әлән-борхан** — беспорядочно
**әрҙәнә** — поленница дров
**әрнеү** — ныть
**әрәмә** — урема

### Ю

**юлаҡ** — затечина, след от воды
**юл айырсаһы** — перекрёсток, развилка дорог
**юлдаш** — попутчик, спутник
**юртаҡ** — рысак

### Я

**ярлыҡау** — помиловать
**яфа** — мука, страдание

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Боронғонан аманат

**Башҡорт халыҡ ижады** .......... 3
Фонетика, һүҙьяһалыш һәм морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау .......... 4
**Әкиәттәр** .......... 5
Хайуандар тураһындағы әкиәттәр .......... 5
Йәтим төлкө .......... 6
Аллегория тураһында төшөнсә .......... 10
Тылсымлы әкиәттәр .......... 11
Алтын алма .......... 12
Батырҙар тураһындағы әкиәттәр .......... 15
Алп батыр .......... 16
Дутан батыр *(Татар халыҡ әкиәте)* .......... 20
Гипербола һәм литота тураһында төшөнсә .......... 24
Һүҙҙәрҙең төркөмдәргә бүленеше .......... 25
Тормош-көнкүреш әкиәттәре .......... 26
Алтын тамсы .......... 26
Ҡылым .......... 30
Һаранбай менән Зиннәт ағай .......... 30
Ҡылымдың затлы һәм затһыҙ формалары .......... 33
**Халыҡ хикәйәләре** .......... 34
Боронғо ырым-ышаныуҙар нигеҙендә тыуған хикәйәләр .......... 34
Етегән йондоҙ .......... 35
Ай менән Зөһрә .......... 35
Сыңрау торна .......... 36
«Сыңрау торна» балеты .......... 39
Башҡорттарҙың килеп сығышына, ырыу-ҡәбиләләр тарихына бәйле хикәйәләр .......... 41
Үҫәргәндәр .......... 41
Топонимик хикәйәләр .......... 44
Ырғыҙ .......... 45
Йөрәктау .......... 46
Ауыл тарихтарына бәйле хикәйәләр .......... 48
Ямаш менән Йомаш ауылдары .......... 48
Мәмбәт ауылы тарихы .......... 50
Тарихи хикәйәләр .......... 53
Биксура .......... 53
Бошман-Ҡыпсаҡ батыр .......... 54
Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар .......... 56
Тормош-көнкүреш хикәйәләре .......... 57
Ғилмияза .......... 57
Зөлхизә .......... 59

**Йырҙар** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
Тарихи йырҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһындағы йырҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
Урал *(Вариант)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .65
Йәйләүлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66
Ҡылым һөйкәлештәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 67
Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары . . . . . . . . . . . . . . . . 68
1773 — 1775 йылдарҙағы Пугачёв яуы тураһындағы йырҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Салауат *(Вариант)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Оло юл *(Вариант)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Ҡылымдың үткән заман формаһы . . . . . . . . . . . . . . 71
1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына бәйле йырҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Эскадрон . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Любизар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72
Кантон башлыҡтары тураһында йырҙар . . . . . . . . . 74
Ҡолой кантон . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Абдулла ахун . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Ҡасҡындар тураһындағы йырҙар . . . . . . . . . . . . . . 77
Буранбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
Бейеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 78
Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заман формалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 79
Тормош-көнкүреш йырҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
Зөлхизә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
Ғилмияза . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
**Таҡмаҡтар** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Уйын таҡмаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 84
Бейеү таҡмаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Уйҙырма таҡмаҡтар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Әйтеш таҡмаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заман формаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 87

**Алтын көҙ**

*М. Тажи.* Алтын көҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 89
*Ф. Рәхимғолова.* Көҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90
Ҡылымдарҙың юҡлыҡ формалары . . . . . . . . . . . . . 92

**Уҡыу — белем шишмәһе**

Раил Байбулатов . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 93
Күңел күҙҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 93
Ноғман Мусин . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
Тайғаҡ баҫма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары . . . . . . . . . . . . . . 104

**Дуҫлыҡта — берҙәмлек**

*Б. Бикбай.* Рус теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 111
*Р. Сафин.* Һабаҡташтарыма . . . . . . . . . . . . . . . . 112
*М. Кәрим.* Миләш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 115
Миләш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 115
*Р. Байбулатов.* Һарыбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
Ниәт һөйкәлеше ҡылымдары . . . . . . . . . . . . . . . 121
Шарт һөйкәлеше ҡылымдары . . . . . . . . . . . . . . . 127
Ҡылым төркөмсәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 134
Әнүәр Бикчәнтәев . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 135
Бакенщиктар илаҡ булмай . . . . . . . . . . . . . . . . . 135
Исем ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 139

**Хеҙмәте барҙың — хөрмәте бар**

*М. Ғафури.* Гөлдәр баҡсаһында . . . . . . . . . . . . . 141
*М. Ямалетдинов.* Ураҡ өҫтө . . . . . . . . . . . . . . . . 143
Сифат ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 144
Жәлил Кейекбаев . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 146
Оморҙаҡ бабай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 146
*Ж. Кейекбаев.* Туғандар һәм таныштар . . . . . . . . 154
«Соҡор туп» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 158
Уртаҡ ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 158
Башҡорт халыҡ милли кейемдәре . . . . . . . . . . . . 164
Хәл ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165

**Башҡортостан — ғәзиз ерем**

*Ә. Үтәбай.* Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . . . . . 171
*А. Игебаев.* Онотманым һине, ауылым! . . . . . . . . . 173
*М. Кәрим.* Ҡайын япрағы тураһында . . . . . . . . . . 174

**Ап-аҡ ҡарҙар яуа**

*К. Кинйәбулатова.* Һаумы, аҡ ҡыш! . . . . . . . . . . . 178
*Ш. Бикҡолов.* Урман… . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 179
*С. Әлибай.* Матур көн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 180

*Ғ. Туҡай.* Ер йоҡоһо . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 181
Рәүеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
*Ә. Әһлиуллин.* Биҙәкле сана . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 183

### Ил намыҫы — ир күңелендә

*Р. Шәкүр.* Һаҡта тора илдең улдары . . . . . . . . . . . . . . . . 188
Фәрзәнә Аҡбулатова . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
Атай икмәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
*В. Исхаҡов.* Кеше күңеле — тәрән даръя . . . . . . . . . . . . 207
Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 216
Аҫылғужа Баһуманов . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 217
Юламан *(«Ҡайҙа һин, генерал?» әҫәренән өҙөк)* . . . . . . . . 217

### Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр

*Г. Зәйнәшева.* Йырлайым әсәйем тураһында . . . . . . . . . . . 226
*З. Алтынбаева.* Әсә һүҙе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 227
Фәрит Иҫәнғолов . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
Бер йомғаҡ май . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
*Ә. Бикчәнтәев.* Яраланған бүре күҙҙәре . . . . . . . . . . . . . . 235
Гөлнур Яҡупова . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
Мейес әбей . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
Нажиә Игеҙйәнова . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 243
Өйрөлмәк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 243

### Эх, күңелле яҙ килә!

*Р. Нигмәти.* Яҙ килде, яҙ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 258
*Р. Ғарипов.* Һабантурғай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 259
*М. Йәлил.* Йырҙарым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 259
Ымлыҡтар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
Һәҙиә Дәүләтшина . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 261
Айбикә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 261

### Тел — тере шишмә

*Ҡ. Аралбай.* Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 270
*М. Кәрим.* Искәндәр Әсғәте *(«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесынан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 271

### Йәмле йәй

*М. Ғафури.* Болон . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 283
*Х. Назар.* Йәйге йәшен . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 283
*С. Әлибай.* Ямғыр теләү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 284
*Я. Ухсай.* Болоттар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 285

*Учебное издание*

**Хажин** Вакил Исмагилович
**Вильданов** Ахат Ханнанович
**Аккужина** Фаурия Ахтямовна
**Карабаев** Мунир Иделович
**Аминева** Зубаржат Рафкатовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 7 класса**
**для изучения родного (башкирского) языка и литературы**
**в общеобразовательных организациях**
**с русским языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Хажин** Вәкил Исмәғил улы
**Вилданов** Әхәт Ханнан улы
**Аҡкужина** Фәүриә Әхтәм ҡыҙы
**Ҡарабаев** Мөнир Иҙел улы
**Әминева** Зөбәржәт Рәфҡәт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған**
**дөйөм белем биреү ойошмаларының**
**7-се класы өсөн туған (башҡорт)**
**телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *Н. Х. Исхаҡова*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *А. Х. Хәкимова, З. М. Камалова, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 13.06.2017. Форматы 60×90 1/16. Офсет ҡағыҙы.
Офсет ысулы менән баҫылды. BTSchoolBook гарнитураһы.
Шартлы баҫма таб. 18,50+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 21,00.
Иҫәп-нәшер таб. 11,52+0,40 форз. Тиражы 11460 дана. Заказ 1.0139.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.











КИТАП